УФИМСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ

приоритет2030^
лидерами становятся

АКТУАЛЬНЫЕ ПРОБЛЕМЫ НАЦИОНАЛЬНЫХ ЛИТЕРАТУР И ОТЕЧЕСТВЕННОГО ЛИТЕРАТУРОВЕДЕНИЯ

Сборник материалов
Международной
научно-практической конференции
2 ноября 2023 года

МИНИСТЕРСТВО НАУКИ И ВЫСШЕГО ОБРАЗОВАНИЯ РФ
УФИМСКИЙ УНИВЕРСИТЕТ НАУКИ И ТЕХНОЛОГИЙ
ФАКУЛЬТЕТ БАШКИРСКОЙ ФИЛОЛОГИИ,
ВОСТОКОВЕДЕНИЯ И ЖУРНАЛИСТИКИ

АКТУАЛЬНЫЕ ПРОБЛЕМЫ НАЦИОНАЛЬНЫХ ЛИТЕРАТУР И ОТЕЧЕСТВЕННОГО ЛИТЕРАТУРОВЕДЕНИЯ

Сборник материалов
Международной научно-практической конференции

(г. Уфа, 2 ноября 2023 года)

Научное электронное издание сетевого доступа

Уфа
РИЦ УУНиТ
2023

УДК 821(47)09
ББК 83.3(2Рос.Баш)
А43

Публикуется по решению кафедры башкирской литературы, фольклора и культуры ФБФВиЖ УУНиТ.
Протокол №2 от 10.10.2023 г.

Редакционная коллегия:
Гареева Г.Н., доктор филологических наук, профессор *(отв. редактор)*;
Пермякова Л.А., кандидат филологических наук, доцент;
Салаватова Ф.Р., кандидат филологических наук, доцент;
Байбулов И.Б., ассистент;
Тагирова Р.Н., ассистент

А43 **Актуальные проблемы национальных литератур и отечественного литературоведения:** сборник материалов Международной научно-практической конференции (г. Уфа, 2 ноября 2023 г.) / отв. ред. Г.Н. Гареева. [Электронный ресурс] / Уфимск. ун-т науки и технологий. – Уфа: РИЦ УУНиТ, 2023. – 319 с. – URL: https://uust.ru/media/documents/digital-publications/2023/334.pdf – Загл. с титула

ISBN 978-5-7477-5796-7

Сборник содержит материалы, посвященные актуальным проблемам литературоведения, фольклористики, языкознания и журналистики.

Материалы конференции адресованы научным работникам, аспирантам, магистрантам, студентам, преподавателям образовательных учреждений и всем интересующимся гуманитарными науками.

ISBN 978-5-7477-5796-7

УДК 821(47)09
ББК 83.3(2Рос.Баш)

© УУНиТ, 2023

РӘСӘЙ ФЕДЕРАЦИЯҺЫ ФӘН ҺӘМ ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ МИНИСТРЛЫҒЫ
ЮҒАРЫ БЕЛЕМ БИРЕҮ ФЕДЕРАЛЬ ДӘҮЛӘТ БЮДЖЕТ МӘҒАРИФ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
«ӨФӨ ФӘН ҺӘМ ТЕХНОЛОГИЯЛАР УНИВЕРСИТЕТЫ»
(Өфө университеты)
БАШҠОРТ ФИЛОЛОГИЯҺЫ, ШӘРҠИӘТ ҺӘМ ЖУРНАЛИСТИКА ФАКУЛЬТЕТЫ

МИЛЛИ ӘҘӘБИӘТТЕҢ ҺӘМ ВАТАН ӘҘӘБИӘТ ҒИЛЕМЕНЕҢ КӨНҮҘӘК МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ

Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция материалдары йыйынтығы

2023 йылдың 2 ноябре

ӨФӨ
Өфө университеты, 2023

УДК 821(47)09
ББК 83.3(2Рос.Баш)
А43

Йыйынтыҡ Өфө фән һәм технологиялар университеты башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультетының башҡорт әҙәбиәте, фольклоры һәм мәҙәниәте кафедраһы ҡарарына ярашлы баҫыла
Протокол № 5, 02.10.2023 й.

Редакцион коллегия:
Гәрәева Г.Н., филология фәндәре докторы, профессор
(яуаплы мөхәррир)
Пермякова Л.А., филология фәндәре кандидаты, доцент
Салауатова Ф.Р., филология фәндәре кандидаты, доцент
Байбулов И.Р., ассистент
Таһирова Р.Н., ассистент

Милли әҙәбиәттең һәм ватан әҙәбиәт ғилеменең көнүҙәк мәсьәләләре: Халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференция материалдары йыйынтығы (Өфө ҡалаһы, 2023 йылдың 2 ноябре). – [Электрон ресурс]. – Өфө: Өфө университеты, 2023. – 322 бит. – URL: https://uust.ru/media/documents/digital-publications/2023/334.pdf. Экран титулындағы исеме.
ISBN 978-5-7477-5796-7

Йыйынтыҡҡа рухи мәҙәниәт, әҙәбиәт ғилеме, фольклористика, туған тел проблемаларын, гуманитар фәндәрҙең тарихын, бөгөнгө торошон һәм үҫеш перспективаларын яҡтыртҡан мәҡәләләр тупланды.

Конференция материалдары ғилми хеҙмәткәрҙәргә, аспиранттарға, магистранттарға, студенттарға, белем биреү учреждениелары уҡытыусыларына һәм гуманитар фәндәр менән ҡыҙыҡһыныусыларға тәғәйенләнә.

ISBN 978-5-7477-5796-7

УДК 821(47)09
ББК 83.3(2Рос.Баш)

© Өфө университеты, 2023

УДК 821.512.141.09

Абдуллина И.С.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Янбаев И.К.,
филол. фәнд. канд., доц.

МИРАС ИҘЕЛБАЕВТЫҢ «ИҘЕЛ ЙОРТ» РОМАНЫНЫҢ ХУДОЖЕСТВО ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Билдәле әҙәбиәтсе-ғалим, филология фәндәре докторы, профессор Мирас Иҙелбаевтың ижади эшмәкәрлегенең йүнәлештәре күп төрлө. Ул Салауат Юлаевтың тормош юлы һәм ижады буйынса кандидатлыҡ диссертацияһы яҙған, уның исемен халыҡҡа ҡайтарыу буйынса тиңһеҙ хеҙмәт башҡарған, яугир-сәсәндең энциклопедияһын булдырыуҙа әүҙем ҡатнашҡан олуғ ғалим. Шулай уҡ күп йылдар башҡорт ауыҙ-тел әҙәбиәтенең тәбиғәтен, уның һүҙ сәнғәте системаһындағы урынын ентекле өйрәнеүгә күп көс һалған, докторлыҡ диссертацияһын шул мәсьәләләргә арнаған белгес. Мирас Иҙелбаев тағы ла мәктәптә башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы буйынса дәреслектәр, хрестоматиялар, күп һанлы мәҡәләләр авторы булараҡ та республикала киң билдәле ғалим-методист. Ул башҡорт әҙәбиәтен хикәйә, повесть, роман жанрындағы әҫәрҙәре менән байытыусы һәләтле прозаик та. Яҙыусының һуңғы йылдарҙағы тарихи прозалағы эшмәкәрлеге үҙенең йөкмәткеһе, тематикаһы һәм күтәрелгән проблемалары, жанр-стиль үҙенсәлектәре менән дә иғтибарҙы тарта.

М. Иҙелбаевтың йөкмәткеһе яғынан бай, үҙенсәлекле тарихи темаға арналған “Юлай улы Салауат” тарихи-документаль эссеһы замандаштары тарафынан башҡорт прозаһында яңы һүҙ булараҡ ҡабул ителгәйне. Хәҙерге әҙәбиәтебеҙҙе иһә ул “Иҙел йорт” исемле икеә киҫәктән торған романы менән байытырҙы. Әҫәрҙең тәүге китабы 2013 йылда, әҙипкә етмеш йәш тулған көндәрҙә донъя күрһә, икенсеһе 2020 йылда, уның етмеш биш йәше уңайы менән ташҡа баҫылып сыҡты. Тематикаһы ғына түгел, проблематикаһы, мауыҡтырғыс эпик сюжетҡа ҡоролоуы, әҙәбиәттә әлегә бер кем тарафынан да яҡтыртылмаған сәсәндең эшмәкәрлеген яҡтыртыуы менән был әҫәр авторға романсы булараҡ танылыу килтерҙе. Мирас Иҙелбаевтың “Иҙел йорт” романы уның был ҡоласлы жанрҙа уңышлы эшләргә һәләтле булыуын күрһәтеү менән бергә, ул бөгөнгө әҙәбиәт ғилеме тарафынан художестволы сифаттары йәһәтенән ентекле тикшеренеүгә лайыҡ.

“Иҙел йорт”романының “Үҫмер егет менән ат башы” тигән беренсе киҫәге башҡорт тарихының сағыу осорҙарын сағылдырыуы менән

күренекле. Әҙәбиәтселәр яҙыуынса, әҙип “Үҫмер егет менән ат башы” китабын уҡыусылар хөкөмөнә сығарып, башҡорт тарихын художестволы сағылдырыуға үҙ өлөшөн индерҙе [1; 4].

Романдың тәүге китабы үҙенең сюжет өлөштәре һәм жанры менән ғәйәт үҙенсәлекле. Композицион яҡтан үҙенсәлекле, тарихи факттарға бай әҫәр XV быуат аҙағы – XVI быуат баштарындағы хәл-ваҡиғаларҙы һүрәтләй. Яҙыусы тарихи роман ҡанундарын бик яҡшы белә, уларҙың ҡоло ла булып ҡалмай. Әҫәрҙең поэтикаһында эпик киңлекте мөмкин тиклем тәрән фекерләүҙе барлыҡҡа килтереүсе художестволы алымдарҙы оҫта файҙалана.

Роман әҙәбиәт ғилемендә билдәле традицион композицияға нигеҙләнә, унда барған хәл-ваҡиғалар сылбыр рәүешендә – боронғонан бөгөнгә схемаһына ярашлы төҙөлгән, йәғни тарихи-хронологик принцип күҙ уңында тотолған. Композиция тигәндә, беҙ, беренсе сиратта, хәл-ваҡиғаларҙың төҙөлөшөн аңлайбыҙ [5; 64]. Әҙәби әҫәрҙең киңлеккә, ҡоласлыҡҡа ынтылыуы уның композицияһының да тараҡаулығына килтереүсән. Мирас Иҙелбаев романында, күренеүенсә, төп композицион берәмектәрҙән динамик һәм статик хикәйәләү алымдары берҙәй ҡулланылыш алған. Статик хикәйәләү авторға, мәҫәлән, романдағы эпик ваҡиғалар эсендә Баязиттың сәйәхәтен эҙмә-эҙлекле тасуирларға ярҙам итһә, динамик хикәйәләү барышында бейҙең, уның улы Ҡобағоштың уйҙары һәм эске хәрәкәте күрһәтелә [4; 127].

Сылбырлы комозиция авторға сюжетты тарҡаулатырға булышлыҡ итә. Эҙмә-эҙлекле төҙөлгән алты бүлекле роман сюжетының беҙ ретроспектив хикәйәләүҙәр менән дә (мәҫәлән, Зарифа әбей хәтирәләре, тарихи күҙәтеүҙәр), уны ҡапыл өҙөүҙәр менән дә (мәҫәлән, Баязиттың сәйәхәте Ҡобағош улының аты Ялбырҙы тотоу эпизодтары менән алышына) характерланыуын күрәбеҙ.

Йыш ҡына автор ваҡиғаларҙы эҙмә-эҙлекле сылбырға нигеҙләнгән роман композицияһын бүлектәр эсендә бүлек, йәғни тематик композиция менән алыштыра. Бындай алым әҫәрҙең төп сюжетын төп герой тирәләй ойошторорға ярҙам итә, сөнки, хәл-ваҡиғаларҙың хәрәкәте Баязиттан һәм уның уй-кисерештәренән айырылғыһыҙ. Композицион алымдарҙы отошло, тәғәйен ҡулланыу, бына ошо рәүешле ҡатнаштырып ебәреү әҫәрҙең структураһын ҡатмарландырыуға булышлыҡ итә.

Романдың тәүге китабы тос ҡына йөкмәткеле биш бүлектән тора. Һәр бүлектәге ваҡиғалар сылбыры хронологик принципҡа буйһондоролған. Беренсе бүлектә ваҡиғалар мең ырыуы тарханы Баязит

йәйләүендә башланып китә. «Иҙел йорт»тоң беренсе өлөшөндә тасуирланған ваҡиғалар асылда романдың экспозицияһын тәшкил итә. Яҙыусы Баязиттың үҙ атлылаын туплауын һәм уларҙың алыҫ сәфәргә әҙерлек күренештәрен тасуирлай, бер ыңғайы шунда ҡатнашып йөрөгән геройҙары менән таныштыра. Уларҙың булмышын, мөһим характер үҙенсәлектәрен дә күрһәтеүгә өлгәшә.

Романдың икенсе бүлегендә Баязиттың оҙайлы сәфәрен бәйән итеү дауам иттерелә һәм сюжеттың төйөнләнеү өлөшө лә шул өлөштә. Сюжеттың төйөнләнешендә экспозицияла башланған сәфәр ҙур географик киңлеккә сығып, ҙур панорамаға әйләнә. М. Иҙелбаев ер-һыу атамаларын, уларға ҡағылышлы фольклор материалдарын бик ҡулай бирә бара. Мәҫәлән, Зарифа инәй эҙерләгән бетеү – ябай әйбер түгел, ә йола фольклорының үҙенсәлекле өлгөһө, әҫәрҙә уға ҙур мәғәнәүи йөкмәткеһе һалынған. Ҡобағошҡа Йәнсәйеттең бетеү тураһындағы аңлатмаһы бик урынлы. Ошонда уҡ Нурлат менән Булаттың хәйләләрен Ҡобағош ишетеп ҡалыуы – сюжетты төрләндерә, тармаҡландыра. Тәүге китаптың төп геройы буласаҡ Баязит – атаҡлы сәсән Ҡобағоштоң атаһы. Романдағы барлыҡ сюжет һыҙыҡтары тап уға – башҡорт илендәге иң ҙур, ҡеүәтле, Дим йылғаһының урта ағымында тормош көткән мең ырыуының абруйлы башлығына килеп тоташһа ла, яҙыусы сюжетты тармаҡландырыу барышында халыҡтың йола фольклорына, көнкүрешенә һәм рухи мәҙәниәтенә киң мөрәжәғәт итә.

Романдың фабулаһынан һәм уның нигеҙендә ятҡан төп идеянан тиҫтә быуаттар дауамында Ете ырыуҙы берләштергән ҡеүәтле, дәһшәтле союздың тарҡала башлаған мәле һүрәтләнгәнлеге күренә. Әҫәрҙең конфликт төйөнләнеүгә ойотҡо булған ижтимағи һәм сәйәси ваҡиғаларҙы М. Иҙелбаев Үҫәргән ерендәге Айҙа Болон яланындағы ырыуҙар йыйыны, Нуғайҙа Алтаҡырҙың Басмандан ханлыҡты яулап алыуы күренештәрен бик күп художестволы деталдәр, тормошсан эпизодтар, үткер интригалар аша күҙ алдына баҫтыра. Мирас Иҙелбаевтың “Иҙел йорт” романының икенсе китабы 2020 йылда донья күрҙе, ул “Сәсән әйтмәй, кем әйтһен...” тип атала. Был китапта Башҡортостанда XVI быуат урталарындағы булып уҙған хәл-ваҡиғалар сағылдырыла. Үҙәктә – ижады һәм ижтимағи эшмәкәрлеге заманының киҫкен һәм ҡатмарлы шарттарына тура килгән атаҡлы Ҡобағош сәсән образы.

“Сәсән әйтмәй, кем әйтһен...” әҫәренең тағы ла бер художестволы үҙенсәлеге: яҙыусы романдың аҙағында әҫәрҙә һүрәтләнгән ваҡиғаларҙың документаль сығанаҡтары буйынса “үтә

ҡыҙыҡһыныусылар өсөн” материалдар бирә. Улар ярҙамында яҙыусы әҫәрҙең художестволы нигеҙен тәшкил иткән сығанаҡтарҙы күрһәтә. Бында Юрматы, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Үҫәргән, Тамъян, Ҡара Табын ырыуҙары шәжәрәләренән әҫәр сюжетындағы ваҡиғаларға аңлатма булырҙай өҙөктәр килтерелә. Был яҙыусының өйрәнгән осорҙо яҡшы белеүе, уны документаль яҡтан дөрөҫ итеп һүрәтләүе тураһында һөйләй.

Шулай итеп, ике китаптан торған “Иҙел йорт” романы башҡорт тарихының әлегәсә әҙәбиәттә артыҡ сағылдырылмаған ҡараңғы биттәре – ырыу-ара тарҡаулыҡ, Алтын Урҙанан һуң ҡалған ханлыҡтарға ҡаршы халыҡтың үҙ ирке өсөн көрәше, сәсәндәр һәм уларҙың йәмғиәттәге урынын тасуирлауға арналған. Документаль сығанаҡтарға таянып, яҙыусы Ҡобағош сәсән һәм уның быуыны яҙмышы нигеҙендә ваҡиғаларға бай эпик сюжет тыуҙырыуға өлгәшкән, башҡорттоң йолаларын, фольклорын, йыйындарға бәйле йәмәғәт ҡоролошон күҙ алдына асыҡ баҫтыра алған.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Гәрәева Г.Н. Ырыуҙарҙы туплай “Иҙел йорт” // Башҡортостан. – 2014. – 26 август.
2. Иҙелбаев М.Х. Иҙел йорт. Үҫмер егет менән ат башы. Беренсе китап. – Өфө: Китап, 2013. – 398 бит.
3. Иҙелбаев М.Х. Иҙел йорт. Икенсе китап. Сәсән әйтмәй, кем әйтһен... – Өфө: Китап, 2020. – 400 бит.
4. Әлибаев З.А. Донъя рухын ҡотайтыр моң // Ағиҙел. – 2014. – № 12. – 125-129-сы биттәр.

© Абдуллина И.С., Янбаев И.К., 2023

УДК 811.512.142

Аккизова А.А.,
студент, Кабардино-Балкарский государственный университет им. Х.М. Бербекова,
Кабардино-Балкарская Республика, г. Нальчик

ЯЗЫК ПОЭМЫ Д.-Х. ШАВАЕВА «ПРЕДАНИЕ О БОРЛАКЕ СЫНЕ ХАХУ И ЕГО БЕЛОМ КОНЕ

Имя Даут-Хаджи Шаваева, как поэта и просветителя, открыто для читателя совсем недавно. В этом отношении следует отметить в первую очередь имена известных специалистов в области карачаево-балкарского литературоведения и фольклористики Х.Х. Малкондуева, Б.И. Тетуева и Б.А. Берберова. Благодаря их усилиям появился сборник

его произведений «Раздумья о жизни» [9], который вызывает большой интерес для современной гуманитарной науки.

В данной работе мы предпринимаем попытку провести поливекторный анализ такого произведения эпического плана Дауут-Хаджи Шаваева, как «Предание о Борлаке сыне Хаху и его белом коне». Исследование такого рода произведений показывает, что «проблема соотношения устной и письменной словесности определяется как приоритетное направление в системе фундаментальных исследований современной филологической науки» [6, с. 40].

Следует отметить, что текст этого предания представлен в сборнике «Аланский историко-героический эпос» под названием «Акъ атны жыры» («Песня о белом коне») [1, с. 461-475], т.е. это как бы произведение устного народного творчества. Однако если учесть различные факторы, в том числе и этническое происхождение автора, то можно говорить, по крайней мере, о его вкладе в написание легенды.

В рассматриваемой легенде наличествуют различные лексические образные средства, например, сравнение, посредством чего читатель познает мир произведения, созданного его автором. Текст данной легенды свидетельствует в пользу того, что сравнение как лексическое образное средство зародилось в недрах фольклора. Однако многие из них в этом произведении имеют авторское начало. Наряду с простыми компаративными дескрипциями (*адамча* «как человек», *къапланча* «как тигр», *менича* «как я» и т.п.) у автора встречается целый ряд сравнительных конструкций, которые характеризуют различные элементы окружающей действительности, репрезентируя тем самым в художественной форме мировосприятие этноса: *Ала сермеширикдиле, Бёрю жыйынча аллай бир болуп, Бир да болмагъанча къуралып* «Они биться будут, Став как волчья стая, Организовавшись как никогда»; *Этиучюсюча, билезик туруп, ойнамайды* «Как бывало, ровницей став, не играет»; *Ол алгъынча шош юфгюрмей, ачы-ачы сызгъырады* «Он, как и раньше, тихо не фыркая, пронзительно-пронзительно свистит». В поэтической ткани произведения нашли свою нишу и весьма интересные эпитеты, традиционные для карачаево-балкарского этноса: *акъ* «белый», *арслан кёзлю* «с глазами, как у льва», *жарыкъ* «светлый», *къара* «черный» и т.п. Первая лексема в предании используется для обозначения масти коня. Думается, что данный факт имеет давнюю традицию, поскольку еще в карачаево-балкарском нартском эпосе лучшие характеристики «получает в первую очередь белый конь, что актуально для многих культур» [3, с. 88]. Оппозитивные эпитеты *акъ* и

къара, употребляясь для обозначения масти богатырских коней, символизируют борьбу двух начал (добра и зла в восприятии героя предания*): Сюйген Акъ Аты бирси акъ атланы биргесине, // Уллу ёзенде къара ажирле бла тюйюшеди, базып кесине* «Любимый Белый Конь его вместе с другими белыми конями // На большой равнине с черными дерется жеребцами, надеясь на себя».

Проанализированный фактический материал позволил нам выявить свыше ста нарицательных слов, которые использованы автором в данном произведении. Условно их можно поделить на следующие основные тематические группы:

1. Соматизмы: *ал* «перед, передняя часть кого-либо», *арт* «зад, задняя часть кого-либо», *аякъ* «нога», *бел* «поясница», *баш* «голова», *бет* «лицо», *кёз* «глаз», *къаш* «бровь», *юс* «облик».

2. Лексика, выражающая животный мир: *ажир* «жеребец», *арслан* «лев», *ат* «конь», *бёрю* «волк», *буу* «олень», *жылкъы* «табун», *къаплан* «тигр», *къоян* «заяц», *мал* «скот».

3. Лексика, выражающая растительный мир: *агъач* «лес», *тамыр* «корень», *терек* «дерево».

4. Лексика, выражающая рельеф и различные природные понятия: *ёзен* «долина», *жер* «земля», *жол* «дорога», *кёк* «небо», *кюн* «солнце», *тала* «поляна», *тау* «гора», *тюз* «равнина».

5. Лексика, выражающая временные понятия: *бюгюн* «сегодня», *кезиу* «время, период, пора», *кече* «ночь», *кюн* «день», *кюндюз* «днем», *эртten* «утро». Такие слова ориентированы на выражение временных понятий, изучение чего «является чрезвычайно важным и актуальным для описания языковой картины мира. Время относится к базовым концептам, на основе которых происходит осмысление всех остальных явлений и сфер действительности» [2, с. 190].

6. Лексика, выражающая различные номинации человека (социальный статус, родство и т.п.): *абрек* «абрек», *адам* «человек», *жау* «враг», *жолоучу* «путешественник», *ногъай* «ногаец», *къарт* «старик», *къугъун* «гонец», *тенг* «друг», *черкес* «черкес», *эбизе* «сван», *эл* «село (население)».

7. Лексика, выражающая абстрактные понятия: *акъыл* «ум, рассудок», *баш* «ум, рассудок», *къарыусузлукъ* «слабость», *саулукъ* «здоровье», *умут* «намерение», *эс* «память».

Представленный здесь пласт нарицательной лексики в целом способствует выражению в исторической ретроспективе специфики жизнедеятельности карачаевцев и балкарцев. В силу этого такие слова

рассматриваются языковедами в составе этнографической лексики [4; 10].

Текст рассматриваемого предания богат и на ономастическую лексику. В нем обнаруживается около пятидесяти собственных имен, которые нами условно подразделены на следующие две группы:

1. Антропонимы: *Ахматланы Таукъыз* «Ахматова Таукыз», *Къаспот* «Каспот», *Тыж улу Чюелди* «Тыжа сын Чюелди», *Хахуланы Борлакъ* «Борлак сын Хаху».

2. Топонимы: *Бештау* «Пятигорье», *Донгат* «Донгат», *Дюгер* «Дигория», *Къарачай* «Карачай», *Къарт-Джурт* «Карт-Джурт», *Мажар* «Маджар», *Мурдар агъач* «Лес-убийца», *Тыж къабакъ* «Кабак Тыжевых», *Ногъай* «Ногайская степь», *Чегем* «Чегем», *Эбизе* «Сванетия».

Ономастическая лексика в произведении «Предание о Борлаке сыне Хаху и его белой лошади» в целом узнаваема карачаевцами и балкарцами на современном этапе. В предании в первую очередь актуализируются: а) *Чегем* и его составляющие (*Донгат, Мурдар агъач*); б) представитель известного в недалеком прошлом рода *Хаху Борлак*; в) его походный конь (*Акъ Ат* «Белый Конь»). Представленный список можно расширить за счет макротопонимов, обозначающих части Кавказа, в основе которых обычно лежат номинаций этно-племенных образований на его территории (*Бештау, Дюгер, Къабарты, Къарачай, Ногъай, Мажар, Эбизе* и т.п.).

В топосистеме Карачая и Балкарии встречаются номинации типа *Уллу Къарачай* «Великий Карачай» и *Уллу Малкъар* «Великая Балкария», которые свидетельствуют о ценностном отношении карачаево-балкарского этноса к своей Родине. Для главного персонажа легенды окружающая Балкарию территория привлекательна своими этнокультурными реалиями, о чем он мечтал, если бы он остался жить: *Умутум бар эди – бу жол къутулсакъ, // Тынч-ырахат жашаргъа, // Санга кюмюш иер салып, // Чаришледе ойнаргъа, // Къарачайны буу жолларын сынаргъа, // Къабартыны бал бозасын тартыргъа, // Уллу Дюгерни къара сырасындан уртларгъа, // Сени бла Ногъай эллеге барыргъа, // Кёп жерледен тансыгъымы алыргъа* «У меня была мечта – если в этот раз спасемся, // В спокойствии и мире жить, // На тебя серебряное седло поставив, // Поиграть на скачках, // Испытать оленьи тропы Карачая, // Испить медовой бузы Кабарды, // Потянуть черного пива Большой Дигории, // В ногайские села с тобой пойти, // Многих земель насмотреться».

Основными лексемами лексико-семантической группы слов «собственные имена», являются антропоним *Хаху улу Борлакъ* «Борлак сын Хаху» и зооним *Акъ Ат* «Белый конь». В тексте легенды *Борлак* отмечен следующими основными когнитивными характеристиками:

1. Борлак отличается алчным взглядом: *Хахуланы да, ой, бёрюкёз Борлакъ* «Сын Хаху, ой, Борлак с волчьими глазами».

2. Борлак – угонщик скота, конокрад: *Кюндюз жукъламайды, кече жатмайды, // Элге, арбазгъа чола мал келтирмей, // Тейри, хазна аны тангы атмайды* «Днем не спит, ночью не ложится, // В село, во двор неохраняемый скот не загоняя, // Ей-богу, рассветы его не настают».

3. Борлак верен своему слову: *– Антымы бузмазгъа сёзюм барды, – // Деди Борлакъ алгъа атлай* «– Дал слово я быть клятве верным, – // Сказал Борлак, шагнув вперед».

4. Борлак – человек чести: *Нёгерлерим ёлюп, мен саулай Чегемге, // Тыж къабакъгъа баралмам. // Кесим сау къалып, адамланы кёзлерине къараялмам* «Спутники умерев, я живым в Чегем, // В Тыж кабак пойти не смогу. // Сам, оставшись в живых, в глаза людей посмотреть не смогу».

5. Борлак сохраняет ценностное отношение к своему коню: *Дунияда сенича кишини мен сюймедим, // Сени бла былай ачы айырылырымы билмедим* «Никого на свете больше тебя не полюбил, // Не знал, что такая горькая разлука будет с тобой».

Для походного коня Борлака также присущи определенные когнитивные характеристики, которые сводятся к следующему: а) конь побеждает в скачках (*Эсимдеди, чаришде ол кюн барын да хорлагъаныбыз* «Помню, что в тот день мы на скачках всех победили»); б) конь является помощником в угоне скота (*Унутмайма, ногъай жылкъыны сюргенибиз* «Не забываю, что табун ногайцев мы угнали»); в) как и для хозяина, коню важна родная сторона (*Ачы кишнеп, жолун Чегем таба сайлады* «Горько заржав, выбрал путь в сторону Чегема») и т.д.

Это детерминируется тем, что в легендах часто встречаются ритуальные действа, а они «предполагают ряд речевых актов и невербальных манипуляций, направленных, как правило, на снискание «расположения» Всевышнего» [7, с. 95].

Текст рассматриваемой легенды отмечен интертекстуальностью, присущей и для других жанров фольклора [2]. Так, например, можно говорить об использовании в произведении архетипичных карачаево-балкарских примет, использующихся в качестве «специального

стилистического приема». Ср.: *Ол Акъ Атла – // Сени жолоучу нёгерлеринғдиле, // Къара ажирле уа – // Жауларыгъыз болгъанлары белгисидиле* «Те Белые Кони – // Твои спутники по походу, // А черные жеребцы // Твоих врагов обозначают».

Как видно из проанализированного выше материала, рассмотренная выше поэма представляет собой многогранное произведение. Она интертекстуальна и содержит большое количество языковых единиц различного уровня, характеризующихся многообразием форм и широтой семантики, что дает возможность отметить целый ряд характеристик карачаево-балкарской языковой картины мира.

Список литературы:

1. Аланский историко-героический эпос. В трех томах. Т. II. / Сост. М.Ч. Джуртубаев. – Нальчик: ООО «Тетраграф», 2015. – 479 с.

2. Ахматова М.А. Языковая метафоризация концепта «время» в карачаево-балкарском языке (на материале нартского эпоса) / М.А. Ахматова // Известия Кабардино-Балкарского научного центра РАН. – 2015. – № 5 (67). – С. 190-193.

© Аккизова А.А., 2023

УДК 821.512.141

Акбутина Г.Т.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

ХХ БЫУАТ БАШЫ БАШҠОРТ ПОЭЗИЯҺЫНДА ТӘБИҒӘТ ТЕМАҺЫ САҒЫЛЫШЫ

Ниндәй генә әҙәбиәтте алһаң да, тәбиғәт темаһы мөһим урындарҙың береһен алып тора, сөнки ул кешелек донъяһы менән тығыҙ бәйле. Хәҙерге көндә лә кеше күп ваҡыт тәбиғәттән көс ала, бигерәк тә ҡалала йәшәгәндәр өсөн танһыҡ. Кеше менән тәбиғәт араһындағы бәйләнеш ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы, шағирҙарҙы һәр ваҡыт борсоған һәм борсой. Башҡорт халыҡ ижадында, бигерәк тә йырҙарында тәбиғәт күренешен һүрәтләү композицион ролде үтәгән. Мәҫәлән, параллелизм – тәүге ике юлда тәбиғәт һүрәтләнһә, артабанғы ике юлы геройҙың уйҙары, тойғолары сағылдырыла.

ХХ быуат башы башҡорт поэзияһында тәбиғәт темаһына Ш. Бабич, М. Ғафури, Х. Ғәбитов, Я. Йомаев, Ф. Туйсин, С. Якшығолов кеүек шағирҙар мөрәжәғәт иткән

Мәҫәлән, Ш. Бабичтың «Ҡышҡы юлда» шиғырында ҡышҡы тәбиғәт тасуирлана:

Их, рәхәт шыуа сана, юрта ат талғын ғына,
Яҡ-яғымда киң ялан йоҡлап ята тып-тын ғына.
Алдымда аҡ ҡар йәйелгән, ялтырап аҡ-аҡ булып,
Ынйы-мәрйендәр сәселгән өҫтөнә ваҡ-ваҡ булып.
Юл ситендә ҡар киҫәктәре торалар теҙелешеп,
Барыһы ла эйелеп ҡалалар, хуш-иҫән бул, тиешеп.
Аҡ ҡояш нур ептәрен һуҙған да ергә нур һибә,
Нурлы ептәрҙән ағып, моңло күңелгә йыр килә.
Йырлай башлайым, шунда һалҡын ел иҫеп,йырҙы киҫә,
Ай, уҫал ел ҡырҙағы бар йәмде, бар моңдо киҫә.

Шағирҙың был әҫәрендә ҡышҡы тынлыҡ һүрәтләнә: гүйә бар тәбиғәт тәрән йоҡоға талған, бөтөн ер өҫтөн аҡ юрған кеүек ҡар ҡаплаған, тик ҡояш нурҙарында ғына ошо тынлыҡҡа йән өрөп, меңәрләгән ынйылар йымылдаша. Ошо күренештең шағир күңелгә ниндәйҙер ҡабатланмаҫ күтәренкелек биреүен, күңелдә аңлатып бирә алмаҫлыҡ илаһи моң барлыҡҡа килеүен һүрәтләй. Киң әкиәт донъяһындағылай хис итеп, кеше тәбиғәттең бер бәләкәй генә өлөшө икәнен күрһәтә.

Паровоздар киҫеп сыҡҡан ерҙә

Урал ҡаялары уртаһын,

Ап-аҡ ташҡа баҫып ҡарап торҙом

Республикамдың мин иртәһен.

Тын күлдәргә төшкән аҡҡошмо ни:

Уйһыуҙарҙа ята аҡ томан.

Ниндәй йәнле иртә!

Бына бер саҡ,

Тау биттәрен солғап яҡтыға,

Ҡояш сыға башлай, нурҙарына

Ем-ем итә Урал таштары.

Иртәнге ел, әкрен генә өрөп,

һыйпап үтә үлән баштарын...

Күрәм: эшкә тора республикам,

Һөрән һалды бына гудоктар.

Эшсе өйҙәр ҡояшҡа ҡаратып

Тәҙрә асты...Күҙ ташлайым ҡабат:

Изел буйлап Колхоз ауылдары тартылған.

Авторҙың төп идеяһы – матур тәбиғәт менән бер бөтөн булып йәшәгән Республика халҡының яңы таңды ҡаршылауы сағылдырылған. Диңгеҙ кеүек йәйрәп ятҡан уйһыулыҡтар аҡ томан менән ҡапланған, ҡояш нурҙарында Уралдың һәр төрлө аҫыл таштары йымылдаша. Тәбиғәттең хозурлығы хатта елдең нисек иҫеүендә лә тойолған кеүек.

Шулай итеп, XX быуат башы башҡорт поэзияһында тәбиғәт темаһы тирә-йүнде һүрәтләү, автор тарафынан ошо күренештәрҙе лирик герой күҙлегенән тасуирлау, нигеҙендә ҡоролған. Был әҫәрҙәрҙә тәбиғәт йәнһеҙ объект булараҡ ҡына түгел, ә туҡтауһыҙ хәрәкәттә һәм үҙгәрештә, башҡа тереклек менән бер бөтөн булараҡ йәшәй.

© Аҡбутина Г.Т., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141.09

Акъюлова А.А.,
4 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ «ТАШЛАМА УТТЫ, ПРОМЕТЕЙ» ТРАГЕДИЯҺЫНДА АЗАТЛЫҠ РУХЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы, С.Юлаев исемендәге Башҡортостан Республикаһының дәүләт премияһы лауреаты, СССР дәүләт премияһы лауреаты, Станиславский исемендәге РСФСР дәүләт премияһы лауреаты, В.И. Ленин премияһы лауреаты Мостай Кәрим – күп милләттәрҙең яратҡан яҙыусыһы, башҡорт халҡының рухи ҡаҙанышы, милли ғорурлығы.

Мостай Кәримдең XX быуаттың 40-сы йылдарынан алып XXI быуат башынаса дауам иткән сағыу ижады – башҡорт әҙәбиәтенең художество ҡаҙаныштарын билдәләшкән, милли һүҙ сәнғәтенең художестволы фекерләү юғарылығын һынландырған ижад. Мостай Кәримдең проза, поэзия, драматургия өлкәһенә ҡараған, әҙәбиәтебеҙҙең алтын фондын тәшкил иткән, кеше рухын сәнғәтсә оҫта тасуирлаған әҫәрҙәрендә халыҡтың әҙәп-әхлаҡ, рухи – эстетик тәжрибәһе ижади үҙләштерелеп, заманса яҡтыртылыш тапҡан, халыҡтың үткәне һәм хәҙергеһе, ил тормошоноң драматик-трагик һәм шатлыҡлы мәлдәре, еңеүҙәр һәм еңелеүҙәр менән тулы күренештәре тәрән психологизм менән һүрәтләнгән.

Мостай Кәрим (Мостафа Сафа улы Кәримовтың) 1919 йылдың 20 октябрендәШишмә районының Келәш ауылында тыуған.Тыуған ауылында мәктәптә, ике йыл Өфө педагогия рабфагынды уҡый, 1937-1941 йылдарҙа Башҡорт дәүләт педагогия институтының (хәҙерге Башҡорт дәүләт университеты) тел һәм әҙәбиәт факультетында белем ала. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша, элемтә бүлеге һәм артиллерия дивизионы штабы начальнигы булып хеҙмәт итә.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа Башҡортостан Яҙыусылар союзы рәйесе, РСФСР Яҙыусылар союзы секретары һәм башҡа күп кенә йәмәғәтселек эштәре башҡара.

М. Кәримдең утыҙынсы йылдарҙағы ижады йәш шағирҙың эҙләнеү, ҡәләмен шымартыу буйынса башланғыс ижад осоро тип һанаһа, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында М. Кәрим гражданин һәм шағир булараҡ өлгөрөп етте, уның шиғриәтенең яңы сифаттары асылды. Уның “Мин фронтҡа китәм, иптәштәр” шиғыры фронтҡа китеүсе яугирҙарҙың ил, халыҡ алдындағы поэтик анты булып яңғыраны. “Минең антым” китабына ингән шиғырҙарында шағир һыбайлы яугирҙарҙың батырлығын, рухи ҡеүәтен йырланы.

Драматургия – Мостай Кәрим ижадының икенсе бер ҙур тармағы. Уның сәхнә әҫәрҙәре XX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт драматургияһының үҙәгендә тора.

Ижади һәм ижтимағи эшмәкәрлеге менән Мостай Кәрим тыуған ер хәстәрен хәстәрләүсе яҙыусы, шағир. Ер хәстәре – ул ил хәстәре, халыҡ хәстәре, кеше яҙмышы. Был йәһәттән идея яғынан берләшкән триптихы «Ай тотолған төндә», «Ташлама утты, Прометей!», «Салауат» тигән өс трагедияны алырға була. Был әҫәрҙәрҙә яҙыусы кешенең азат ителеүен, рухи иреклек алыуын, шәхси, милли планда һәм дөйөм кешелек планында һүрәтләргә ынтыла.

Пьеса Мостай Кәримдең бала саҡ әҫәрҙәре кеүек еңел тел менән яҙылһа ла, айырмаһы бар. Бәлки, уның төп мәғәнәһен, һәр уҡыусы иғтибарлап уҡымаһа, төшөнөп тә етмәҫ. Ни өсөн был пьесаны М. Кәрим яҙған? Был бөтә донъяға билдәле мифтың башҡорт халҡы ла белһен, тип тәржемә иткәнме? Йәки пьесаның эстәлегендә берәй хикмәт, төп мәғәнә ятамы?

М. Кәримдең “Ташлама утты, Прометей!” трагедияһында үҙенең күҙ йәштәренә иҙелгән балсыҡтан кешеләр яһаған һәм уларға күктән урлап ут килтергән, шуның өсөн утыҙ йыл мең буйына ҡаяға сынйырлап ҡуйылған, ҡот осҡос ауыр яза кисереүсе, бөйөк подвиг яһаусы титан Прометей образы Ер һәм кешеләр менән тығыҙ бәйләнештә һүрәтләнә. Ул Баш Алла Зевстың ҡыҙы – мөхәббәт алиһәһе Афродитаның һөйөүенән баш тарта, Ер ҡыҙы Агазияны ярата, уның хаҡына оло батырлыҡ яһай, күңелдәрендә изге ут, яҡшылыҡ, кешелеклелек ялҡыны булмаған кешелерҙең бәхетһеҙлектә, наҙанлыҡта, яманлыҡта, ямаҡлыҡта, ҡараңғылыҡта ғүмер итмәүҙәре хаҡына был тиңһеҙ аҙымға, үҙен ни көткәнен алдан белә тороп, аңлы рәүештә бара.

Пьесалағы утты – Башҡортостандың суверенитеты тип аңларға була. Прометей һәм Агазияның телмәрҙәре ярҙамында автор үҙенең фекерҙәрен бирергә тырышҡан.

Ошо һүҙҙәре менән М. Кәрим халыҡҡа уянырға, ысынбарлыҡҡа күҙ асырға өндәй. Был ут, йәки суверенитет, кешеләргә тик бәхет кенә килтерәсәгенә ышана. Пьесалағы ут өсөн баштарын һалған Прометей менән Агазия кеүек, Башҡортостан азатлығы өсөн баш һалған бөйөк кешеләр ҙә юҡ түгел. Улар, мәҫәлән, Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйхзада Бабич, Әмир Ҡарамышев, Муса Мортазин һәм башҡалар.

Әҫәр күк донъяһы менен ер донъяһының бәйләнешенә ҡоролған. Күктәгеләр изге, үлемһеҙ заттар, ерҙәгеләр – әжәлле бәндәләр. Һәр донъяның үҙ ҡанундары бар.

Трагедияның үҙәгендә – Прометей образы. Прометей – батыр тәбиғәтле, тиңһеҙ ҡаһарман, үҙен ҡорбан итеп ер кешеләренә ут килтереүсе. Уның идеалы – аллалар ҡулындағы күк уттың ергә, кешеләргә илтеү; күк уты менән ер утын ҡушып кешелекте яҡтыға, рухи азатлыҡҡа һәм бейеклеккә күтәреү. Ә был юғары идеал өсөн ул хәтәр көрәшкә сыға. Прометей ниндәй ауыр юл үтәсәген белгән, әммә алған юлынан бер аҙым да тайылмаған. Ер кешеләрен ут менән яҡтыртып, йылытыр өсөн, күҙҙәре асылып ҡоллоҡтан сығыуҙарын теләп, иманһыҙ аллалар менән алыша, Зевс менән бәхәскә инә. Прометей маҡсатына ирешә, ут сирағын алып, ергә оса. Ләкин ер кешеләре уны ҡабул итмәй.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. III том: пьесалар, либретто. – Өфө: Китап, 2012. – 608 бит.

© Аҡъюлова А.А., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141.09

Аҡъюлова А.А.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Янбаев И.К.,
филол. фәнд. канд., доц.

Р. ШӘКҮР ШИҒРИӘТЕНДӘ ЛЕКСИК САРАЛАРҘЫҢ ТӨРҘӘРЕ БУЛАРАҠ СИНОНИМДАР МЕНӘН АНТОНИМДАРҘЫҢ ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ

Башҡорт шиғриәтендә мәғәнә оҡшашлығына йәки айырымлығына нигеҙләнгән лексик сараларҙан синоним, антоним, омоним, һүҙ уйнатыу кеүектәре ҙур урын алып тора, уларҙы һәр бер шағирҙың ижадында күпләп осратырға мөмкин.

Синонимдар – (грекса synonymos – бер исемдәге) һүҙенән алынған һәм ул бер мәғәнәле йәки бер атамалы тигән һүҙҙе аңлата. Улар – бер үк әйбер йәки күренеште белдереп, уның төрлө мәғәнә нескәлектәрен сағылдырып килеүсе һүҙҙәр. Айырым осраҡта синоним һүҙҙәр бер-береһе менән йәнәшә, теҙелеп урынлаша һәм һүрәттең тәьҫирлеген көсәйтә, градация күренешен хасил итә.

К. Әхмәтйәнов билдәләүенсә, “синонимдарҙың тейешлеһен үҙ урынында ғына ҡулланыу кешенән ҙур мәғлүмәт һәм нескә зауыҡ талап итә. Шуға күрә һүҙҙең нескәлектәрен иҫәпкә алмауҙың айырым осраҡтары хатта телсе ғалимдарҙың хеҙмәттәрендә лә булырға мөмкин” [6, 161-се бит]. Шуға күрә телсе ғалим, профессор Ж.Ғ. Кейекбаев синонимдарҙы бер нисә төркөмгә бүлә:

1) лексик синонимдар – тел ғилемендә ҡабул ителгән традицион билдәләү буйынса, өн составы яғынан төрлөсә яңғыраусы, ләкин бер мәғәнә аңлатҡан йә мәғәнәләре яғынан бер-береһенә яҡын торған һүҙҙәр синонимдар тип атала.

2) фразеологик синонимдар – идиоматик әйтемдәр, фразеологик ҡушылмаларҙың һәм мәҡәлдәрҙең синонимдары. Тотороҡло һүҙбәйләнештәр ярҙамында һәм һүҙҙең тура мәғәнәһен йомшартып, ситләтеп әйтеүсе йәки бер һүҙҙе, аңлашылырлыҡ итеп, икенсе һүҙ менән атаусы фразеологик синонимдарҙы эвфемизмдар тип йөрөтәләр [1, 69-

81-се биттәр]. Мәҫәлән: Кәкре ҡайынға терәп китте, төп башына ултыртты.

Әҙәби телдә һәм һөйләү телендә, халыҡ мәҡәлдәрендә фразеологик синонимдар йышыраҡ ҡулланыла.

3) формант синонимдары – абсолют тигеҙ мәғәнәлә ҡулланылған һәм бер төрлө аңланған грамматик формаларҙы атайҙар.

Әҙәбиәт ғилемендә сағыштырмаса (шартлы) һәм абсолют синонимдарҙы айырып йөрөтәләр.

Абсолют синонимдар – бер үк мәғәнәне аңлатып та төрлө лексик төркөмдәргә ҡараған һүҙҙәр. Мәҫәлән: “ясин сығыу”, “үлеү”, “бауҙы сисеү” һүҙҙәренең мәғәнәһе бер төрлө, ләкин улар төрлө ҡатлам кешеләренә ҡараған һүҙҙәр. “Ясин сығыу” – дини кеше йәки мулла ауыҙынан әйткән һүҙ, “үлеү” – әҙәби йәки ябай һөйләү телендә, “бауҙы сисеү” – моряктар жаргонында ҡулланылған һүҙҙәр.

Сағыштырмаса синонимдар – ғәҙәттә бер лексик төркөмгә ҡарайҙар, ләкин тулыһынса мәғәнәләрендә бер ниндәй ҙә оҡшашлыҡ юҡ. Мәҫәлән: “ватан”, “тыуған ил”, дәүләт”, “хөкүмәт”, “ил” һүҙҙәре мәғәнәләре буйынса бер төрлө, ләкин тулы оҡшашлыҡ юҡ. Шуның өсөн дә бер һүҙҙе икенсеһе менән һөйләү мәғәнәһе үҙгәрмәгәндә генә алмаштырылырға мөмкин.

Синонимдарҙың һәр төрөнә миҫалдар Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәшит Шәкүр шиғриәтендә лә бихисап.

Йәшермәйем: аҙ булманы
Абыныуҙар, һөрлөгөүҙәр,
Йөрәгемә ҡан һауҙырып,
Күҙ йәштәрем түгелеүҙәр.
(“Ғүмер”).

Ғүмеремдең оҙон юлдарына
Өҫтөнтҡуйҙым һәр саҡ намыҫты.
Намыҫһыҙлыҡ, оятһыҙлыҡ менән
Ҡара-ҡаршы тороп алыштым.
(“Ғәмәл дәфтәре”)

Ижад майҙанында ярыш бара,
Бер минутҡа булмай туҡталып.
Бәйгеләрҙә мин дә ат өҫтөндә
Елəм, сабам, алға уҡталып.
(“Бәйгеләрҙә мин дә ат өҫтөндә”)

Әллә ниндәй бөтмәҫ сафлыҡ һымыҡ
Бйектәге ап-аҡ болоттар,

Алда шатлыҡ, алда ҡыуаныстар,
Ҡанат ҡаға тыуар минуттар.
(“Юлда”)

Был шиғырҙарҙа мәғәнә төҫмөрҙәре менән бер аҙ айырылған синоним һүҙҙәрҙе автор рәттән теҙеп ҡуя. Ошо юл менән фекерҙе төрлө яҡлап, тулыраҡ итеп асыу мөмкинлеге барлыҡҡа килә.

Әҙәбиәт ғилемендә синонимдарҙың тағы ла бер төрө буларaҡ эвфемизмды телгә алалар. Ләкин был ҡараш әле нығлап иҫбатланмаған, һәр хәлдә, бәхәсле булып ҡала.

Күренекһеҙ әҙип шиғырҙарында лексик синонимдар йышыраҡ ҡулланыла. Синонимдар ҡулланылған әҫәрҙәрҙе уҡыуы ҡыҙыҡлы ла, еңел дә. Ә уларҙы әҫәрҙә дөрөҫ ҡулланыу яҙыусыларҙан ҙур оҫталыҡ талап итә**.**

Антонимдар – (грек. anti – ҡаршы һәм onyma – исем) мәғәнәһе буйынса ҡапма-ҡаршы һүҙҙәр. Поэтик телмәрҙә антонимдар ҡулланыу күп ваҡыт төрлө ҡапма-ҡаршы ҡуйыуҙар менән бәйләнгән. Антонимдар бәйләнеше ҡайһы ваҡыт яҙыусыға күренештәге эске ҡаршылыҡтарҙы күргәҙмәле итеп асырға ярҙам итә. Ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр: күренештәр йәки әйберҙәр араһындағы ҡаршылыҡты күрһәтәләр; хистәрҙең тормоштоң ҡатмарлығын белдерәләр; көсәйтеү өсөн ҡулланылалар. Телсе ғалимы М.Х.Әхтәмов уға шундай аңлатма бирә: “Антонимдарҙың вазифаһы предметтарҙы, күренештәрҙе бер-береһенә ҡапма-ҡаршы ҡуйып сағыштырыуҙа ғына түгел. Улар предметтарҙың, хәл-ваҡиғаларҙың эске кисерештәрҙең берлеген, бөтөнлөгөн, тулылығын бер юлы төрлө яғын берләштереп һүрәтләү өсөн ҡулланыла” [7, 63-сө бит].

Антонимдар тормоштағы күренештәрҙең ҡатмарлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алыу өсөн ҡулланылалар.

Аҡ көндәрҙә, ҡара төндәрҙә лә
Өмөттәрен халҡым өҙмәгән.
(“Талҡаҫ тулҡындарында”) [5, 131-се бит].

Башҡорт телендәге лексик антонимдарҙы түбәндәге лексик-семантик төркөмдәргә бүлеп йөрөтәләр:

1) кешенең хәлен, кәйефен һ.б. сифаттарын сағылдырған антонимдар:

Үҙем көләм дә бит, йәнем илай,
Баҫты инде һағыш яуҙары.
Әтерһең дә, хәүеф-хәсрәт йөгөн
Донъя бөгөн миңә ауҙарҙы.

(“Үҙем көләм дә бит”)
“Дошман беҙҙе күралмай,
Юлға ситән үралмай,
Үреп ҡарай, һүтеп яға,
Нинаһ булдыралмай”.
(“Эт өрә, бүре йөрөй”).
Бай һәм ярлы уйынын
Уйнап беҙ туймайбыҙмы?
Драмамы, кәмитме был,
Булырмы бер аҙағы?
(“Рәсәй, ниңә ни булды?”).

2) тәбиғәт күренештәрен белдергән антонимдар:
Бөркөттәрҙең ҡыйыу осоштары,
Тыныс ерҙең аҫыл төҫтәре,
Күңелдәрҙә көмөш моң уйнатҡан
Йәйҙең, ҡыштың айлы кистәре;
(“Һоҡланыу”).

3) ваҡыт мөнәсәбәтен белдергән антонимдар:
Мин, ахыры, тыуғанмындыр, тимен,
Йә бер аҙ һуңлап, йәки иртәрәк.
Йөрәгемдә үҙ ҡояшым менән
Мин дә барам бер яҡ ситтәрәк.
(“Үҙем көләм дә бит”)

1) урын һәм арауыҡ мөнәсәбәтен аңлатҡан антонимдар:
Мин даланан килдем ҡалаға,
Ә йөрәгем йәшәй далала.
(“Мин даланан килдем”)
Бер сигендә – төньяҡ боҙлауығы,
Бер сигендә – көньяҡ сүлдәре,
Берәм-һәрәм теҙелешеп киткән
Төркиҙәрҙең күрке илдәре.
(“Тел диңгеҙе”).

2) төҫ, тәм, ауырлыҡ, күләм мөнәсәбәттәрен белдереүсе антонимдар: *Үткәндәрҙә аҡ һәм ҡара*
бергә ҡушып үрелгән.
Эй, Ғәҙелша, һин бит минең
Йөрәгемдең түрендә.
(“Кайҙа һеҙ, ғәҙелшалар?”)

Шулай итеп, бүтән әҙмптәрҙең ижадындағы кеүек, Рәшит Шәкүр шиғриәтендә лә синоним менән антонимдар теге йәки был күренештәрҙең нескәлектәрен, төрлә яҡтарын тулыраҡ, сағыуыраҡ итеп биреү өсөн хеҙмәт итә. Кеше күңеленең күп яҡлы халәтен, кәйеф-торошон ентеклеберәк тасуирлауға, әҫәрҙең уҡыусыға тәьҫир көсөн арттырыуға булышлыҡ итә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ж.Ғ. Кейекбаев. Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. – Өфө: Китап, 2014. 260 бит.

2. Рәшит Шәкүр. Ғүмер көҙө: шиғырҙар, йырҙар, хикәйәттәр, поэмалар. – Өфө: Китап, 2012. – 256 бит.

3. Рәшит Шәкүр. Заманалар юлында: Шиғырҙар, поэма. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988. 136 бит.

© Аҡъюлова А.А., Янбаев И.К., 2023

UDC 821.512.141

Ataýewa L.I.,
Magtymguly adyndaky Türkmen döwlet uniwersitetiniň daşary ýurt dilleri kafedrasynyň mugallymy Aşgabat, Turkmenistan
Abdyýewa M.M.,
Magtymguly adyndaky Türkmen döwlet uniwersitetiniň daşary ýurt dilleri kafedrasynyň mugallymy

DAŞARY ÝURT DILLERINIŇ UGURDAŞ YLYMLAR BILEN ARABAGLANYŞYGYNYŇ USULYÝETI

Tebigat we jemgyýet hadysalary özara baglanyşykda bolup, üznüksiz gatnaşykda ösýär hem kämilleşýär. Hadysa we ders şol bir wagtyň özünde birnäçe ylymlaryň seljeriş-gözleg nokady bolup bilýär. Meselem, jemgyýetçilik hadysasy bolan dili lingwistika, psihologiýa, didaktiki ylymlary öz nukdaýnazaryndan öwrenýärler. Aragatnaşyk serişdesi bolan dili okatmagyň usulyýeti özüne ýakyn ylymlaryň gazanan üstünliklerinden geregini alýar, şol bir wagtda, daşary ýurt dilini okatmagyň usulyýetiniň häzirki zaman amaly-ylmy netijelerinden pedagogikanyň beýleki ugurlarynyň hem peýdalanjagy şübhesizdir.

Iňlis dilini okatmagyň usulyýetiniň aýratyn ylym hökmünde ösmeginde we kämilleşmeginde pedagogika, psihologiýa, lingwistika, didaktika ylymlarynyň ähmiýeti örän uludyr.

Usulyýetiň psihologik esaslary. Iňlis dilini okatmagyň usulyýeti psihologiýa bilen ikitaraplaýyn – sözleýiş psihologiýasy we pedagogik psihologiýa bilen berk baglanyşyklydyr. Ynsanyň sözleýşi lingwofi ziologiýada (sözleýiş fi- ziologiýasynda) hem-de psiholingwistikada ylmy taýdan seljerilýär. Ähli dillerde sözleýiş dil serişdeleri we sözleýiş mehanizmleri esasynda ýüze çykýar.

Sözleýiş adam beýnisiniň hereketini dolandyrýan çylşyrymly ruhy pursatdyr. Beýniniň obýektiw hakykata akyl ýetirmeginde analiz-sintez etmegi esasynda birinji we ikinji duýduryş ulgamlary hereket edýär. Birinji duýduryş ulgamy eşidiş, görüş, ys alyş, tagam biliş we başga-da duýuş esasynda daşky dünýäni duýup bilmek mümkinçiligini açyp berýär. Ikinji duýduryş ulgamy bolsa, dil belgileri arkaly barlygy (hakykaty) umumylaşdyrmak esasynda iş alyp barýar. Birinji duýduryş ulgamy haýwanat dünýäsine hem degişli. Ikinji duýduryş ulgamy duýduryşlaryň duýduryşy bolup, söz arkaly berilýär. Sözleýşiň fi-ziologik esasy ikinji duýduryş ulgamynyň işi hasaplanylýar. Adam ikinji duýduryş ulgamynyň üsti bilen "durmuşyň hojaýyny bolup başlaýar" diýip I.P.Pawlow belleýär. Ikinji duýduryş ulgamy birinji duýduryş ulgamy bilen üznüksiz baglanyşykdadyr. Olar bilelikde hereket edýärler. Eger-de olaryň özara gatnaşygy bozulsa, onda sözleýiş manysyz söz topbaklaryna öwrüler.

Usulyýetiň we psihologiýanyň baglanyşygy baradaky soragy ilkinji gezek 1940-njy ýylda W.A.Artýomow orta atypdy. Şonda ol daşary ýurt dillerini öwretmegiň usullaryny dogry kesgitlemekde psihologiýanyň zerur materiallary we görkezmeleri berýändigini belläpdir.

Okuwçylaryň ýady, ünsi, duýgurlygy, olaryň bilimleri özleşdirişi, başarnyklarynyň we endikleriniň kemala gelşi baradaky soraglaryň ylmy taýdan işlenmegi usulyýetiň we psihologiýanyň arabaglanyşygyny barha ýakynlaşdyrýar. Daşary ýurt dillerini öwretmekde okuwçylaryň ýadyna uly orun degişlidir. Ýadyň gysga wagtlaýyn we uzak wagtlaýyn görnüşleri bolýar. Öwredilýän materiallar ilki gysga wagtlaýyn ýada düşýär, birnäçe gönükmelerde gaýtalanylandan soň, ol uzak wagtlaýyn ýada geçýär. Bu ýagdaý daşary ýurt dillerini öwretmegiň usulyýeti üçin has ähmiýetlidir. Psihologlar ýatda saklamagyň aşakdaky üç derejesini tapawutlandyrýarlar: ýat tutmak, ýatda saklamak, ýatdan çykarmak. Ýat tutmagyň erkin we erkin däl görnüşleri duş gelýär. Daşary ýurt dillerini öwretmekde erkin däl ýat peýdalydyr. Erkin ýat tutmak daşary ýurt dillerini öwretmekde az ulanylýar.

Diňe aýratyn sözleri, goşgulary, eserlerden parçalary erkin ýat tutup bolar. Erkin ýat tutmagyň netijeleligine şu şertler täsir edýär:

a) haýsy hem bolsa bir hereketiň ýerine ýetirilmegine bolan gyzyklanma;

b) ýat tutulýan materialyň öňki öwrenilen material bilen deňeşdirilmegi;

ç) hereketiň aňly ýerine ýetirilmegi;

d) materialyň ýat tutulmagy netijesinde duýgynyň, mümkin boldugyça, köp görnüşleriniň gatnaşmagy.

Psihologia ylmynyň görkezişi ýaly, şu şertleriň berjaý edilmegi öwrenilýän materialyň ýatda saklanylmagyna ýardam edýär. Şonuň üçin hem daşary ýurt dilleriniň mazmunynyň anyklanmagynda, gönükmeleriň düzülmeginde we ulanylmagynda şu aýdylanlaryň ýerine ýetirilmegi zerurdyr. Okuw materialynyň ýatda saklanmagy üçin onuň ýatdan çykmagynyň öňi alynmalydyr. Psihologlaryň belleýşi ýaly, okuw materialy ýat tutulan dessine has çalt ýatdan çykyp başlaýar. Wagtyň geçmegi bilen bolsa, ýatdan çykmak birneme gowşaýar. Şoňa görä-de, täze okuw materialy görkezilen dessine, ony dürli duýgularyň (görşüň, eşidişiň we ses organlarynyň) üsti bilen köp sanly gönükmeleri ulanyp, yzygiderli gaýtalap durmak zerurdyr. Şeýle hem psihologiya ylmy hödürlenilýän okuw materialyny kabul etmekde we ony özleşdirmekde haýsy duýgularyň esasy rol oýnaýandygyny kesgitleýär. Mysal üçin, eger-de dil sözleýşinde eşidiş duýgusy esasy orny eýeleýän bolsa, ýazuw sözleýşinde görüş duýgusy has möhüm hasaplanýar.

Psihologiýanyň usulyýet bilen bilelikde seredýän meseleleriniň ýene biri hem bilimler, başarnyklar we endikler hakyndaky düşünjelerdir. Bilimleri ele almak diňe bir sözleýşiň görnüşlerini, grammatik gurluşly taýýar sözleýiş nusgalaryny, sözleri we olaryň manylaryny bilmegi aňlatman, eýsem janly gepleşikde ähli kadalaryň dogry peýdalanylmagyny göz öňüne tutýar. Usulyýetde başarnyk diýlip, özüňde bar bolan bilimleriňe we tejribäňe daýanyp, okuw hereketlerini dogry ýerine ýetirip bilmek ukybyna aýdylýar. Eger-de başarnyklar awtomatik ýagdaýda gaýtalansa, onda olar endige öwrülýärler.

Ýagny, endik aňly ýerine ýetirilýän hereketiň awtomatizasiýalaşan bölegidir. Başgaça aýdanyňda, endik gönükmeleriň üsti bilen awtomatizasiýalaşan başarnyklardyr. Şoňa görä-de, daşary ýurt dilini öwretmekde geçirilýän işler başarnyklaryň endiklere öwrülmegine ýardam etmelidir. Okuwçylaryň dil hakyndaky düşünjeleri we başarnyklary, esasan hem, dil gönükmelerinde kemala gelýärler. Olaryň gepleşik başarnyklary bolsa, sözleýiş gönükmeleriniň ýerine ýetirilmeginde ösýärler. Umuman, okuw wagtynda dil hem sözleýiş başarnyklary we endikleri bir wagtyň özünde, aýrylmaz baglanyşykda döreýärler, ösýärler.

Daşky we içki sözleýiş. Sözleýşiň ses we harp taraplary onuň daşky tarapyny aňladýar. Içki sözleýiş – sözleýiş hereketiniň, eşidişiň, görşüň hem-de el hereketiniň gatnaşmagynda şekillenýär. Daşky we içki sözleýiş – sözleýşiň dinamik stereotipini emele getirýär. Stereotipleriň işlemegi dil serişdesi hökmünde sözleýiş mehanizmini hasyl edýär. Şonuň bilen baglylykda psihologik jähtden sözleýşi dilden tapawutlandyralyň. “Sözleýiş” düşünjesi pikiriň şekillenmegini hem-de onuň beýan etmek usulyny bildirýär. Dil pikiri hasyl etmegiň we beýan etmegiň serişdesidir. Psiholingwistikada pikiri beýan etmäge reproduktiw sözleýiş diýlip, oňa geplemek we ýazuw degişlidir. Beýan edilen pikiri (geplemegiň we ýazuwyň önümini) aňlamak reseptiw sözleýşi hasyl edýär. Pikiri beýan ediji we ony aňly kabul ediji ýeketäk “kommunikant” ady bilen umumylaşdyrylýar. Psiholingwistika ylmynyň meselelerini ylmy taýdan derňemekde professorlar L.S.Wigotskiniň, A.A.Leontýewiň, I.A.Zimnýaýanyň işlerini agzap geçmek zerurdyr.

Daşary ýurt dillerini okatmagyň lingwistik esaslary. “Daşary ýurt dilini okatmak” düşünjesi daşary ýurt dilinde sözleýşi öwretmek diýen manyny aňladýar. Daşary ýurt dillerini öwretmegiň usulyýeti üçin "dil" we "sözleýiş" diýen terminleriň arasyny açmak möhümdir.

Dil – bu adamlaryň arasyndaky gatnaşyk üçin zerur bolan dil serişdeleriniň we olary ulanmagyň düzgünleriniň ulgamydyr. Sözleýiş bolsa, şu dil ulgamynyň anyk aragatnaşyk prosesinde durmuşa geçirilmegidir. Şu ýerde dili we sözleýşi öwretmegiň düýbünden dürli düşünjeler bolup duryandygy ýüze çykýar. Dili öwrenmek diňe şol diliň ulgamyny özleşdirmegi aňladýar. Bu dili aragatnaşyk serişdesi hökmünde ele almaklygy aňlatmaýar. Sözleýşi bilmek – şol dili aragatnaşyk serişdesi hökmünde awtomatizasiýalaşdyrylan derejede ulanyp bilmegi aňladýar. Diliň we sözleýşiň birlikleri hem öz aralarynda tapawutlanýarlar. Eger-de diliň birlikleri harplar, fonemalar, morfemalar, sözler, sözlemler bolsalar, onda sözleýşiň birlikleri hökmünde jümleleri we sözlemleri hasaplamak bolar. Sözleýişde bolsa şu belgileri ulanmagyň esasynda maglumat alyş-çalşygyny amala aşyrmak mümkinçiligi bardyr.

Dil diýlende, belli bir jemagatyň aňynda orun alan kodlardan (belgilerden) ybarat serişdeleriň hem-de olaryň ulanylyş kadalarynyň ýygyndysyna düşünilýär. Diliň esasy wezipesi adamzat jemgyýe tinde aragatnaşyk serişdesi bolup, ol belgileriň ulgamyndan ybaratdyr.

Diýmek, dil – jemgyýetçilik, sözleýiş bolsa hususy hadysadyr. Dili diňe sözleýiş arkaly öwrenmek mümkin. Sözleýiş nusgasy daşary ýurt dilini öwretmekde esasy birlik hökmünde çykyş edýär. Ol diliň fonetik, leksik, grammatik taraplaryny utgaşdyrýar hem-de taýýar dil hadysasy hasaplanýar.

Bu dil hadysasy sözleýişde bütewilikde öwrenilýär. Onuň düzümindäki kynçylyk döredýän birlikler aýry-aýrylykda dürli ýumuşlaryň ýerine ýetirilmeginde gaýtalanýar we berkidilýär.

Adamzat öz ömrüniň dowamynda kynçylyklaryň dürli görnüşlerine gabat gelýär, olary özüniň akyly, sabyr-takatlylygy bilen ýeňip geçýär. Daşary ýurt dillerini öwrenmekde gabat gelinýän kynçylyklary ýeňip geçip, sözleýiş işiniň görnüşlerini ele almak mekdep okuwçylarynyň durmuşynda duş gelinýän tebigy hadysadyr.

Öwrenilýän dil serişdesiniň birlikleri usulyýetçileriň nukdaýnaza ryndan iki topara – özleşdirilişi kyn we ýeňil toparlara bölünýär. Şu zatlary bilmezden, daşary ýurt dillerini öwretmegiň maksatlaryny, mazmunyny we usullaryny dogry kesgitläp bolmaz. Okuw materialynyň mazmuny kesgitlenende okuwçylaryň ene dilini we öwrenilýän daşary ýurt ulgamlarynyň diliniň arasyndaky meňzeşlikler we tapawutlar hem nazarda tutulmalydyr. Sebäbi daşary ýurt dilini öwrenmek prosesine okuwçylaryň ene diliniň hadysalarynyň oňyn we oňyn däl täsir edýänligi düşnüklidir. Okuwçylaryň ene diliniň ulgamyny bilmeginiň daşary ýurt dillerini öwrenende oňyn täsir edişi sesli okamakda, işlikleriň zaman goşulmalaryny goşmakda we beýleki hadysalarda ýüze çykýar. Käwagtlar bolsa, okuwçylaryň ene dilindäki we öwrenilýän daşary ýurt dilindäki düzgünler, hadysalar biri-birine gabat gelmeýärler. Mysal üçin, iňlis we nemes dillerindäki artikller, perfekt, modal işlikler ýaly düşünjeler türkmen dili üçin mahsus däldir.

Oňa garamazdan, okuwçylar daşary ýurt diliniň sözlemlerini ene dilindäki sözlemlere meňzeş edip düzmäge çalyşýarlar. Bu bolsa, köp sanly ýalňyşlaryň döremegine sebäp bolýar. Şu ýagdaýa usulyýetde ene diliniň daşary ýurt dilindäki sözleýşe täsiri ýa-da interferensiýa diýlip at berilýär.

Daşary ýurt dillerini öwretmegiň didaktik esaslary. Didaktika - okatmagyň umumy nazaryýeti, usulyýet – anyk okuw dersini okatmagyň ylmy, lingwodidaktika anyk bir dili okatmagyň ylmy hökmünde tapawutlandyrylýar. Daşary ýurt dilini okatmagyň didaktik esaslaryny seljerenimizde ilki bilen, “Daşary ýurt dili” okuw dersiniň aýratynlyklaryny beýleki okuw derslerinden tapawutlandyrmagymyz gerek.

Mekdepde okadylýan ähli dersleri şertli ýagdaýda aşakdaky görnüşlere bölmek mümkin: ylmyň esaslaryndan sapak berýän okuw dersleri (himiýa, biologiýa, fi zika, matematika, taryh, ene dili), terbiýe bermäge gönükdürilen okuw sapaklary (surat, aýdym, zähmet), dil ugrundan bilim berýän okuw dersleri (ene dili we daşary ýurt dili).

Проза – әҙәбиәттең үҫеш кимәлен күрһәтеүсе әҙәби төр. Башҡорт әҙәбиәтендә лә проза үҙенең эре күләмле әҫәрҙәрендә – повесть, романдарҙа юғары ҡаҙаныштарҙы сағылдырҙы, художестволы процестың үҙенсәлекле һыҙаттары хикәйәләүсе жанрҙарҙа реализацияланды. Ысынбарлыҡ менән тығыҙ бәйләнештәге сәсмә әҫәрҙәр йәшәйеш проблемаларын тәрәнерәк һәм тулыраҡ сағылдырҙы.

XX быуаттың 80-се йылдарына тиклемге башҡорт прозаһының үҫеш үҙенсәлектәрен комплекслы, системалы тикшереү Ә.Х.Вахитов һәм Р.Н. Байымов тарафынан башҡарылды. Ә. Вахитовтың рус телендәге “Жанр и стиль в башкирской прозе” монографияһы профессиональ башҡорт прозаһының XX быуат башынан алып 70-се йылдар аҙағына тиклемге аралағы үҫеш үҙенсәлектәрен, проблемаларын, айырым әҫәрҙәр миҫалында өлгәшкән юғары өлгөләрен һәм кәмселектәрен теоретик планда тикшереүгә арналған. Ғалим башҡорт прозаһының төрлө жанрҙарында стилдең тыуыу сығанаҡтарын, башланғыстарын һәм нығыныу процесын анализлауға төп иғтибарын йүнәлтә. Конкрет әҙәби материалда Ә. Вахитов хәҙерге

әҙәби телдең формалашыу картинаһын күҙ алдына баҫтыра, жанрҙар эволюцияһын, стилдәр тәбиғәтен анализлай. Айырым урын башҡорт прозаһының тарихи үҫешендә рус классик һәм совет әҙәбиәттәренең биләгән ролен яҡтыртыуға бүленгән.

Р. Байымовтың “Судьба жанра” монографияһы башҡорт прозаһы жанрҙарының, тәү сиратта романдарҙың формалашыу процестарын һәм эволюцияһын ентекле тикшереүгә, Көнсығыш әҙәбиәтенең көслө йоғонтоһон кисергән башҡорт әҙәбиәтенең XX быуатта ла боронғо традицияларҙы һаҡлап ҡалыуын, шул уҡ ваҡытта Европа әҙәбиәте ижади ҡанундарын да үҙләштереүгә килеүен юллауға, үҙенсәлекле Көнсығыш–Көнбайыш әҙәбиәттәре традицияларының синтезының башҡорт прозаһында урын алыуын анализлауға арналған.

Бынан тыш Р. Байымовтың “Шаг в зрелость” (1975) , “Ижади биҙәктәр” (1977), “Башкирский историко–революционный роман” (1980), “Поискам нет конца” (1980), “Жанр романа в системе эпических форм башкирской прозы” (1982) , “Истоки и устья” (1993), “Төрлө йылдарҙа тыуған уйҙар” (2007), Ә.Вахитовтың “Эпик киңлектәрҙә” (1968), “Таланттың асылы” (1972), “Ижади портреттар” (1976), “Башкирский советский роман” (1978), “Офоҡтар киңәйгәндә” (1979) монографик хеҙмәттәрендә, күп һанлы мәҡәләләрендә башҡорт прозаһына ҡағылышлы әҙәби–тарихи һәм теоретик характерҙағы мөһим мәсьәләләр яҡтыртылды, башҡорт романы, повесы, хикәйәләренә арналған был тикшеренеүҙәрҙә жанрҙар теорияһының һәм тарихының төрлө аспекттары тикшерелде.

Ғ.Б. Хөсәйеновтың “Хәҙерге әҙәбиәт донъяһында” (1973), “Башҡорт совет әҙәбиәтенең үҫеш юлдары” (1968), “Заман. Әҙәбиәт. Әҙип” (1978) монографик хеҙмәттәрендә башҡорт әҙәбиәтенең, шул иҫәптән башҡорт прозаһының да төп үҫеш мәсьәләләре теоретик аспектта яҡтыртылған. Ғ.З. Рамазановтың “Әҙәбиәт офоҡтары” (1978) монографияһында 1960–1970-се йылдар повестары анализланған, байтаҡ яҙыусыларҙың ижад алымдарына күҙәтеү яһалған.

З.Ә. Нурғәлиндың “Герой һәм заман” (1975), “Идея берҙәмлеге юлында” (1978), “Билдәлелек яҡтыһында” (1992), “Дәүерҙәр һулышы” (2003) хеҙмәттәре әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡиттең актуаль темаларына арналған, уларҙа мөһим әҙәби–тарихи проблемалар күтәрелә, әҙәбиәттең халыҡсанлыҡ һыҙаттары асыҡлана, заман геройына хас сифаттар тикшерелә, 20–30-сы йылдар әҙәбиәтендәге аҡ таптарҙы бөтөрөүгә, социаль-тарихи ваҡиғаларға объектив баһа биреүгә автор ҙур өлөш индерә. Ғ.Б. Хөсәйеновтың “Башҡорт әҙәбиәтенең

поэтикаһы” (2006), К.Ә. Әхмәтйәновтың “Башҡорт поэмаһының композиция мәсьәләләре”(1962) , “Шиғриәт иленә сәйәхәт” (1967), “Әҙәбиәт теорияһы” (1971), “Поэтик образлылыҡ” (1979), “Матурлыҡ. Батырлыҡ. Шиғриәт” (1982) хеҙмәттәре әҙәбиәт теорияһы мәсьәләләренә арналған, уларҙа башҡорт шиғриәте поэтикаһын тарихи планда тикшереүгә ныҡ әһәмиәт бирелгән, прозаға ҡағылышлы ҡиммәтле фекерҙәр ҙә урын алған.

Драматургияла М. Ғәйнуллиндың “Ысынбарлыҡ. Конфликт. Характер”(1974), «Становление и развитие социалистического реализма в башкирской драматургии» (1975), Т.Килмөхәмәтовтың “Драматургия Мустая Карима. Своеобразие жанровой эволюции” (1979), “Поэтика башкирской трагедии” (1983), “Драматургия и драматурги” (1986), “Поэтика башкирской драматургии” (1995), Р. Әхмәҙиевтың “Жанровые формы драматургии” (2003) хеҙмәттәре сәхнә әҫәрҙәренең жанр –стиль үҙенсәлектәрен, һүрәтләү принциптарын, конфликт тәбиғәтен, сюжет-композиция ҡоролошон, поэтикаһын тикшереүгә арналған. “Башҡорт әҙәбиәте тарихы” (1967), “История башкирской советской литературы” (1977) фундаменталь коллектив хеҙмәттәрҙә, айырыуса 7 томлыҡ “Башҡорт әҙәбиәте тарихы”нда, шулай уҡ “Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте”(2003) тигән юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслектә XX быуаттың 80-се йылдарына тиклемге башҡорт прозаһының үҫеш этаптары хронологик планда анализлана, 90-сы йылдар башындағы ҡайһы бер күренекле сәсмә әҫәрҙәр баһалана.

Тарих, тел һәм әҙәбиәт Институты ғалимдарының коллектив хеҙмәт емеше булған “Башҡорт әҙәбиәтендә метод һәм стиль мәсьәләләре” (1982) исемле мәҡәләләр йыйынтығында 18–19-сы быуаттарҙағы, XX быуат башындағы һәм 20-се йылдар башҡорт совет әҙәбиәтендәге ижад методтары, стиль йүнәлештәре тикшерелә. Шулай уҡ Ғ. Хөсәйеновтың Д. Юлтый, М. Минһажетдиновтың Һ. Дәүләтшина, М. Хәмизуллинаның Б. Бикбай, С. Сафуановтың Ғ. Хәйри, А. Карнай, Н. Зариповтың И. Насыри, Ә. Вахитов һәм И. Вәлитовтың З. Биишева ижады хаҡындағы монографияларында ижад методтары һәм стиль йүнәлештәре, сюжет–композиция өлкәһендә ижади эҙләнеүҙәр, герой типтары анализлана.

Башҡорт әҙәбиәтенең быуаттар төпкөлөнә барып тоташыусы тамырҙарын юллау-тикшереү эше лә әҙәбиәт ғилемендә бик әүҙем алып барыла. “Боронғо һәм урта быуаттарҙа башҡорт художестволы фекер эволюцияһы. Рухи мираҫты һәм тарихи лингвистика мәсьәләләрен өйрәнеү принциптары“ (2009) коллектив хеҙмәттәр донъя күрҙе. Ғ.Б. Хөсәйеновтың «Быуаттар тауышы» (1984), «Литература и наука»

(1998), «Духовный мир башкирского народа»(2003), «Батырша» (2005), Р.Н. Байымовтың «Литература Востока» (2001), “Великие лики и литературные памятники Востока” (2005) исемле фундаменталь хеҙмәттәре, тиҫтәләгән мәкәләләре баҫылып сыҡты һәм йәмғәтселектә ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. В.И. Әхмәҙиевтың “Быуындар бәйләнеше” (1984) тигән хеҙмәте октябрь революцияһына тиклемге башҡорт әҙәбиәтендә ижад методы мәсьәләләрен өйрәнеүгә арналды. Һуңғы тиҫтә йылдар эсендә байтаҡ башҡорт ғалимдарының монографиялары был өлкәлә етди ғилми тикшеренеүҙәр барыуын ҡеүәтләй.

© Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Ғарифуллина А.И.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ГӨЛСИРӘ ҒИЗЗӘТУЛЛИНА ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ХАРАКТЕРҘАР АСЫЛЫ

Гөлсирә Ғиззәтуллина XX быуаттың 90-сы йылдарында журналистика аша әҙәбиәткә килде. Оҙаҡ йылдар республика матбуғатында журналист булараҡ эшләү, редакция кабинетында ултырғанда ла, район-ауылдар буйлап командировкаларҙа йөрөгәндә лә бик күп фәһемле лә, ғибрәтле лә яҙмыштар менән танышыу йәш яҙыусы өсөн тормош мәктәбе лә, күңелендә яралған әҫәрҙәре өсөн реаль ерлекле әҙәби материал да булды.

Күңел күҙе осҡорланған, ҡәләме сарланған, шәхес булараҡ үҙе лә үҫкән, сыныҡҡан әҙибәнең бер-бер артлы донъя күргән әҫәрҙәре өсөн кеше күңеленең тәрән ятыуҙарына үтеп инеү, тәрән психологизм, зирәк күҙәтеүсәнлек, фәлсәфәүи фекер һәлмәклеге хас булды. Сағыштырмаса ҡыҫҡа ваҡыт – ике тиҫтә йыл эсендә Гөлсирә Мирза ҡыҙы Ғиззәтуллинаның шәлкем-шәлкем хикәйәләре, повестары, романы уны популяр яҙыусы итеп таныттылар.

Өлкәндәр өсөн ижад итеү менән бергә, Гөлсирә Ғиззәтуллина кескәй йәштәге уҡыусыларға тәғәйенләп яҙылған мауыҡтырғыс та, бик күп ҡыҙыҡлы фактик мәғлүмәттәргә лә бай хикәйәләр һәм повесть авторы булараҡ та сығыш яһаны. «Капелька и подорожник» (1994) тигән повесында, шулай уҡ кейек-януарҙар, үҫемлектәр тормошон яҡтыртҡан башҡа әҫәрҙәрендә лә яҙыусының ҡоро фәнни телдәге факттарҙы, ғилми

материалдарҙы балалар өсөн аңлайышлы, ҡыҙыҡлы, иҫтә ҡалырлыҡ итеп еткереү һәләте балҡып асылды.

Гөлсирә Ғиззәтуллинаның «Өмөтөмдө ҡалдыр...» (1993), «Йөҙ ҙә бер ғүмерем» (1997), «Күңел йорто» (2003), «Тормош шау сәскәлә» (2007) исемле китаптарына ингән хикәйәләренә, тәү ҡарашҡа, кешеләр яҙмышының уҡыусы күреп-төшөнөп еткермәгән яҡтарын аса алыу, тормошто сағылдырыуҙа фәлсәфәүи-интеллектуаль баһалауҙың көслө булыуы хас.

Әҙибәнең үҙенең тормошҡа ҡарата ҡараштарының ирекле булыуы, ҡалыплашҡан, күптән инде ҡағиҙә һымағыраҡ ҡабул ителгән ҡараш-баһаламалар эсенә тәрән фекер йөрөтөүенең бер нисек тә һыйышмауы уның ижадының өр-яңыса яңғырашына килтерә. Был оригиналь, төрлө сикләүҙәрҙән азат, иркен фекер йөрөтөү ҡәҙимге тормош менән йәшәүсе геройҙарҙың эш-ҡылығын һүрәтләүҙә лә, рухи донъяларын, эске булмышын, «күңел йортон» асыуҙа ла сағыла. Уҡыусы Гөлсирә Ғиззәтуллинаның әҫәрҙәрен уҡығандан һуң, үҙе өсөн таныш та, таныш түгел дә асыштар яһай, тормошҡа ҡарашы яңырып киткәндәй тойола, шәхес һәм йәмғиәт араһындағы күҙгә күренмәҫ бәйләнештәрҙе төҫмөрләй. Үрҙә әйтелгәнсә, Гөлсирә Ғиззәтуллинаның әҫәрҙәрендә таушалған, аксиомаға әйләнгән баһаламалар урынын оригиналь, тәү ҡат уҡығанда ғәжәпләндерә, уйландыра, бәхәсләштерә торған фәлсәфәүи фекерҙәр биләй, тигән инек. Тиҫтәләгән йылдар эсендә беҙҙең илдәге идеология, шуға ярашлы нәфис әҙәбиәт халыҡтың аңына «тормош – көрәш ул» тигән төшөнсәне һеңдерҙе, көрәшселәр тәрбиәләргә тырышты. Кеше күңеле, шәхес ихтыяждары һанға һуғылманы, йә иң артта торған әһәмиәтһеҙ мәсьәлә итеп ҡаралды.

Әҙәбиәт исемлеге:

Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары: монография. Өфө: БашДУ РБҮ, 2012. 494 б.

© Ғарифуллина А.И., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Ғөбәйзуллина Р.В.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ФӘРИТ ИҪӘНҒОЛОВ ПОВЕСТАРЫНЫҢ ЖАНР-СТИЛЬ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Күренекле башҡорт яҙыусыһы Фәрит Иҫәнғолов - үҙенең ижады менән башҡорт совет әҙәбиәтенең формалашыуына һәм үҫешенә ҙур өлөш индергән, көнүҙәк проблемаларҙы әүҙем яҡтыртҡан тиҫтәләгән ижад емештәре менән олпатлы, дәрәжәле ҡәләм оҫтаһы булып танылған әҙип. Уның ижады бик үҙенсәлекле, бөгөнгө көндә лә уҡыусыларҙың һөйөүен яулаған ижад.

Фәрит Әхмәҙулла улы Иҫәнғолов 1928 йылдың 5 мартында Ҡырмыҫҡалы районы Ҡарламанбаш ауылында крәҫтиән ғаиләһендә тыуған. Бала сағы Ауырғазы районының Үтәймулла ауылында үтә. Мәктәпте тамамлағас, 1945 йылда К.А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтының (хәҙерге Башҡорт дәүләт университеты) башҡорт теле һәм әҙәбиәте факультетына уҡырға инә. Ике йыл Бишауыл–Уңғар ауылы мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй, уҡыу-уҡытыу эштәре буйынса мөдир вазифаһын башҡара. 1951 йылда Өфөгә килә. 1954 йылда КПСС сафына инә. 1957 йылға тиклем Башҡортостан китап нәшриәтендә мөхәррир, унан өлкән мөхәррир булып эшләй. 1957 йылда “Ағиҙел” журналының баш мөхәррир урынбаҫары итеп тәғәйенләнә. Унан Мәскәүгә М. Горький исемендәге Әҙәбиәт институтына Юғары әҙәби курстарға уҡырға ебәрелә. Ике йылдан Өфөгә ҡабат әйләнеп ҡайта һәм “Ағиҙел” журналында баш мөхәррир урынбаҫары вазифаһында эшен дауам итә. Башҡортостан Яҙыусылар Союзында әҙәби консультант була.

Яҙыусының әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһыныуы мәктәптә уҡыған йылдарҙа уҡ башлана. Шиғырҙары «Йәш төҙөүсе» газетаһында баҫыла.

Әҙәбиәткә ул балалар яҙыусыһы булараҡ килә. Балалар өсөн бер-бер артлы «Тәүге һынау» (1953), «Баҫҡыс» (1954), «Хәмит күпере» (1956), «Быйылғы йәй» (1958), «Председатель малайы» (1960), «Кем?» (1960), «Бөҙрәкәй менән Сыбарҡай» (1961), «Хәлимә һәм Хәлим» (1962), «Батырҙар утрауы» (1965) һәм башҡа йыйынтыҡтары баҫылып сыға.

Балалар өсөн ижад ителгән әҫәрҙәре тематикаһы һәм жанр тәбиғәте йәһәтенән дә күп йүнәлешле. Балалар донъяһының төрлө яҡтарын,

үçмерҙәрҙең ил тарихында булған төрлө ваҡиғалар барышындағы яҙмышын һәм актив хәрәкәтен сағылдыра улар.

Фәрит Иҫәнғолов әҫәрҙәрендә әхлаҡи тәрбиә мәсьәләләренә ҙур иғтибар бирә. Балаларҙа хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләү, намыҫлы хеҙмәттең генә халыҡ тарафынан тейешле баһа алыуын әҙип «Тиктормаҫ бәке», «Йылмайыу», «Тәүге һынау», «Балҡортостан ҡыҙы Нәҙекәйбил» һәм «Хәмит күпере» хикәйәләрендә ҡуҙғата. Мәҫәлән, үҙ исемен мәңгеләштерергә теләгән, бөтә ергә бәке менән исемен яҙып йөрөгән Әхтәйгә («Тиктормаҫ бәке»), кеше хеҙмәте менән дан ҡаҙанырға, шулай уҡ исемен мәңгелек итергә уйлаған Вәлиткә («Хәмит күпере») ҡарата балаларҙа ерәнеү тойғоһо уяныһа, үҙенең тәүге ултырғысын эшләп ғорурланған Фәхригә («Тәүге һынау»), егәрле, атаһының һүҙен тотоп йәшәгән, халыҡ сыға алмай ыҙалаған йылға аша күпер төҙөп, изгелек ҡылған Хәмиткә ҡарата һоҡланыу хистәре тыуа.

Яҙыусы прозаһының идея-тематик йөкмәткеһе йылдан-йыл киңәйә бара, тормошҡа үтеп инеү тенденцияһы көсәйә, уның әҫәрҙәрендә илдә барған үҙгәрештәрҙе төрлө әҙәби формалар, алымдар ярҙамында тулыраҡ сағылдырыуға ынтылыш билдәләнә. Заман темаһын яҡтыртыу, замандаш образын кәүҙәләндереү, яңы кеше проблемаһын художестволы яҡтан уңышлы хәл итеү – әҙәбиәт өсөн иң актуаль мәсьәләләр яҙыусы тарафынан уңышлы тормошҡа атҡарыла.

Алтмышынсы йылдарҙа Ф.Иҫәнғоловтың бер шәлкем лирик повестары яҙыла. Яҙыусының ижад донъяһында күренекле урын тотҡан «Алтынбикә», «Фәниә», «Рәсимә», «Зөһрә», «Аҡҡошом минең» повестары заман йәштәре тормошона, мөхәббәт һәм ғаилә мәсьәләләренә арналған [2]. Яҙыусы үҙе лә бөгөнгө көн хаҡында яҙыу, замандаш образын тыуҙырыу, зәғиф кенә үҫентеләрҙә киләсәктең мул емешен күрә белеү мәсьәләһен һәр осор әҙәбиәте өсөн ауыр, ҡатмарлы бурыс тип һанай.

Мәҫәлән, «Рәсимә» повесында төп герой Рәсимәнең рухи үҫештә бер аҙым яһауы- кешеләрҙе һайлай белергә өйрәнеүе үҙәккә ҡуйылған. Әҫәрҙә өс студент образы бирелгән: Рәсимә, Рөстәм, Ҡотлобай. Унынсы класты бөткәс, Рәсимә Ҡотлобайҙы ҡалаға уҡырға барырға өгөтләй. Университетта география факультетында уҡып йөрөйҙәр. Рәсимә Ҡотлобайҙы ағай тип йөрөтә, уға ҡарата дуҫтарса йылы мөнәсәбәттә, семинарҙарға бергә әҙерләнәләр. Ҡыҙ баһадир кәүҙәле мөһабәт Рөстәмгә ғашиҡ була. Етмәһә, ул матур йырлай һәм бейей. Рөстәм дә Рәсимәне яратҡандай. Бергә катокка йөрөйҙәр. Ҡыҙ Рөстәмде яратыуын әйткәс, Ҡотлобай көнләшкәндәй итеп ҡуя, моңһоуланып китә.

Рөстәмдең ысын характер сифаттары бер вакиғала асыла. Өсәүләп практиканан ҡайтып киләләр. Рәсимә юлда аяғын ауырттыра, аҡһай. Бер урында төндө үткәрергә булалар. Рөстәм Рәсимәне әрләй, насар һүҙҙәр әйтә. Рәсимә ул һүҙҙәргә иғтибар итмәй, уйынға бора. Рөстәм иртән иртүк тороп, Рәсимә уянмаҫ элек, вокзалда шампанский һәм сәскәләр менән ҡаршы алырға һүҙ биреп, әсәйем ауырып тора тигән һылтау менән ҡайтып китә. Ошо вакиға Рөстәмдең ысын йөҙөн аса ла инде. Рәсимә менән Ҡотлобай әйберҙәрен йөкмәп юлға сыға.

«Алтынбикә» һәм «Кышҡы йәйғор» әҫәрҙәренең төп геройҙары характерында эшенә мөкиббән бирелгән, дөйөм эш өсөн үҙен йәлләмәгән заманының намыҫлы хеҙмәт кешеләре образдары сағыла.

Шулай итеп, «Алтынбикә», «Аҡҡошом минең», «Рәсимә», «Фәниә», «Кышҡы йәйғор» һ.б. - лирик характерҙағы әҫәрҙәр. Лирик повестарҙа, вакиғаларҙы һүрәтләүҙән бигерәк, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәргә, уларҙың күңел донъяһына күберәк иғтибар бирелә, вакиғалар геройҙың күңел призмаһы аша үткәрелә. Фәрит Иҫәнғоловтың лирик әҫәрҙәре йәштәр, әхлаҡи темаларға арналғандар. Әхлаҡи юғарылыҡ һәм әхлаҡи түбәнлек йыш ҡына контраст ҡуйыла уларҙа.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ғәйнуллин М.Ф., Хөсәйенов Ғ.Б. Совет Башҡортостаны яҙыусылары. Биобиблиографик белешмә. Тулыландырылған, төҙәтелгән икенсе баҫма. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988. – 660 бит.

2. Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте / Байымов Р.Н., Гәрәева Г.Н., Мостафина Р.Д. һ.б. – Өфө:Китап, 2003. – 576 бит.

3. Иҫәнғолов Ф.И. Һәммәһе лә ерҙә ҡала. Повестар, хикәйәләр. – Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 272 бит.

© Ғөбәйҙуллина Р.В., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141.09

Ғәбделмәнова Н.Х.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Янбаев И.К.,
филол. фәнд. канд., доц.

МИЛӘҮШӘ ҠАҺАРМАНОВА ХИКӘЙӘЛӘРЕНДӘ МОРАЛЬ-ЭТИК ПРОБЛЕМАЛАР

Яҙыусы һәм журналист Миләүшә Ҡаһарманова ижады һуңғы йылдарҙа киң ҡатлам уҡыусылар араһында танылыу ала бара. Ул үҙен прозаның бәләкәй жанрҙарында емешле эшләүсе, ҡыҫҡа ғына

сюжеттарға төрлө заман проблемаларын һыйҙыра алыусы әҙибә итеп күрһәтә. Уның әҫәрҙәрендә хәл итеүҙе талап иткән төрлө киҫкен әхлаҡи мәсьәләләр, кешенең йәшәйешенә, йәмғиәттәге урынына һәм башҡалар менән мөнәсәбәтенә ҡараған проблемалар оло ҡыҙыҡһыныу уята.

Миләүшә Ҡаһарманова тәүҙәрәк шағирә булараҡ билдәле булһа ла, һуңғы йылдарҙа уның хикәйә жанрында яҙылған ижад емештәрен туплаған «Күңелем йылы теләй» һәм «Бетерә шаршыһы» исемле китаптары донъя күрҙе. Был йыйынтыҡтарҙа яҙыусы прозабыҙҙың иң оператив жанрындағы сағыу ижад емештәрен уҡыусыһына еткерә, үткер әхлаҡи проблемаларҙы күтәреп сыға.

Хәҙерге башҡорт хикәйәләре идея-тематик йәһәттән ғәйәт бай күренеш. Хикәйә замана хаҡында иң оператив мәғлүмәтте еткереп, геройҙарҙың күңел сәхифәләренә үтеп инеп, проблематик яҡтан үткер әҫәрҙәрҙе үҙ эсенә ала [3; 139-сы бит.]. Прозаиктарҙың ҡәләме иң беренсе хикәйә жанрында һынала һәм уның йыйнаҡ сюжетлы, тематик йәһәттән киң һәм сағыу конфликтҡа эйә өлгөләре әленән-әле гәзит-журнал биттерендә донъя күреп тора. Шуны билдәләргә кәрәк: Миләүшә Ҡаһарманова яҙған хикәйәләр бөгөнгө прозабыҙҙың үҙәк идея-тематик йөкмәткеһен сағылдырып тороусы үҙенсәлекле күрһәткес ул.

Бөгөнгө көн проблемалары хаҡында образлы дөйөмләштерелгән фекерҙе иң тәүҙә хикәйәләр еткерә. Шуға ла, яҙыусының йыйынтыҡтарында баҫылған хикәйәләрен күберәк бөгөнгө көн һулышын сағылдырыусы, заман һорауҙары менән тулы ижад емештәре тип атар инек. Әммә, шул уҡ ваҡытта, автор ошо уҡ әҫәрҙәрҙә конкрет заманды сағылдырған характерҙарҙы биреп тә дөйөм кешелек алдында торған фәлсәфәүи һорауҙарҙы ла ҡуймай ҡалмай. Әйтәйек, беҙҙе борсоған мәңгелек намыҫ һәм выждан төшөнсәләре бөгөнгө замана хикәйәләрендә лә һиҙелерлек урын алып тора. Шулай уҡ кеше яҙмышы хаҡындағы уйланыуҙар әҫәрҙәрҙәге геройҙарҙың бирелешенә, сюжеттың дөйөм үҫешенә йоғонто яһамай ҡалмай, әлбиттә.

Миләүшә Ҡаһарманова күпселек хикәйәләрендә тәрән мәғәнәле әхлаҡи һорауҙар тураһында уйлана. Уҡып туйғыһыҙ әҫәренең барыһында ла тиерлек ҡатын-ҡыҙҙың төп роле, ғаилә ҡиммәттәре тураһында һүҙ бара, уларға бәйле мораль-этик проблемалар төҫмөрләнә.

Ҡатын-ҡыҙҙың әхлаҡи яуаплылығы, тормошо тураһында яҙыусы байтаҡ уйлана. «Юғалтыу-табыштарым» тигән хикәйәләге Гөлиә исемле героиняны ғына алайыҡ. Ул бик ҡыйыу, булдыҡлы, уңған ҡатын итеп һүрәтләнә, үҙе директор урынбаҫары, үҙе бөтөн ергә лә өлгөрә, ашын да бешерә, өйөн дә ялт итеп таҙа тота. Әммә ирен һис кенә лә

хөрмәт итмәй, кешегә лә һанамай, үзен баш итеп тота. Шуға ла ире уны ташлап китә. Яҙыусы ярайһы уҡ ғәҙәтигә әйләнеп барған күренештәр аша заман проблемаһын бик оҫта итеп күтәреп сыға. Сөнки хәҙерге заманда, ысынлап та, күпселек ҡатын-ҡыҙҙар үҙҙәрен ғаиләлә баш, төп кеше тип иҫәпләй. Улар үҙҙәренең тәбиғәттән бирелгән ролдәрен онотоп, көстәрен күберәк аҡса эшләүгә, уңышлы карьера баҫҡыстары буйлап үрләүгә йүнәлтә. Ҡайһы берҙәре хатта бокс, кикбоксинг һәм башҡа ир-егеттәр спорты менән дә шөғөлләнә. Дөйөм алғанда, ҡатын-ҡыҙ ир-егеттәрҙең сифаттарына эйә булып, ир-егеткә әйләнеп бара. Бындай кәләш, әлбиттә, егеттәрҙе һоҡландырмай. Тимәк, ошо нигеҙҙә ғаиләләр тарҡала.

Ғаиләнең ахлаҡи һаулығы ҡатын-ҡыҙҙан тора, уны ир-ат иңенә генә япһарып булмай. Әсә йылыһы һәр ғаиләнең усағына ут биреүсе, күңел шифаһы бөркөүсе ҡөҙрәтле көс ул. Миләүшә Ҡаһарманова күпселек ҡатын-ҡыҙҙың үҙ ғаиләһенә бындай йылыны бирә алмауы менән бәйле мораль-этик проблеманы, мәҫәлән, «Күңелем йылы теләй» тип аталған хикәйәһендә күтәрә. Бында ғәзиз бала Ринаттың әсәһе төп героиня, ул үҙенең иренә лә, балаларына ла күңел йылыһы бирә алмай, матур биҙәнеп, эшенә бирелеп, үҙ-үҙен уйлап ҡына йөрөй. Уларҙың ғаилә тормошо үҙ яйына ҡуйылған, өйҙәрендә йәм юҡ, донъялары күңелһеҙ. Әсә наҙынан мәхрүм булған егет үҙенә тормошта нимә кәрәклеген дә аныҡ белмәй. Ә уның күңеленә бары тик әсә наҙы, ғаилә йылыһы ғына кәрәк булған. Шул йылыны ул Әмиләлә таба. Әмилә ябай ауыл ҡыҙы, автор уны заман ҡыҙҙарына тап килмәгәнсә итеп һүрәтләй, оялсан, көсһеҙ итеп тасуирлай. Хәҙерге заманда шул Әмилә һымаҡ ҡыҙҙар иң бәхетлеләрҙер. Улар көсһеҙ, яҡлауға мохтаж, ғаиләлә үҙ урындарында, ирҙәрен хөрмәт итәләр, балаларын да үҙҙәре ҡарайҙар, уларҙың хеҙмәтселәре лә юҡ, ашты үҙҙәре бешерә һ.б. Шундай ҡатын булған ғаиләләр иң бәхетлеһелер. Сөнки көсһеҙ затты һаҡлайһы, яҡлайһы килеп торалыр ул ир затына ла. Һәр ваҡыт тәмле аштар бешереп, таҙа, бөхтә өйҙә ирен көткән, уны хөрмәт иткән, йылмайып ҡаршы алған ҡатындың ғаиләһе бер ваҡытта ла тарҡалмай. Быныҡ менән ҡатын-ҡыҙҙар тик өйҙә генә ултырырға тейеш тип әйтмәйбеҙ. Һәр бер кешенең яратҡан һөнәре, шөғөлө булырға тейештер. Әммә шуларға алданып ғаиләне оноторға ярамай, ғаилә һәр ваҡыт беренсе урында булырға тейеш, тигән нығымта яһайбыҙ был әҫәрҙән.

«Тыума» хикәйәһендә лә хәҙерге көндә йыш осраған хәлдәр новеллистик планда уҡыусыны һиҫкәндереүсе, уны уйландырыусы сюжет боролмалары аша асып бирелә. Әсә һәм ҡыҙ араһындағы

мөнәсәбәттәр замана күренеше – ғаиләле ир һәм унан ауырға ҡалған ҡыҙҙың әсе яҙмышы типик хәл-ваҡиғалар эсендә һүрәтләнә. «Тыума» балаға бәйле ауыр хәл әсә кешене, Фәриҙәне лә, упҡынға тарта, уның күңел торошона ауыр тәҫьир итә. Ләкин оло кешеләр ярҙамы һәм кәңәштәре менән баланы һаҡлап ҡалалар һәм яңы тыуған сабыйҙың көләс тауышы өй эсен бәхет менән тултыра, яңы тормошҡа юл аса. Ошо нигеҙҙә героиняға әхлаҡи таҙалыҡ килә, баланы ташлау, уны балалар йортона биреү кеүек яңылыш аҙымдарға, ауыр гөнаһтарға юл ҡуйылмай.

М. Ҡаһарманованың төп оҫталығы – хикәйәлә ошо ябай ғына тормош күренешен психологик нигеҙҙә аса алыуында. Әҫәр тетрәндererлек итеп яҙылған, ул уҡыусыны мөһим әхлаҡи проблема – үҙ балаңды һаҡлап ҡалыу йәки уны йәтимлеккә дусар итмәү кеүек мәсьәләләр өҫтөндә туҡтауһыҙ уйландырырға мәжбүр итә. Әҫәрҙе уҡыған һәр ҡатын-ҡыҙға мөһим әхлаҡи идея еткерелә – донъяла ғәзиз баланан да ҡәҙерлерәк бер нәмә лә юҡ, уны үҫтереү һәм тәрбиәләү ҡатын-ҡыҙ иңендә ятҡан иң мөһим бурыс.

Миләүшә Ҡаһарманова хикәйәләренең мөһим бер үҙенсәлеге – уның төрлө тормош материалы менән эш итә белеүендә. Был юлда яҙыусы йыш ҡына ауыр Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына мөрәжәғәт итә һәм үҙ геройҙарының әхлаҡи йөҙөн асып, мөһим мораль-этик проблемалар күтәреп сыға.

Яҙыусының “Бире” хикәйәһенең үҙәгендә Зөһрә образы тора. Ауыр тыл тормошо, фронтовик һәм ҡатын-ҡыҙ, Бире Санъяр һәм Сәйфулла образдары күрһәтелә. Бире Санъяр менән район үҙәгенән ҡайтып барыусы Зөһрә ҡаты буранға эләгә. Бире булһа ла, ат егә белмәһә лә, бахыр, иҫен юйған Зөһрәне санаға һалып үҙе һөйрәп алып ҡайта. Ҡалтырап, янып, аяҡтарын һөйрәп саҡ килеп етә. Һыуыҡ тейә уға ла. Өләсәһе йәлләп өйҙәрендә алып ҡала, уны тәрбиәләй. Зөһрә лә эштән бушағанда эргәһенә килеп ултыра, тик һөйләшә алмай нишләптер, ауырыу, шуға йыр йырлай йәки әкиәт һөйләй ҙә китә. Аңлаймы-юҡмылыр – ҡарап ҡына ятып ҡала.

Хикәйәләге артабанғы ваҡиғалар уйламаҫтан, ҡапыл үҙгәреп китә. Зөһрәгә повестка килә Был яҡтан һуғышҡа алынған тәүге ҡыҙ булғас, уны бөтә ауыл оло шау менән оҙатып ҡала. Шул китеүенән өс ай санитарҙар курсын уҡып, ут эсенә инә. Нимә генә күрмәй, ниҙәр генә кисермәй ҡыҙ ошо юлда. Бер ҡаты бәрелеш мәлендә яу яланынан дәү кәүҙәле командирын һөйрәгәндә, көсө етмәй ергә ятып үкһегәндә лә. Биренең һүҙҙәрен иҫләй... Унан ауылына хат яҙа, яуап хатында Санъярҙың шул ятыуынан тора алмай вафат булыуы билдәле була...

Һуғыш бөтә. Күптән хаты килмәгән Ҡасимдың да ҡара ҡағыҙын алған туғандары. Ул Днепрҙы аша сығҡанда һыу төбөнә китә. Сәйфулла ла күптән башын һала, уға герой исеме биреп, орденын түшенә һалып ерләгәндәр, салют биргәндәр. Быларҙы бергә булған яуҙаштары яҙып ебәрә. Һуғыштың тәүге көҙө үк һәләк була ул. Ауылдаштары иҫәр ағаһын үҙҙәренә килгән хаттарҙы күрһәтеп әүрәтеп кенә йөрөткән. Ҡатындар йәшерергә тырышҡан, ә ул белгән. Ҡыуанып тыңлаған, таҡмаҡтарына ҡул сапҡан булған... үҙе барыһын уларҙан алда белеп торған.

Тағы ла бер-нисә йыл госпиталдә эшләгән Зөһрә, бер ҡулы һәм күҙен юғалтҡан фронтовикка эйәреп китеп, Кавказ тауҙары итәгендә ғүмер һөрә. Тыуған яғын һағынған йылы кистәрҙә ауылы, әсәһе, өләсәһе, әхирәт ҡыҙҙары менән бер рәттән Бирене лә иҫләй. Ул бит уның ҡәҙерле хәтирәләренең бер өлөшө, уны һаҡлап алып ҡалыусы. Шулай итеп, ауыр яҙмыш һынауҙарында өс ир һуғыш тип башын һала, берәүһе Зөһрәне – буласаҡ фронтовикты ҡотҡарып ҡала.

Хикәйәләрҙә тоғролоҡ һәм үҙ бурысыңды намыҫлы үтәү идеяһы данлыҡлы башҡорт атына арнап яҙылған «Керчь» хикәйәһендә лә асыла. “Керчь” хикәйәһендә М. Ҡаһарманова үҙенсәлекле теманы – башҡорт атының Бөйөк Ватан һуғышындағы ҡаһармандарса хеҙмәтен аса. Был ат тураһында бик күп мәғлүмәт билдәле, уның хөрмәтенә һәйкәл дә ҡуйылды, әммә уны художестволы әҙәбиәттә асыусы әҫәрҙәр юҡ ине.

М. Ҡаһарманова әҫәрҙә ат образын уның һуғышта үткән юлы аша һәм кешеләр хәтерләүҙәре нигеҙендә ышандырырлыҡ итеп күрһәтә. Керчтың нисек һуғышҡа әҙерләнеүе, яраланыуы, ветврач һәм зоотехник, яугирҙәр менән мөнәсәбәттәре – барыһы ла тәфсирләп һүрәтләнә. Шулай ҙа был хикәйә өҙөк-өҙөк итеп Керчь образын күҙ алдына баҫтырып, ат образын яңыса аса тип әйтеп булмай. Уға художестволы йәһәттән уйланыу, психологизм саралары күберәк кәрәк тигән фекерҙәбеҙ.

М. Ҡаһарманова әҫәрҙең аҙағында ғына Керчтың характерын асыуға өлгәшә, уның ғәйрәт холҡон күркәм эпизодта күрһәтә: «Уның һуңғы йылдарҙа үҫеп киткән ҡап-ҡара ялдары елдә туҙғыны, йыуан муйыны дәшһәтле дуғаланды, танауҙары ҡуржырап көҙгө һауаға пар бөрктө, ауыр кәүҙәһе бөтөн көс-көҙрәтен күрһәтеп мөлкөп, уйнап килде. Өйөр уға буйһоноуын белдереп, беренсе ауазынан уҡ ҡуҙғалып эйәрҙе. Улар уны ғәйрәтле, алыштырғыһыҙ, еңелеү белмәҫ башлыҡ итеп белә. Ә тәненең ике урынында мина ярсығы ышҡылып сәңкетеп барғанын һәм алғы аяҡ төбөндә яңылышыраҡ уңалған һөйәктең һыҙлауын… һәм төштәрҙә һаман да утлы атакаларға күтәрелеүен ул үҙе генә белә. Данлыҡлы толпар өйөрөн һыулауға әйҙәне» [1; 45-се бит].

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт прозаһында үҙ урынын тапҡан Миләүшә Ҡаһарманова ижадында мораль-этик проблемаларға ҙур урын бирелә. Уның әҫәрҙәрҙәрендә ғаилә, ир-ҡатын мөнәсәбәттәре, намыҫҡа тап төшөрмәү, үҙ бурысыңа тоғролоҡ кеүек әхлаҡи идеяларҙың өҫтөнлөк итеүен күрәбеҙ. Улар күпселек осраҡта ғаилә һәм кеше яҙмышы, ир һәм ҡатын мөнәсәбәттәренә бәйләнә, шулай уҡ һуғыш шарттарындағы гүзәл зат яҙмышы кеүек үҙенсәлекле темалар аша күтәрелә. Башҡорт прозаһының хикәйә жанрына хас булғанса, Миләүшә Ҡаһарманова әҫәрҙәрендә бер герой тирәләй әхлаҡи проблематика ҡороу алымы өҫтөнлөк итә, яҙыусы оло быуын әҙиптәре кеүек үк замана мәсьәләләрен асырға, мораль-этик проблематиканы киҫкен конфликттар аша асырға ынтыла.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ҡаһарманова М. Күңелем йылы теләй. Хикәйәләр. – Өфө: Китап, 2014. – 318 бит.

2. Ҡаһарманова М. Тыума (хикәйә) // Ағиҙел. – 2020. – № 10. – 21-33-сө бб.

3. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2002. – 287 бит.

© Ғәбделмәнова Н.Х., Янбаев И.К., 2023

УДК 821.512.141

Ғәлиева Д.И.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ ЗӨЛФИӘ ХАННАНОВА ИЖАДЫНДА НОВАТОРЛЫҠ ТРАДИЦИЯЛАРЫ

Башҡорт шиғриәте үҙенең тематик байлығы, жанрҙар төрлөлөгө, лирик геройҙың киң даирәне яулап тороуы менән дә үҙенсәлекле. Хәҙерге осор шиғриәтен байҡаһаң, уның быуаттар төпкөлөнән һуҙылған традицияларын күҙҙалларға мөмкин. Башҡорт шиғриәтендә айырым авторҙарҙың ижады ла иғтибарға лайыҡ.

Элек-электән башҡорт халҡы үҙенең ифрат бай поэтик ижады, эпос, ҡобайыр, бәйет, йыр кеүек шиғри жанрҙары, шуның оҫталары – йырау, сәсәндәре менән дан алып килгән булһа, хәҙерге башҡорт әҙәбиәте лә үҙенең жанрҙарға бай булыуы менән айырылып тора. Уның

бөтә илгә, хатта донъя күләменә таралған уңыштарына һоҡланып бөткөһөҙ.

Хәҙерге ваҡытта ҙур проза, драматургия ныҡ үҫеш алған хәлдә лә шиғриәт үҙенең алғырлығын, арбаусан ҡеүәһен һаҡлап ҡала. Шиғриәт – ул яңы әҙәбиәттең поэтик йылъяҙмаһы ла, күп тема һәм проблемаларҙы башлап йырлаусы ла, художестволы үҙләштереүсе һәм алға ҡыйыу ҡараш ташлаусы ла. Шағирҙарҙы юҡҡа ғына алдан күреүсе, башлап йырлаусы, алға ҡараусы тип әйтмәйҙәр бит. Башҡорт поэзияһында Зөлфиә Ханнановаңың ижади маһирлығы әҫәрҙәрҙе халыҡсанлыраҡ, милләткә яҡыныраҡ итә. Мәҫәлән, уның оран булып яңыраған шиғырына иғтибар итәйек. З. Ханнановаңың “Эй, башҡортом!” шиғырында милли үҙенсәлектәр урын алған:

Эй, башҡортом, кей түбәтәй!
Эй, башҡортом, әйт аҙан!
Ата-бабалар йолаһын
Тергеҙәйек ҡайтанан!

Дини тематикаға арналған шиғыр идеяһы ата-бабалар мираҫына тоғро булыу, илдең киләсәген ҡайғыртыу темаһы сағылыш тапҡан:

Эй, башҡортом, йәй намаҙлыҡ,
Теләк телә сәждәлә!
Ил-йортобоҙ тыныс булыр,
Урап үтер мең бәлә [2, 35].

Шағирәнең ауаздар яңғырауы менән ҡабатланып килә. Бында ил, тел, халыҡ төшөнсәләре аралашып килә.

Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн,
Ғәмһеҙҙәрҙең күңел ҡылын ҡаҡһын өсөн,
Үлән кеүек халҡым ҡабат ҡалҡһын өсөн
Тел ҡөҙрәтен бирсе, Хоҙай, халҡым өсөн,

З. Ханнанова – иленең ысын патриоты, шиғыр ҙа тел һәм ил проблемалары төрлө образдар менән бирелә.

Йөрәгемде яҡтырт. Хоҙай, халҡым өсөн,
Ҡараңғыла яҡты юлды тапһын өсөн,
Хаҡлыҡ эҙләп ул ҡояшҡа баҡһын өсөн,
Йөрәгемде яҡтырт. Хоҙай, халҡым өсөн [2, 93].

Шағирә ижадында мәҙәниәт социологик һәм антропологик күҙлектән ҡарағанда, кешелектең рухи ҡаҙаныштары, объектив һәм ваҡыт өҫтөндәге күренештәр йыйылмаһы булып тора, улар өҙлөкһөҙ һәм айырым шәхескә буйһонмаған традиция барлыҡҡа килтерә. Быуаттар

буйына йыйыла килгән хазиналар – халыҡ ижадында йырҙар, ҡобайырҙар төп өлгө булып тора.

З. Ханнанованың йыйынтыҡҡа исем биргән “Мин – башҡорт, тип танышығыҙ...” исемле шиғырында тел һәм ил проблемалары күтәрелә. Был халыҡ тарихын сағылдырған шиғыр юлдары шулай уҡ оран булараҡ яңғырай. Дәлил итеп әҫәрҙән бер өҙөк килтереп үтәйек:

...Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ.
Оноторға беҙҙе шулай хаҡлымы һеҙ?
Танымайбыҙ, ысын башҡорт халҡымы һеҙ?!
Яндырылған ауылдарҙың ялҡыны беҙ...

Был шиғыр юлдарында халыҡ тарихын бәйән итә. Шул ҡанлы тарихтың бер бите – 1736 йылдың 24 ғинуарында башҡорт халҡына ҡарата геноцид була, полковник Тевкелев Һөйәнтөҙ ауылын юҡ итергә бойороҡ бирә. Шул ваҡиғаларҙың шаһиты П.И. Рычков мәғлүмәттәре буйынса: «бер ауылда ҡатындары һәм балалары менән меңгә яҡын кеше атып үлтерелә, драгундарҙан штыктар менән сәнселә. Бынан тыш, йөҙ биш кеше бер амбарға алып кителә һәм ут менән яндырыла.

Шулай итеп, бөтә Һөйәнтөҙ ауылы халҡы ҡатындары һәм балалары менән бәләкәйҙән алып ҙурға тиклем бер төндән һуң ут һәм ҡоралдан һәләк була ә уларҙың торлаҡтары көлгә әйләнә. Һуңынан Тевкелев һәм полковник Мартыновтың язалау отрядтары Тағы Тевкелев 51 ауылды талай һәм яндыра, Себер даруғаһының Балыҡсы, Унлар, Ҡыр-Танып улустарының 2 меңдән ашыу кешеһен үлтерә (Хәҙерге Башҡортостандың Асҡын, Балтас, Ҡариҙел райондары биләмәләре). Был тарих ошо шиғыр юлдарында урын ала.

...Яндырылған ауылдарҙың һағышы беҙ.
Йәнебеҙҙе көлдән эҙләп табышығыҙ!
Беҙҙең алда таҙа булһын намыҫығыҙ:
“Беҙ бөтмәнек!
Мин – башҡорт!” – тип танышығыҙ! [2, 27]

Күренеүенсә, З. Ханнанова шиғырҙары риторик һорауҙар, мөрәжәғәттәр, өндәүҙәр менән тулы, бында авторҙың халҡы тип янып йәшәгәне, уның киләсәге өсөн борсолғаны асыҡ сағылған.

Аң булығыҙ!
Ни яҙһаң да,
Түҙә ҡағыҙ.
Торатауға, зинһар өсөн,
Ҡағылмағыҙ!

Был шиғыр юлдарында Торатау ваҡиғаһы һүрәтләнә. Республикала иң киҫкен конфликттарҙың береһе ҡуба. Башҡортостан сода компанияһы Торатауҙы үҙ ҡулына алырға теләй. Халыҡ уникаль тәбиғәт ҡомартҡыларын эшкәртеүгә бирергә теләмәй ҡаршы сыға:

Кем таларға бирә тыуған
Төйәктәрен?!
Ҡуҙғатмағыҙ әүлиәләр
Һөйәктәрен! [2, 129]

Шулай итеп, З. Ханнанова үҙенең уй-тойғоларын киң халыҡ массаһына тәьҫирле итеп еткереү өсөн шағирә шиғыр юлдарындағы ритмик быуындарҙың береһен үҙ аллы поэтик юл итеп бирә, шуның менән уҡыусының иғтибарын йүнәлттерә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 7 томда. Т. 7: Хәҙерге әҙәбиәт / Яуаплы ред.: Нәҙерғолов М.Х. – Өфө: Китап, 2019. – 800 бит.
2. Ханнанова З.М. Мин – башҡорт, тип танышығыҙ: шиғырҙар, поэма. Өфө: Китап, 2018. – 224 бит.
3. Әхмәтйәнов К.Ә. Шиғриәт иленә сәйәхәт. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1967. – 207 бит.
4. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1965. – 258 бит.
5. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Үҙгәрешле 3-сө баҫма. – Өфө: Китап, 2003. – 392 бит.

© Ғәлиева Д.И., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Ғәләүтдинов И.М.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ОҘОН-ОҘАҠ БАЛА САҠ” ПОВЕСЫНЫҢ ПОЭТИКАҺЫ

М. Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында персонаждың эске тормошоноң тышҡы сағылышын күрһәтеүсе деталдәр сылбыры икенсе пландағы герой - Сәмиғулла күңелендә барған тотош психологик процесты күҙ алдына баҫтыра. Был процесс геройҙың күреү, ҡабул итеүендә бирелә һәм уның да эмоциональ торошон сағылдыра. Хикәйәләү тукымаһының буйынан-буйына һибелгән йөҙ-ҡиәфәтен, хәл-хәрәкәтте, интонация үҙенсәлектәрен күрһәтеүсе деталдәр – “йөҙө көл

кеүек”, “аҡрын ғына башын күтәрҙе”, “Сәмиғулла, башын юғары сөйөп, ике тапҡыр йүткереп алды”, “ҡалтыранған тоноҡ тауыш” – хөкөм ителеүсенең рухи хәләтен сағылдыра.

Ҡоторонған, аҡты-ҡаранан айырмаҫ хәлгә еткән халыҡ төркөмөнөң ярһыуы көсәйгән һайын Сәмиғулланың да күңел торошо үҙгәрә бара. Ул инде ярлыҡауға өмөтөн өҙгән: “Сәмиғулла бөтөнләй битараф ҡиәфәттә баҫҡан да ҡатҡан. Уның башын ап-аҡ сал ҡаплаған: берәм-берәм генә төшкән ҡар бөртөктәре ни арала уның ҡара бөҙрәһен шулай һырып өлгөрҙө икән?” Был тәрән йөкмәткегә эйә сағыу деталь аша Сәмиғулла күңелендә барған кисерештәрҙең тотош бер ағымы бирелә. Төрлө художество саралары трагик сиселеш буласағы хаҡында һөйләй.

Уратып алған фон: “Икеһенең дә артында күгелйем күк сите” ҡот осҡос булып тамамланасаҡ ваҡиғаға ишара яһай. Психологик подтекст: “Һауала һирәк кенә елберҙәк ҡар бөртөктәре тирбәлә (иғтибар итегеҙ:шундай тын, матур картина. Г.Г.). Улар бүтән ергә төшмәй ҙә кеүек, бары тотҡондоң ҡара сәсенә генә ҡуна. Әгәр оҙаҡ ҡына шулай торһа, уның эйелгән башы салға әйләнәсәк” – шулай уҡ Сәмиғуллаға янаған ҡурҡыныс хаҡында иҫкәртә һымаҡ. Был деталдәр, штрихтар традицион тәртиптә үҫешеп, психологик көсөргәнешлек тыуҙыралар, уҡыусыны кисеректергеһеҙ хәлде тулҡынланып, эске борсолоу менән ҡабул итеүгә әҙерләйҙәр.

Традицион рәүештә аҡ төҫтәрҙе, бәхетте символлаштырыусы аҡ ҡар әҫәрҙә төрлө функция башҡара. Аҡ ҡар һәм Сәмиғулланың ап-аҡ, дөрөҫөрәге сал башы. Бындай йәнәшәлек хөкөм ителеүсенең күңел торошон нығыраҡ төҫмөрләтә. Ергә паклыҡ, сафлыҡ алып килеүсе аҡ ҡар һәм ошо фонда барған трагедия. Ап-аҡ ҡар өҫтөнә тамған Сәмиғулланың ҡып-ҡыҙыл ҡаны. Аҡ ҡар һәм үҙҙәренең ҡара эшен башҡарған яуыздар. Был деталь тәрән психологик мәғәнәгә эйә, уға эмоциональ, эстетик нагрузка һалынған.

Контраст контекста төрлө эпитеттар менән бәйле ҡулланылған деталь Сәмиғулла өҫтөнән яһалған хөкөмдөң фәжиғәһен тағы ла нығыраҡ тойомлата, трагик ваҡиғаны ҡабул итеүҙе киҫкенләштерә төшә, эмоционаллекте көсәйтә

Был эпизодта тағы ла бер характерлы деталь бар: “Сәмиғулланың һул яғында, алыҫта, сельсовет ҡыйығында елберҙәгән ҡыҙыл флаг күренә. Бер ҡарағанда, улар икәүһе лә йәнәш тора һымаҡ. Кеше ҡымшанмай, флаг талпына, ҡайҙалыр ашҡына”. Ҡыҙыл флаг һәм революцияға йәне-тәне менән бирелгән большевик – яҙыусы махсус рәүештә ошондай йәнәшәлек һайлай, уға идея йөкмәткеһе һала.

Сәмиғулла – Ташбулат тарафынан ҡотортолған, аҡылдарын юйған кешеләр төркөмө алдында. Ҡыҙыл флаг коммунист эргәһендә, уның яҙмышы өсөн өҙгөләнә, ҡотҡарып ҡалырға ашҡына. Ситуацияны психологик яҡтан үтемлерәк биреү маҡсатында конкрет йәнһеҙ әйбергә йәнле предмет сифаттары бирелә (йәғни йәнләндерелә).

Икенсе бер новеллала, инде күп ваҡиғалар үткәс, ауылда барған үҙгәрештәр, колхозлашыу тураһында хикәйәләү башында, яҙыусы һүҙ ыңғайында Сәмиғуллаға самосуд ойоштороған, уның үлеменә сәбәпсе булған Ташбулаттың ғәриплəнеүен телгә алып үтә: “Шулай ҙа яҙға табан Сәмиғулланың ҡәберенә үҙе яһап, бик матур рәшәткә ҡуйҙы. Ҡулы һөнәр белә икән,” – тип үҙенә бер мәғәнә һалып ҡуйыла. Бына шул тәү ҡарашҡа ҡәҙимге тормош ағышын һүрәтләүсе бер-ике ауыҙ һүҙ эсенән дә Ташбулат күңелендә барған психологик һынылышты, уның выждан ғазапланыуҙарынан интегеүен һиҙергә-тойомларға була.

Артабан да геройға тормоштоң күп фажиғәләрен күрергә, әсе һабаҡтар алырға тура килә. Ул ауыр һуғыш һынауҙары аша үтә, дошман менән аяуһыҙ алышта тормош позицияһы сыныға. Тормошто аңлау, йәшәйеш закондарын эстетик үҙләштереү, фекерләү инде тәрән философик уйланыуҙар менән тығыҙ үрелә.

Һуғышта алған ауыр йәрәхәттәрен дауалап больницала ятҡан герой эргәһенә ҡасандыр ҡанға туҙышып һуғышҡан балалыҡ дуҫы Хәмитйән килә һәм герой күңелендә тағы ла үткән бала саҡ хәтирәләрен уятып ебәрә. Повеста Хәмитйән тураһында һүҙ барғанда бер үк деталь йыш ҡына ҡабатлана - был Хәмитйәндең Кендек менән һуғышҡандан һуң күҙҙәрендә ҡатып ҡалған хәсрәт шәүләһе.

Түшәктә ятҡанда уны һаҡлап нигеҙ ташында ултырған Хәмитйәндең герой тәүҙә бойоҡ ҡара күҙҙәрендәге ҡайғыны күреп, сыҙай алмай, башын бора. Күп йылдар үткәс, герой үҙен больницала килеп тапҡан Хәмитйәндең шул уҡ күҙҙәрен шәйләй: “миңә үтә таныш моңһоу күҙҙәр ҡарай, тилмереп, ялбарып ҡарай”, “баяғыса уҡ хәсрәт һәм хәүеф тулы күҙҙәрен миңә төбәне”. Был психологик деталь, яңынан-яңы үткерерәк буяу-төҫмөрҙәрҙә ҡулланылып – Хәмитйәндең йөрәк өҙгөс әсенеүле, әрнеүле тауышы, үкенесле бала саҡ иҫәрлеге хаҡында һөйләгәндеге өҙөк-өҙөк, өндәүҙәргә тулы телмәре – тулылана барып, шул уҡ художество мәсьәләһенә хеҙмәт итә. Градация тәртибендә урынлаштырылған психологик деталдәр: “бәһлеүән кинәт кенә бөршәйеп, бәп-бәләкәс булып ҡалды ла минең түшәгем янына килеп тубыҡланды”, “быуылып иларға кереште”, “йөрәк өҙгөс әрнеүле тауыш менән әйтте” – уның психологик торошон тулыландыра, сағыуыраҡ

һыҙатландыра төшәләр. Был эпизод дуҫлыҡ, тоғролоҡ тойғоларының бөйөкләгән , гүзәллеген раҫлауы менән әһәмиәтле лә.

Хәмитйәндең үлем хәбәре геройҙа ике төрлө хәсрәт уята. Беренсеһе – балалыҡ дуҫын, ғәжәйеп ҡорҙашын юғалтыуҙан тыуған әрнеү хисе булһа, икенсеһе иһә, Хәмитйәндең дуҫында йәшәүгә өмөт ҡабыҙыу ниәте менән һөйләп ҡалдырған йыназа тарихын (геройҙың үҙенең үлем тарихын) ишетеүҙән тыуған выждан ғазабы.

Әҙәбиәт исемлеге:

Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаһында оҫталыҡ мәсьәләләре: юғары уҡыу йорттары өсөн уҡыу әсбабы. – Өфө: БашДУ, 1996. – 128 б.

© Ғәләүтдинов И.М., Гәрәева Г.Н.,2023

УДК 821.512.141

Давлятгареева Х.И.,
5 курс, ФБФВиЖ, УУНиТ
Исянгулова Г.А.,
докт. филол. наук, проф.

ОСОБЕННОСТИ ИЗУЧЕНИЯ ТВОРЧЕСТВА ПИСТЕЛЯ НА УРОКАХ БАШКИРСКОЙ ЛИТЕРАТУРЫ (НА ПРИМЕРЕ ТВОРЧЕСТВА Р. БИКБАЕВА)

В V – VIII классах перед изучением каждого нового произведения важное требование программы – знакомство детей с его автором. Тесная связь между жизнью писателя и произведением прослеживается через биографический материал.

Изучение биографии писателя в школе имеет особенности в V–VIII и старших классах, до VIII класса биографические справки обычно не даются полно, например, на изучение биографии и произведений Р. Бикбаева в программе предусмотрено очень мало часов. В старших классах биографию писателя можно изучать двумя способами: а) на первом же уроке полную биографию писателя рассказывает сам учитель или один-два ученика выступают с докладами, на этом изучение биографии заканчивается, далее продолжается изучение его произведений; б) поэтапное изучение жизни литератора, связанное с развитием и формированием его творчества [3;64]. Например, жизнь и творчество Равиля Бикбаева можно изучить по следующему плану:

Жизнь и творчество Р. Бикбаева (1938 – 2019).

Здесь представлена биография и литературная деятельность писателя. Как бы ни изучалась биография, уроки призваны раскрыть

личностный облик писателя, его жизненную позицию борца за великие идеалы.

Великий русский драматург А.Н. Островский о влиянии писателя на читателя писал: “первая заслуга великого писателя состоит в том, что благодаря ему умудряется все, что может быть разумным. Кроме формул наслаждения, выражения мыслей и чувств, поэт дает собственные формулы мыслей и мыслей. Вот почему каждое его произведение ожидается с таким нетерпением. Поскольку у каждого человека есть желание мыслить и чувствовать высоко вместе с писателем, он ожидает, что вот-вот он скажет мне что-то прекрасное, новое, чего у меня нет, чего мне не хватает, но то, что он скажет, сразу же станет моим” [2; 199].

Поэтому, когда читатель интересуется не только произведением писателя, но и его личностью, его работой, мыслями, жизнью, переживаниями, чувствами, он старается следовать, изучать. По словам Л.Н. Толстого, у читателя может возникнуть вопрос, что это за человек. Поэтому к изучению биографии писателя следует отнести не только усвоение фактов, сведений о его жизни и творчестве, но и оценку роли писателя как общественного деятеля, мастера слова, человека сцены, его личности, связи с эпохой, в которой он жил, развитием творчества, мировоззрения, вкладом в общественную жизнь, развитие литературы и место в литературном процессе.

Черты, присущие личности писателя, служат образцом для воспитания нравственных качеств читателей.

В процессе изучения биографичесокго материала писатель исследует жизнь во имя судьбы Родины, народа, борьбы за свободу, справедливость и т.д. Особое внимание нужно уделять положительным качествам.

Для понимания мировоззрения писателя важно показать отраженное им в своих произведениях отношение к картинам жизни, героям, что он утверждает, что отрицает.

При изучении жизненного пути писателей мы считаем целесообразным использовать различные дидактические материалы и дополнительную литературу. Это фонозаписи, плакаты, воспоминания, мемуарная литература, юбилейные материалы, опубликованные в печати и т.д.

Изучение жизненного и творческого пути писателя в старших классах занимает важное место в системе образования и воспитания. Потому что В.Г. Белинский утверждает: “представление жизни великого

человека всегда прекрасное. Она высоко поднимает дух, пробуждает активность".

Р. Бикбаев – мастер поэзии. У всех времен были, есть и будут свои личности. Народный поэт Башкортостана Равиль Бикбаев – один из немногих поэтов в башкирской поэзии, отличающихся поэтическим голосом, лирическим напевом. Его поэзия полна душевного наполнения, наполнена внутренним духом. Поэт поэтизирует разные ситуации в мире, радости и печали людей, пронизывая их через свое сердце, проникаясь их чувствами и чувствами.

Стихотворение "Вокзал" полюбили и выучили наизусть не одно поколение, оно несет в себе заряд бодрости духа.

[Вокзал] ты ведь и героя, и вора
Будешь в одном зале,
В одних и тех же вагонах проводишь
Когда они отправились в путь.

Биографию писателя необходимо обобщать путем сопоставления сходств, различий в прошлом, данных о его детстве, учебе, жизненном пути.

Творчество Р. Бикбаева подняло башкирскую поэзию на новую ступень, сыграло большую роль в процессе ее возрождения. Поэт жил в соответствии с требованиями своего времени, сумел найти новые формы, художественные средства, отвечающие новой эпохе, и оставался неотъемлемой частью его светлого духа.

При изучении творчества писателя в литературе мы исходим из историко-хронологического принципа, то есть, когда речь идет о каком-либо веке, периоде по хронологии, сначала даем характеристику самому периоду, а затем отдельным этапам творчества писателя. После этого последовательно изучаем его программные произведения. В старших классах анализ литературного произведения проводится в тесной связи с исторической эпохой, местом писателя в своей эпохе. Конкретное произведение изучается на фоне творчества писателя в целом, акцентируется внимание на чертах, отражающих его сознание, мысли. Еще будучи учеником, Р. Бикбаев интересовался художественной литературой, пробовал писать стихи. Затем, в студенческие годы, еще более серьезно взялся за эту работу и в 1962 году в журнале "Агидель" была опубликована его первая поэма "Вокзал". А в 1964 году активизировалась его писательская деятельность. В 1964 году он выпустил первую книгу стихов "Степные горизонты". В поэзии Равиля Бикбаева поднимаются проблемы, связанные с судьбой народа, речь

идет об ответственности перед временем, страной, народом, будущим: “Караван-сарай”, “Базарный топор”. Особенно ярко это проявляется в поэме “Письмо моему народу”.

Список литературы:

1. Белинский В.Г. Избранные педагогические сочинения. – М., 1948..

2. Бикбаев Р. Дала офоҡтары. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. – 76 б.

3. Ғафаров Б.Б. Әҙәбиәт укыытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2008.

© Давлятгареева Х.И., Исянгулова Г.А., 2023

УДК 821.512.141

Дәүләтгәрәева Х.И.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

Р. БИКБАЕВ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ҺҮРӘТЛӘҮ САРАЛАРЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Р. Бикбаевтың ижады идея-тематик йөкмәткеһе, проблематикаһы, стиль үҙенсәлектәре менән айырылып тора. Шағир хәҙерге замандың актуаль проблемаларын күтәрәүҙә ҡабатланмаҫ образдар тыуҙыра, уларҙы үҙенсәлекле һүрәтләү саралары аша аса. Уның ижадында ассоциатив һүрәтләү саралары айырыуса күп һәм улар әҙиптең ижади йөҙөн асыҡ билдәләй.

Р. Бикбаевтың шиғыр һәм поэмаларында сағыштырыуҙарҙың бөтә төрҙәренә тиерлек сағыу миҫалдар табып була. Үҙенең “Уралыма” тип исемләнгән шиғырында, мәҫәлән, шағир Уралды ҡылысҡа оҡшатыуы тураһында туранан-тура еткерә:

Таш һыныңды, Урал, оҡшатамын
Ҡандан ҡынға кергән ҡылысҡа.

Р. Бикбаевтың әҫәрҙәрендә сағыштырыуҙың “кеүек”, “һымаҡ”, “шикелле”, “гүйә”, “әйтерһең дә”, “булып”, “төҫлө”, “ише” һүҙҙәре ярҙамында ҡоролған төрөн күпләп осратырға була:

Ҡолон кеүек ямғыр йүгереп үтте,
Туп-туп баҫып көмөш тояғын. (“Ҡолон кеүек ямғыр йүгереп үтте”).
Аҡ халатлы ҡыҙҙың ирендәре
Яңы ғына һауған һөт һымаҡ.(“Ҡасмағыҙсы, төн пәрҙәһен ябынып...”).

Р. Бикбаев ижадында синонимдарға ла миҫалдар бик күп. Мәҫәлән, шағирҙың “Архивариус” исемле шиғырында архивтарҙа һаҡланған тарихтың төрлө булыуын автор синонимдар аша һүрәтләй:

Түккән йәштәр, ҡойған ҡандар бында,
Туҡтамаҫтан дауыл, ғәрәсәт.
Хаҡтың нахаҡ менән алышҡаны,
Мәңге хәрәкәт.

Р. Бикбаевтың “Шатлыҡ – йылғыр алтын балыҡ” тип башланған шиғырында шатлыҡ хисенең һағыш менән бергә йөрөүе, уларҙың диалектик берлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына һәм антонимдар аша еткерелә:

Шатлыҡ – йылғыр алтын балыҡ,
Һағыш эсендә йөҙә.
Бер яҡты минутым өсөн
Көндәр, айҙарҙы һөҙәм.

Һағыш йылғаһында йөҙгән шатлыҡ бер балыҡ ҙурлығында ғына булып сыға. Әммә уның ҡәҙере шуға күрә лә бик юғары.

Шағирҙың “Үлем – аяуһыҙ...” тип башланған шиғырында ла ҡатмарлы фәлсәфәүи уйҙары антонимдар аша еткерелгән. Әҫәр үлемдең тәбиғәт айышын һүрәтләү менән башлана: ул аяуһыҙ, уның ҡағылыуы менән бөтә тереклек һулый, үлә, юғала. Әммә ерҙә Йәшәү ҙә ерҙә бар: ул “емеректәрҙе тигеҙләй ҙә ялан ерҙә нигеҙ ҡора”. Был ике мәңгелек төшөнсәне автор йәнәшә ҡуя һәм шул рәүешле уларҙың ҡатмарлы бәйләнешен аса:

Үлем менән йәшәү шулай
Айырылғыһыҙ тора һаҡта.
Әллә бишек булыр микән,
Әллә табут булыр микән
Бынау таҡта?

Был юлдарҙа “бишек” һәм “табут” һүҙҙәре – контекстуаль антонимдар. Береһе йәшәү символы булһа, икенсеһе – үлем билдәһе.

Шағир үҙенең әҫәрҙәрендә һүҙҙәрҙең мәғәнәһен оҫта “уйната”. Оҡшаш яңғыраған төрлө мәғәнәле һүҙҙәрҙе ҡулланыу аша теге йәки был күренешкә уҡыусының иғтибарын йүнәлтә. Мәҫәлән, “Биҙмәһендәр минән хыялдарым...” тип башланған шиғырында “биҙеү” һәм “биҙәү” һүҙҙәре бергә ҡулланыла. Кеше ниндәй күренештәрҙән биҙергә һәм ниндәй ҡылыҡтар менән йәшәүен биҙәргә тейешлеге тураһында фәлсәфәүи фекер йөрөтә автор:

Тәҙрәләргә яҡты һирпеп үтһен
Һәр бер көнө аҫыл ғүмерҙең.

Кеше ерҙән биҙер өсөн түгел,
Биҙәр өсөн тыуа был ерҙе.

Р. Бикбаев шиғырҙарында архаизмдар ҙа осрай. Уның “Йәшертелгән дала” исемле шиғырында архаизмдарҙың стилистик төрө ҡулланылған:

Беҙҙең быуын кулак обрезынан
Атыла-атыла колхоз ҡорманы,
Күкрәк менән ятып ҡапламаны
Үлем сәсеп торған торбаны.

Был әҫәрҙә шағир хеҙмәт менән биҙәлгән тыныс ирекле тормошто аяуһыҙ көрәш-алыш барған осор менән сағыштыра. Шағир контраст тыуҙырыу маҡсатында ҡткән осорҙарҙың дәһшәтле күренештәрен сағылдырған төшөнсәләр менән эш итә, әҫәргә шул заман рухын биреү өсөн ул саҡтарҙа актив ҡулланылышта булған архаимздарҙы ҡуллана.

Р. Бикбаевтың “Ҡаруанһарай” поэмаһында ла тарихи ваҡиғаларға бәйле һүҙҙәр осрай. Автор туған халҡының ауыр тарихи үткәненә байҡау яһай:

Ҡуш ҡул булып, һине быуған саҡта
Рус батшаһы, башҡорт тарханы
Был донъяның ниндәй мөғжизәһе
Һине һәләкәттән һаҡланы?

Р. Бикбаевтың ижадында неологизмдар – һирәк күренеш. Шулай ҙа стилистик неологизмдарға, йәғни шағир ижадында ғына осраған неологизмдарға миҫалдар байтаҡ. Мәҫәлән, уның “Илбаҫармы яманыраҡ...” тип башланған шиғырында илен, тыуған ерен һатҡан кешене атыу өсөн автор, “илбаҫар” һүҙенә оҡшатып, “илһатар” һүҙен ҡуллана:

Илбаҫармы яманыраҡ,
Яманыраҡмы илһатар?
Илбаҫарҙы таныуы еңел:
Дәһшәт булып сикте вата.
Илһатарҙы танып ҡара:
Ил ҡуйынында йылынып ята!

Варваризмдарға миҫалдар Р. Бикбаев әҫәрҙәрендә юҡ тиерлек. Был һүрәтләү сараһына бер генә миҫалды күрһәтеп китергә була:

Бәхет эҙләп рус мужигы килгән
Бар байлығын тейәп бер атҡа.

Әҫәрҙең йөкмәткеһе буйынса лирик герой вокзалда халҡының тарихи үткәне, хәҙергеһе һәм киләсәге тураһында уйҙарға сума. Шулар

араһынан вокзал һүҙенә бәйле һәм тимер юлы өлкәһенә ҡараған лексиканы айырып ҡарарға булыр ине. Мәҫәлән, вагон (“Һин күргәнһең вагон-вагон булып, Ағылып байлыҡ киткәнен Уралдан”), состав (“Составтарҙа минең яҡтарыма Вагон һайын килгән ҡот тулып”), шпал (“Ул саҡ нәфрәт, йөрәктәргә һыймай, Шпалдарға барған түгелеп”), тимер юлы (“Атай киткән юлдан ҡустымды ла Алып китә тимер юлдары”), поезд (“Ошо урында мин һүҙемде бүләм: Ана поезд килеп туҡтаған”), перрон (“Перрон буйлап бер ҡыҙ йүгереп килә, Өмөт менән тулған күҙҙәре”), стрелочница, рельстар (“Стрелочница булып, йәйен-ҡышын Поездарҙы оҙатып торғанға, Кешеләрҙең именлеген һаҡлап, Кәрәк рельсҡа борғанға”).

Шулай итеп, Р. Бикбаев әҫәрҙәрендә һүҙҙәрҙе урынлы һәм тапҡыр һайлауға ҙур иғтибар бирә. Һүҙҙәрҙе дөрөҫ һайлау уның әҫәрҙәренең художестволылығын күтәрә, әйтергә теләгән фекерен үтемле итә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Бикбаев Р. Берҙәмлектә – беҙҙең көсөбөҙ // Ағиҙел. – № 10. – 2003. – 124-130-сы бб.

2. Бикбаев Р. Бураҙналар. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1985. – 224 б.

3. Бикбаев Р. Дала офоҡтары. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1964. – 76 б.

4. Бикбаев Р. Ерем балҡышы. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1982. – 320 б.

© Дәүләтгәрәева Х.И., Гәрәева Г.Н., 2023

UDC 811.111-26

Jorayeva Z.K.,
The teacher of English, TSPI named after S.Seydi
Turkmenabat, Lebap Province,Turkmenistan

RHETORICAL QUESTIONS-RESPONSES IN DIALOGUES (IN ENGLISH FICTION TEXTS)

The rhetorical question is a special syntactical stylistic device the essence of which consists in reshaping the grammatical meaning of the interrogative sentence. In other words, the question is no longer a question but a statement expressed in the form of an interrogative sentence. Thus there is an interplay of two structural meanings: 1) that of the question and 2) that of the statement (either affirmative or negative). Both are materialized simultaneously. [7:244].

Since Rhetorical questions as an indirect speech act has no function of requesting information it may acquire any meaning that the speaker needs to express in particular situation in the course of communication. For example, "Why are you so stupid?" is likely to be a statement regarding one's opinion about the person addressed rather than a genuine inquiry. Similarly, when someone responds to a tragic event by saying, "Why me?!" it is more likely to be an accusation or an expression of feeling than a realistic request for information.

Rhetorical questions are very often used in dialogues as responses to the previous remarks, statements, questions, offers etc. Rhetorical questions-responses are mostly used as a means of avoiding the direct answer to the previous question/remark because it may seem inadequate or inappropriate to the speaker. It already implies an answer and helps involve the reader (listener) into the conversation.

"You think I'm just a bimbo?"

"What else are you?" [10:166].

The main function of rhetorical question is to attract attention, produce strong impression and raise emotional level. When the speaker addresses the interlocutor with Rhetorical questions he/she is not expecting any answer (because he/she either knows the answer beforehand or is convinced that no answer can be given, at least at the moment).

1.1. Rhetorical questions-responses as a means of expressing agreement/disagreement

Rhetorical questions-responses can be used to express agreement or disagreement with a preceding statement. Under agreement we understand positive reaction of an interlocutor towards the initial statement. This reaction consists in the affirmative answer, agreement to take a particular action or positive assessment of intentions or views of the speaker. Pragmatic function of agreement can be realized with the help of the word "yes" (which is the marker of agreement) and its equivalents (of course, sure etc) if their use in the sentence does not change its semantic structure [1:77].

In some dialogues agreement realized by Rhetorical questions-responses show how obvious the requested information is:

"Didyou see they were chasing him?"

"Why would I not see?" Pablo said. [8:125].

The answer can be expressed by a positive statement "There's no reason why I wouldn't see they were chasing him".

In Rhetorical questions-responses negation can be expressed by lexical means.

"Is it true, Pilar?" he asked me.

"Did I ever lie to you?" I told him. [8: 161].

An affirmative statement for this Rhetorical questions-responses will be: I never lied to you.

Or, for example:

"You must have had your share of troubles."

"Sure, dear. What businesses doesn't? " [5:18] - meaning "Every business has troubles".

In some dialogues Rhetorical questions-responses which doesn't contain negation can be a negative answer to a negative question:

"You didn't like her?"

"Could you expect me to?" [3:363].

So the speaker agrees with his interlocutor: "No, I didn't like her and you couldn't expect me to".

Let's take a look at the following example:

"If I'd only known..."

"How should you know?" [2: 204].

The initial statement in the dialogue is realized as a part of a compound sentence with 3-d conditional (unreal condition in the past) and can be expressed by

a statement: You should not know. The positive form of the Rhetorical questions-responses which forms the answer implies the negative statement and therefore agreement with the interlocutor.

In the following example Rhetorical questions-responses express agreement not to take a particular action:

"No smoking with Allison in the car, right?"

"Do you see me or Allison smoking?" [9:15].

The indirect affirmative statement for this Rhetorical questions-responses will be: You do not see me or Allison smoking.

1.2. Rhetorical questions-responses as a means of emotional expressiveness

A wide range of emotional reactions can be expressed with the help of Rhetorical questions-responses: agreement, disagreement, doubt, support, hesitation. Rhetorical questions-responses express such emotions as anger, mistrust, surprise, interest, fear, annoyance, reproach, offence etc. For example:

Surprise

"And how will dear Irene like living in the country?"

"Of course she'll like it; why shouldn't she? "

Mrs. Small grew nervous. [6:110]

Disdain

"I'llgo with uncle Swithin."

"Uncle Swithin! What does he matter? You can throw him over!"

"I am not in the habit of throwing people over!" [6:164].

Annoyance

"I couldn't get home last evening," she said.

"Ah, Carrie," he answered, "What's the use saying that? I don't care. You needn't tell me that,

though." [4: 261]

Rhetorical questions-responses might acquire different roles which always vary according to the given situation, theme of the dialogue, emotional background of the members of the conversation, their knowledge, communicative intentions and aims.

Literature:

1. Belokolotskaya S.A. Rhetorical questions in fiction literature. – Voronezh: 2004. – p. 77

2. Christie A. Death on the Nile. -Moscow: Manager, 2004. – p. 204

3. Christie A. Towards zero. -Fontana/Collins: 1990. – p. 363

© Jorayeva Z.K., 2023

UDC 82.09

Jumayeva B.A.,

Senior teacher of the department of Romano-Germanic languages and literature with methods of their teaching of Seyitnazar Seydi Turkmen State Pedagogical Institute,

city Turkmenabat, Turkmenistan

AN EMPIRICAL APPROACH TO TEACHING LITERATURE

An important aspect of methodology is the development of teaching routines, materials and tasks for use in the classroom. In this article we look at the growing body of literature on language learning and use by both first and second language learners which can be drawn on by methodologists in the process of formulating principles for the design of classroom materials and learning tasks.

In terms of language processing, it is now generally accepted that learners need access to both top-down as well as bottom-up processing

strategies. Bottom-up processing strategies focus learners on the individual components of spoken and written messages, that is, the phonemes, graphemes, individual words and grammatical elements which need to be comprehended in order to understand these messages. Top-down processing strategies, on the other hand, focus learners on macro-features of text such as the writer's or speaker's purpose, the topic of the message, the overall structure of the text and so on.

The importance of interactive approaches to second language reading has been demonstrated in a growing body of empirical research. Nunan (1985), for example, found that the lack of appropriate background knowledge was a more significant factor in the ability of second language learners to comprehend school texts than linguistic complexity as measured by various readability formulae. Carrell *et al.* (1988) also contains a wealth of data on the significance of interactive models of reading for second language reading programs.

It is worth noting that for most of its history, language teaching has focused on written language. With a few exceptions, it is only comparatively recently that the focus has turned to spoken language. Interest in spoken language was kindled, among other things, by the development of tape recorders which made it possible for researchers to record, transcribe and study in detail oral interactions between people. This research highlighted some of the contrasts between spoken and written language. [1, p.5]

An area of increasing significance to language teaching methodology is that of learning strategies, and there has been a marked increase in recent years in research into the learning strategy preferences of second and foreign language learners. [3, p.2]

First of all, we need to know about significance of Literature in our life.

What is Literature?

Why do we need to learn literature?

Literature is an art of words. By expressing events that have taken place or are going on in life through artistic language, it reveals human qualities and expresses people's lives, thoughts, wants and desires. By doing so, it helps a person to understand his own nature, to mind his good and bad sides, to believe his strength and possibilities. It aids to the formation of good traits and development in human beings. Actually, the main function of artistic literature is to understand nature and human beauty in human beings, loving

that beauty and bringing up feeling of protecting, it gives them noble upbringing by influencing people's minds and feelings.

The main character of the artistic work interacts with the people around him, at the same time with his personal ideas makes serious efforts to realize socially beneficial ideas. These general efforts include Motherland and patriotism upbringing. Numerous works have been written in World Literature, including Turkmen Literature, raising issues of national interest, such as loving the Motherland, protecting it from external enemies, striving for the country's prestige political and economic prosperity. An example of those works and the example of the characters in them serve as a source of patriotic upbringing.

Humanitarian literature has always been concerned about the purity and stability of human morality. Almost all the artistic images created by the writers and poets have raised moral issues.

The word "Edebiýat" (Literature) of Turkmen people is derived from the word "Edep" (Etiquette), which means its main function.

One of the main functions of the word of art is upbringing young people and efforts to bring up generations into leading people. People who conduct themselves with good upbringing in their life and social life are admired and respected by all people. Accordingly, exemplary characters of artistic literature, first of all, seduce readers with their good breeding manners and become beloved characters of young people (youths). All genres of artistic literature advance not on a specific issue, but on all areas of life. Each theme has decency (upbringing) ideals. All genres of artistic literature must advance upbringing. Literary work that does not fulfill this function is not supported by the public.

Since literature is a word of art, it makes one of its main tasks to educate people to feel beauty and feelings to be able to love beauty. Along with the human life, through the skillful use of artistic means by describing the artistic images of nature, animal world, lands, etc. and the inner world of the characters, it brings to life different types of beauty and affects the minds and feelings of the readers aesthetically and emotionally. The poet's creating the lines of poetry harmoniously and the writer's making up the sentence style play a major role in arousing aesthetic feelings in the reader. Literacy, culture, and spiritual wealth of writers and poets are a source of aesthetic upbringing for readers.

The works of Andalyp, Azady, Shabende, Magtymguly, Gayyby, Kemine, Seydi, Zelili, Mollanepes, Mataji, Misgingylych and other prominent poets gained great popularity among the people with their wisdom

ideas in content and form. Their works reflect the social relations of the time, the daily life of the hard-working people, their struggles and desires for independence and freedom. In the example of folk heroes, advices such as courage, bravery and love for the country are advanced. Thoughts about the world and life along with issues such as love, lyrics, patriotism, moral purity, social inequality are the focus of our classical poets. The works of the Turkmen poets of the 18th-19th centuries serve as an excellent example from an artistic point of view, in showing the example of blessing the good and condemning the bad.

Through the immortal works of our Turkmen classical poets, we closely study the past life and history of our people. By educating the reader spiritually, literature teaches people how to live, how to work hard, how to fight, and inspires them to achieve new successes in life. Turkmen Literature fulfills the task of educating high morals in people.

By interactive ways of teaching literature, we can use different methods such as:

- Using video;
- Listening to audio materials;
- Online communication;
- Using presentations and other ways. [2, p.3]

The important features of using these ways of teaching method to increase students' interest in learning literature in the classroom are:

- this method provides students with a lot of educational information specific to the literature;

- it is possible to achieve students' ability to use modern multimedia devices and new technologies;

- students are introduced to the real sample of the English language through these methods by using digital learning tools, they have the opportunity to compare their conversations with it, correct their mistakes, they have the ability to listen and understand the conversations of strangers, including children and adults, men and women and develop their skills;

- helps for improving of students' creative thinking;

- improves the quality of education provided to young people;

- increases students' motivation and interest in language learning;

- ensures that students take effective educational work;

- helps to teach the selection of appropriate methods of using information resources;

- students can do various online tests and check the results of their work at the same time.

Literature:
1. David Nunan. Language Teaching Methodology. Macquarie University, 1991.
2. http://www.researchgate.net
3. http://www.teachthoght.com

© Jumayeva B.A., 2023

УДК 821.512.141

Зарипова А.З.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

БАШҠОРТ ТЫЛСЫМЛЫ ӘКИӘТТӘРЕНЕҢ ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ

Башҡорт халыҡ ижадының әкиәт жанры – фольклорбыҙҙың күркәм өлгөһө, ул балаларҙы ла, ололарҙы ла күп быуаттар ҡыуандырып, үҙенең тылсымлы теле менән һоҡландырып килә. Әкиәт жанрының иң матур өлгөләре уның тылсымлы жанр төрөндә һаҡланған. Тик ошондай әкиәтттәрҙә генә беҙ уларға хас ысын тылсымлы донъя, сихри заттар, геройҙар менән осрашабыҙ, эргә-тирәләге донъяның сикһеҙ матурлығын һәм юғары көстәргә байлығын тоябыҙ.

Шуға ла беҙҙе тылсымлы әкиәттәрҙең образдары бик ҡыҙыҡһындыра. Бындай төр әкиәттәрҙе күренекле ғалимдар М.Ғ. Минһажетдинов, Г.Р. Хөсәйенова, Ә.М. Сөләймәнов, Л.В. Бараг һәм башҡалар төплө өйрәнһә лә, тылсымлы әкиәттәрҙең образдарының сығанаҡтары һаман да өйрәнелә барырға тейеш тип уйлайбыҙ.

Тылсымлы әкиәттәрҙә геройҙың үҙенең таҫыллығы, активлығы түгел, ә уға ярҙам итеүсе тылсым эйәләре, мөғжизәле хәлдәр алғы планда һүрәтләнә, тылсым идеаллаштырыла. Тылсым иһә, берҙән, сюжет үҫешендә дөйөм мифологик фон, әкиәт донъяһының сихри күренештәре, икенсенән, төп геройҙың үҙ характерына, тәбиғәтенә бәйле сифат булып тора [2, 22]. Әкиәттәрҙә тылсым көсө күбеһенсә хайуандарҙа, ҡоштарҙа һәм төрлө әйберҙәрҙә күрһәтелә.

Әкиәт батырына тимер-күк, һары, ҡола аттар ҙа, алтмыш ҡолас ала бейә лә, ҡанатлы толпар ҙа, күгәрсен дә, турғай ҙа, ябалаҡ та, алтын ҡош та ярҙамға килә. Мейес, көршәк, ишек, ҡаҙан, уҡ, һаҙаҡ, һөңгө, мылтыҡ кеүек тылсымлы әйберҙәр уға хеҙмәт итә. Һыйыр, һарыҡ, кәзә, ат кеүек йорт хайуандары ла уға булышалар. Тылсым ярҙамында герой һәр бер теләгенә ирешә, теләгән еренә барып етә, теләгән ҡиәфәткә инә ала.

Тылсымлы әкиәттәрҙә фантастика башҡа төрҙәрҙең бөтәһенә ҡарағанда ла ҙурыраҡ урын ала. Уларҙа аждаһа, дейеү, мәскәй кеүек төрлө мифик заттарҙы, көҙгө, тараҡ, ашъяулыҡ, бүрек, итек, таяҡ кеүек тылсымлы әйберҙәрҙе, осҡос балаҫтарҙы, ҡанатлы толпарҙарҙы, кешесә һөйләшер ат, эт, бесәй һәм башҡа бик күп тылсымлы хайуандарҙы осратырға мөмкин.

Тылсымлы әкиәттәрҙә боронғо кешеләрҙең төрлө ышаныуҙарына, анимистик һәм тотемистик ҡараштарына бәйләнешле күренештәр менән хәл-ваҡиғалар ҙа киң генә урын ала. Мифологик ҡараштар һәм ышаныуҙар әкиәттәрҙә үҙҙәренең тура мәғәнәләрендә түгел, ә яңы сифатта, фантастик уйҙырма һәм мөғжизә сығанағы булараҡ сағылалар. Дейеү, аждаһа, убырлы ҡарсыҡ кеүек яуыз көстәр ҙә үҙҙәренең иң тәүге мәғәнәләрендә (тәбиғәт күренештәренең боронғо кеше аңындағы сағылышы рәүешендә) түгел, бәлки хакимлыҡ итеүсе социаль көстәрҙең фантастик кәүҙәләнеше булараҡ сығыш яһайҙар [3, 97].

Тылсымлы әкиәттәр, тулайым алғанда, изгелек менән яуызлыҡ көрәшен күрһәтәләр. Төп герой булып күбеһенсә бер бабай менән бер әбейҙең йә яңғыҙ улы, йә өс улдың иң кесеһе кәүҙәләнә. Саф тылсымлы әкиәттәрҙең бер ҙур өлөшө – үгәй ҡыҙ йәки үгәй малай тураһында.

Яңғыҙ әсәнең еткән ҡыҙы йәки убырлы ҡәйнәнең бахыр килене тураһындағы әкиәттәр ҙә байтаҡ. Был тип геройҙарҙың барыһы осон дә уртаҡ бер сифат бар: улар – кәмһетелгән, ҡыйырһытылған кешеләр; йәберләүселәр – өлкән туғандар, үгәй әсәләр, ҡәйнәләр.

Күп әкиәттәрҙә яуызлыҡ мифик заттар: дейеү, мәскәй, һыу инәһе һәм убырлы ҡарсыҡ образдарында кәүҙәләнә, ә ҡайһы бер сюжеттарҙа батша, хан образдарында бирелә. Бында шуныһын дөрөҫ аңлау мөһим: батша, хан образдарында, әлбиттә, конкрет тарихи шәхестәр түгел, ә уларҙың кире һыҙаттары киң дөйөмләштереп кәүҙәләндерелә.

Әкиәттәрҙә яуыз хандар, батшалар, дейеү, аждаһа, мәскәй образдары кеүек үк, фантастик уйҙырма формаһында ҡабул ителәләр. Йыш ҡына бер үк сюжеттең бер вариантында яуыз көс дейеү йәки аждаһа итеп бирелһә, икенсеһендә ул батша йәки хан образында кәүҙәләнә. Ҡомһоҙлоҡ, ҡаты бәғерлелек кеүек сифаттар мифик көстәргә лә, батша һәм хандарға ла хас.

Тылсымлы әкиәттәрҙә йыш осраған образдарҙы шундай төркөмдәргә бүлергә мөмкин:

1. Тылсымлы әкиәттәрҙә традицион образдарҙың береһе – әбей менән бабай һәм яуызлыҡты еңеп, бәхетле тормошҡа ирешкән уларҙың улы. Йыш ҡына тылсымлы әкиәттәрҙә ул батыр образында һүрәтләнә.

Мәҫәлән, фәҡирлектә йәшәгән бабай менән әбейҙең берҙән-бер улын әкиәттә бәхетле яҙмыш көтә. «Һонтай егете» әкиәтендә, мәҫәлән, етем ҡалған Янһары тылсымлы ҡатынға әйләнә, тәүҙә мәкерле батшаның бөтә ауыр шарттарын үтәй, һуңынан уны язаға тарттыра, ә үҙе бәхеткә ирешә.

«Сәфәр» сюжетында кесе ул Сәфәр, ике ағаһы байлыҡ һорағанда, атаһынан аҡыл һорай һәм, аҡылы менән бөтә ауырлыҡтарҙы үтеп, аҙаҡ батша булып ултыра. «Тимерғазыҡ» әҫәрендә бәхет эҙләп сығып киткән егет, батша ҡуйған ауыр шарттарҙы үтәп, аҙаҡ рәхәтлектә донъя көтә. «Алтын балдаҡ», «Һунарсы Байғужа», «Серле йөҙөк» әкиәттәрендә ире үлгәндән һуң инде нисек көн итергә белмәгән етем әбейҙең яңғыҙ улы, тәү ҡарашҡа, аҡылға еңелерәк һымаҡ: атаһынан ҡалған һуңғы аҡсаға ул эт менән бесәй һатып алып ҡайта. Әммә аҙаҡ шул эт менән бесәй ярҙамында ул батша кейәүе булып китә һ.б.

2. Тылсымлы әкиәттәрҙә үгәй әсәй һәм үгәй ҡыҙ, убырлы ҡарсыҡ образдары йыш осрай. Башҡорт халыҡ әкиәттәрендә уның иң билдәле өлгөһө – «Үгәй ҡыҙ Гөлбикә» әкиәте. Бындай әкиәттәрҙә етем балаларҙың хәле ауырлаша: үгәй әсә уларҙы ҡыйырһыта, рәнйетә. («Үгәй ҡыҙ», «Йомғаҡ» һ.б.) Ҙур ғаиләлә йәш килендәрҙең хәле лә ауыр. Улар ҡол хәлендә иҙелеп көн күрә. Халыҡ бындай әйҡәттәрҙә тормош-көнкүрештә ғәҙеллекте яҡлап сыға.

Шулай итеп, башҡорт халыҡ тылсымлы әкиәттәренең образдар системаһы ғәйәт бай. Уларҙа беҙ дейеү, пәрей, һыу ҡыҙы һымаҡ тылсымлы заттарҙы, тормош-көнкүрештәге үгәй ҡыҙ һәм үгәй әсәй, кесе ул һәм һөйөклө ҡыҙ, ҡарт әсә һәм ата, батыр геройҙарын осратабыҙ. Әкиәттәр ни тиклем генә тылсымлы булмаһын, улар барыбер ҙә тормошҡа яҡын, уның образдарын үҙ итә тигән фекергә киләбеҙ.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт халыҡ ижады. Әкиәттәр. Төҙ. М.Х. Минһажетдинов, Ә.И. Харисов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1973. – 490 бит.

2. Мингажетдинов М.Х. Волшебные сказки. – Уфа: БГУ, 1976. – 387 с.

3. Сөләймәнов Ә.М. Әкиәттә – хәкиҡәт. – Өфө: Китап, 1997. – 400 бит.

4. Хусаинова Г.Р. Поэтика башкирских сказок / Г.Р. Хусаинова. – М.: Наука, 2000. – 357 с.

© Зарипова А.З., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Ибракова Э.Р.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Мостафина Р.Д.,
филол. фәнд. канд., доц.

ҺӘҘИӘ ДӘҮЛӘТШИНАНЫҢ «АЙБИКӘ» ПОВЕСЫНДА ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ

Ҡатын-ҡыҙ образы әҙәби әҫәрҙәрҙә һәр ваҡыт ҡатмарлы образ, шул уҡ ваҡытта, милләт әсәһе, һөйөклө ҡатын, тырыш, егәрле ҡыҙ, сабыр, нескә гүзәл зат булып сығыш яһай. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының саялығы, һылыулығы тураһында сәсәндәр, шағирҙар хайран ҡалып, мәдхиә йырлаған, әллә күпме шиғырҙар, әҫәрҙәр ижад иткән.

Ҡатын-ҡыҙ образын юғары кимәлдә һәм киң масштабта һүрәтләүгә ирешкән шағир, яҙыусылар араһында Һәҙиә Дәүләтшина айырылып тора. «Ырғыҙ», «Айбикә» әҫәрҙәрендә ябай ҡатын-ҡыҙ образын илдең алдынғы эшсәһе, партия ағзаһы, колхозды ойоштороп, председатель булып киткән намыҫлы ҡатын-ҡыҙ образына тиклем күтәрә, һәр яҡтан уны оҫта итеп сағылдыра. Бигерәк тә Айбикә образы башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының сағыу өлгөһө булып тора.

Һәҙиә Дәүләтшина ижадының активлашып китеүе утыҙынсы йылдар башына ҡарай. Был осорҙа ул ҙурыраҡ күләмле әҫәрҙәргә – повесть жанрына мөрәжәғәт итә. Шуның һөҙөмтәһе булып, 1931 йылда «Айбикә», киләһе йылына «Башаҡтар тулҡыны» тигән повестары майҙанға килә. 1935 йылда уның «Хикәйәләр шәлкеме» исеме аҫтында һайланма әҫәрҙәренең тәүге китабы сыға [1].

1930 йылда «Октябрь» (хәҙерге «Ағиҙел») журналында баҫылып сыҡҡан «Айбикә» повесы менән яҙыусы ҙур уңыш яулай. Әҫәр, ғөмүмән, бөтөн башҡорт әҙәбиәтенең мөһим бер ҡаҙанышы тип баһалана. Повесть, рус теленә тәржемә ителеп, 1936 йылда Өфөлә айырым китап булып нәшер ителә. «Айбикә» – колхозлашыу осоронда яңы тормош төҙөүҙә алғы сафҡа баҫҡан башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының рухи үҫешен, күмәк, берҙәм хеҙмәтте, шул дәүер башҡорт ауылындағы ижтимағи яңырыу барышын, башҡорт халҡының тормош-көнкүрешен тәрән һөйөү һәм инаныу тойғоһо менән поэтиклаштырыусы әҫәр. «Айбикә» повесында яҙыусы үҙ заманының тормошсан мәсьәләләрен күтәреп сыға, уны йәнле образдар, бай һүрәтләү саралары менән хәл итә, замандаштарының образын кәүҙәләндереүгә, уларҙың рухи-әхлаҡи йөҙөн асыуға, дәүеренең һулышын биреүгә өлгәшә. Әҫәрҙәге тема,

мотивтар замандың мөһим процестарына бәйләнгән. Повестың төп көсө тормош дөрөҫлөгөндә».

«Айбикә» повесының героиняһы – Айбикә аслыҡ, һуғыш йылдарынның әсеһен татыған, ун биш йәшендә генә кейәүгә сығып, барлыҡ михнәттәрҙе күреп, ҡоллоҡ хәленә ҡалған ҡатын-ҡыҙ. Айбикә бик йәштән генә килен булып төшә. Ата-әсәһе бай булмағанлыҡтан, ҙур табын йыйып, шаулатып туй үткәрә алмайҙар, әммә Айбикәнең әсәһе хәленән килгәнсә бирнә әҙерләп, ҡыҙын лайыҡлы оҙатырға тырыша. Ата-әсәһе аслыҡтан үлеп ҡала, Юлдыбай – тормош иптәше һуғышҡа китә, уның артабанғы тормошо билдәһеҙ була. Ғәйшә абыстайҙың туҡтауһыҙ кәмһетеүҙәренә дусар була. Айбикәнең тормошо упҡынға әйләнә, киләсәгенә юлдар бикләнә. Ләкин Айбикә быныҢ менән генә туҡтап ҡалмай, йәшенеп кенә клубҡа барып, партияға яҙыла. Ғәйшә абыстайҙың тыйыуҙарына ҡарамай, сығып китә. Әҫәр героиняһының тормош юлы бөтөнләй икенсе йүнәлеш ала, ул колхозлашыу йылдарында колхоздарҙы ойоштороу эштәрендә актив ҡатнаша, йыйылыштарға делегатка булып һайлана [2].

Әҫәрҙең кульминацияһы булып, Айбикәнең Юлдыбай менән осрашыуы тора. Юлдыбай элекке ҡатынының үҙгәреүенә, юғары үрҙәр яулауына аптырай. Үҙенең хаталанығын аңлай, ләкин бер ни ҙә эшләй алмай.

Ошо әҫәрҙең төп идеяһы – ҡатын-ҡыҙ һәләттәрен, хоҡуҡтарын яҡлау, һәм уны ғаилә ағзаһы итеп кенә түгел, ил эшендә оло хеҙмәт башҡара алған ил әсәһе, партия активисы итеп күҙ алдына килтерергә ярҙам итә. Ғәйшә абыстай – иҫкелектең, йәғни иҫке ҡоролоштоң нигеҙҙәрен һаҡлап, үҙ файҙаһына йәшәп ятҡан, үҙен ҡайғыртҡан образ. Айбикәне иҫкелек ҡорбаны яһарға тырышҡан абыстайҙың уйҙарын яңы тормош, яңы идеялар, яңы хәрәкәттәр селпәрәмә килтерә. Яңы тормоштоң һәм иҫкелектең бәрелеше – Айбикә менән Ғәйшә абыстайҙың һуңғы диалогында осрай. Ә Юлдыбай аҡса артынан эйәреп, байлыҡҡа алданған бәхетһеҙ бер йән. Уның был ҡылығы бәхет, ҡот килтермәй, киреһенсә, әҫәр һуңында хаталанған бәхетһеҙ ир булып ҡала. Иҫке тормоштоң тамырҙарын йолҡоп алып ташлау, яңы тормош урынлаштырыу – Айбикәнең трактороҙа йөрөүе менән күрһәтелә, йәғни элекке һабан һөрөүҙәр, һуҡалар урынына тракторҙар килә.

«Айбикә» әҫәрендә яңы тормоштоң килеүе ҡатын-ҡыҙ образы менән бирелә. Был идеяны Һ. Дәүләтшина әҫәрендә генә түгел, Ғәйнан Хәйриҙең «Ҡатын» повесында, Сәғит Мифтаховтың «Һаҡмар», «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» пьесаларында осратырға мөмкин. «Ҡатын»

повесында Фатима иҫке ҡоролош менән бик оҙаҡ көрәшә, шуға ҡарамаҫтан ауылда радио булдыра, колхоз ойошторoуҙа ҡатнаша, әҫәр һуңында тракторҙа йөрөй башлай». «Һаҡмар» һәм «Дуҫлыҡ һәм мөхәббәт» әҫәрҙәрендә Айһылыу ҙа иҫке ҡоролош ауына эләгә, төрлө сәбәптәр арҡаһында ғәйеп була. Әҫәр аҙағында ауылға йәш тәжрибәле трактористар килә, улар араһында Айһылыу ҙа була [3].

Шулай итеп, «Айбикә» әҫәрендә ҡатын-ҡыҙҙың ғаиләлә генә түгел, ил тормошонда ла һынатмаған, көслө була алыуын раҫлай. Ҡатын-ҡыҙ ғаилә тотҡаһы ғына түгел, ил тотҡаһы ла. Һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» повесы ошо идеяны раҫлай.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Дәүләтшина Һ. Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө: Китап, 2005. – 428 бит.

2. Минһажетдинов М. Һәҙиә Дәүләтшина. Тормошо һәм ижады. Өфө, 1966. – 168 бит.

3. Писатели земли башкирской. Справочник / сост.: Р.Н. Баимов, Г.Н. Гареева, Р.Х. Тимергалина. – Уфа: Китап, 2006. – 496 с.

© Ибракова Э.Р., Мустафина Р.Д., 2023

УДК 821.512.141

Изрисова Н.С.,
БФШһЖФ, Өфө университеты магистранты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

МОСТАЙ КӘРИМДЕҢ “ОҘОН-ОҘАҠ БАЛА САҠ” ПОВЕСЫНДА РУХИ ДОНЪЯ САҒЫЛЫШЫ

М. Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында психологик анализ геройҙың күңел донъяһын асыуға, уның аңының яңы төшөнсәләр менән байыға барыуын күрһәтеүгә йүнәлтелгән. Геройҙың шәхес булып формалашыуында ыңғай геройҙарҙың да, кире персонаждарҙың да роле ҙур. Әгәр ҙә беренселәр уны ғәҙеллеккә, эскерһеҙлеккә өйрәтһәләр, икенселәре иһә үҙҙәренең ҡылған гонаһтары менән рухи түбәнлек-меҫкенлек тураһында иҫкәртәләр һымаҡ. Беренсе заттан хикәйәләүсе бөтә әҫәрҙәрҙәге һымаҡ уҡ, был повеста ла үҙәк геройҙан ҡала барлыҡ персонаждарҙың да рухи донъяһы, күңел хәрәкәте тышҡы сағылышында күрһәтелә. Уларҙың тойғо-кисерештәр донъяһын асыу үҙәк геройҙың нескә һиҙгерләү-тойомлауына ла бәйләнгән.

Геройҙың шиғри күңеле уны уратып алған кешеләр күңелендә барған тойғоларҙың беленер-беленмәҫ нюанс-төҫмөрләнештәрен дә һиҙгер тойоп-аңлап ала. Кешеләрҙең йөҙөндәге, күҙ ҡарашындағы,

хәрәкәт-ҡыланыштарындағы һәр үҙгәреш уның күҙ уңынан киттә ҡалмай. Халыҡтың рухи хазинаһын һынландырыусы эстетик образ - Оло инәй, уның шәфкәтле күркәм күңеле, Әсғәттең сихри рухи донъяһы, Мәрәһим менән Аҡйондоҙҙоң оло мөхәббәт тойғоһо менән яҡтыртылған саф күңелдәре тап герой күреүе, күңеле аша үҙғарыуында һүрәтләнә

Әҫәрҙә хикәйәләү беренсе заттан алып барыла. Был алым психологизмдың билдәле кимәлдә тәрәнәйеүенә килтерә, шәхес яҙмышын, уның психикаһындағы үҙгәрештәрҙе һәр яҡлап тулыраҡ яҡтыртырға булышлыҡ итә. Повеста геройҙың эске йәшәйешенең йөкмәткеһен тышҡы донъя, ”мөғжизәләргә ышанырусан сәйерерәк, бер ҡатлыраҡ, шауҡымлыраҡ, саяраҡ” кешеләр йәшәгән ауыл тормошо тәшкил итә. Объектив ысынбарлыҡ сабый күреүе, күңеленән үткәреүендә бирелә. Кешеләр һәм ваҡиғалар тураһында хикәйәләү, сабыйҙың поэтиклаштырып ҡабул итеүе аша, эске бер йылылыҡ менән, хис-тойғоларға мансылып, эмоциональ буяу-төҫмөрҙәрҙә тасуирлана [1, с. 288]. Кешеләр тормошон, уларҙың ҡылған эш-ҡылыҡтарын күҙәтеү, йәшәйешен аңлау барышында, герой уларҙағы гүзәл сифаттарҙы аса, рухи яҡтан байыға. Билдәле бер эмоциональ торошҡа бәйле тыуған хәтерләүҙәр ваҡиғаларҙы бер епкә теҙеүсе сылбырҙар булып торалар, төрлө ваҡыт ҡатламдарын сағылдырыусы айырым картиналар бер үҙәк геройҙың хикәйәләүендә художестволы бөтөнлөктә бирелә.

Әҫәрҙә символика, подтекст, деталь, йәнәшәлек, йәнләндереү, антитеза һ.б. поэтик троптарҙан туҡылған ассоциатив сараларҙың тотош сылбырҙарын табырға була. Улар геройҙар күңелендәге иң йәшерен уй-тойғоларҙы ла сағыу тасуирлауға хеҙмәт иттерәләр. Повесть күңел диалектикаһын биреүгә ниндәй юлдар, алымдар аша ирешеү мөмкинлектәрен күрһәтеүҙә сағыу бер миҫал булып ҡарала ала. Әҫәрҙә оло быуын замандаштарыбыҙҙың бер вәкиле булған геройҙың рухи үҫеше, шәхес булараҡ формалашыу этаптары күҙаллана. Яҙыусының төп идея-эстетик принцибы кеше йәшәйәшенең үҙенең үткәне, бала сағы – ваҡыт үҙенсәлектәрен үҙ эсенә алған, характер формалашыуҙа, поэтик күңел донъяһының башланғысына оло бер этәргес булған мәл менән тығыҙ бәйлелектә тороуын иҫбатлауға ҡайтып ҡала.

Беренсе заттан хикәйәләү алымы геройҙың үҙенең рухи донъяһын тулыраҡ асырға, тойғо-кисерештәр менән тулы эске күңел торошо һәр яҡлап, тәрәнерәк яҡтыртырға мөмкинлек биргә лә, башҡа персонаждар күңелендә барған психологик процестар үҙҙәренең тик тышҡы сағылыштарында, герой күрә-тоя алған дәрәжәлә генә асыла, шуға психоанализдың мөмкинлектәре бындай осраҡта шаҡтай

сикләнә.Яҙыусы ошо сикләнгәнлектән ҡотолоу өсөн башҡа төрлө художество сараларын ҡуллана. Мәҫәлән, Мәрәһим күңелендә барған ҡатмарлы психологик процесты объектив автор хикәйәләүендә тулыһынса бирep булһа ла, беренсе заттан хикәйәләүҙә был мөмкин түгел. Яҙыусы ҡатмарлы күңел хәрәкәтен, хатта персонаждың иң нескә кисереш-тойғоларын да ситләтелгән (метофорик) юл аша – конкрет предмет – гармун аша бирә алған: “Нәҡ ошо мәл Түбән остан тулҡын-тулҡын булып гармун ағылып килде. Башта ул кемгәлер йомшаҡ ҡына, яғымлы ғына һуҙып өндәшкәндәй булды, унан һуң ярһып-ярһып эс серҙәрен һөйләргә кереште, бара торғас ниңәлер инәлергә, ялбарырға тотондо, аҙаҡ килеп үкһеп илап ебәрҙе”

Тормош герой алдында тик яҡты буяуҙарҙа ғына асылмай. Ҡырыҫ ысынбарлыҡ ҡот осҡос ваҡиғалары менән дә алға баҫа, шуның менән геройҙың әхлаҡи өлгөрөүенә лә йоғонто яһай. “Ысынбарлыҡтың балын да, ағыуын да татып ҡарау шәхестең үҫеше, уның рухи байығыуы өсөн бер тигеҙ мәжбүри”, – тип раҫлай күренекле әҙәбиәт белгесе С.Бочаров [2, с. 207]. Нахаҡҡа бурлыҡта ғәйепләнгән Сәмиғулланы үлтереү эпизоды тап ана шундайҙарҙан.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Баимов Р.Н. Судьба жанра. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1984. – 320 с.

2. Бочаров С. Психологическое раскрытие характера в русской классической литературе и творчество М.Горького // Социалистический реализм и классическое наследие. – Минск, 1960. – С. 207.

© Идрисова Н.С., Гареева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141.09

Искәнйәрова Г.И.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Янбаев И.К.,
филол. фәнд. канд., доц.

ҺИБӘТУЛЛА СӘЛИХОВ ШИҒРИӘТЕНЕҢ ҠАЙҺЫ БЕР ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Башҡорт шиғриәтенең поэтик йөкмәткеһен формалаштырыуҙа суфый шағирҙарҙың ижады ла ҙур роль уйнай. XIX быуатта йәшәгән һәм ижад иткән әҙиптәрҙең шиғриәтендә күберәк дини темалар урын алһа ла, улар әҙәбиәтте лирик, фәлсәфәүи йөкмәтке менән байытыуҙа ғәйәт ҙур эш башҡара, урта быуаттарҙан килгән бай традицияларҙы

һаҡлап алып ҡалыуға булышлыҡ итә. Уларҙың ижадында кеше һәм уның йәшәү мәғәнәһе, фанилыҡ һәм баҡыйлыҡ, изгелек менән яуызлыҡ, үлем һәм үлемһеҙлек кеүек мәңгелек темалар үҙенсәлекле сағылыш алған, уларҙы художестволы һынландырыу сараһы булараҡ, тәссауф тәғлимәте өсөн хас булған типик образдар, һүрәтләү саралары, хикәйәләү алымдары нығынып киткән. Шуның менән бергә уларҙың ижадында милли һүҙ сәнғәтенә таянып үҫеп сыҡҡан әҙәби күренештәр ҙә байтаҡ, әлбиттә. Шундай үҙенсәлектәрҙе йөрөтөүе менән билдәле суфый шағир Һибәтулла Сәлихов та айырылып тора.

XIX быуаттың тәүге яртыһында ижад иткән Һибәтулла Сәлихов башҡорт мәғрифәтселегенең формалашыуына һәм үҫешенә ла булышлыҡ итеүсе танылған яҙыусыларҙың береһе булып тора, сөнки ул үҙ дәүере өсөн актуаль ижтимағи, социаль проблемаларҙы күтәреп кенә ҡалмай, ә мәғрифәтселек идеологияһының асылы булған белемгә ынтылышты пропагандалай, фәлсәфәүи темаларға ла мөрәжәғәт итә.

Һибәтулла Сәлиховтың шиғри мираҫы ҙур түгел, барлығы ғәзәл, мөнәжәт, нәсихәт кеүек жанр формаларынан торған унға яҡын әҫәрҙән тора. [5; 757-се бит] Шулар араһында образ тыуҙырыу йәһәтенән үҙенсәлекле, төрлө белем биреү мәсьәләләрен үҙ эсенә алған бер-нисә әҫәр бар.

Суфыйсылыҡ поэзияһының юғары өлгөһө булған «Дөррә әл-ҡәлам» («Ынйы һүҙҙәр») рисаләһе «Ҡөрьән»дең үлем, тамуҡ һәм ожмахты һүрәтләгән сүрәләре нигеҙендә тыуған. Шағир тамуҡ ғазаптарына дусар булмау өсөн донъялыҡта нисек йәшәргә кәрәклеген өйрәтә. Тормош үҙенекен итә, ҡәбер – гүр ыҙаларын да, баҡыйлыҡта кисереләсәк йәннәт рәхәттәрен дә онотороп ебәрә. Шағир үҙ аңында төҫмөрләнгән реаль донъяны сағылдырыу өсөн ҡыҙыҡлы һәм үҙенсәлекле образ һайлаған:

Мәҫләп, донъя бер кире хатун дорыр,
Сачы дүхлүб, дешләре дөшмеш дорыр.
Ханәдер диб алына ҡанлариға,
Ҡара күмер, күзенә сөрмә чигә.
Аҡартур аҡ күмер илә йөзене,
Бу бизәкләр илә бизәр үзене.
Дир ана бер көн: «Бәнү мелә уйнагыл,
Таңла эшләрсең эшең, ашыҡмағыл.
Вармудыр һич ердә бәнем тик гүзәл,
Ут бәңе ҡуйарму син ай биғаҡыл».
Көн дә ошбу мәкер илә алдар сине,

Шелтәләр, кит, кит, дийү соңҡара сине.
Әдәм улы ғәжәб ахмаҡ дорур,
Бер яман ҡары хатунға алданур. [2; 92-се бит]

Бындай реалистик тормошсан деталдәр булыуына ҡарамаҫтан, әҫәрҙә дини-мифологик образлылыҡ көслө; суфыйсылыҡ, дини өгөт-нәсихәттәргә баҫым яһау өҫтөнлөк ала. Автор донъяны бер кире, әммә ымһындырғыс бер ҡатын менән сағыштыра, ахмаҡланып, уға алданмаҫҡа өндәй. Уның тел төбө – фани донъялағы ғүмереңде юҡҡа бушҡа ауҙармайса, баҡыйлыҡты хәстәрләп йәшә, тигәнгә ҡайтып ҡала. Ғөмүмән, Ғ. Хәйәм, Сәғҙи, Хафиз һымаҡ урта быуаттарҙың киң билдәле суфыйҙарҙың әҫәрҙәрендә генә түгел, уларға саҡлымғы Рудаки (IX быуат) шикелле боронғораҡ әҙиптәрҙең ижадында ҡатын-ҡыҙ образына мөрәжәғәт итеү, уның сифаттары аша Аллаһы тәғәләгә ялғаныш, донъя михнәттәре һәм хозурлығы хаҡында кисерештәр менән бәйле мотивтар сағылыш таба. Дөрөҫ, уларҙың дини-мистик төшөнсәләрҙән азат булған, мөхәббәт һәм ҡатын-ҡыҙ матурлығын данлағандары ла күп. Мәҫәлән, Рудакиҙың “Девичья красота” әҫәренән юлдар:

Девичья красота и музыка с вином
Низвергнут ангела, смутив его грехом.
[1; 121-се бит]

«Ынйы һүҙҙәр» – шағир ижадында нәсихәт өлгөһө, әҙәп әҙәбиәте рухында яҙылған, шул уҡ ваҡытта шиғри образлылыҡтың традицион башланғысын үҙ итеүсе әҫәр.

Һибәтулла Сәлихов шиғриәтенең иң күренекле йәдкәре – «Мөжмәғ әл-әдаб» («Әҙәп ҡағиҙәләре йыйынтығы») китабы. Ул үҙенең композицияһы, жанр-стиль тәбиғәте менән шәреҡ мәҙәниәте тәжрибәләре нигеҙендә үҫеп сыҡҡан урта быуаттарҙағы башҡорт һәм татар поэзиялары традицияларын дауам итә. Был шиғри китап төрлө әҙәп-әхләҡ мәсьәләләрен яҡтыртҡан дидактик йөкмәткеле шиғри әҫәрҙәр тупланмаһынан тора.

Шиғри китаптағы әҫәрҙәр тормошсан мотивтарҙан туҡылған, ғибрәтле хәл-ваҡиғаларҙы бәйән иткән төрлө хикәйәттәргә нигеҙләнә, автор реаль тормош күренештәренә, Әбүғәлисина кеүек атаҡлы ғалимдарҙың, Руми, Ғазали, Аллаяр ише күренекле суфый философтарҙың һәм әҙиптәрҙең әҫәрҙәрендәге айырым өлгөләргә, хикмәтле һүҙҙәргә, Ҡөрьәнгә, хәдистәргә мөрәжәғәт итә.

Әхлаҡи юғарылыҡҡа ул бары үҙенең тәбиғәтенә үк һалынған яуызлыҡҡа, төрлө насар сифаттарға ҡаршы көрәштә генә өлгәшә. Был

көрәштең еңел генә бармауын күрһәтеп биреү өсөн шағир образлылыҡтың төп алымдарының береһе – аллегорияға мөрәжәғәт итә.

Шуға ярашлы, әҫәрҙәрҙә геройҙы сәфәргә юлланғанда, йәғни шул юл менән күңелде сафлауҙы тормошҡа ашырғанда, әҙәм балаһын төрлө йыртҡыс януарҙар һәм саян-бөжәктәр көтөп тора. Автор тәкәбберлекте айыу, асыуҙы юлбарыҫ, көнсөлләктө арыҫлан, ҡомһоҙлоҡто ҡаплан, нәфсене аждаһа, аҙғын теләкте йылан йәки ҡырмыҫҡа менән сағыштыра. [2; 47-се бит]

Донъяны бер хәлгә ормош бер йылан –
Эсе ағыу, тышы алтын тиңә һан.
Алтын өсөн һөймә донъя шәһәрен,
Кем күрәрһең ул йыландың зәһәрен. [3; 18-се бит]

Һибәтулла Сәлиховтың мәрҫиә жанрындағы бер нисә шиғыры билдәле. Асылда, XIX-XX быуат башы шағирҙарының барыһында ла тиерлек панегирик йөкмәткеле әҫәрҙәрҙе күпләп осратырға мөмкин. Был да бик боронғо традицияларҙы булған ҡәҙимге күренеш. «Дөррә әл-ҡәлам» китабының аҙағында баҫылған мәрҫиәһе уның остазы Дәүләтша хәҙрәттең үлеме уңайы менән яҙылған:

Жиһандан кичде һәб шәйхем,
Һәммә ҡәрҙаш, хәлдәшем. [3; 15-се бит]

Дәүләтша хәҙрәттең кешелеклелек сифаттарын маҡтауға ни бары 4 юл арналған. Артабан автор, кәйеф-сафа ҡороп, типтереп, үҙ рәхәтлектәре өсөн генә йәшәгән ғалим йораттарынан, муллаларҙан әсе көлә.

Бу сүзә ғөләмәнең бәгзе тамам эче тула ғәзби,
Күрер мәкруһ, тотар бәгзе, таба алмай хижҙәт-борһан.
Аю кеби ачығланыр, тамам әнфасы багланыр,
Йылан кеби йомарланыр, эченән ғайезлә ул ан.
Орышырға көче етмәс, әйдер: «Намус чығыб китмәс»,
Эчендән кенәсе бөтмәс ничә әйам, ничә әзман.

Шулай итеп, Һибәтулла Сәлихов шиғриәтенең поэтик тәбиғәте уның көнсығыш әҙәбиәте традицияларынан айырылғыһыҙ үҫештә булыуын күрһәтеп тора. Автор башлыса суфыйсылыҡ поэзияһы тыуҙырған традицион образдар системаһы менән эш итә. Шул уҡ ваҡытта, ул тормошсан күренештәргә күҙ һалып, әҫәрҙәрен ысынбарлыҡты кәүҙәләндергән образдар, символдар, бүтән төрлө художество саралары менән байытыуға өлгәшә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Баимов Р.Н. Великие лики и литературные памятники Востока. Уфа: Гилем, 2005. 496 с.

2. Ҡунафин Ғ.С. Һибәтулла Сәлихов шиғриәтенең идея-тематик һәм жанр үҙенсәлектәре// Башҡорт әҙәбәте мәсьәләре. – Өфө: Китап, 1982. – 41-65-се биттәр.

3. Сәлихов Һ. Шиғырҙәр. – Ҡазан: Татарстан китап нәшриәте, 1969. – 155 бит.

4. Харисов А.И. Литературное наследие башкирского народа (XVIII–XIX века). – Уфа: Китап, 1973. – 285 с.

5. Шәрипова З.Я. Сәлихов Һибәтулла Сәйетбаттал улы // Башҡорт энциклопедияһы. – Өфө: «Башҡорт энциклопедияһы» ғилми-нәшриәт комплексы, 2020. – 757-758-се биттәр.

© Искәнйәрова Г.И., Янбаев И.К., 2023

УДК 821.512.141

Исмәғилова М.У.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

БАШҠОРТ ПРОЗАҺЫНДА ШӘХЕС КУЛЬТЫ ФАЖИҒӘЛӘРЕ САҒЫЛЫШЫ

Башҡорт әҙәбиәте совет идеологияһы ҡәтғи билдәләгән тар ҡалыптар эсендә оҙаҡ йылдар йәшәп ятты, һуңғы бер нисә тиҫтә йылдар эсендә – башҡорт әҙәбиәте үҫешенең өр-яңы этабында – художестволы процесс ифрат күп ҡырлы, бай һәм динамикалы төҫ алды һәм айырыуса проза, ысынбарлыҡ менән тығыҙ бәйләнешкә инде, уның замана талаптарына һиҙгер мөнәсәбәтле булыуы асыҡ күренде, ысынбарлыҡтың төрлө тарафтарына үтеп инеү, тормошто эпик киңлектә һәм фәлсәфәүи-аналитик тәрәнлектә художестволы байҡау, образлы фекерләү юғарылығына күтәрелеү, темалар төрлөләнеүе, психологизм тәрәнәйеүе кеүек ҡаҙаныштарға иреште.

Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә шәхес культы фажиғәләрен барлаған әҫәрҙәр рәтен барлаһаҡ, тарих төпкөлөнән алып бөгөнгәсә көнитмешебеҙҙе, милләт булараҡ башҡорт халҡының ғазаплы көрәш юлын күрәбеҙ. Күреүебеҙсә, һәр әҙиптең күңеленә яҡын шәхестәр, типик обрадар тураһында яҙғанда уларға, яҙыусыларға, ваҡыт айырмаһы юғала. Тарих һәм бөгөнгө йәшәйеш яҡыная [2].

Ғ. Хисамов та үҙенең «Аҡтамыр» романында Ә.Вәлидиҙең оҙаҡ йылдар буйына Нәфисәһе хаҡында ниндәйҙер йылы хәбәр ишетергә өмөтләнеп йәшәүен һүрәтләй. Замандың актуаль мәсьәләләре ил үҫешендәге тарихи ваҡиғаларҙың кешеләр яҙмышындағы драматик, трагик эҙемтәләре менән тығыҙ бәйләнештә бөгөнгө күҙлектән реалистик дөрөҫлөктө яҡтыртҡан Ғ. Хисамовтың «Ун туғызынсы» исемле сәйәси-детектив романында мажаралыҡ, серлелектең киң урын алыуы күҙәтелә. Тәнҡит рухы менән һуғарылған, торғонлоҡ йылдарында юғары власть органдарында хөкөм һөргән коррупцияны, дәүләт етәкселәренең йыртҡыс асылын фашлаған был романда мажаралы, серле ваҡиғалар үҫтерелеше, драматик хис-тойғоларға бай психологик сюжет һыҙығы һәм боронғо тарихты өр-яңынан яҡтыртыусы тарихи фараз бирелеше стиль йәһәтенән үҙенсәлекле бер синтезды барлыҡҡа килтергән. Бында реаллек менән фантастика, һәр кемгә мәғлүм рәсми факттар менән хыял, күҙаллау, тоҫмаллауҙарҙың берләшмәһен күрергә була. Партияның юғары эшелондарындағы етәкселәрҙең биографияһына, эшмәкәрлектәренә, холоҡ-ҡылыҡтарына оҡшашлыҡтар, республикала билдәле кешеләрҙең прототиптары төҫмөрләнгәндәй була, замандың сәйәси хәл-күренештәре сағыла. Ләләҙ, Вилен, Ғәли романдың композиция ҡоролошон ойоштороусы үҙәк образдар булып тора, әҫәрҙең төп идеяһы ла был образдарға бәйле яҡтыртыла [3].

Н. Ғәйетбай тарафынан ижад ителгән «Төн» пьесаһы әлеге йүнәлештәге реаль әҙәби факт булып тора. «Төн» трагедияһы тарихи теманы, ваҡыт йәһәтенән бер-береһе менән туранан-тура, актив мөнәсәбәттә булмаған тормош коллизияларына, әхлаҡи һәм төрлө яҙмышлы шәхестәрҙең йәшәү ҡағиҙәләренә, ижади принциптарына иғтибарын туплап, уларҙы бер-береһе менән сағыштырып, дөйөмләштереүҙәр яһау зарурлығынан сығып яҙылған әҫәр. Ошо күҙлектән ҡарағанда, әҫәрҙәге үҙәк персонаждарҙың тәбиғәте үҙенсәлекле. Улар икәү – шәхес культы ҡорбаны булған Һәҙиә Дәүләтшина һәм тормош ҡыйынлыҡтарына дусар ителгән Рәми Ғарипов. Уларҙың ижадтары халыҡсан рухлы, милли колоритлы булыуы менән бер-береһенә яҡын, ауаздаш. Бындай сифаттар был ике һүҙ оҫтаһының әҙәби әҫәр ысынбарлығында осрашыуы өсөн әхлаҡи ерлек һәм тарихи мөмкинлек бирә [4].

«Төн» пьесаһында сағылыш тапҡан «Һәҙиә трагедияһы» менән «Рәми трагедияһы» шәхси трагедия булыу менән бергә, шәхес культы, торғонлоҡ осоро, үҙгәртеп ҡороу, демократия йылдарында халыҡ

мәнфәғәттәре менән йәшәгән, хаҡлыҡ өсөн көрәшкән, выждан ҡушҡанса ижад иткән һүҙ оҫтаһының трагедияһы ла. Пьеса халҡыбыҙҙың данлыҡлы ҡыҙы, талантлы яҙыусы, мәшһүр «Ырғыҙ» романының авторы Һәҙиә Дәүләтшинаның фажиғәле яҙмышы күҙ алдынан уҙа. Драматург шәхес культы осоронда йәшәп, Гулаг шарттарында ижад иткән шәхестең романындағы айырым ваҡиғаларҙы дөйөмләштереп, геройҙарының яҙмышын бөгөнгө көн күҙлегенән сығып баһалап, трагик йөкмәткеле сәхнә әҫәрен тыуҙырыу маҡсатынан сығып эш итә. Шулай ҙа әҫәрҙәге конфликттың аныҡ һәм асыҡ түгеллеген танырға кәрәк: уның асылы ике төп персонаждың «Ырғыҙ» романына бәйле ике төрлө ҡарашына, ижади принңиптарҙы билдәләү мәсьәләләренә генә ҡайтып ҡала. Йәшәйеш, кеше ғүмере ни тиклем күп яҡлы булған кеүек, Р. Байымов әҫәрҙәрендә тематик даирә лә шул тиклем бай. Тәбиғәт һәм техника үҫеше, шәхестең йәмғиәттәге роле, кешенең үҙ-үҙен эҙләү ысынбарлығы, быуындар бәйләнеше кеүек темалар менән бер рәттән яҙыусы ижадында мөхәббәт темаһы ла бик киң һәм тәрән яҡтыртыла, үҙенсәлекле яңғыраш ала. Әҙип фекеренсә, тәбиғәт һыуһыҙ нисек ҡороған кеүек, кеше лә һөйөүһеҙ шулай кибә. Р. Байымов прозаһында кеше һәм тәбиғәт һәр саҡ йәнәш һүрәтләнә - теге йәки был геройҙың халәте уҡыусы күңеленә берәй тәбиғәт күренеше аша еткерелеп, тәрән сағыштырыу булдырыла.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Байымов Р.Н. Сыбар шоңкар: Тарихи-документаль роман. – Өфө: Китап, 1997 – 574 б.

2. Байымов Р. Ижади биҙәктәр. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1977. – 238 б.

3. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 7 томда. – Өфө: Китап, 2019 – 800 б.

© Исмәғилова М.У., Гәрәева Г.Н 2023

УДК 338.48

Каримова З.И.,
магистрант ФБФВиЖ УУНиТ, г.Уфы
Пермякова Л.А.,
канд. филол. наук, доц.

ОСОБЕННОСТИ РАБОТЫ ГИДА-ПЕРЕВОДЧИКА

Современные условия социальной, политической и экономической реальности характеризуются быстрыми темпами роста актов межкультурного взаимодействия. Существует потребность в гидах-переводчиках, которые готовы и способны устанавливать и

поддерживать взаимопонимание между участниками межкультурной коммуникации. Необходимость изучения закономерностей профессиональной подготовки гидов-переводчиков определяет выявление инструментов, повышающих ее эффективность. Активное развитие туристической деятельности вызывает повышенный интерес туристов к объектам туризма не только в собственной стране, но и, прежде всего, в чужой как к объекту другой культуры, другого языка и других традиций. Задачу эффективной передачи качественно новой информации о другой культуре, а также задачу формирования у туриста правильного и позитивного образа другой культуры выполняет гид-переводчик.

Гид-переводчик считается элитным работником сферы услуг, поскольку он предоставляет иностранным гостям исчерпывающую информацию о своей стране. Границы прямого общения с туристами переходят в косвенное общение только тогда, когда гид выполняет лишь роль переводчика для трансляции чужого монолога.

Профессия гида-переводчика в большей степени, чем профессия экскурсовода, требует довольно разнообразного набора компетенций (языковых, межкультурных, переводческих).

Основной фигурой в процессе знакомства иностранных туристов с чужой страной, с ее культурой, историческим прошлым и обыденной жизнью является гид-переводчик. Он выполняет функцию посредника для передачи и получения информации между туристом и интересующим его туристическим объектом. С этой целью гид-переводчик использует владение иностранным языком и знания, связанные с интересующей информацией. Но не только. Для плодотворной работы гид-переводчик должен использовать арсенал других знаний (психология, педагогика, этика, краеведение, страноведческие исследования, экскурсии с гидом), навыков (коммуникативные, интерактивные, организационные), умений (перевод, документация), а также реализовать личные качества.

Профессиональная деятельность гида-переводчика представляет собой сложный комплекс действий, определяемых его способностью осуществлять эту деятельность (знаниями, умениями, личностными качествами), а профессия гида-переводчика требует детального и разностороннего изучения. Несмотря на высокий престиж профессии, ее популярность и социальную необходимость, в профессиональной педагогике отсутствуют концептуальные исследования профессии «гид-переводчик». При изучении профессиональной деятельности гида-

переводчика как системы профессиональных действий следует учитывать, что она основана на взаимодействии гида с другими участниками туристической поездки. Основной сферой такого взаимодействия является взаимодействие с группой туристов. Это взаимодействие происходит на различных уровнях. Выявление и характеристика отдельных компонентов профессиональной деятельности гида-переводчика позволяет осуществлять поиск педагогических путей формирования компетентности специалиста в области экскурсионного сопровождения.

В деятельности гида-переводчика можно выделить следующие компоненты: психологический, речевой, коммуникативный, интерактивный, социальный, когнитивный, этический, организационный и рефлексивный. Характеристики каждого компонента позволяют более детально рассмотреть особенности работы гида-переводчика с группами иностранных туристов.

В работе гида-переводчика чрезвычайно важна риторика. Риторика – греческое слово, означающее «ораторское искусство». Это филологическая дисциплина, изучающая правила построения художественной речи, то есть искусство красноречия. Речевая составляющая деятельности гида-переводчика включает в себя его языковую компетенцию и умение общаться на языке, понятном туристической группе. Язык является средством общения и реализуется в речи (совершении речевого акта в устной или письменной форме). Различие между понятиями "язык" и "речь" заключается в понимании языка как системы знаков, с помощью которых осуществляется речевая деятельность. Важно различать эти понятия.

Язык – это потенциальная возможность, которая реализуется при наличии определенных условий: знания фонетических, лексических, грамматических правил; способности мыслить. Язык – универсальное социальное средство хранения и передачи информации, он управляет человеческим поведением.

Речь – это реализация возможностей языка, форма общения между людьми, «конкретное говорение», которое происходит во времени и выражается в звуковой (включая внутреннее произношение) или письменной форме.

Знание лексики, грамматики и фонетики – это языковая компетенция, а способность свободно выражать мысли – речевая компетенция. Основной формой речи в профессиональном общении гида-переводчика является устная речь. К звучащей речи выдвигаются

требования, касающиеся нормативности языка, фонетических требований, риторических навыков и умений. Голос, дикция, интонация, дыхание и использование невербальных средств коммуникации важны для создания звучащей речи. Признаками речевой культуры являются: соответствие языковым нормам, содержательность, логика, лексическое богатство, выразительность. Высокие требования к звучащей речи определяют всю сложность речевой деятельности гида-переводчика, поскольку его общение с туристами ведется на иностранном языке в двуязычной ситуации. Устную речь гида-переводчика можно разделить на подготовленную и спонтанную. Подготовленная речь реализуется при озвучивании туристической информации, проведении обзорных экскурсий. Спонтанная речь реализуется и в других ситуациях общения (ответы на вопросы, помощь в заселении, выборе продуктов питания, совершении покупок), переводе экскурсий по музеям, контактах с местным населением. Поэтому гид-переводчик должен постоянно работать над совершенствованием языковой и речевой компетенции.

Гиду-переводчику необходимо понимать значение языка и речи, их взаимосвязь. Речь гида-переводчика – это коммуникативная деятельность, направленная на реализацию возможностей языка. Успех этой деятельности зависит от того, насколько много внимания гид-переводчик уделяет совершенствованию своих речевых навыков. Главное – постоянная практика. Для одного гида-переводчика – это усвоение различных форм речевой анимации, для другого – борьба со словами-паразитами, для третьего – выявление и устранение ошибок в языке, способность избегать тавтологии в речи и т.д.

Таким образом, гид-переводчик является профессиональным специалистом в области лингвистики, обладающим определенным набором действий, стратегий и компетенций для осуществления межкультурной коммуникации в процессе знакомства с культурными реалиями другой страны. Этот тип языковой личности раскрывает синергию языковой личности гида и языковой личности переводчика. Эта синергия обусловлена сочетанием дискурсивных характеристик гида-переводчика и профессиональной компетентности культурного посредника, способного осуществлять как коммуникацию на иностранном языке, так и переводческую деятельность.

Список литературы:

1. Демидова Т.В. Структуризация экскурсионного дискурса с позиции фреймового анализа // Вопросы когнитивной лингвистики. Выпуск № 4, 2008. с. 151–154.

2. Жаркова У.А. Профессиональная языковая личность экскурсовода. Дискурсивный аспект// Лингвистические аспекты исследования идентичности личности в изменяющемся мире: коллективная монография. – Челябинск, «Энциклопедия», 2012. с. 109–132.

3. Филатова Н.В. Дискурс сферы туризма в прагматическом и лингвистическом аспектах.

4. Дис. ...канд. филол. Наук. – М., Московский государственный лингвистический унт, 2014. С. 38–39.

© Каримова З.И., Пермякова Л.А., 2023

УДК 80

Карюкова Г.Һ.,

25-се һанлы коррекцион мәктәп, Стәрлетамаҡ ҡ., БР

БАШҠОРТ ХАЛЫҠ МӘҠӘЛ-ӘЙТЕМДӘРЕНЕҢ ТӘРБИӘУИ ӘҺӘМИӘТЕ

Башҡорт мәҡәл-әйтемдәре тематикаһы яғынан күп төрлө булыуы, шунлыҡтан бала-саға араһында, ғөмүмән, тотош йәмғиәт эсендә теге йәки был йүнәлештә тәрбиә эштәре алып барыу процесында киң ҡулланыла алыуы менән ҡылыҡһырлана. Тематикаһына ҡарап, мәҡәлдәр кешелә төрлө яҡшы сифаттарҙы тәрбиәләү, йәки, киреһенсә, насар яҡтарҙы бөтөрөү мөмкинселегенә эйә. Башҡорт мәҡәлдәрендә иң элек халҡыбыҙ өсөн иң оло тойғо, илһөйәрлек тойғоһо, төп урындарҙың береһен алған, Тыуған ил, Ватан темаһына мәҡәлдәр иҫ киткес күп, мәҫәлән: *“Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил артыҡ”, “Берҙең көнө ил менән, илдең көнө ер менән”, “Ерҙән айырылған елгә оса”, “Иле берҙәмдең көнө берҙәм”, “Ир-егеттең аҫылы ил эшендә танылыр”.*

Ватандаштарыбыҙҙың, ата-бабаларыбыҙҙың Тыуған ил, Ватан өсөн, беҙҙең яҡты киләсәк өсөн бер туҡтауһыҙ тиңһеҙ, ҡан ҡойғос көрәштәргә күтәрелеүе һөҙөмтәһендә илде һаҡлау, батырлыҡ темаларының мәҡәлдәрҙә киң сағылыш табыуы ла осраҡлы түгел: *“Дошмандан илең һаҡла, ярамһаҡтан серең һаҡла”, “Батырҙың үлеме ҡырҡ”, “Батыр даны – көрәштә”, “Матурлыҡтан элек батырлыҡ кәрәк”, “Батырмын, тип кем әйтмәй, яу килгәндә өнө юҡ”, “Батырлыҡ яуҙа беленер, мәргәнлек ауҙа беленер”, “Батыр бер үлә, ҡурҡаҡ ҡырҡ үлә”.*

Элек-электән халҡыбыҙҙың үҫеп килгән быуында хеҙмәткә һөйөү тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирегеҫ лә мәҡәлдәрҙән һәйбәт күренә. Күп кенә мәҡәлдәрҙә уңғанлыҡ, оҫталыҡ юғары кимәлдә баһалана: *“Егет кешегә етмеш төрлө һөнәр ҙә аҙ”, “Кеше эше менән, аҒас емеше менән”, “Егәрленең ҡулы ете”, “Тырыш таш тишер”, “Тырышҡан табыр, ташҡа ҡаҙаҡ ҡағыр”, “Һөнәрленең ҡулы алтын”.* Ялҡаулыҡ, әрәмтамаҡлыҡты, эшләргә яратмаған тел биҫтәләрен фашлаған мәҡәлдәргә шундайҙарҙы индерергә мөмкин: *“Ялҡауға көн дә ял”, “Ялҡау ике эшләр, артынан бармағын тешләр”, “Йүнһеҙҙе эшкә ҡуш, артынан үҙең төш”, “Йәмһеҙҙең көҙгөһө насар, булдыҡһыҙҙың ҡоралы насар”, “Тырыш эшкә керешер, ялҡау ашҡа керешер”.*

Башҡорт мәҡәл-әйтемдәре кешенең эске донъяһын, уның яуызлыҡ һәм изгелек төшөнсәһен нисек аңлауын, йәмғиәттәге эстетик нормалар эстәлеген үҙ эсенә ала: *“Изгелек ит тә һыуға һал – халыҡ белер, халыҡ белмәһә, балыҡ белер”, “Аманатҡа хыянат итмә”, “Бурлыктың һуңы – хурлыҡ”, “Һүҙ яраһы һөңгө яраһынан ҡатыраҡ”, “Аҡсаға һат, аҡсаға һатылма”, “Кеше ғәйебен күрһәң, үҙеңдекен уйла”.*

Аҡыллы кешеләргә халыҡ һәр ваҡыт хөрмәт менән ҡараған, был күренеш тә мәҡәлдәрҙә сағылмай ҡалмаған: *“Алтын – ташта, аҡыл – башта”, “Аҡыллы ир – ил аҒаһы, аҡылһыҙ ир – ил бәләһе”, “Аҡыллыға баш ҡиммәт, аҡылһыҙға мал ҡиммәт”, “Аҡсаңды юҒалтһаң да, аҡылыңды юҒалтма”.* Аң-белемгә ынтылыу, өндәү ҙә башҡорт мәҡәл-әйтемдәрендә киң урын алған: *“Донъя – йоҙаҡ, асҡысы – белем”, “Аҡса тарат, белем йый”, “Ғилем – аҡылдың яртыһы”, “Ғилеме барҙың телеме бар”, “Аҡса-мал бер көнлөк, ғилем-һөнәр ғүмерлек”.*

Дуҫлыҡ төшөнсәһенә лә башҡорт халҡы ҙур иғтибар биргән: *“Дуҫың күп булһа, дошманың үҙе үлер”, “Дуҫың яныңда булмаһа, донъяның йәме юҡ”, “Дуҫ булһаң, дуҫ ҡәҙерен онотма”, “Дуҫ дуҫ өсөн мал бирер, яу килгәндә йән бирер”, “Дуҫы күпте яу алмай”.*

Башҡорт халҡында аталыҡ, әсәлек культы көслө булғанға, шулай уҡ мәҡәлдәрҙә киң сағылыш алған: *“Ата балаһы хур булмаҫ”, “Аталы бала – арҡалы, инәле бала – иркәле”, “Ата-әсә һүҙе – бала-саға күҙе”, “Атай булмай тороп атай ҡәҙерен белмәҫһең, әсәй булмай тороп әсәй ҡәҙерен белмәҫһең”, “Атайҙар һүҙе – аҡылдың үҙе”.*

Ололарға хөрмәт күрһәтеү ҙә башҡорт халҡында матур сифат булып һаналған: *“Ололаһаң олоно, ололарҙар үҙеңде”, “Оло әйткәнде тыңламаған, оролған да бәрелгән”, “Үҙеңдән олоға кәңәш итмәйенсә эш башлама”, “Кесегә мәрхәмәт ит, олоға итәғәт ит”, “Картты ҡәҙерләһәң, ҡартайғас ҡәҙер күрерһең”.*

Ғаиләлә бала тыуыу ҙур шатлыҡ булып, Аллаһы Тәғәлә тарафынан ебәрелгән ваҡиға итеп ҡабул ителгән: *“Бала – ата-инәгә алтын бағана”, “Бала бар йортта сер ятмай”, “Балалы өй – баҙар, балаһыҙ өй – маҙар”, “Бала күрмәгән – балдан ауыҙ итмәгән”, “Ағасһыҙ йортҡа ҡош ҡунмаҫ, балаһыҙ йортҡа ҡот ҡунмаҫ”.* Балалы ҡатын халыҡта оло хөрмәт һәм абруй ҡазанған, балаһыҙ ҡатындар иһә тирә-йүндәгеләрҙең хөрмәтен юғалтҡан: *“Балаһыҙ ҡатын – емешһеҙ ағас”, “Кыҫыр ҡатындан ҡытҡылдаған тауыҡ артыҡ”, “Кыҫыр ҡатындан бала таптырма”.* Ғаиләлә ир менән ҡатындың үҙ-ара мөнәсәбәттәренә, уларҙың ғаиләлә тотҡан урынын билдәләгән мәҡәлдәр ҙә байтаҡ башҡорт халҡында: *“Катын артынан мал килер, ҡыҙ артынан дан килер”, “Катын ғәйрәтле булһа, ир ғибрәтле булыр”, “Катын һәлкәү булһа, ир ялҡау булыр”, “Катынды йөҙөк ҡашы иткән дә, мунса ташы иткән дә – ир”, “Катындың теле уҙһа – иренең ҡулы уҙа”.*

Элек-электән башҡорт халҡында ғаиләләрҙең тарҡалыуы, айырылышыуҙар насар күренеш булып һаналған, был күренеш тә мәҡәлдәрҙә сағылыш тапҡан: *“Тәүге ир – ир йолаһы, икенсеһе – йөҙ ҡараһы”, “Ирҙән айырылғансы, күкрәгеңдәге йәнеңдән айырыл”, “Ирҙән иргә йөрөгәнсе, гүрҙән гүргә йөрөү артыҡ”.* Ғөмүмән, ғаиләләге ыҙғыштар ҙа ҡануниәткә һыймаған: *“Талашлы өйҙә тормош булмаҫ, ыҙғышлы өйҙә аш булмаҫ”, “Ыҙғышлы йортта аҙғын ҡыҙ үҫер”, “Тауышлы йорттан фәрештә ҡасҡан”, “Уйнаш ингән йорт ҡорор”, “Аралар тыныс булһа, ғаилә ҡорос була”, “Ғаиләм – кәлғәм”.*

Туғанлыҡ тойғоһо төшөнсәһе лә оло булған башҡорттар өсөн: *“Ағай-эне талашыр, атҡа менһә ярашыр”, “Ағай-эненән айыу-бүре ҡурҡҡан”, “Ағай-эне татыу булһа, ат күп булыр; апһын-әзе татыу булһа, аш күп булыр”, “Ағай-эне менән аш татлы”.*

Эскеселек, наркомания сәскә аткан дәүерҙә заман йәштәренең үҙенең һаулығына битараф булыуы ла үҙәктәргә үтерлек проблема булып тора. Ә бит башҡорт халҡы һаулыҡҡа ҡарата элек-электән иғтибарлы булған: *“Байлыҡ – бер айлыҡ, һаулыҡ – ғүмерлек”, “Акса бәхет түгел, һаулыҡ – бәхет”, “Һаулыҡты аҡсаға һатып алып булмай”, “Халыҡ һаулығы – дәүләт байлығы”, “Һаулығың – байлығың”.*

Донъялағы ҡайһы бер телдәрҙең, шул иҫәптән туған башҡорт телебеҙҙең киләсәк яҙмышы тураһында һүҙ алып барғанда ла, тел тураһындағы мәҡәлдәр оло тәрбиәүи әһәмиәткә эйә булыуын билдәләргә була: *“Аҡыл – ҡазна, күңел – йоҙаҡ, тел – асҡыс”, “Тел – күңел көҙгөһө”, “Телдәр белгән – илдәр белгән”, “Теле барҙың иле бар”, “Теле барҙың көнө бар”, “Теле боҙоҡтоң күңеле боҙоҡ”, “Тел күрке – һүҙ”.*

Мәҡәлдәрҙең тәрбиәүи әһәмиәте бик ҙур һәм ҡулланылыу даирәһе лә бик киң. Үҫеп килгән быуынды тәрбиәләү эшендә уларҙы мәктәптә уҡыу-уҡытыу процесында ла, ғаиләлә, өйҙә көндәлек рәүештә ҡулланырға мөмкин. Мәктәптә иһә мәҡәлдәрҙе иң элек туған тел һәм әҙәбиәт дәрестәрендә, кластан тыш сараларҙа файҙаланыу отошло һанала. Үҫеп килгән быуынды тәрбиәләү эшендә мәҡәлдәрҙең роле баһалап бөткөһөҙ. Уларҙы системалы рәүештә ҡулланғанда, балаларҙа Тыуған илгә, туған телгә, хеҙмәткә һөйөү, аң-белемгә ынтылыш, ата-әсәгә, ололарға, туғандарға ихтирам, ысын дуҫлыҡ тойғоларын, кешелектең иң күркәм сифаттарын тәрбиәләргә була.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Әхтәмов М.Х. Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2008. – 771 бит.

2. Әхтәмов М.Х. Әсә: Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Һүҙлек. – Өфө: Башҡортостан «Китап» нәшриәте, 2002. – 104 бит.

© Карюкова Г.Һ., 2023

УДК 82.09

Клысова Г.М.,
аспирант, ФБФВиЖ УУНиТ

ЛИТЕРАТУРНАЯ КАРТА БАШКОРТОСТАНА: УФА СЕРГЕЯ ДОВЛАТОВА

Литературное краеведение получило широкое распространение в последние годы. Читатели всегда стремятся узнать больше о жизни и творчестве своих любимых писателей. И именно поэтому им интересны места, которые оказывали влияние на их работу, – места, где они родились, выросли или где проводили большую часть своей жизни, ведь трудно представить А. Пушкина без села Михайловского, Л. Толстого без Ясной Поляны, С. Аксакова без черемуховых берегов реки Белой, М. Шолохова без станицы Вешенской, В. Шукшина без Алтайского края. В этих местах происходили яркие события и завязывались нити историй, которые воссоздавались в их произведениях. Неудивительно, что памятные литературные места привлекают внимание всех, кто желает углубить свое понимание и вовлеченность в литературный мир великих авторов.

Богата литературная карта Башкортостана. В разное время с башкирским краем в той или иной степени творчески и биографически были связаны многие писатели, поэты, драматурги [3, с. 3]. Башкирский край стал родиной для большинства талантливых авторов, которые

обогатили мировую литературу своими произведениями и оставили след в истории.

Город Уфа имеет богатое историко-литературное прошлое. Здесь жили и творили знаменитые писатели XIX-XX веков, чьи имена украсили литературную карту столицы Республики Башкортостан: С.Т. Аксаков, В.Г. Короленко, А.П. Платонов, И.В. Сотников, А.Д. Коптяева и др. Одним из таких выдающихся литераторов был С.Д. Довлатов.

Сергей Донатович Довлатов, известный русский писатель-прозаик, журналист, яркий представитель третьей волны русской эмиграции, занимает особое место среди наиболее читаемых современных русских писателей в мире. Его произведения завоевали сердца читателей по всему миру и продолжают радовать своей уникальностью и глубиной. Переведенные на основные европейские языки и японский, его работы приобретают популярность во множестве стран, отлично принимаясь многочисленной читательской аудиторией.

Основными произведениями Довлатова считаются «Зона» (1964-1982), «Невидимая книга» (1978), «Соло на ундервуде: Записные книжки» (1980), «Компромисс» (1981), «Заповедник» (1983), «Наши» (1983), «Марш одиноких» (1985), «Ремесло» (1985), «Чемодан» (1986), «Иностранка» (1986), «Не только Бродский» (1988) [2].

Довлатова с Уфой связывает не так много, как хотелось бы, но город навсегда с ним связал свою историю.

Сергей Довлатов родился 3 сентября 1941 года в Уфе, в семье театрального режиссера Доната Исааковича Мечика и литературного корректора Норы Сергеевны Довлатовой. Родители писателя были коренными ленинградцами, но судьба распорядилась так, что им пришлось эвакуироваться в наш город во время Великой Отечественной войны.

Родина Довлатова, Уфа, неизменно упоминалась в его произведениях, оставаясь неразрывным эпизодом его литературного пути. *«Первый литературный импульс – вот с чего я начну. Это было в октябре 1941 года. Башкирия, Уфа, эвакуация, мне – три недели»*, – написал Сергей Довлатов в своей повести «Ремесло», рассказывая о своем писательском призвании. Та полумифическая встреча матери Довлатова с писателем Андреем Платоновым, описанная в книге, являлась семейной легендой, объясняющей истоки литературного таланта Сергея Довлатова: *«Я родился в эвакуации четвертого октября. Прошло три недели. Мать шла с коляской по бульвару. И тут ее*

остановил незнакомый человек. Мать говорила, что лицо его было некрасивым и грустным. А главное – совсем простым, как у деревенского мужика. Я думаю, оно было еще значительным. Недаром мама помнила его всю жизнь.

Штатский незнакомец казался вполне здоровым.

– Простите, - решительно и смущенно выговорил он, – но я бы хотел ущипнуть этого мальчишку.

Мама возмутилась.

– Новости, - сказала она, – так вы и меня захотите ущипнуть.

– Вряд ли, - успокоил ее незнакомец. Затем добавил:

– Хотя еще минуту назад я бы задумался, прежде чем ответить…

Прошло тридцать два года. И вот я читаю статью об Андрее Платонове. Оказывается, Платонов жил в Уфе. Правда, очень недолго. Весь октябрь сорок первого года. И еще – у него там случилась беда. Пропал чемодан со всеми рукописями. Человек, который хотел ущипнуть меня, был Андреем Платоновым.

Я поведал об этой встрече друзьям. Унылые люди сказали, что это мог быть и не Андрей Платонов. Мало ли загадочных типов шатается по бульварам?..

Какая чепуха! В описанной истории даже я – фигура несомненная! Так что же говорить о Платонове» [1, с. 17].

В 2011 году, в честь празднования 70-летия со дня рождения Сергея Довлатова, была установлена мемориальная доска на здании по адресу ул. Гоголя, 56 – том самом месте, где он родился.

В честь 80-летия со дня рождения Сергея Довлатова, 3 сентября в Уфе появилась новая достопримечательность, привлекающая туристов. Теперь на карте города можно увидеть «Довлатовский переулок», который находится между улицами Гоголя и Карла Маркса. А двор по адресу Гоголя, 56, где родился всемирно известный русский писатель и публицист, расписали художники.

Обычный уфимский двор примыкает к Башкирской государственной филармонии, сюда же выходит служебный вход концертной организации. До недавнего времени его обитатели не имели представления о важности исторического местоположения своего дома. Однако сегодня двор превратился в поистине удивительную достопримечательность Уфы – входя в арку, каждый попадает в волшебную вселенную литературного гения, где возникает возможность окунуться в произведения и мир героев писателя.

После множества общественных встреч и активных дискуссий был разработан проект «Двор Довлатова». В его состав были включены детская площадка, несколько интересных табличек и настенные росписи по мотивам иллюстраций Александра Флоренского к произведениям Сергея Довлатова. В планах – вопрос о создании сквера в честь Сергея Довлатова недалеко от здания филармонии, а также, возможно, открытие его музея.

3 сентября 2020 года, в день рождения писателя, был организован Первый Довлатовский фестиваль «Литературный импульс». Это мероприятие, проведенное на основе общественной инициативы, стало замечательным поводом вспомнить о связи писателя с Уфой и сохранить в городе память о нем. В рамках фестиваля проходил конкурс коротких историй в духе Довлатова «Соло на смартфоне». Название конкурса было навеяно произведением Довлатова – «Соло на ундервуде» и «Соло на IBM». Через год, в честь 80-летия Сергея Довлатова, был проведён Второй Довлатовский фестиваль «Литературный импульс», предоставивший возможность молодым писателям поделиться своими произведениями в довлатовской манере. Программа фестиваля включала в себя и презентацию выставки «Сергей Довлатов. Воспоминания в фотографиях Нины Аловерт». Мероприятие проходило в филармонии, ставшей площадкой для интересных встреч, обсуждений и выступлений как артистов, так и писателей.

В Музее истории города Уфы в июне 2023 года открылась фотовыставка «Взгляните на меня с любовью», посвященная творчеству писателя. Экспозиция включала в себя коллекцию уникальных фотографий, запечатлевших жизнь и творческий путь Сергея Довлатова. Каждый кадр был результатом непосредственного взаимодействия друзей и фотографов с писателем.

В рамках открытия выставки была прочитана лекция Андрея Арьева на тему «Метаморфозы Сергея Довлатова». Будучи другом писателя со студенческих времен, Андрей Юрьевич после смерти Довлатова стал составителем его сочинений, комментатором произведений, опубликовал воспоминания писателя.

Сергей Довлатов – имя, знакомое многим и в каждом уголке земного шара: от города Уфы, где родился писатель, до Нью-Йорка, в котором литератор умер и похоронен. «Родился в эвакуации, умер в эмиграции» – так говорят о жизненном пути Сергея Довлатова. Уфа, ставшая его родиной из-за войны, до сих пор гордо претендует на звание родной земли любимого писателя. И хотя идея музея Довлатова в Уфе

возникла относительно недавно, есть предпосылки, что она обязательно воплотится.

Список литературы:

1. Довлатов С.Д. Ремесло / С.Д. Довлатов. – М.: Азбука, 2021. – 256 с.

2. Сухих И.Н. Сергей Довлатов: время, место, судьба / И.Н. Сухих. – СПб.: КультИнформПресс, 1996. – 286 с.

3. Узиков Ю.А. Это с нами навсегда: Литературная карта Башкирии / Ю.А. Узиков. – Уфа: Башкирское книжное издательство, 1983. – 240 с.

© Клысова Г.М., 2023

УДК 821.512.141

Клявлина А.И.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

РИЗА ФӘХРЕТДИНОВТЫҢ “ӘСМӘ” ПОВЕСЫНДА ҠАТЫН-ҠЫҘ ЯҘМЫШЫ САҒЫЛЫШЫ

Мәшһүр ғалим Ризаитдин Фәхретдинов (1859-1936) үҙенең күп яҡлы эшмәкәрлеген Урал-Волга буйы мосолмандарын мәҙәни яҡтан үҫтереүгә арнай. Ислам динендә ғалим-реформатор булараҡ сығыш яһаһа ла, археографик һәм тарихи сығанаҡтарҙы йыйыу, өйрәнеү һәм туплау менән шөғөлләнһә лә, тәрбиәсе-педагог йәки журналист вазифаһын башҡарһа ла, уның бар маҡсаты халыҡтың аң-белемен күтәреүгә, фән-техника яғынан алға киткән Европа илдәре кеүек үк, мәҙәниәтле йәшәргә саҡырыуға йүнәлтелгән була. Уның әҙәби ижадҡа тотоноуы ла, моғайын, мәғрифәтселек идеяларын үтемлерәк итеү, халыҡтың күңеленә еткереү уйынан башланғандыр. Уның «Сәлимә йәки ғиффәт» (1899) һәм «Әсмә йәки ғәмәл вә яза» (1903) повестарының геройҙары – мәғрифәтле мулла, уҡымышлы зат хоҡуҡһыҙ-бәхетһеҙ йәндәрҙең яҡлаусыһы, белемле һүҙе менән яуызлыҡҡа ҡаршы сығыусы ролендә һүрәтләнә. Әйтергә кәрәк, XX быуат башында яҙышыуға ылығыусы, әҙәбиәткә аяҡ баҫыусы һәр кем тип әйтерлек шул осорҙоң абруйлы аҡыл эйәһе Р. Фәхретдиновтың йоғонтоһон кисермәйенсә ҡалмағандыр.

Риза Фахретдиновтың «Әсмә» повесында ҡатын-ҡыҙ образын характеристикалауҙа һәм әҫәрҙең композицияһын булдырыуҙа ауырлыҡтар кисереү роль уйнай.

Әҫәрҙең геройы – 10 йәшендә етем ҡалған Әсмә исемле ҡыҙ. Уның төрлө яҙмыш ауырлыҡтар аша үтеүен күрәбеҙ. Вокзалда «Өҫтөндә ҡырҡ ямаулы, етмеш йыртыҡлы бер бишмәт, ташландыҡ резинка калуш булып, өшөп ҡып-ҡыҙыл булмыш ине» теләнсе ҡыҙ хәленә ҡалыуы, мосолман етемдәренә булған тәрбиәханаһында белем алып, артабан мөғәллимә булыуы эпизодтары аша Әсмәнең еңел булмаған тормошон курергә мөмкин.

Әсмә образы үҙенең туранан-туралығы, йомшаҡлығы һәм изгелеге менән тулҡынландыра, әхлаҡи таҙалығы менән яулай. Беҙ уның ғәҙәттән тыш баҫалҡылығын һәм юғарылығын күрәбеҙ.

Әсмә тормошонда тағы бер фажиғәле роль уйнай – ата-әсәһенең ярҙамын ала алмау. Бер нисә һынау үткәндә, уға атаһының тере булыуы тураһында бәхетле хәбәр килә. Улар күрешәләр, шатлыҡтан ҡосаҡлашып илашалар. Әҫәр аҙағында ҡыҙ кейәүгә сыға һәм матур туй ойошторалар.

Ризаитдин Фәхретдинов халыҡтың киләсәге тураһында уйлай һәм ул, шул иҫәптән, беҙҙең киләсәк быуынды тәрбиәләгән белемле ҡатын-ҡыҙҙарға бәйле, тип иҫәпләй. Яҙмыш кирелектәре аша Әсмә көскә эйә була, үҙен һаҡлап ҡала һәм уҡытыусы, милләт әсәһе булып китә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Егерменме быуат башҡорт әҙәбиәте / төҙ. Р.Н. Байымов. – Өфө: ГУП «Уфимский полиграфкомбинат», 2003. – 568 б.

2. Ризаитдин Фәхретдин. Мәжит Ғафури. Шәйехзада Бабич: Егерменсе быуат башы / төҙ. И.Ә. Шарапов. – Өфө: Китап, 2007. – 336 б.

3. Риза Фәхретдинов (1859-1936). Әсмә йәки ғәмәл вә яза: (ҡыҫҡартып алынды) // Башҡорт әҙәбиәте. XX быуат башы: 2 китап / төҙ. В. Әхмәҙиев, И. Бүләков, Ғ. Хөсәйнов (ред.). – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. – 17-47 бб.

© Клявлина А.И., Салаватова Ф.Р., 2023

УДК 82.09

Криницина М.А.,
2 курс, ФБФВиЖ, УУНиТ
Гареева Г.Н.,
док-р филол. наук, проф.

ВОПРОСЫ ИЗУЧЕНИЯ ЯЗЫКА ХУДОЖЕСТВЕННОЙ ЛИТЕРАТУРЫ: СТИЛЬ, ЯЗЫКОВЫЕ СРЕДСТВА, ЛИНГВОПОЭТИКА, ИНТЕРТЕКСТУАЛЬНОСТЬ

Художественная литература всегда привлекала внимание изучающих язык, так как она является не только отражением культуры и истории народа, но и комплексным произведением, которое включает в себя различные языковые средства и стилистику. Исследование стиля, языковых средств, лингвопоэтики и интертекстуальности в художественной литературе позволяет лучше понять и проанализировать глубину и разнообразие ее выражения.

Один из главных аспектов изучения языка художественной литературы – это анализ стиля. Стиль может быть определен как способ, в котором автор использует языковые средства и структуру текста для передачи своих мыслей, создания атмосферы и установления контакта с читателем. Стиль может быть кратким, описательным, эмоциональным или формальным, и каждый стиль отличается языковыми приемами, такими как фигуры речи, образные средства и др. Анализ стиля позволяет нам понять, как автор достигает своих литературных целей и какие эффекты он хотел вызвать у своих читателей. Например, в романе «Преступление и наказание» Ф.М. Достоевского мы видим особую манеру изложения, характерную для автора. Его стиль отличается обилием деталей, раскрытием внутреннего мира героев и глубокой психологической проницательностью. Языковые средства также играют важную роль в чтении художественных произведений. Авторы используют различные языковые средства, такие как метафоры, сравнения, эпитеты и др., для создания образов, передачи эмоций и атмосферы произведения. Например, в поэме «Евгений Онегин» А.С. Пушкина широко использованы приемы рифмы, аллитерации и ассонанса, которые создают мелодичность и ритмичность текста. Такие языковые средства помогают передать эмоциональную составляющую произведения и подчеркнуть его художественную ценность. Лингвопоэтика – это наука о языковых средствах, используемых в художественной литературе. Она изучает как фонетические, так и структурные особенности текста, которые помогают создать единое

гармоничное произведение. Ритм, стихи, звукопись – все это важные элементы лингвопоэтики, которые делают произведение музыкальным и запоминающимся. Анализ лингвопоэтики помогает понять, как автор управляет звучанием и ритмом текста, чтобы создать особую атмосферу и эмоциональную реакцию у читателя. Примером может служить поэма А. Блока «Двенадцать», в которой использованы языковые приемы, такие как аллегория, метафора и символика, для передачи глубокого философского смысла.

Интертекстуальность, еще один аспект изучения языка художественной литературы, акцентирует внимание на взаимосвязи между различными литературными произведениями. Часто в художественных текстах можно найти отсылки к другим произведениям, цитаты или парафразы, которые добавляют новые уровни смысла и позволяют читателю глубже понять и оценить текст. Интертекстуальность расширяет контекст произведения и создает мосты между разными произведениями, литературными традициями и культурными контекстами. Например, роман «Война и мир» Л.Н. Толстого содержит множество интертекстуальных отсылок к историческим событиям и другим литературным произведениям. Изучение языка художественной литературы – это возможность получить глубокое понимание творчества и мыслей авторов. Путем анализа стиля, языковых средств, лингвопоэтики и интертекстуальности мы можем раскрыть ценность и эмоциональную составляющую произведений. Это позволит нам лучше оценить литературные работы и самостоятельно творчески выражать свои идеи на языке искусства слова.

© Криницина М.А., Гареева Г.Н., 2023

УДК 80

Кульсарина И.Г,
канд. филол. наук, доц.
Мустафина В.М.,
магистрант, УУНиТ

СТРУКТУРНО-СЕМАНТИЧЕСКИЕ ОСОБЕННОСТИ МОЛОДЕЖНОГО СЛЕНГА В РУССКОМ И БАШКИРСКОМ ЯЗЫКАХ

Язык как основной транслятор культуры, ценностей, норм и идентичности ярко отражает изменения, происходящие в обществе. Неотъемлемой частью лингвистической эволюции являются

трансформации, которые могут оказывать ограничивающее или расширяющее влияние на способность языка выражать культурное содержание, мысли и чувства. В связи с этим особенно актуальными становятся исследования, посвященные изучению молодежного сленга.

Необходимо отметить, что термин «молодежный сленг» не ограничивает возраст или социальные категории людей, которые могут применить эту лексику в своей речи. Практически каждый человек может ее использовать, однако большее число случаев употребления сленга наблюдается в общении студентов и подростков.

Молодежные жаргонные слова часто являются сокращенными версиями общего слова или даже фразы. В русском языке встречается много заимствований из английского языка. Например, слово «клава» – клавиатура в английском языке «keyboard»; «ava, avatar» (ава, аватар); afterpati – after party и т.д., которые являются наиболее популярными в современном молодежном сленге. Существует большое количество примеров из словаря молодежного сленга, образование которых объяснить достаточно трудно, а порой невозможно.

Значительную группу в данной лексике занимают слова, образованные путем аффиксации. Так, слова *«дискач», «стукач»* образованы с помощью суффикса -ач-; *«математичка», «истеричка»* - ичк-. Так, «стукач» – человек, который отслеживает новости о других и делится информацией со своим окружением. Часто используется этот термин в метафорическом смысле для обозначения людей, предающих товарищей для своей выгоды: «Ты был моим другом, но ты стал настоящим стукачом».

Суффикс -ух(а)- активно используется для образования слов экспрессией ироничности и пренебрежительности: *спокуха* (спокойствие), *показуха* (показ), *кликуха* (кличка) и т.д. В речи студентов часто используются слова *«общага», «котяра»,* образованные также суффиксальным способом.

Суффиксы -лк(а)-, -л(а), -щик, -ник образуют от глаголов слова, обозначающие наименования лиц по действию: *водила (водить), кидала (кидать), училка (учить), тусовщик (тусоваться*) и др. Отметим, что указанная лексика нередко функционирует в произведениях искусства о молодежи. В некоторых случаях она вынесена в их заглавия: повесть А.В. Иванова «Общага-на-Крови», «Училка» (художественный фильм) и др.

В речи молодежи часто встречаются существительные, образованные от глаголов бессуффиксальным способом: отпад, облом,

прикид. Среди глаголов преобладают производные с -ну, -ану, обозначающие мгновенность, однократность действия: *тормознуть, лопухнуться, ломануться*. Встречаются глаголы, образованные префиксальным способом: *свалить (уехать, уйти), отвалить, отмазаться, слинять* и т.д. Активно функционируют в речи молодых имена прилагательные, образованные префиксально-суффиксальным способом от существительных: *чумовой, ломовой, жлобский*.

Если рассмотреть в тематическом плане, в молодежном сленге особую группу составляют слова, связанные с компьютерными технологиями и заимствованные из английского языка. Как было отмечено исследователями, большинство компьютерных жаргонизмов создано молодежью [2, с. 13]. Часто можно услышать в речи молодых такие слова и выражения: *бан, забанить, наложить бан* (ввести запрет для пользователя отправлять сообщения); *батон, батон (кнопка), прессовать батоны* (работать за клавиатурой); *виснуть* (попадать в неотвечающее состояние (о компьютере)); *дрова* – драйверы, *чайник* – малоопытный пользователь; человек, который не умеет пользоваться персональным компьютером в нужном для него объеме и т.д.

Вышеуказанная лексика активно используется и в речи башкироязычной молодежи. Как показывают наши наблюдения, в башкирском языке сравнительно мало сленговых выражений. В основном молодые люди используют заимствованный сленг из русского языка. Если компьютерный сленг используется в таком же виде, как в русском языке (т.к. они заимствованы в большинстве случаев из английского языка), то исконно русские слова подвергаются фонетическим и словообразовательным изменениям: ишеү *(ещё), вис (всё), хет (хоть), прәм (прямо)* и т.д. Приведем примеры из художественных текстов, где в речи молодых персонажей использована эта лексика: «*Хәҙер киләм, һыу алып киләм. Юлда ищеү бер болан да менеп алып ҡайтам»* [4, с. 51]; «*Беҙ киләһе аҙна вис кенә ҡайтырбыҙ. Бөгөн кәрәк ине. Прәме әле»* [4, с. 69]; «*Шуныһы ҡыҙыҡ – ниндәй көй иҫенә төшә, шул моң аҡыла башлай. Хет заказ буйынса тыңла»* [4, с. 75]; «*Май булмаһа, һыуҙа "жарить" ит. Закуска һинән»* [4, с. 64]; «*Ой, башына еҫ тейәсәк, ой, тейәсәк. Һәм капут буласаҡ»* [4, с. 74].

Как известно, в молодежной среде широко распространены прозвища. Так, в повести М. Кунафина читаем: «*Егеттәрҙең һәр береһенең ҡушаматы бар ине. Рәүеф, ысынлап та, Рафа – башҡа килгән яфа, улай зыяны ла, шулай уҡ файҙаһы ла юҡ уның, яфанан Рафаға әйләнде бына. Шамилды бәләкәй саҡта "Шәм" тип йөрөтәләр. Хәҙер*

күптәр Шома тиҙәр. Ә Фәнилде урыҫсалап Федя тип ебәрәләр. Был законһыҙ исемдәренә үҙҙәре лә күнегеп бөткән» [4, с. 64-65].

Анализируя студенческий жаргон, исследователи выделяют следующие причины их употребления в речи молодых: «…стремление к большей экспрессивности речи, эмоциональной оценки события, предмета; выполнение конспиративной функции; номинация новых предметов и реалий; <…> акцентуация своей принадлежности факультету, профессии; стремление к простоте и краткости речи и т.д.» [3, с. 12].

В русскоязычной и башкироязычной студенческой среде часто используются такие выражения: *универ* (университет), *препод* (преподаватель), *абитура* (абитуриент), *автомат* (автоматическое проставление зачета или оценки за экзамен по результатам работы в течение семестра), *академ* (академический отпуск), *бомба* (заранее написанный ответ на билет на экзамене или зачете); *курсач, курсовик* (курсовая работа), *перваши* (первокурсники), *экватор* (середина срока обучения) и т.д.

Таким образом, сленг занимает особое место в речи молодежи и требует всестороннего изучения исследователями.

Список литературы:

1. Береговская Е.М. Молодежный сленг: формирование и функционирование // Вопросы языкознания. – № 3. – 1996. – С. 32-41.

2. Горшков П.А. Сленг хакеров и геймеров в интернете: автореф. дис. … канд. филол. наук. – М., 2006. – 20 с.

3. Захарова Л.А., Шуваева А.В. Словарь молодежного сленга (на материале лексикона студентов Томского государственного университета): учебно-методическое пособие. – Томск, 2014. – 126 с.

4. Кунафин М.С. Квадратное солнце. Повести и рассказы. – Уфа, 2021. – 304 с. (на башк.яз.).

© Кульсарина И.Г., Мустафина В.М., 2023

УДК 821.512.141

Ҡаҙаҡбаева А.Д.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд.докт., проф.

ӘМИР ӘМИНЕВТЫҢ ХИКӘЙӘ ҺӘМ ПОВЕСТАРЫНДА ЖАНР-СТИЛЬ АЛЫМДАРЫ

Шәлкем-шәлкем хикәйәләр яҙыу менән бергә, һуңғы тиҫтә йылдар эсендә Әмир Әминев ең һыҙғанып ҙур эпик күләмле әҫәрҙәр – повестар ижад итеү өҫтөндә бик емешле эшләне. Замандың иң актуаль проблемаларын бөтә булған ҡырҡылығында күтәргән, тормоштоң төрлө ижтимағи-социаль өлкәләрен яҡтыртҡан, төрлө социаль ҡатламдарҙан алынған геройҙар хәрәкәт иткән “Ҡытайгород” (1999), “Танкист” (2003), “Усман ташы” (2006), “Бер кәмәлә” (2010) повестары Әмир Әминевты хәҙерге башҡорт прозаһының төп үҫеш йүнәлештәрен билдәләшеүсе ҡәләм оҫтаһы, үҙәк фигураларҙың береһе итеп танытты.

Шуныһын һыҙыҡ өҫтөнә алып әйтеп китергә кәрәк, XX быуаттың 90-сы йылдары аҙағында ижад ителгән байтаҡ әҫәрҙәрҙә кешеләрҙең тыуған еренә, тәбиғәтенә аяуһыҙлығының, хыянатының катастрофаға, иҫ киткес ҡыйралыштарға килтереүе яңынан-яңы художестволы алымдарҙа яҡтыртылды. Әмир Әминев реалистик стилдә хикәйәләүҙе үҙ иткән әҙип булараҡ таныла ла, әҙәбиәттәге бындай яңы алымдарға, метафористик сараларға мөрәжәғәт итеү уның ижадында бик ҡеүәтле сағылды.

Яңы юҫыҡтағы эҙләнеүҙәр, стилдәр синтезы тәү башлап уның «Ҡар кешеһе» хикәйәһендә күҙәтелде. Был үҙенсәлектәр артабан «Ҡытайгород», «Танкист», «Усман ташы», «Бер кәмәлә» повестарында айырыуса баҙыҡ булып үҫеште.

«Ҡар кешеһе» хикәйәһендә тотош кешелек цивилизацияһына янаған, глобаль проблемаға әйләнгән экологик мәсьәләне яҙыусы традицион булмаған ирреалистик алымда һүрәтләй. Кешеләрҙе ғәмһеҙ йоҡонан уятыр, һиҫкәндерер өсөн ҡәҙимге әҙәби алымдар ғына көсһеҙ булыуын, тәьҫир итмәүен яҡшы белгән әҙип фантасмагорияға мөрәжәғәт итә. Шаҡ ҡатырыу юлы менән – ауылға зыян килтереүсене тәүҙә айыу тип һунарға сыҡҡан Йомағолдоң мажараларын реалистик алымдарҙа һүрәтләп килеп, артабан был ғифриттең ҡар кешеһе булыуын, уларҙың үрсеүен, тәүҙә малға, унан кешеләргә һөжүм итеүен хикәйәләй барыу юлы менән автор әйләнә-тирә мөхиткә, тәбиғәткә мәрхәмәтле мөнәсәбәттә булмауҙың ниндәй ҡурҡыныс эҙемтәләргә килтереүе

мөмкинлеген, тотош кешелек донъяһына янаған афәт икәнлеген үтемле алымдарҙа иҫкәртә.

XXI быуатҡа аяҡ баҫҡанда кешеләрҙең тыуған еренә мөнәсәбәте проблемаһы замандың тағы ла бер ҡырҡыу ижтимағи–социаль проблемаһы – ер һатыу мәсьәләһе менән барып тоташты.

XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә иң актуалдәрҙең береһе булған, М. Өмөтбаев, М. Аҡмулла традицияларын дауам итеүсе Ш. Бабич, С. Яҡшығолов, Б. Бәхтигәрәй улы, Б. Бикбай һ.б. ижадында реалистик планда киң сағылған проблеманың – ситтән килгән килмешәктәрҙең аңһат ҡына ерҙәргә хужа булып алыуы, ер һатыуҙың халыҡҡа килтергән һәләкәте, милләттең киләсәгенә янаусы күренеш булыуы ер һатыу ваҡиғаларының ниндәй афәтле эҙемтәләргә килтереү мөмкинлеге бөгөнгө прозала Ә. Әминевтың «Ҡытайгород» повесында фантасмагория алымдарында үткер яҡтыртылыш тапты.

Ғөмүмән алғанда, «Ҡытайгород» повесы – реализмды, фантастиканы, трагикомедияға хас һыҙаттарҙы, парадоксты үҙендә туплаған әҫәр. Повесть баштан-аяҡ кинәйәгә ҡоролған. Халыҡтың ер йөҙөндә халыҡ булып йәшәүенә ҡағылышлы проблеманы күтәреүе, киләсәкте дөрөҫ юҫыҡта тоҫмаллауы һәм ғибрәтле итеп һүрәтләп биреүе менән уҡыусыны тетрәндererлек, ҡаршылыҡлы, ҡатмарлы эмоциональ кисерештәрҙе күңел түре аша үткәреп ҡабул итерлек, катарсис кисертерлек көслө ижтимағи яңғырашлы художестволы эстетик күренеш булды был әҫәр.

Повесть, тәү ҡарашҡа, тотош фантастикаға ҡоролған һымаҡ, сөнки беҙҙең ерҙәр ҡытай кешеһенә лә, башҡаһына ла әлегә һатылмаған. Шул уҡ ваҡытта был әҫәр – бөтә тейешле ҡанундары һаҡланған реалистик әҫәр. Бер яҡтан. Дәүләт думаһында ер һатыу буйынса закондар ҡабул ителгән. Һәм повеста һүрәтләнгән ваҡиғаларға оҡшаш хәлдәр бөгөн булмаһа ла, иртәгә, яҡын киләсәктә булыуы бик ихтимал. Икенсе яҡтан, ауыл халҡының тормош-көнкүреше лә, холоҡ-фиғеле лә, психологияһы ла, үҙ-ара мөнәсәбәттәре лә, ер һатыуға бәйле үҙ ҡараштарын белдереүҙәре, үҙ-үҙҙәрен тотоштары ла тап тормоштағыса. Район башлығы Хаким да, колхоз етәкселәре лә тап ысынбарлыҡтағыса. Уларҙың прототиптары беҙҙең арала йөрөп ята. Саф реалистик әҫәрҙәрҙәге етәксе геройҙар менән Хакимды бер таҡтаға ҡуйып ҡарарға мөмкин. Әйтәйек, Хаким борон-борондан күҙ ҡараһылай һаҡланған, ҡәҙерләнгән, ата-бабаларҙан изге мираҫ булып ҡалған ерҙе һата.

Повеста ваҡиғалар районда артта һөйрәлеүсе «Алға» колхозында бара. Ҡытайҙан килгән ер һатып алыусы бизнесменды ҡурай уйнап,

сигеүле оҙон таҫтамалда ҡабарып бешкән икмәк менән ҡаршылайҙар. Алты айҙан һуң ерҙәрен ҡайтарып алырға тип килгән ауыл халҡын ҡытай хужалар ОМОН, милиция, ғәскәр менән ҡаршы ала: «камуфляж форма, баштарына ялтыр каска кейгән, ҡулдарына резина күҫәк тотҡан ҙур төркөм һалдаттар былар яғына ҡарап тора ине»

Әҫәрҙәге кинәйә сюжет үҙәгендәге төп ваҡиғаны тасуирлауға ғына ҡағылмай, төрлө деталдәр, исемдәр, атамалар, эпизодтар ҙа тәрән символик мәғәнәгә эйә.

Район хужаһының исеме юҡ, ул Хаким тип алынған. Уның бар маҡсаты – карьераға үрләү, юғарынан төшкән күрһәтмәләрҙе тейешенсә һәм ваҡытында үтәү, үҙ районында ҫына булһа ла сикләнмәгән власҡа эйә булыу. Хакимлыҡ итеү. Хаким үҙенән ер, тел, милләт тураһында һорамаҫтарын яҡшы белә. Шуға ла ул Фәйзулла ҡарттың, сөгөлдөрсө Нәғимәнең, уҡытыусы Рәсүлдең ҡаршылашыуҙарын еңел һындыра. « Со временем ауылдар бөтәсәк, эш шуға бара», тип алдарға, берәүҙәрҙе ҡурҡытып, икенселәргә араҡы таратып биреп, өсөнсөләренән мыҫҡыл итеп көлөп, дүртенселәрҙе «мәсьәләне дөрөҫ самалай» тип үҫендереп, алдына алған маҡсатына өлгәшә. Милләте менән башҡорт булһа ла. Рухы менән маңҡорт Хаким түрәлек баҫҡысынан өҫкә үрләү өсөн йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Уның ҡыланыштарына ҡарап, ҡайһы берәүҙәрҙең «ришүәт төрлө сүрәткә индерә шул» тип әйткән фараза хаҡтыр тигән фекер уяна.

Сөгөлдөр тейәлгән ЗИЛ машинаһы баҫыуҙа батып ултыра, алға ла, артҡа ла ҡуҙғала алмай. Түрәләр, ҡунаҡтар күҙенә салынмаһын өсөн уны һалам менән ҡаплап ҡуйғандар. Етмеш йыл төҙөгән социализм ҡоролошоноң, коммунизмға табан китеп барыуҙың, Ленин идеяларының мәңге тере булыуының бөгөнгө көндә «батып ултырыуы» ул. Ер һатып отолған халыҡтың да батыуы ул.

Ауылдың исеме – Һыбай. Ғәҙәттә, һәр яңылыҡты, йыш ҡына яҡшылыҡҡа үҙгәреште ҡабул итмәй ҡаршылашыусы арҡыры кәҫтиәндәр был юлы «быңдай бәхет бүтән килмәйәсәк... тиреҫ еҫкәп, батҡаҡ кисеп ғүмер үтте бит инде былай ҙа» тиҙәр, етешһеҙ, бер уңайлыҡтары ла булмаған михнәтле тормошта көн итеп туйған халыҡ ҡалала рәхәт тормошта йәшәү хаҡына ерҙе һатырға ҡаршылыҡһыҙ ғына ризалашып та ҡуя. Йәғни, кәрәкмәгән саҡта Һыбай атланып саба. Ашыҡмайынса, төплө фекер алышып, уртаҡ бер фекергә килеү урынына, иҫ киткес мөһим мәсьәлә дыуамаллыҡ. Илтифатһыҙлыҡ, яндырайлыҡ арҡаһында бик тиҙ һәм анһат хәл ителә. Фәйзулла ҡарттың: «Беҙ уларҙы (балаларҙы) ерҙән айырабыҙ, телдән яҙҙырабыҙ. Телдән

яҙҙырҙыңмы – милләт бөттө тигән һүҙ», тигәненә берәү ҙә иғтибар итмәй, күңел һалып тыңламай.

Юл ситендә үҫкән үләндәрҙе сабып, ҡоймаларҙы буяп, яңыртып, ҡыҙыл туҡымаға аҡ буяу менән “Хуш килдегеҙ, ҡәҙерле ҡунаҡтар!” тип яҙып, һылыуҡайҙар конкурсынан яҙҙырып алынған сибәр ҡыҙға икмәк-тоҙ тоттороп, уның эргәһенә бейәү ансамбленән аҡса түләп, махсус рәүештә алып киленгән һомғол егеттәрҙе ҡуйып ҡаршы алына ҡытай бизнесмены. Йәғни, халыҡ буласаҡ һәләкәткә байрамға әҙерләнгән һымаҡ әҙерләнә. Һуңынан шул уҡ ҡытай халыҡты баштан-аяҡ ҡораллы ғәскәр менән ҡаршылай. Бына ҡайҙа ул парадокс!

“Алға“ исемен йөрөткән колхоз районда иң артта һөйрәлә. Ер һатыуға тигәндә һыбай саптырып сыҡҡан Һыбай ауылы халҡы эйәрҙән төшкәндә ер убылған була, аҡыл кергәндә үтә һуң булып сыға. Ҡунаҡ алдында йөҙ ҡыҙармаһын тип тырышыу арҡаһында балалары алдында, үҙ-үҙҙәре алдында йөҙҙәре ҡыҙара. Ҡунаҡ күңелен күп күрә торғас, үҙ күңелдәре төпһөҙ, буш ятыуға ҡала. “Матди байлыҡ тыуҙырыу мөһим, күперҙәр һалдырыу, асфальт түшәү, газ үткәреү, йорттар күтәреү һинең тел, милләт тигән нәмәләреңдән куда важнее“ ти торғас, үҙенең кем икәнлеген. Ҡайһы ил, милләт улы. Ҡайһы Ватан гражданины булыуын да белмәгән. Рухһыҙ әҙәмдәр генә ҡала. Ғөмәмән, әҫәрҙә бындай парадокстар тулып ята.

Быуаттар буйына тыуған ере өсөн ҡан түккән, мөхтәриәтен наҡларға ынтылған башҡорт халҡының көрәш тарихын яҡтыртҡан әҫәрҙәр әҙәбиәт тарихында байтаҡ ижад ителгән. Әммә уларға үткәндә, тарихта ҡалған ваҡиғалар тип кенә ҡарала. Бөгөн ер һатыуҙың һәләкәткә килтереү ихтималлығы хаҡында публицистик сығыштар ҙа байтаҡ. Ләкин улар ҙа эҫе мәлендә генә тәьҫирле.

Әмир Әминев иһә художестволы һүҙ ярҙамында башҡортто башҡорт булараҡ йәшәткән, һаҡлап килгән ерҙең кеше тормошондағы урынын бөгөнгө көн материалында үткер картиналарҙа һүрәтләп биргән. Кәмит ситуациялар ироник тонда хикәйәләнһә лә, уның асылында фажиғә ята. Был йәһәттән повесть трагикомедия жанрына яҡынлаша. «Ҡытайгород» повесында ҡырыҫ реалистик стиль, фашлау тоны, публицистик пафос ироник, сатирик һүрәтләү алымдары менән ҡушыла.

© Ҡаҙаҡбаева А.Д., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Ҡаҙарбаева Г.Н.,
БФШһЖФ, Өфө университеты магистранты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

Ф. БҮЛӘКОВ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ МОРАЛЬ-ЭТИК ПРОБЛЕМАЛАР САҒЫЛЫШЫ

Ф. Бүләковтың Рәсәй, туғандаш илдәрҙең күп кенә сәхнәләрендә ҡуйылған классик әҫәрҙәре билдәле. Шуларҙың береһе – “Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?” драмаһы. Сәхнәгә дүрт кеше генә сыға: ҡарт менән ҡарсыҡ һәм уларҙың йәшлеге – Абдулла менән Фатима. Йәмғиәттең төп берәмеген тәшкил итеүсе ир менән ҡатындың килеп тыуған ситуация барышында үҙ-ара мөнәсәбәте аша драматург милләт трагедияһын, ғаилә мелодрамаһын һәм Ватан фажиғәһен һүрәтләй.

Йөк аты сүрәтендә йәшәп ҡартайған, Ватанын яҡлап ҡулына ҡорал алған Абдулланың ҡатынының битендәге миңен дә күргә форсат тапмай йәшәүе, “яратам” тигән һүҙҙе әйтеүҙән тартынып ғүмер уҙҙырыуы, мал артынан ҡыуып та етешһеҙлеккә дусар булыуы – бөгөнгө көндә лә осрай торған күренеш. Гел эш, байлыҡ йыйыу, мөлкәт арттырыу менән генә ҡыҙыҡһынған Абдулла бөтә ғүмерен заяға уҙғара: үҙенең нәфсеһе арҡаһында “ата булыу” бәхетен дә татымай, йөклө ҡатынының һаулығын ҡайғыртыр урынға, уны умарталар ташырға ҡуша, ҡәҙерләмәй. Һөҙөмтәлә – ҡарт көнөндә бер кемгә лә кәрәкмәгән мәхлүк хәленә төшә был ҡарт. Йәшәлгән йылдары эсендә кемгә ниндәй файҙалы эш күрһәтеүен һанаған мәлендә лә йүнле бер генә лә изге ғәмәл ҡылмауы асыҡлана.

Ф. Бүләков бер Абдулла образы миҫалында бөтә кешелектең, милләттең проблемаһын күтәрә. Яңы ғына өйләнешкән йәш пар – Абдулла менән Фатиманың ғаилә усағы баштан уҡ тоҡанмай. Тыумаған улына бал йыйыу хәстәрендә Абдулла көн-төн ал-ял белмәй умарталар араһында йөрөй, башҡаларҙан уҙып китергә хыялланып аҡса йыя, ҡайҙалыр ашыға, сәбәләнә. Ауыр эштәрҙә йөрөү сәбәпле, Фатиманың ауыры бер нисә ҡат төшә. Әсә булыу өмөтөн аҙаҡҡаса күңелендә йәшәткән Фатима ғәйепте үҙендә генә эҙләй. Хәләл ефетенең үҙенә ҡарата булған яңылыш мөнәсәбәте – бөтә проблемаларҙың сәбәбе икәнен һуңлап аңлай.

“Бәпес кәрәк уға. Малайы булыуын теләй, көтә! Бала тапмаһаң, айырам, тип ҡурҡыта ” – тиеп өҙгөләнә Фатима. Алдағы тормошта бәхете бармы икәнлеген белергә тырыша, булмаһа, ҡаяға менеп түбән

ташланыу хәленә барып етә меҫкен. Ғөмүмән, йәш ғаилә эсендә булған сетерекле хәлдәр уйландыра авторҙы. Һәр ҡатын-ҡыҙ әсә бәхетен татырға хаҡлы бәндә икәнен иҫбат итә Ф. Бүләков.

Ф. Бүләковтың “Ҡыҙҙар ниңә илай?” драмаһында милләт тотҡаһы булған ҡыҙҙар Дилара, Зөлхизә, Гөлләрә трагедияһы ҡалҡып сыға. Ул фажиғә нимәлә сағыла һуң? Йәштәрҙең ҡалаға барып ҡаллы тормош башларға тырышыуҙарындамы, әллә бәхетле булырға теләүҙәрендәме?

Был һорауҙар әлбиттә бик урынлы. Сөнки драмалағы өс ҡыҙ иңендә ата-әсәһе фатихаһы ғына түгел, ә дөйөм милләттең киләсәге өсөн яуаплылыҡ йөгө ята. Әгәр ҙә донъя ҡото булған гүзәл заттар, хәмер эсеү менән мауығып, әшәке тормош алып бара икән, милләттең, ғөмүмән, томоштоң алға китеүе мөмкин түгел. Шул уҡ Айҙар, Ғайсар кеүек еңелелпе уйҙар менән йәшәүсе көслө заттарҙан ғибәрәт алыу маҡсатын ҡуя Ф. Бүләков. Ундайҙар бит бөгөн донъя тулы: үҙ тормоштарын яҡшы яҡҡа үҙгәртергә теләмәгән, ҡайҙандыр һауанан ярҙам көтөп “йәшәгән”, башҡалар елкәһендә көн иткән битараф бәндәләр. Уларҙан ниндәй кеше сыҡһын һуң? Йә иһә ғүмер буйы ата-әсә елкәһендә йәшәүсе, маҡсатһыҙ, ялҡау кешеләр әҙме һуң йәмғиәттә? Бына ниндәй тәрән уй сөңгөлдәренә батыра үҙ уҡыусыларын автор. Пьесала барған киҫкен социаль күренештәрҙән йәш быуын вәкилдәре бер аҙ үрнәк, фәһем алһын, тигән ҡарашта драматург.

“Яран гөл” тип исемләнгән ике шаршаулы драмаһында иһә Ф. Бүләков ғаилә проблемаһын бөтәнләй икенсе яҡтан аса. Кескәй генә ауыл өйөндә йәшәүсе Ғәли һәм Ғәлиә яҙмышы тасуирлана унда. Өс балаға ғүмер биреп, тәрбиәләп, башлы-күҙле иткән ата-әсәнең ҡартайған көндәрендә ярҙамға мохтаж булып ултырыуҙары – үҙәккә үтерлек. Түшәктә ятҡан әсәләренең килеп хәлен белергә лә ваҡыт тапмаған улдары телеграмма алғас ҡына ҡайта. Тормошта бөтә нәмәне аҡса менән үлсәүсе ағалы-ҡустылы Баян, Зәки, Рәил миҫалында Ф. Бүләков ғаилә ҡиммәттәренең, туғанлыҡ ептәренең мөһимлеген асыҡлай. Ысынлап та, бер оянан осоп сыҡҡан туғандарҙың яҙмышы йәл. Матди байлыҡ артынан ҡыуып, үҙҙәренең иң яҡын кешеләре – ата-әсәһе һаулығына битараф бәндәләргә нәфрәт тәрбиәләй әҫәр. Килендәренең килеп ингәс тә яһалма илау-һыҡтауы, үҙҙәренең ғәйебен бүләк менән ҡапларға теләүҙәре – сирҡаныс күренеш. Нисәмә балаға ғүмер биргән ата-әсә күңеле, дәрәжәһе бындай мөнәсәбәткә лайыҡлымы һуң?!

Шулай итеп, Ф. Бүләковтың драма әҫәрҙәре – тормошсан һәм актуаль проблемалар менән һуғарылған тәрбиә сығанағы. “Һөйәһеңме-һөймәйһеңме?”, “Ҡыҙҙар ниңә илай?”, “Яран гөл” пьесалары аркылы

һәр ғаиләлә булырға мөмкин булған проблемалар анализланды. Татыу ғаилә, туғанлыҡ ептәренең ныҡлығын булдырыу өсөн ҡатын-ҡыҙ иңенә һәм көслө заттар елкәһенә ниндәй ҙур бурыс һалыныуы асыҡланды. Күренекле драматург милләтебеҙ киләсәге етди аң менән йәшәүсе йәштәр ҡулында икәнендә тағы бер ҡат инандырҙы.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Бүләков Ф. М. Пьесалар. – Өфө: Китап, 2008. – 448 бит.
2. Хөсәйенов Ғ.Б. Заман һәм поэзия. – Өфө, 1964. 161-се б.
3. Кирәев Ә.Н. Башҡорт халҡының эпик ҡомартҡылары. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1961.

© Ҡаҙарбаева Г.Н., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Ҡалмырҙина Ф.Н.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

САФУАН ЯҠШЫҒОЛОВ ИЖАДЫНДА РОМАНТИЗМ

XX быуат башы башҡорт поэзияһында үткән тормошто идеаллаштырыу айырым күренеш характерын ала. Был шулай уҡ әҙәбиәттә романтизмдың үҫеше менән бәйле. Колониаль политиканың көсәйеүе, башҡорт ерҙәренең артабан таланыуы, милли хоҡуҡһыҙлыҡ, азат тормошҡа һыуһап та, уның киләсәгенә ышаныстың ҡаҡшай барыуы башҡорт шағирҙарының байтағын, ысынбарлыҡҡа ризаһыҙлыҡ йөҙөнән, үткәнде идеаллаштырыуға этәрә. Шундай шағирҙарҙың береһе Сафуан Яҡшығолов та халыҡтың сәмен уятыу өсөн, мәғрифәтселек ҡараштарынан сығып идеаллаштырып, үткәнгә хөрриәттең, иркенлек һәм ҡаһарманлыҡтың булып үткән, кире ҡайтмаҫ бер дәүере итеңкерәп ҡарай.

Реакция һәм яңы революцион күтәрелеш осоронда башҡорт поэзияһында С. Яҡшығолов ижады киң, ләкин ҡатмарлы һәм ҡаршылыҡлы үҫеш юлына аяҡ баҫа. Ул үҙен рационализмдан һәм дидактиканан арындырып, һүҙ сәнғәтенә әүерелеү йүнәлешендә байтаҡ уңыштарға өлгәшә. Реакцияның ҡысымы сәбәпле, был, осорҙа мәғрифәтселек әҙәбиәтенең ҙур ғына ҡаҙанышы булып торған публицистик пафос һүрәнләнә төшә. Ләкин, романтизмдың үҫеш алыуы айҡанлы, шәхестең эске донъяһына үтеп инеү, уға психологик анализ тәрәнәйә бара. Романтизмдың үҫеүенә тәүге шарт булып революциянан

һуң башланған реакция йылдарында шәхестең йәмғиәттән ситләшеүе тора. Шуға ла башҡорт поэзияһында тәүҙәрәк пассив романтика өҫтөнлөк итә [2, 56].

С. Яҡшығоловтың элекке тормошто, ер-һыуға иркен замандарҙы һағыныуҙарына колониаль политиканың сәбәпсе булыуын иҫәпкә алмай булмай. Был йәһәттән уларҙың элекке иркен далаларҙы, йәйләү тормошон һағыныуҙарында хаҡлыҡ бар. Әммә ҡайһы бер әҫәрҙәрендә ошоға бәйләнешле икенсе бер зарарлы тенденция – башҡорттар араһында элек-электән килгән синфи ҡаршылыҡтарҙы томаларға тырышыу ҙа һиҙелеп ҡала. Был С. Яҡшығоловтың «Йәйләү хәтирәһе», «Инде хәҙер» кеүек шиғырҙарында асыҡ күренә. Шағир был әҫәрҙәрендә башҡорттоң байы менән ярлыһы араһындағы дошманлыҡ тип ерһеҙләнеү һөҙөмтәһе, ә элек, ер иркен, мал күп ваҡытта улар бик татыу булғандар, тигән ҡарашты үткәрә. Сафуан Яҡшығоловтың әҫәрҙәре ерлекле, тап ошо төбәк, ошо ҡәүемдең ошо дәүерҙәге проблемаларын сағылдырыуы менән айырылып тора. Уның яҙғандары – заманының хәүефтәре, кисекмәҫтән хәл итеүҙе талап иткән милләти мәсьәләләр булып тора.

Шулай уҡ XX быуат башы әҙәбиәтендә башҡорт ерҙәренең колонизацияланыуына ҡаршы көрәш төп мәсьәләләрҙең береһе булып, аграр мәсьәләнең мәғрифәтселек һәм дөйөм демократик азатлыҡ хәрәкәте менән тығыҙ бәйләнештә күтәрелеүе – башҡорт ысынбарлығынан үҫеп сыҡҡан оригиналь бер күренеш була. С. Яҡшығоловтың «Башҡорт хәлдәре», «Башҡорт ағаларыма хитап», «Башҡорт ҡыҙына» һ.б. тигән исем менән атап, үҙҙәренең әҫәрҙәрендә «башҡортлоҡ»то һыҙыҡ өҫтөнә алырға тырышалар. Улар үҙҙәренең поэзияһында халыҡ ижады традицияларын уңышлы дауам итеп, Башҡортостан тәбиғәтен, Ағиҙел, Яйыҡ, Дим, Һаҡмар, Ашҡаҙар буйҙарын, тыуған Уралды маҡтап йырлайҙар, фольклор йоғонтоһо шулай уҡ әҫәрҙәре телендә лә сағылыш таба.

Әҙәбиәттең халыҡ ижады традициялары менән тығыҙ мөнәсәбәткә инеп, фольклорҙың поэтик арсеналы, стилистик алымдары һәм традицион образдары менән байыуы уның милли формаһын нығытыуға булышлыҡ итә.

Артабан демократик йүнәлештә тороусы Сафуан Яҡшығолов ижадында ла ул пассивлыҡтан активлыҡҡа табан ыңғайлай. Был процесс илдәге революцион күтәрелештең көслө йоғонтоһонда бара. Романтизмдың үҫеше ҡаршылыҡлы характерҙа булһа ла, лириканың үҫеше өсөн ул ыңғай роль уйнай. Мәғрифәтселек поэзияһы һанға

һуҡмаған шәхесте һәм уның рухи донъяһын һүрәтләү өлкәһендә ул һынылыш яһай. Был иһә поэзияның артабанғы үҫеше өсөн мөһим шарт була.

Романтизмды шулай уҡ тәнҡитле реализмдың үҫешенә бөтөнләйе менән ҡаршы торған йүнәлеш тип тә әйтеп булмай. Реализмдың ысынбарлыҡҡа тәнҡит күҙлегенән сығып ҡарауы – мәғрифәтселек поэзияһының публицистик тенденциозлығынан этәреш алһа, ысынбарлыҡҡа романтик оппозиция реалистик поэзияның эмоциональ үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Реалистик йүнәлеш, юғарыла әйтелгәнсә, буржуаз ысынбарлыҡты тәнҡит итеү, уның йөҙөн асырға ынтылыу, халыҡ тормошон дөрөҫ һүрәтләү, халыҡ массаларына яҡынайыу һәм уларҙың тарихты хәрәкәт иттереүсе көс икәнлегенә аҡрынлап төшөнә барыу менән бергә үҫә [4, 154].

Шулай уҡ, тәбиғи, был дәүерҙә аяҡҡа баҫып килгән башҡорт буржуазияһының да әҙәбиәттә үҙ тауышы ишетелмәй ҡалмай. Буржуаз демократик позицияла торған С. Яҡшығолов кеүек яҙыусылар, милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы сығып, халыҡҡа аң-белем таратыу, милли мәҙәниәтте, әҙәбиәтте үҫтереү яғында тороуҙары менән демократик йүнәлештәге яҙыусыларҙың ынтылыштарына яҡын булһалар ҙа, һүҙҙе милли мәсьәләләр, ерһеҙләнеү тирәһендә ҡуйыртып, хеҙмәт халҡының иғтибарын синфи көрәштән ситләштереүгә тырышыуҙары менән үҙҙәренең сикләнгәнлеген күрһәтә. Шулай итеп, С. Яҡшығолов ижадында буржуаз мөнәсәбәттәрҙе феодаль-патриархаль позициянан тороп тәнҡит итеүсе һәм башҡорт халҡының үткән күсмә, йәйләү тормошон идеаллаштырып, реакция һәм империалистик һуғыш осорҙарында башҡорт әҙәбиәтендә үлемде, ҡәбер тынлығын идеаллаштырыусы, буржуаз декадентлыҡҡа яҡын торған мотивтар ҙа күренеп ҡала.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Вопросы романтизма / Под науч. Ред. Проф. И.А. Гуляева. – Казань: Изд.-во Казан. Ун.-та. Вып. 3, 1967. – 246 с.

2. Ғәйнуллин М.Ф., Хөсәйенов Ғ.Б. Совет Башҡортостаны яҙыусылары. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1988. – 400 бит.

3. Гаджиев А.А. Романтизм и реализм. Теория литературно-художественных типов творчества. – Баку: Әлм, 1972. – 348 с.

4. Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте: Юғары уҡыу йорттары өсөн дәреслек / Редколлегия Р.Н. Байымов, Г.Н. Гәрәева, Р.Д. Мостафина, З.Я. Шәрипова. – Өфө: Китап, 2003. – 576 бит.

© Ҡалмырҙина Ф.Н., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141

Ҡалмырҙина Х.Н.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

МӨХӘМӘТСӘЛИ ӨМӨТБАЕВТЫҢ ПУБЛИЦИСТИК ЯҘМАЛАРЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИКАҺЫ

Башҡорт ижтимағи фекере, милли мәҙәниәте тарихында М. Өмөтбаев мәғрифәтсе шағир, публицист һәм тәржемәсе булараҡ ҡына түгел, мәғрифәтсе ғалим булараҡ та тәрән эҙ ҡалдыра. Уның күп яҡлы ғилми мираҫының ҙур өлөшөн башҡорт халҡының тарихына һәм этнографияһына арналған публицистик хеҙмәттәре тәшкил итә. Уларҙың барлығҡа килеүендә прогрессив урыҫ мәҙәниәтенең һәм фәненең, ғалим-яҙыусыларының М. Өмөтбаевҡа яһаған йоғонтоһо мөһим роль уйнай. Мәғрифәтсе Рәсәйҙең милли өлкәләрендәге халыҡтарҙың, шул иҫәптән башҡорттарҙың тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүҙе, тормош-көнкүреше менән яҡындан танышыуҙы рус фәне һәм әҙәбиәтенең төп бурыстарының береһе һанай. Ул, батша хөкүмәте һәм рәсми фән башҡорттарҙың үҙ аллы халыҡ булыуын инҡар итергә тырышҡан бер мәлдә, уларға үҙ теле, этник территорияһы, үҙенсәлекле тарихы һәм мәҙәниәте булған халыҡ итеп ҡарай.

М. Өмөтбаев башҡорт мәҙәниәте тарихына шағир һәм тыуған яҡты өйрәнеүсе ғалим булараҡ инә. Уның ғилми хеҙмәттәренең һәм шиғри әҫәрҙәренең бер өлөшө 1897 йылда баҫылып сыҡҡан «Йәдкәр» китабында донъя күрә. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың фәнни хеҙмәттәре, шиғриәте һәм публицистикаһы эҙмә-эҙлекле һәм системалы идеологик күренеш булараҡ, башҡорт мәғрифәтселегенең формалашыуында ҙур роль уйнай. Ул заманына ҡарай халыҡҡа аңлайышлы телдә яҙырға, мөмкин тиклем башҡортлаштырырға тырышҡан [6, 585].

Публицистика өлкәһендә М. Өмөтбаев үҙен туған халҡының тормошо һәм яҙмышы менән ысынлап ҡыҙыҡһынған патриот яҙыусы итеп күрһәтә. Үҙенең “Йәмғиәт тәртиптәре”, “Халыҡ байыймы әллә ярлыланамы?”, “Россиялағы “Первое товарищество” циркында”, “Халыҡ мәғарифын юлға һалырға” кеүек мәҡәләләрендә автор ҡыйыу рәүештә батша колонизаторҙарының, реакцион матбуғаттың һәм фәндең “башҡорттар тәбиғәте менән ялҡау һәм аҡыл эшенә һәләтһеҙ” тигән уйҙырмаларын, царизмдың бәләкәй халыҡтарҙы йәберләү, уларҙы бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу сәйәсәтен фашлай.

Ул туған халҡының тормошондағы һынылышлы һәм ҙур әһәмиәткә эйә булған моменттарҙы яҡтыртыуға айырыуса иғтибар итә. Мәҫәлән, башҡорт ғалимдары араһында беренселәрҙән булып Башҡортостандың Рус дәүләтенә ҡушылыуының характеры һәм шарттары хаҡындағы проблемаға асыҡлыҡ индерә. Башҡорт халҡының Урыҫ дәүләте составына инеүен ул ирекле һәм прогрессив акт, уның тарихындағы «аҡ көндәр» тип баһалай, царизм, рус буржуаз мәҙәниәте эшмәкәрҙәре үткәргән шовинистик сәйәсәткә ҡапма-ҡаршы рәүештә, ике халыҡ тормошонан уларҙың дуҫлығын асыҡ күрһәткән һәм бер-береһенә артабан да яҡынайырға булышлыҡ иткән хәл-ваҡиғаларҙы объектив яҡтыртырға тырыша. Шул уҡ ваҡытта тарихи дөрөҫлөккә тоғро ғалим башҡорттарҙың рустарға ҡушылыуы актының кире яҡтарын да ситләтеп үтмәй, крайҙы аяуһыҙ колонизациялау күренештәрен халҡы тарихындағы «ҡара көндәр» тип атай, уларҙы ҡырҡа тәнҡитләп сыға. Ләкин ул халыҡ массаһының бына ошо ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы күтәрелешен уны бөтмәҫ-төкәнмәҫ хафаларға, ҡырылыуға дусар итеүсе тәртипһеҙлек тип иҫәпләй. Быны гуманист ғалим-яҙыусының үҙе дөйөм кешелеккә ете ят күренеш тип иҫәпләгән ҡан ҡойошҡа үҙенсәлекле бер протесы тип ҡарарға кәрәк. Сөнки ул, ихтилалдарға ни тиклем генә ризаһыҙлыҡ белдермәһен, бөтә күңеле, уй-кисерештәре менән һәр саҡ ябай халыҡ яғында ҡала [7].

Публицистик хеҙмәттәрендә ул, мәҫәлән, ихтилал етәксеһе Батыршаға характеристика бирә, үҙенең яҙыу стиле, тоны менән был «зат шәриф»те тотоп биреүсе «ҡуштандар»ҙы ғәйепләүен һиҙҙертә. Боронғо һәм урта быуаттар башҡорт йәмғиәтендәге социаль-иҡтисади һәм сәйәси шарттарға, матди һәм рухи мәҙәниәткә ҡағылып, М. Өмөтбаев башҡорттарҙың малсылыҡ, һунарсылыҡ, балыҡсылыҡ һәм солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән, башында хандар булған ҡәбиләләр союзынан йәиһә бейҙәр етәкселегендәге айырым ырыу-ҡәбиләләренән торған ярым күсмә халыҡтар булыуын һәм һәр бер ырыу-ҡәбилә ойошмаһының үҙенә генә хас атрибуты – тамғаһы, ораны, ҡошо һәм ағасы барлығын күрһәтеп үтә; Алтын Урҙа хакимлығы дәүерендә үҡ барлыҡҡа килгән һәм башҡорттар Рус дәүләтенә ҡушылғас та йәшәүен дауам иттергән тарханлыҡ институты һәм башҡалар хаҡында төплө мәғлүмәттәр бирә. М. Өмөтбаев башҡорттарҙы башҡа халыҡтарҙың тарихы, матди һәм рухи мәҙәниәте менән таныштырыуға ла ҙур иғтибар бүлә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Вильданов А.Х., Кунафин Г.С. Башкирские просветители-демократы XIX века – М.: Наука, 1981. – 256 с.

2. Ҡунафин Ғ.С. Мәғрифәтсе, ғалим һәм әҙип Өмөтбаев - Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 256 бит.

3. Ҡунафин Ғ.С. Ул үҙенә һәйкәл ҡуйып китте // Ватандаш. – 2011. – № 12.–136-162-се биттәр.

4. Рәшит Шәкүр. Арҙаҡлы башҡортта. Ғилми-биографик очерктар. Тулыландырылған 2-се баҫмаһы – Өфө: Китап, 2005. – 79-84-се биттәр.

© Ҡалмырҙина Х.Н., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141.09

Ҡарабаева У.Р.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Янбаев И.К.,
филол. фәнд. канд., доц.

«ЙОСОФ ҠИССАҺЫ»НЫҢ ПОЭТИК ТӘБИҒӘТЕ

Боронғо яҙмалар төрки телдәрҙә «тарих», “ҡисса” «хикәйә», “хикәйәт” кеүек әллә күпме жанр исемдәре аҫтында билдәле, улар араһында бер төрлө аталып та бөтөнләй икенсе жанрға ҡараған йәдкәрҙәр күп осрай. Әкиәт сюжеттары, легенда һәм риүәйәттәр әҙәби яҡтан эшкәртелеп, художество формаға һалынған әҫәрҙәр ҙә бихисап. Лиро-эпик характерҙағы әҙәби әҫәрҙәр үҙҙәре бер төркөм, уларҙа тасуирланған хәл-ваҡиғалар уй-кисерештәр менән үрелеп бара. Боронғо яҙмалар быуаттар дауамында төрлө үҙгәрештәр кисергән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан улар юғары гуманистик идеялары, кешелектең үҫешенә хеҙмәт итеүҙәре, художество матурлығы һәм тәрбиәүи-эстетик йөкмәткеһе менән хәҙерге көндәрҙә лә ифрат ҙур әһәмиәт ҡаҙаналар. Төрлө жанрға ҡараған фольклор ҡомартҡылары һәм боронғо осор әҙәбиәте өлгөләре бөгөнгө көндә лә яҙыусы, шағир, драматургтарға яңы әҙәби әҫәрҙәр тыуҙырыуға нигеҙ булып тора. Уларҙа халыҡтың көнкүреше, донъяға ҡарашы һәм фәлсәфәһе, этнографияһы, тарихи үткәндәре, теләк-ынтылыштары сағылыш тапҡан. Халыҡ ижадында, әҙәбиәтендә, мәҙәниәтендә айырыуса илһөйәрлек, гуманистик идеалдар тураһында күпләп һүҙ йөрөтөлә.

Башҡорт халҡының әҙәби мираҫы ифрат бай һәм күп төрлө. Төрки халыҡтары өсөн уртаҡ иҫәпләнгән байтаҡ әҫәрҙәр араһында, мәҫәлән, V-

XII быуаттарға ҡараған боронғо төркиҙма ҡомартҡылар башҡорт һүҙ сәнғәте тарихында ла оло урын тота. Орхон-Йәнәсәй рун яҙмалары, Й.Баласағуниҙың «Ҡотадғу белек» китабы, М. Ҡашғариҙың «Диуану лөғәт әт-төрк» һүҙлеге, Ә.Йүгнәкиҙең «Хибәт әл-хаҡаиҡ» әҫәре, «Ҡорҡот ата китабы", "Ырҡ битиг" күрәҙәлек китабы - барыһы ла хаҡлы рәүештә башҡорттарҙың да рухи хазинаһы булып тора, беҙҙең әҙәбиәтебеҙҙең юл башы шул ҡомартҡыларға барып ялғана. Урал-Волга төркиҙары халыҡтары өсөн уртаҡ булған Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы, Ҡотбиҙың «Хөсрәү үә Ширин», Харәзмиҙең «Мөхәббәтнамә», Хөсәм Кәтибтең «Жөмжөмә солтан» әҫәрҙәре, С. Сараиҙың «Гөлостан бит-төркиҙ» һәм «Сөһәйел үә Гөлдөрсөн» урта быуат поэмалары ла башҡорт әҙәбиәте рухи хазинаһына инә. Үткән быуаттарҙан беҙҙең көндәргә ҡасида, мәҙхиә, мәрҫиә, дастан, ҡисса, хикмәт, ғәзәл, мәснәүи, робағи, рисалә, нәсихәт жанрҙарындағы күп аноним әҫәрҙәр килеп етә. Башҡорттарҙа, башҡа көнсығыш халыҡтарындағы кеүек үк, поэтик импровизация традицияларының – йырауҙар ижады үҫешә [2, 45]. «Ҡиссаи Йософ» әҫәре бик боронғо замандарҙан уҡ телдән-телгә һөйләнеп һәм ҡулдан-ҡулға күсерелеп, уҡылып йөрөгән. Уның күсермәләрен мәҙрәсәләрҙә уҡыу китаптары сифатында ныҡлап файҙаланғандар, уны бик күп кешеләр ятҡа алып һөйләр булған. "Ҡиссаи Йософ" ҡулъяҙма китабының күләме – 97 бит. Төркиҙ телендә «Йософ вә Зөләйха» ҡиссаһы тәү башлап Ҡол Ғәли тарафынан XIII быуатта яҙылған һәм 1839 йылда баҫылып сыҡҡанға тиклем ҡулъяҙма рәүешендә халыҡ араһында киң таралған булған. Ҡулъяҙма күсермәләре бигерәк тә үткән быуаттың 70-80-се йылдарында уҙғарылған археографик экспедициялар ваҡытында байтаҡ табыла, беҙҙең көндәрҙә лә айырым өлөштәре осрай. СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалында ғына, мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа башҡорт ауылдарында табылған ете ҡулъяҙма китап һаҡлана.

Халыҡ араһында иң күп таралған һәм шәкерттәр өсөн дәреслек ролен үтәгән китап булғанға күрә лә, моғайын, уның яҙма текстары башҡа ҡомартҡыларға ҡарағанда күберкә һаҡланып ҡалғандыр. Поэманы иғтибар менән уҡығанда, уның авторының бик белемле булыуы, үҙ осороноң тарихын, географияһын, яҙыусыларын, әҙәби традицияларҙы яҡшы белеүе аңлашыла. Һәр осор үҙ геройын тыуҙыра. Геройҙар характерында, уларҙың яҙмышында, эш-ҡылыҡтарында осорҙоң дөйөм һыҙаттары, ваҡыт үҙенсәлектәре сағылыш таба. Ҡол Ғәлиҙең «Ҡиссаи Йософ» әҫәрендә төп герой Йософ – ғәҙел идарасы, һәр ваҡыт дөрөҫлөктө хуп күреүсе, тигеҙ хоҡуҡтар өсөн сығыш яһаусы.

Әйтергә кәрәк, Ҡол Ғәлигә тиклем дә, ул йәшәгән осорҙа ла Йософ – Зөләйха сюжетына арналған байтаҡ әҫәрҙәр яҙылған. Шағир уларҙың күбеһе менән таныш булған һәм сюжеттарынан файҙаланған. Ләкин поэмаһын үҙенсә яҙған, билдәле йөкмәткегә үҙгәрештәр индергән, халыҡты борсоған көнүҙәк проблемаларҙы күтәреп сыҡҡан, кешеләрҙең яҡшы, күркәм холҡон, изгелектәрен, яҡшы сифаттарын далап яҙған, кешелекһеҙлекте, мәкерлекте, яуызлыҡты, кеше тәбиғәтенә хас бүтән кире күренештәрҙе фашлаған. «Ҡиссаи Йософ» поэмаһының сюжеты былай: Яҡуб – ырыу башлығы. Уның ике ҡатынынан тыуған ун ике балаһы була. Йософ – сибәр һәм аҡыллы. Туғандары Йософтан көнләшәләр, ҡойоға һалалар, ҡол итеп каруансыларға һатып ебәрәләр. Мысыр батшаһы була. Уға Зөләйхаға ғашиҡ икән. Йософ менән бергә булғансы, ҡыҙға ла әллә ни тиклем ауырлыҡтарҙы үтергә тура килә [3]. Ҡиссаның хикәйәләү стилендә фольклор саралары, халыҡсан һөйләү формалары шулай уҡ ҙур урын алаған. «Йософ менән Зөләйха» халыҡ телендә йөрөй торғас, ҡисса формаһын бөтөнләй юғалтып, баштан-аяҡ әкиәт формаһына күскән, унда ҡобайыр һәм бәйет формалары, сәсәндәр ижадына хас һүрәтләү саралары, бигерәк тә әйтемдәр, тапҡыр һүҙҙәр, ҙур урын ала. Мәҫәлән:

Боҙоҡ уйҙы еренә еткерерһегеҙ,
Тулған айҙай нурлы йөҙөм һулытырһығыҙ,
Атабыҙға был әхүәлде белдерерһегеҙ:
һораһа, яуап бирергә кәрәк имде.
Исраилды ҡалдырырһығыҙ мәхрүм итеп,
Хөсөт менән ағыуларһығыҙ, бәгерен өтөп,
Ҡуркмайһығыҙмы, ҡәрҙәштәр, ул бөйөктән? –
Бындай хәлде һис кенә хуп күрмәҫ имде.

Поэмала геройҙарҙың тормош менән бәйле картиналар һәм уларҙың эш-ҡылыҡтарын мотивациялау күп осраҡта реалистик һыҙаттарҙа һәм ҙур психологик теүәллек менән һүрәтләнә. Поэманың теле һәм формаһы ябайлығы, аныҡлығы менән айырылып тора. Төп геройҙарҙың телмәрендәге һәм автор һөйләүендәге афоризмдар һәм фразеологизмдар халыҡ мәҡәлдәренә һәм әйтемдәренә тап килә. Беренсе тапҡыр Зөләйха һарайы һүрәтләнгәндә һәм икенсе тапҡыр Йософ тарафынан икмәк алырға килгән ағаларын ҡабул итеү өсөн төҙөлгән бина һүрәтләнгәндә һүрәтләү саралары ифрат бай булыуы күренә. Бриллиант, мәрйен менән ялтырап торған алтын ат һыны, колонналар нигеҙендә халыҡтың мәжүси ышаныуҙарын сағылдырған көмөш үгеҙ һыны тора. Һарай үҙе мраморҙан, бында төрлө ағастар күп, уларҙың ботаҡтарында алтындан

ҡойолған төрлө ҡоштар ултыра... Поэманың исеменә төп геройҙарҙың исемдәре индерелгән, әммә үҙәк сюжет буйынса бөтөн хикәйәләү Йософ тирәләй алып барыла. Хатта айырым эпизодта үҙе булмағанда ла, ул йә телгә алына, йә төштә күренә, бер һүҙ менән әйткәндә, ул бөтә ваҡиғаларҙа ҡатнаша. Уның изге кеше өсөн бөтөн традицион һыҙаттарға эйә булғанлығын билдәләргә кәрәк. Был образ (хыялдарҙы аңлатыу һәләте, хайуандар менән аралашыу, мәжүсиҙәрҙең иманға мөрәжәғәт итеүе, аҡыл, мәрхәмәтлек һ.б.) үҙендә «абстракт» психологизмдың билдәле һыҙаттарын йөрөтә:

Ағалары Йософто күтәрҙеләр,
Бер ҡалҡыулыҡ арҡаһына ашырҙылар,
Бахыр Якуп, яңғыҙ ҡалып, зарлы илар,
Динә өйгә һыҡтай-һыҡтай ҡайтыр имде.
Динә әйтер: «Мин дә йоҡлап ята инем,
Төш аралаш ҡапыл илап килеп торҙом,
Эй атайым, төшөмдә ун ҡорт күрҙем,
Алдыбыҙҙа Йософто ҡабырҙар имде». [4].

Шулай итеп, Ҡол Ғәли үҙенең был бөйөк әҫәрендә донъяны яҡшы һәм насар ғәмәлдәргә, йәмғиәтте мәрхәмәтле һәм ҡаты күңелле кешеләргә бүлеп ҡарай. «Ҡиссаи Йософ» поэмаһы донъя әҙәбиәтенең оло хазинаһы булып тора. Ул, башҡорт поэзияһына һәм халыҡтың ауыҙ-тел ижадына йоғонто яһау менән бергә, башҡа халыҡтар әҙәбиәтендә һәм мәҙәниәтендә лә мөһим роль уйнаған.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Баимов Р. Истоки и устья. Заметки о башкирской литературе. – Уфа: Китап, 1993. – 348 с.

2. Башҡорт халыҡ ижады. 6-сы том. Эпос: Ҡиссалар һәм дастандар. Өфө, 2002.

3. Ҡисса-и Йософ // Башҡорт энциклопедияһы. – Өфө: «Башҡорт энциклопедияһы» ғилми-нәшриәт комплексы, 2015–2020.

4. Ҡол Ғәли. Ҡиссаи Йософ. – Өфө: «Китап». – 1993. – 272 с.

5. Поэма «Кысса-и Йусуф» Кул Гали (проблематика, поэтика, язык произведения). Уфа, 1988.

© Ҡарабаева У.Р., Янбаев И.К.,2023

УДК 821.512.141

Маликова М.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Мостафина Р.Д.,
филол. фәнд. канд., доц.

СӘҒИТ АГИШ ХИКӘЙӘЛӘРЕНЕҢ ТЕМАТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Хикәйәләр оҫтаһы булып танылған, балалар әҙәбиәтен, юмор һәм сатираны үҫтереүгә күп көс һалған, күп кенә повестары һәм киң билдәле «Нигеҙ» романы менән уҡыусылар күңелен яулаған талантлы яҙыусы С. Агиштың ижады [1] башҡорт совет прозаһы тарихында лайыҡлы урында тора.

С. Агиш ижади эшмәкәрлеген поэзияла башлай һәм 1927 йылда «Беҙҙең көлөү» тигән тәүге шиғырҙар китабын сығара, поэтик тәжрибә уны һуҙ менән һаҡ эш итергә, талапсан булырға өйрәтә. Ижад уңыштары С. Агишҡа 30-сы йылдар башындағы проза әҫәрҙәре менән килә. «Шартына килһен», «Ялағай», «Тәпән», «Микрофон», «Сафиулла илай» исемле хикәйәләре уның ижадының йылдам үҫеүен, юмор һәм сатира йүнәлешендә ныҡына барыуын күрһәтә. Сәғит Агиш хикәйәләренең ҡайһылары шул саҡлы тәрән, улар хатта повесть, роман йөкмәткеләрен һыйҙырмалы. “Фәтхи һалдат”, “Кунаҡ һәм намыҫ” кеүек хикәйәләре халыҡтың характерын, ҙур тормош тәжрибәһен һәм тарихын һыйҙыра ала. яҙыусының үҙенә лә, әҫәрҙәренә лә хас кинәйәлелек, төртмә теллелек, үткер сарказм, яғымлы юмор, тапҡырлыҡ, ябайлыҡ һәм матурлыҡ сифаттары, уның ижад индивидуаллеген билдәләгән төп үҙенсәлектәр булып, 30-сы йылдарҙа уҡ формалаша.

«Шартына килһен», «Ялағай», «Тәпән», «Микрофон», «Сафиулла илай» исемле хикәйәләре уның ижадының йылдам үҫеүен, юмор һәм сатира йүнәлешендә ныҡына барыуын күрһәтә. Нигеҙҙә 30-сы йылдарҙың тәүге яртыһында яҙылып, төрлө йыйынтыҡ һәм журналдарҙа баҫтырылған тиҫтәнән артыҡ сатирик хикәйәләре С. Агиштың һүрәтләү оҫталығын да, тормошто анализлай, уны социаль-психологик процесс итеп ҡарай белеү маһирлығын да дәлилләй. Уның әҫәрҙәре социалистик үҙгәреште раҫлау принцибына нигеҙләнә, сюжеттары ижтимағи конфликт тарафынан хәрәкәткә килтерелә. Бәрелештең асылы иһә яңы ысынбарлыҡ менән уны ҡабул итмәүсе кешеләр – кулак, дин әһелдәре, әхләҡи боҙоҡ, аҙғын типтар араһындағы ҡаршылыҡтан тора. «Шартына килһен», «Ялағай», «Сафиулла илай» тибындағы хикәйәләрҙә тап шул конфликт һәм шундай әҫәрҙәрҙе фашлау үҙәккә алына.

«Шартына килһен» әҫәрендә автор һүҙҙәре менән геройҙың ошо рәүешендәге уй-кисерештәрен аралаш биреүгә ҡоролған. Был алым персонажды тормошсан кәүҙәләндереүгә, уны психологик тәрәнлектә һәм тулы күрһәтеүгә булышлыҡ итә, шуның менән әҫәрҙе мауыҡтырғыс, уҡымлы яһай.

«Микрофон», «Ышанмаҫ Хәләф» ише бер төркөм хикәйәләрендә С. Агиш үҙҙәренең аңһыҙлығы, күп яңылыҡтарҙы күреп-аңлап еткермәүҙәре арҡаһында аптырап, юғалып ҡалған кешеләрҙән еңелсә көлә, шул арҡала уларҙың тиҫкәреләнеүҙәрен юмористик планда тәнҡитләй. Ундай әҫәрҙәрҙә тормошта көндән-көн нығыраҡ һәм киңерәк урын ала барған яңы күренештәрҙең әүәлге наҙан крәҫтиәндәр Баязит Бикбай, С. Агиш аңындағы психологик ҡаршылыҡтарҙы емереүе, кешеләрҙең иҫкелектән арына барыуына булышлыҡ итеүе үҙәктә тора.

С. Агиш хикәйәләренең геройҙарын ҙур өс социаль төркөмгә бүлергә мөмкин. Уларҙың тәүгеһендә, үҙгәрештәрҙең яңыса асылын аңлап та, сығышы һәм Совет власына ҡаршы булыуҙары арҡаһында шуны ҡабул итә алмаған, әммә шарттарға яраҡлашырға тырышҡан йәшерен дошман вәкилдәре торһа («Шартына килһен», «Ялағай»), икенсеһенә үҙгәрештәрҙең мәғәнәһен аңламайынса, яңылыҡтарға күнегә алмаған типтар инә («Ышанмаҫ Хәләф», «Микрофон»), яңырыу рухын үҙ итеүселәр өсөнсө төркөмдө барлыҡҡа килтерә [2, 45].

С. Агиш сатирик хиәйәләрендә яңы тормош, яңы йәмғиәт шарттары урынлашыуына ҡамасаулаусы күренештәрҙе тәнҡит итһә, юмористик хикәйәләрендә кешеләр характерындағы ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе, яңы мөнәсәбәттәр тыуыу менән шәхес психологияһында үҙгәрештәр барыуын еңелсә көлөү аша һүрәтләй, тормошҡа комик биҙәктәр өҫтәй. Мәҫәлән, автор «Эш самауырҙа түгел» хикәйәһендә ғүмере буйы колхозда эшләп, тынғыһыҙ хеҙмәткә өйрәнгән Хөршиҙәнең улдары ҡунаҡҡа алып ҡайтҡас, ҡалалағы эшһеҙ ултырыуына күнегә алмауын юмор ҡатыш һүрәтләй.

Хәрәкәт үҙәгендә тәүге төркөм персонаждары торған хикәйәләр өсөн һүрәтләүҙең фашлаусан йүнәлеше, сатирик үткерлеге хас булһа, һуңғыларында юмор, йомшаҡ көлөү, мәрәкә итеү өҫтөнлөк ала. Хикәйәләрҙең бөтәһен иһә кеше күңеленә, рухына һиҙгерлек, шуларҙы тормошсан, йәнле сағылдырыу үҙенсәлеге берләштерә. «Ялағай», «Микрофон», «Тәпән», «Шартына килһен» һ.б. хикәйәләрендә яңы ысынбарлыҡҡа аяҡ салыусы, нисек булһа ла үҙҙәрен һаҡлап ҡалырға тырышып, яңылыҡҡа яраҡлашырға ынтылыусы типтар һүрәтләнә. Яҙыусы дәүерҙең, шул осор кешеләренең ижтимағи-психологик

һыҙаттарын реалистик һүрәтләүе, тасуири сараларҙы уңышлы файҙаланыуы менән хикәйә жанрының эстетик әһәмиәтен күтәреүгә, йөкмәткеһен байытыуға һәм тәрәнәйтеүгә, художестволы формаларын төрләндереүгә ҙур өлөш индерә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Агиш С. Әҫәрҙәр. Хикәйәләр, иҫтәлектәр, мәкәләләр, хаттар. 4-се том. – Өфө: Башкортостан китап нәшриәте., 1980. – 496 бит.
2. Башҡорт әҙәбиәте антологияһы, ике томда. II том. XIX быуат. – Өфө: Китап, 2007. – 388 бит.
3. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Дүртенсе том / яуаплы ред. Хөсәйенов Ғ.Б., Байымов Р.Н., Бикбаев Р.Т. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. – 544 бит.
4. Вахитов Ә.Х. Офоҡтар киңәйгәндә. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1979. – 292 бит.
5. Әбсәләмова Ғ. С. Агиш. Тормошо һәм ижады. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1963. – 90 бит.

© Маликова М., Мостафина Р.Д., 2023

УДК 8 (код 1751)

Маметниязова Г.Х.,
препод-ль кафедры иностранных языков, Туркменабат, Туркменский Государственный Педагогический институт имени Сейитназара Сейди

ТЕМЫ ПАТРИОТИЗМА, ГУМАНИЗМА И ЗДОРОВЬЯ В ТВОРЧЕСТВЕ МАХТУМКУЛИ

Махтумкули Фраги – великий мыслитель, который глубоко интересуется судьбой своего любимого народа, его образом жизни, культурой, интеллектуальным уровнем, национальным поведением и традициями. В своих стихах он воспевает туркменский характер и осуждает плохие качества людей. Ценность прекрасных строк Махтумкули на протяжении веков все возрастает и становится более значимой для туркменского народа. Произведения Махтумкули выжны не только с точки зрения гуманизма, патриотизма, нравов и морали, но и для языкознания и литературоведения они играют важнейшую роль. Строки великого мыслителя изучают сотни лингвистов и литературоведов. Стихи Махтумкули привлекают читателя своей высокой художественностью. Особенно лексико-стилистические средства, использованные поэтом способствуют появлению у читателя

более глубоких чувст. В этой статье мы хотим поговорить о темах патриотизма, гуманизма и здоровья в творчестве Махтумкули.

Тема патриотизма. Чувство патриотизма является высшим уровнем духовно-нравственного совершенства и чистоты человека. Патриотическая личность способна мыслить на уровне государства и общества. Она всегда ставит интересы большинства выше своих инересов. Как отмечает поэт, наша любовь к Родине началась еще тогда, когда мы были совсем малы и не понимали что есть что, она берет свои корни от священной колыбели наших матерей. Эта любовь внедряется в душу ребенка нежным голосом матери и переходит с материнским молоком. То есть основы патриотизма закладываются в человеке в святом очаге семьи еще в детстве. Ваша любовь к Родине- это любовь к своему народу, своему родному месту, своей стране, ваше уважение к ним несчислимое и безграничное. С помощью образа соловья, который был разделен со своим цветком, Махтумкули Фраги показывает, что нет края краше и роднее Родины:

Sözlegil bileniň dilde,
Bilbil aýra düşse gülden
Eşit adam, dogan ilden,
Gaýry mähriban ýurt bolmaz (“Mert bolmaz”)

Говори то, что знаешь, Если соловей разлучится с цветком. Услышь, человек, ничего ему родней, Чем его родной край, не будет [4, с.173] В творчестве Махтумкули тема патриотизма дана очень тонко и глубоко: Göz, köňül, dil, akyl − galdy bu dördi, Jan watan arzuwlap, turdy ýel bile. Terhosym bar, gel, terk etme bu ýurdy, Eşret sürgün, söhbet gurgun gül bile [2, 570 s.]

Ум, воля, страсть вскипели вдруг все разом. Душа взметнулась, не сдержать порыв... Стой! Чудный край твой не окинешь глазом. Средь роз блаженствуй, горе утолив [4, с. 265]

Или же:

Eşk döküp dideden, kylmagyl arman,
Terk edip watany bolmagyl rowan,
Meý içip, bezm eýläp, kyl janyň gurban,
Iliňe bagş eýläp ötgül, Pyragy
Проливая слезы, не сожалей,
Никогда не покидай своей Родины,
Пей чистое зелье, радуйся, пожертвуй свою душу,
Перед тем как умирать, посвяти своему народу, Фраги! [4, с. 323]

А в следующих строках он говорит, что тот, кто не был разделен со своей Родиной, не может полностью знать ей цену:

Aýralyk oduna ýanyp bişmegen,
Zalymlar elinden ülke aşmagan,
Watandan aýrylyp ýalňyz düşmegen,
Ülkesinde il gadryn näbilsin.(Gadryn näbilsin), [1, c. 183]
Утративший достоинство джигит,
Где светлый день, где мрак ночной – поймет ли?
Пропойца горький, потерявший стыд,
Где благочестье, где разбой, поймет ли? (Поймет ли?) [4, с. 224]

Тема гуманизма. Человечество неразрывно связано с высокими моральными нормами и ценностями. Гуманный человек – это человек, терпеливый, сострадательный ко всему живому, в высшей степени человеколюбивый и по своей сути очень добрый. Это человек, способный окружить других людей любовью, вниманием и уважением. Народ венчает хорошего, доброго человека, хранит о нем память навсегда. Наш пророк Махтумкули говорит:

Ýagşylykda ile özün tanydan –
Alkyş alyp, derejesi zor bolar,
Ýaman bolup, ýagşylygy unudan –
Öz yzztyn gidir, itden hor bolar. (Zor bolar)
Кто был с людьми хорош, творил добро им,– тот
Везде прославленным, везде воспетым будет;
Кто позабыл добро и обижал народ,–
Тот всюду хуже пса по всем приметам будет (Будет) [4, с. 317]

Или же:

Kömek etseň, ýatdan gitmez,
Ýagşydostdostun unutmaz (Biläni)
Не забывай о верном друге –
И вспомнятся твои заслуги. [4, с. 169]

или:

Magtymguly, är ýagşysyn il t anar,
Aşy – dahan, söz ýagşsyn dil tanar (Galyp men)
Махтумкули, открой секрет своих слов,
До того, когда рок наполнит землей твоих глаз [4, с. 235]

Гуманный человек всегда на стороне справедливости и правды. Чарльз Диккенс говорил : “В этом мире пользу приносит каждый, кто облегчает бремя другого человека”(ДЭ), призывая нас помогать друг-другу, ведь кто, если не люди помогут друг-другу.

Тема здоровья. Творчество является одной из бесценных ценностей и святынь туркменского народа. В произведениях Махтумкули большое место занимает и тема здоровья.

Такие идеи, как отказ от вредных привычек внимательное отношение своему здоровью соотносятся с современной медицинской наукой. Стихи Фраги о табачных изделиях, влиянии курения на здоровье и вредных привычках представляют собой произведения богатого содержания. Махтумкули - поэт, который способен донести до своего читателя вред курения простым, понятным языком посредством искусства слова. Наш национальный поэт в своем стихотворении «Çilim çekmegil» («Оставь курение») подчеркивает вред, который наносит организму сигарета:

Çilimden ýylanlar düşer boýnuňa,
Agzyn açyp, haşlap girer goýnuňa,
Her zaman zäherin salar iniňe,
Haýypdyr janyňa, çilim çekmegil! [2; c.159]
Кальян, виясь, к тебе змеей прильнет.
Шипя от злобы, горло обовьет
И незаметно яд в тебя вольет;
Жизнь пожалей свою, оставь курение! [3; с. 496]

Метафора «змей», использованная в строке “Çilimden ýylanlar düşer boýnuňa” (дословный перевод «Змеи упадут на твою шею из сигареты»), раскрывает опасность сигаретного дыма для здоровья человека, аналогичную змеиному яду. В медицинской науке доказано, что в состав сигаретного дыма входят никотин, сера, придин, цианид, сера, угольная кислота, аммиак, азот и эфирные масла. Эти вещества являются очень опасными для человеческого сердца и кровеносных сосудов. Сигарета считается мощным ядом, повреждающим сердечную систему. В своем стихотворении «Çilimkeş» («Курильщик») Махтумкули подробно описал вред сигареты, сказав, что у курящего человека ослабевает память и внимание, а его потоотделение уменьшается, поскольку сигареты воздействуют на нервный центр:

Kuwwatyň kemelder, güýjüň az durar,
Keýpi kellä gelse, aklyň azdyrar,
Süňňüňi syzdyrar, etiň gyzdyrar,
Bir nyşana budur sende, çilimkeş! [2; c.153]
От неги сладостной твой мтвнет ум нечест,
Ослабнет мощь твоя, и взор твой будет мглист,
В костях заляжет боль, иссохнет плоть,как лист;

Все это причинит тебе чилим, курильщик. [3; с. 473]

В медицинской науке также известно, что курящие люди более склонны к заболеваниям легких. Махтумкули пишет в своем стихотворении:

Her zaman düýt ýuwutdyryp, öýkeniňiz daş eýleýir [2; с. 158]

Ты, весь дрожа, тем ядом будешь сыт. [3; с. 496.]

Независимо от эпохи, в которой изучаются стихи поэта, возникновение проблем, интересующих современных ученых, является вечностью творчества Махтумкули. Махтумкули Фраги, являясь национальным поэтом туркменского народа, будто бы чувствует каждого из нас и пишет на такие темы, которые важны для каждого человека.

Список литературы:

1. *Gurbanguly Berdimuhamedow*. Ösüşiň täze belentliklere tarap. Saýlanan eserler. 1-nji tom. – Aşgabat, 2008.

2. *Magtymguly*. Şygyrlar. Üç tomluk. I tom. – Aşgabat: “Türkmenistan” DNÇB, 1992.

3. Махтум-Кули. Перевод с туркменского. Избранное. Государственное издательство художественной литературы. – Москва 1960. – 496-498 с.

4. https:/www.kitaphana.net. read

© Маметниязова Г.Х., 2023

УДК 821.512.141

Монасипова Г.Р.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

ШӘЙХЗАДА БАБИЧ ПОЭЗИЯҺЫНЫҢ ЖАНР ТӘБИҒӘТЕ

XX быуат башҡорт шиғриәтендә һәм уның бөтә быуатлыҡ юлында Ш. Бабичтың ижади рухиәте һәм ялҡынлы хисе һәр шағирҙың күңелендә йәшәп килә. Бабич образы ла шиғри әҫәрҙәрҙә әленән-әле сағылып ҡала. Ул һәр башҡорт шағиры өсөн дә изге, Бабичтың яҡты рухына баш эйеүселәр ҙә, тәү сиратта, шағирҙар.

Ш. Бабич ижады оҙаҡ йылдар онотолоуға дусар булып, яңы тормош төҙөү менән мәшғүл булған башҡорт шиғриәте уртаҡ хистәр һәм атаҡлы шағирыбыҙ ижадына хас ялҡынлы кисерештәр донъяһында ғына йәшәп килде. Әммә Бабич ижады башҡорт поэзияһы өсөн бер ҡасан да

онотолманы, уның образы элегерәк осорҙа поэзиябыҙҙың күләгәһендә ҡала килһә лә, әҙәбиәтебеҙҙең тамыры һәм сәсәнлектең рухиәте ҡайҙан килеүен барыһы ла аңлай ине [2, 28; 3, 6].

Ш. Бабич ижады үҙенең образлы үткерлеге менән генә түгел, ә жанр тәбиғәте йәһәтенән дә оло ҡыҙыҡһыныу уята. Бабич ижады буйынса Р.Т. Бикбаев, Ғ.С. Ҡунафин кеүек ғалимдар төрлө тикшеренеүҙәр үткәрһә лә, уның әҫәрҙәренең жанр торошо буйынса өйрәнәһе мәсьәләләр бар. Шуларҙың береһе – Бабич ижадында Көнсығыш һәм Көнбайыш жанрҙары поэтикаһы.

Шәйехзада Бабич шиғриәте үҙендә Көнсығыш һәм Көнбайыш шиғриәтенә хас жанрҙар системаһын йөрөтөүе менән үҙенсәлекле. Шағир үҙенең ҡыҫҡа ғына ижади ғүмерендә төрлө поэтик жанрҙарға мөрәжәғәт итеп, башҡорт шиғриәтенең жанр поэтикаһына нигеҙ һалды, тип әйтһәк хаталанмаҫбыҙ.

Көнсығыш шиғриәтенә хас жанрҙарға килгәндә, Бабич ижадында уларҙың иң күренекленә – хитаптар. Ш. Бабич хитаптарында һағышлы хис-тойғолар һәм уй-фекерҙәр, ялҡынлы өндәү-саҡырыуҙар һәм лозунгылар, асыу-ярһыуҙар һәм нәфрәтләнеүҙәр, аналитик күҙәтеүҙәр, хикәйәләү һәм тасуирлау элементтары менән аралашып килә. Поэтик ижад формаларын һәм алымдарын ошо рәүешле оҫта синтезлаштырыуы, художестволы фекерләүенең байлығы һәм киңлеге менән Ш. Бабич замандаш ҡәләмдәштәренән бер башҡа айырылып торҙо.

Шиғриәткә “Эй китап” тигән хитабы менән килеп инә шағир:

Ап-асыҡ тор һәр ваҡытта, эй китап, баҡһам иңә,
Ысын, аҫыл нигеҙле ерҙән күп белемдәр бир миңә!..
Һин йыуатҡыс, һин уятҡыс, һин миңә ысын атам...
Эй китабым, эй китап, миңә ҡыл һин хитап,
Һин генә башымдағы сүп-сарҙы алырһың утап,

Халыҡ темаһы, уның артабанғы яҙмышы проблемаһы Ш. Бабичтың манифестацион-публицистик лирикаһында көндән-көн социаль-сәйәси төҫ ала барҙы. Был тенденция “Әй, большевик”, “Бер муллаға”, “Ҡурайҡайға”, “Күҙеңде ас”, “Һалдатҡа алынған бер дуҫыма”, “Әй, мулла абзый”, “Байҙарға”, “Мөртәт социалистарға” һәм башҡа мәктүбтәрендә һәм хитаптарында үҙенең юғары нөктәһенә етте [2, 44-47].

Шағир үҙенең әҫәрҙәрендә мөхәббәт лирикаһының күренекле өлгөһө булған Көнсығыш шиғриәте жанры – ғәзәлдәргә мөрәжәғәт итә. Ғәзәлден төп һүрәтләү объекты – мөхәббәт, ҡатын-ҡыҙ. Мөхәббәт

лирикаһы тәбиғәтте һүрәтләү менән айырылғыһыҙ бирелә. Башҡа жанрҙар кеүек үк, ғәзәл дә бәйеттәрҙән (ике юллыҡ строфаларҙан) тора, уларҙың һаны ун ике булырға тейеш. Бәйеттәрҙең рифмаһы аа ба ва га һ.б. схемаһына ҡоролған, йәғни тәүге ике юл рифмалашып, унан рифма юл аша килә [3, 97].

Ғәзәл жанрында Шәйхзада Бабичтың ошо йылдарҙа ижад иткән «Исемдәр баҡсаһы» исемле арнауҙары ҡатын-ҡыҙҙарҙың поэтик образын тыуҙырыусы бай йөкмәткеле, юғары художестволы циклды тәшкил итә. Унда 44 исем телгә алына, һәм уларҙа шағир ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәр береһенә тапҡыр характеристика бирә. Шиғырҙарҙың йөкмәткеһе лә, художество формаһы ла бер-береһен ҡабатламай. Һәр арнауҙа автор ҡатын-ҡыҙҙың ниндәйҙер бер матур сифатын аса: ул матур ҙа, олпат та, уңған да, алсаҡ та, моңло ла, зирәк тә, шаян да... Ш. Бабич лирикаһында халыҡтың йәнле һөйләү теленә һәм ижадына хас традицион һүрәтләү алымдары ҡыҙҙарҙың портретын асыуҙа йыш ҡулланыла. Мәҫәлән: ҡашың ҡара, күҙең ҡара, алһыу йөҙөң, күҙең күркәм; тауышың шишмә, телең тәмле; ҡашың йәйә, керпегең уҡ, ауыҙың зәмзәм, иренең кәүсәр, тешең гәүһәр, буйың зифа һ. б.

Мәҫәлән, ғәзәл строфикаһының күренекле бер өлгөһө:

Бар ине, ah, Мәғрүфәне күргән саҡтар, а
Мәхмүр күҙҙән күңелгә рух өргән саҡтар, а
Шул гүзәлде уйлап-уйлап иҫтән тайып, б
Нисә көндәр ашап-эсмәй йөрөгән саҡтар!

Көнсығыш әҙәбиәтендә күренекле бер жанр булған тәмҫил жанры шағир ижадында ҙур урын биләй. Ш. Бабич «Кәзә менән дуңғыҙ» мәҫәлең, «Выждан һәм Нәфсе», «Мал һәм белем», «Ҡандала», «Нәфсе-шайтан» кеүек тәмҫилдәрен ижад итте. «Кәзә менән дуңғыҙ» (1911) мәҫәле ике йорт хайуанының һөйләшеүенә ҡоролған. Кәзә дуңғыҙға күктә ҡояш барлығын аңлатырға тырышып ҡарай, әммә уның был ынтылышы барып сыҡмай, киреһенсә, дуңғыҙ уны «кафыр», «аллаһыҙ» тип әрләп, ҡыуып ебәрә һәм суска дуҫтарына «кәзә мәлғүнде еңдем» тип маҡтана. Мәҫәлдең сюжеты үтә лә ябай, әммә Кәзә менән Дуңғыҙ образдары аша шағир бик мөһим теманы күтәрә һәм үҙенсәлекле хәл итә. Сусҡа образы аша Ш. Бабич наҙанлыҡты, аңралыҡты һәм тупаҫлыҡты фашлай, мәғрифәтселек идеяларын яҡлап сыға. Ким Әхмәтйәнов билдәләүенсә, «тормоштоң ваҡ-ваҡ мәшәкәттәре менән әүрәп йәшәүгә ҡаршы көрәш бында идеал-ҡояшты данлау менән бергә ҡушыла» [4, 42]. Шағир уҡыусыны «тере тупраҡ» булып йөрөмәйенсә, юғары ҡарарға, тормош прозаһынан өҫтөн булырға саҡыра.

«Выждан һәм Нәфсе» (1912) тәмсилендә иһә Бабич кешеләрҙә булған ике ҡапма-ҡаршы сифатты асырға тырыша. Нәфсе (Нон), әгәр уға хужа булмаһаң, кешеләрҙе аҙҙыра һәм юлдан яҙҙыра. Был насар сифаттан ҡотолоу өсен выжданлы (Вау) булыу кәрәк. Был фекерҙең мәғәнәһе киң: ул әхлаҡлы, инсафлы булыу, тигәнде аңлата. Шәйхзада Бабич ижады Көнбайыш поэзияһының күренекле жанрҙарына мөрәжәғәт итеүе менән дә үҙенсәлекле. Был яҡтан уның сатираһы йөкмәткеһе менән дә, жанр һәм стиль тәбиғәте йәһәтенән дә, поэтик эшләнеше һәм интонацияһы яғынан да күп төрлө. Шағир мәҫәл, тәмсил – “Кәзә менән дуңғыҙ” (1911), “Выждан һәм нәфсе” (1912), “Ярғанат” (1914), “Бер тәмсил” (1916), “Тәмсил киҫәге” (1917), сатирик баллада һәм поэма жанрҙарының үҫешенә лә ҙур өлөш индерҙе. Быныҡ асыҡ миҫалы булып уның ижадында ғына түгел, бәлки XX быуат башындағы бөтә башҡорт, ғөмүмән, төркі телле халыҡтар шиғриәте донъяһында художестволы фекерләүҙең үтә лә серле емеше булған “Ҡандала” балладаһы һәм “Ғазазил” поэмаһы тора.

«Ҡандала» (1916) балладаһында кеше, уның күҙе, ҡулы һәм ҡан эсеүсе ҡандала образдары һүрәтләнә. “Ҡандала” образында Бабич бөтә ил тормошон характерлаусы үҙенсәлекле сатирик образ тыуҙырыуға өлгәште. Шуныһы ҡыҙыҡлы, хәҙерге көндә лә сатирик характерҙағы поэмалар бөтөнләй тиерлек ижад ителмәй, сөнки был үҙенә күрә ҙур ижади оҫталыҡ талап итә. Ш. Бабичтың был тарафта бер-нисә поэма ижад итеүе иһә шағирҙың ижади көсөнөң ни тиклем юғары кимәлдә булыуы һәм заманаһынан алға китеүе тураһында һөйләй.

Ш. Бабичтың ижады башҡорт шиғриәтенең рухи тамырҙарының береһе. Бабич ижады менән инде нисәмә быуын шағирҙары рухлана, уның ялҡыны күңелдәрҙе өтә, мәшһүр ижадсыға арнауҙар яҙыуға, уға һоҡланыу хисен белдерергә этәрә. Шәйхзада Бабич ижадында беҙ өйрәнгән хитап, ғәҙәл, тәмсил кеүек Көнсығыш поэзияһы өлгөләре лә, Көнбайыш шиғриәтенә хас поэма, баллада һымаҡ лиро-эпик жанрҙар ҙа ҙур урын ала. Улар барыһы ла Шәйехзада Бабич шиғриәтенең жанр тәбиғәтенең юғары кимәлен, уның XX быуат башында уҡ башҡорт әҙәбиәтен яңы үрҙәргә күтәреүен, шағирҙың поэтик оҫталығын раҫлай.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Бабич Ш. Халҡым өсөн. Шиғырҙар. Өфө, 2005. – 214 бит.

2. Бикбаев Р. Т. Шағир һүҙе-шағир намыҫы. – Өфө: Китап, 1997. – 521 бит.

3. Ҡунафин Ғ.С. Шәйехзада Бабичтың ижад офоҡтары. – Өфө:Китап, 2015. – 286 бит.

© Монасипова Г.Р., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141.09

Мостафина Р.Д.,
филол. фәнд. канд., доц.,
Өфө университеты

XX БЫУАТТЫҢ ТӘҮГЕ ЯРТЫҺЫ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ПОЭМА ЖАНРЫ

Поэма – бер үк ваҡытта лириканың да, эпостың да һыҙаттарын берләштергән жанр. Уҡыусы поэмала ваҡиғалар үҫеше менән бергә персонаждарҙың, геройҙарҙың күңел торошон, рухиәтен, психологияһын да күҙәтә.

XX быуаттың тәүге яртыһы башҡорт шиғриәте поэма жанрының формалашыуы һәм камиллашыуы, эпик һәм лирик башланғыстарҙың синтезы менән билдәләнә. Һәр бәләкәй осор (быуат башы, 20-30-сы йылдар, һуғыш осоро) шартлы рәүештә бүленеп йөрөтөлөүенә ҡарамаҫтан, үҙенең үҫеш үҙенсәлектәре, тенденциялары, жанрҙар төрлөлөгө һәм үҙгәреше менән айырылып тора. Мәҫәлән, 20-се йылдарҙа “Поэзияла шәреҡ әҙәбиәтенең ҡитға, ғәзәл, робағи, мәснәүи, мәдхиә, ҡасида кеүек формалары һәм поэтик традициялары дауам итеү менән бергә, көнбайыш әҙәбиәтенә хас шиғыр, поэма, баллада кеүек жанрҙар өҫтөнлөк итә башлай”[1].

Был осор поэмаларының тематик өҫтөнлөктәре хаҡында һүҙ йөрөткәндә, шул осор тотош әҙәбиәттәге кеүек яңы тормош төҙөү, яңы кешенең формалашыуы, шәреҡ ҡатын-ҡыҙҙары азатлығы һәм тиң хоҡуҡлығы һ.б. темалар үҙәктә торҙо. Дөйөм әйткәндә, шағирҙар заман үҙгәрештәрен, яңы тормоштоң тыуыуын, иҫке тормоштоң артҡа сигенеүен поэма жанрында сағылдырыуҙы үҙләштерҙеләр.

Илдә барған гигант төҙөлөштәрҙе, индустриялаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу ваҡиғаларын эпик киңлектә ҙур дөйөмләштереүҙәр аша яҡтыртыу теләге Т. Йәнәбиҙе поэмалар ижад

[1]XX быуаттың I яртыһындағы башҡорт әҙәбиәте**:** Юғары уҡыу йорто студенттары өсөн уҡыу әсбабы / Г.Н. Гәрәева, Р.Д. Мостафина. – Өфө: БашДУ нәшриәт үҙәге, 2020. 7-се бит.

итеүгә килтерҙе[2]. Был осорҙа уның “Осҡондан ялҡын”, “Эш юлында”, “Бағаналы юл буйлап”, “Еңеүселәр иле” әҫәрҙәре яҙылды. Уларҙа автор йәмғиәттәге үҙгәрештәрҙе, социализм ҡоролошон төҙөүҙе күәтренке пафос менән һүрәтләне. Ғөмүмән, 20-се йылдар поэмаларына күтәренке пафос, яңы тормоштоң килеүенә шатланыу хас, рухы, ҡайһы бер әҫәрҙәргә лозунгылыҡ элементтары ла килеп инә.

Поэмаларҙың төп геройы, әлбиттә яңы тормошто төҙөүсе замандаштар, хеҙмәт кешеһе. М.Ғафури мәҫәләһен, “Эшсе” поэмаһында “Бир ҡулыңды” шиғыры традицияларын дауам итеп, хеҙмәт кешеһенә дан йырланы. Заман геройҙары яңы тормошто үҙгәртеү менән бергә үҙҙәре лә үҙгәрәләр.

Замандың ҡоро риторикаһы һәм пафосы, бөтә әҫәрҙәргә хас булмаһа ла, поэма жанрына ла килеп инә. Дәүер пафосына ярашлы яңы төҙөлөштәр менән рухланыу әле тормоштоң дөйөмөрәк күренештәрен һүрәтләүгә генә алып килеүе күҙәтелә. Әҙәби герой булып күп кенә әҫәрҙәргә йәнһеҙ предметтар килеп инә. Был күренеш хатта тәжрибәле шағирҙар ижадын да урап үтмәне. Мәҫәләһен, Д. Юлтыйҙың “Мәйсәрә” поэмаһынан өҙөк:

Боҙҙай һалҡын суйын, тимерҙәр,
Ҡыҙыл утлы ҡамыр булалар.
Ялҡындарын бөркөп торба буйлап
Төрлө моделдәргә тулалар.

Поэмала Д.Юлтый завод күренештәрен һүрәтләүгә күберәк урын бирә: “...завод шаулай, уйлай шул көйгә”, “Ағиҙелдә ташҡан боҙҙар кеүек завод таша, завод – энтузиаст” кеүек юлдарҙа поэманың төп геройҙары Мәйсәрә, Сәлмән ағай характерҙарына ҡарағанда, завод хаҡындағы тасуирҙарҙың ҡалҡыуыраҡ бирелеүе, кешенең хистәрен дөйөм завод образының эшмәкәрлеге, “уй-тойғолары” алыштырыуы асыҡ күренә.

Икенсе бер поэмаһында ла әҙип:

Бөгөн поэманың геройы –
Шундай заттар, шундай кешеләр:
Металл,
мазут,
күмер,
азот,

[2] ХХ быуаттың I яртыһындағы башҡорт әҙәбиәте**:** Юғары уҡыу йорто студенттары өсөн уҡыу әсбабы / Г.Н.Гәрәева, Р.Д. Мостафина. – Өфө: БашДУ нәшриәт үҙәге, 2020. 23-сө бит.

Гигант завод, удар эшселәр,

Утыҙынсы йылдар башҡорт шиғриәтен поэмалар осоро шиғриәте тип әйтеп булыр ине. Төрлө тематикалы һәм жанры яғынан төрлө-төрлө әҫәрҙәр ижад ителә. Социаль-ижтимағи һәм социаль көнкүреш поэмалары янына кеше күңелдәрен тәрән анализлаған социаль-психологик характерҙар өҫтәлеүе жанрҙың алға китешен аңлата ине.

Был яҡтан Ғәлимов Сәләм поэмалары бигерәк тә характерлы. «Шоңҡар», («Бала», «Өс йыр», «Ғүмер» поэмаларындағы ап-асыҡ төҫмөрләнгән эпик ваҡиғалар геройҙарҙың көсөргәнешле лирик кисерештәре менән һуғарылған, эпик сюжет шулай итеп, лирик хәл ителеш тапҡан. Һүрәтләнгән ваҡиғаларға авторҙың да мөнәсәбәте актив, был да әҫәрҙең лирик яңғырашын көсәйтә төшкән. Ғ. Сәләм поэмаларының үҙенсәлекле композицияһы, һүрәтләү сараларының байлығы был жанр үҙенсәлектәренә байтаҡ ҡына яңы буяуҙар өҫтәй.

Һуғыш йылдары әҙәбиәтебеҙгә Р.Ниғмәтиҙең “Һинең кәләшеңдең хаттары”, “Егеттең яуаптары”, “Үлтер, улым, фашисты!”, “Герой тураһында поэма”, М.Кәримдең “Таныш булмаған ҡунаҡ”, “Декабрь йыры”, “Үлмәҫбай”, М.Тажиҙың “Урал егете”, “Ҡайтҡан шатлыҡ”, Т. Мораттың “Ата һүҙе” һәм башҡа төрлө характерҙағы бик күп поэмаларҙы бирҙе. Халыҡ ижадының күркәм традицияларына таянған Р. Ниғмәти, М. Кәрим поэмалары был жанрҙың аҫыл үрнәктәре булдылар.

Уларҙа ҡыйыу ҡаһармандарҙың батырлығын йырланды. Р.Ниғмәти “Герой тураһында поэма” нда летчик Вася хаҡында бәйән итә. Уның образы ябай ғына штрихтар аша бирелә. Летчик Вася хәл иткес моментта башҡаларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн үҙенең ғүмерен ҡорбан итә. Боеприпастары бөткәс, дошман самолеты өҫтөнә үҙенең тимер ҡарсығаһы менән ташланып, совет аэродромын бомба утына тоторға барған дошманды юҡ итә. Уның батырлығы аша бик күп совет летчиктарының образын дөйөмләштереп бирҙе автор.

“Һинең кәләшеңдең хаттары”, “Егеттең яуаптары” поэмаларында шағир егет һәм ҡыҙҙың мөхәббәтенә, улар араһындағы саф тойғоларға һәйкәл ҡойҙо. Мөхәббәт егетте йәшәтә, еңеүҙәргә рухландыра. Аралары алыҫайған һайын, мөхәббәттәре тәрәнәйә бара. Ҡыҙҙың һөйөүе ни тиклем көслө булһа, дошманға нәфрәте лә шундай уҡ тәрән. “Мин үлһәм, бәхетле һәм гүзәл тормош миңә һәйкәл булыр”,- ти егет. “Үлтер, улым, фашисты!” поэмаһындағы яңғыраған юлдар бөтә совет халҡын көрәшкә рухландырған һүҙҙәр булдылар. Яугирға бөтә Башҡортостан исеменән сал Урал өндәште, батыр улдарын дошманды ҡыйратып, еңеү

менән әйләнеп ҡайтырға саҡырҙы, наказ һүҙҙәре халыҡтың йөрәк түренән сыҡҡан һүҙҙәр улып яңғыраны.

Шулай итеп, XX быуаттың тәүге яртыһында шағирҙарҙың заман һулышын еткерерҙәй поэма тирәһендә эҙләнеүҙәрен һәм уңыштарға өлгәшеүҙәрен күрергә мөмкин.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. 3-4-се томдар. – Өфө: Китап, 1993. – 444 бит.

2. Егерменсе быуат башҡорт әҙәбиәте. – Өфө: Полиграфкомбинат, 2003. – 575 бит. https://kitaptar.bashkort.org/book/620

3. Сәләм Ғ., Хәй М. Һайланма әҫәрҙәр: шиғырҙар, поэмалар һәм сонеттар. – Өфө: Китап, 2011. – 184 бит.

4. Ниғмәти Р. Әҫәрҙәр. Ике томда. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1982. – 234 бит.

5. Моратов Т., Тажетдинов М. Хуш бул! Шиғырҙар. Поэма. Төнгө уттар. Шиғырҙар. Поэмалар. – Өфө: Китап, 2006. – 224 бит.

6. Мостафина Р.Д. Егерменсе быуаттың утыҙынсы йылдарында башҡорт әҙәбиәте (төп үҫеш тенденциялары һәм герой проблемаһы). – Өфө: БДУ нәшриәте, 2010. – 130 бит.

7. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. 4-се баҫма. – Өфө: Китап, 2018. – 400 бит. pdf. [Электрон ресурс] https://vk.com/topic-41267414_39374171 https://vk.com/doc704697_495332779 ?hash=XuG5l3Pgexa1CxsveHc0fPY5Aj6SMzs7Tex0OXkPoXL

8. Әхмәтйәнов К.Ә. Ғ. Сәләм. Тормошо һәм ижады. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1980. – 192 бит.

© Мостафина Р.Д., 2023

УДК 821.512.14

Мөхәмәҙиева А.Ә.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фән. канд., доц.

МӘКТӘПТӘ ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНДӘ АФОРИСТИК ЖАНРҘАРҘЫ ӨЙРӘНЕҮ

Милли әҙәбиәт шәхестең һәм халыҡтың донъяға ҡарашын, йәшәйеште аңлатыуын, фәлсәфәһен, йәшәү рәүешен, аҡылын, тәжрибәһен, ғөрөф-ғәҙәтен, тәбиғәтен психологияһын, эстетик һәм әхлаҡи позицияһын күрһәтә. Ул милли телдең иң гүзәл өлгөләре

вазифаһын да үтәй, тарихи ҡатламдарға ла мөрәжәғәт итә [4, 56]. Ошо маҡсаттан сығып башҡорт әҙәбиәте уҡытыусыһы мәңге эҙләнеүҙә, яңы алымдар, формалар ҡулланып, һәр дәресен уҡыусыларҙың күңелдәрендә уйылып ҡалырлыҡ итеп ойоштороpға тейеш. Был мәсьәлә бөгөн методиканың үткер проблемаларынан һанала. Беҙ әҙәбиәт уҡытыуҙың алты бурысын билдәләйбеҙ:

1. Әҙәбиәткә мөхәббәт уятыу.. Был бурыс балаларҙы китап уҡырға өйрәтеү, күнегеүҙәр үткәреү тигәнде белдерә. Китап уҡымайынса ғына әҙәбиәтте тойоп, кисереп булмай, һәр уҡыған баланы китап әҙәбиәткә яҡынайта, тимәк, уҡыусының эске донъяһына тәьҫир итә.

2. Тормошҡа әҙерләү. Мәктәптә баланы йәшәргә, кешеләр менән аралашырға, теге йәки был ситуацияла үҙ-үҙен нисек тоторға өйрәткән башҡа фән юк. Тап бына әҙәбиәт тормош – ысынбарлыҡты, кешеләргә осрай торған хәл-ҡаршылыҡты, кешенең психологияһын һәм төрлө шарттарҙа үҙ-үҙен тотошон күрһәтә, әҙәби геройҙарҙың күңел матурлығын күреп, әйләнә-тирәләге кешеләрҙең үҙ әҫәрендә нисек итеп матурлыҡ һәм изгелек йөрөтөүен аңлата.

3. Әхлаҡ тәрбиәһе биреү. Мәктәптә әхлаҡ тәрбиәһе – бөгөнгө тормош-көнитмеш өсөн кәрәк булған кешелек сифаттары бөгөнгө йәшәйеш өсөн мөһим ҡағиҙәләргә таянып йәшәү тураһында мәғлүмәт биреү ул.

4. Эстетик мәҙәниәт, ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләү. Эстетик мәҙәниәт төшөнсәһе үҙ эсенә тормоштағы, сәнғәттәге, тәбиғәттәге, көнкүрештәге, хеҙмәттәге, эш-ғәмәлдәрҙәге матурлыҡ менән билдәле бер бәйләнеш булыуҙы һәм үҙеңдең хистәрең менән идара итә алыуҙы һәм белеүҙе, сәнғәт әҫәрҙәрен өлгө итеп алыу теләгеn ала. Әҙәбиәт дәрестәрендә гүзәллекте һәм тәртипһеҙлекте, камиллыҡты һәм етешһеҙлекте айыра һәм уларға ҡарата үҙ фекерҙәрен әйтә белергә өйрәтеү сәнғәт әҫәрҙәренең асылына үтеп инергә ярҙам итә, юғары әҙәби мәҙәниәт тәрбиәләй.

5. Уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙыу телен үҫтереү.

Барлыҡ фән уҡытыусылары ла баланың һөйләмен күҙәтә, яңы текст аңлата, яуапты төҙәтә. Шулай ҙа бары тик әҙәбиәт дәрестәрендә генә телмәр үҫтереү бурысы сәнғәт закондарына таянып башҡарыла. Тимәк, әҙәбиәт дәрестәре уҡыусыларҙың да тел, һүҙ менән дөрөҫ эшләй алыу, һүҙҙең бөтә төҫмөрҙәрен-нескәлектәрен тойоп ҡулланыуына йәшәү йүнәлешендә эшләргә тейештәр.

6. Уҡыусыларҙа милли рух, үҙ халҡының әҙәбиәтенә ихтирам хистәре бар. Шулай итеп, фольклор әҫәрҙәрен дәрестә өйрәнеү мөһим

мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Әҙәбиәт – милләттең ижад хазинаһы, ул халыҡтың үҙенә генә талантлы аҡылын, тәжрибәһен, һәләтен, хисен, хыял-өмөттәрен, донъяға ҡарашын һәм тормошто аңлауын, йәшәү рәүешен – барыһын ла йыйнап килгән. Ошо байлыҡты күрһәтә белеү балаларҙа үҙ милләтенең әҙәбиәте менән ғорурланыу аша барырға тейеш [1, 5]. Сөнки милли әҙәбиәт шәхестең һәм халыҡтың донъяға ҡарашын, йәшәйеште аңлатыуын, фәлсәфәһен, йәшәү рәүешен, аҡылын, тәжрибәһен, ғөрөф-фиғелен, тәбиғәтен – психологияһын, күңел донъяһы, эстетик һәм әхлаҡи позицияһын күрһәтә. Ул милли телдең иң гүзәл өлгөләре вазифаһын да үтәй, тарихи ҡатламдарға ла мөрәжәғәт итә [1, 7].

Балалар өсөн афористик жанрҙар – ауыҙ-тел сәнғәтенең ҙур бер өлөшө. Афористик жанрҙарҙың тәрбиәүи әһәмиәте айырыуса ҙур. Мәҫәлән, халыҡ ижады әҫәрҙәренән балаларға иң яҡыны һәм яратҡаны – әкиәттәр. Халыҡ әкиәттәре – һөйләү телен үҫтереүҙә бай материал булып иҫәпләнә. Хәрәкәттәрҙең, герой һүҙҙәренең билдәле бер тәртиптә ҡабатланып килеүе балаларҙы әҫәрҙәр менән танышыу процесын йәнле һәм ҡыҙыҡлы итеп алып барырға ярҙам итә. Шулай уҡ телмәр үҫтереүҙә тел төҙәткестәр, тиҙәйткестәр ятлауҙың роле ҙур. Йомаҡтар баланы уйын формаһында эш итергә этәрә, ҡул һәм бармаҡ ҡатнашлығында баланың яҡшыраҡ хәтерләүенә, уның фантазияһын үҫтереүенә һәм фекерләү эшмәкәрлеген әүҙемләштереүенә килтерә. Тән хәрәкәте, ҡул һәм телмәр ағзаларының ваҡ моторикаһы йыйылмаһы көсөргәнешлекте кәметеүгә булышлыҡ итә, телмәр паузаларын үтәргә өйрәтә, телмәр темпын нормалләштерә һәм дөрөҫ әйтелеште формалаштыра.

Тиҙәйткес – ул бәләкәй генә әҫәр, йәки айырым һүҙбәйләнеш, йышыраҡ рифмалы. Ул һәр ваҡыт динамик, персонаждарҙың энергиялы ҡылыҡтары менән тулы. Йыш ҡына өҫтәмәләр һорауҙар һәм яуаптар формаһында диалог рәүешендә төҙөлә. Шулай итеп, сабыйға бер күренештән икенсеһенә хәрәкәттәрҙе күсереүҙе, персонаждарҙың мөнәсәбәттәрендәге тиҙ үҙгәрештәрҙе күҙәтеүҙе ҡабул итеү еңелерәк. Бөгөнгө көндә билдәле булған күп кенә өҫтәмәләр быуаттар төпкөлөнән беҙҙең көндәргә килеп еткән башҡорт халыҡ ижады емеше булып тора. Был һүҙ формалары ата-бабаларыбыҙ быуындар аша тапшырған. Йомаҡ – ул ҡыҫҡаса һүрәтләнгән предмет йәки күренеш, йыш ҡына шиғри формала, үҙ эсенә асыҡ йәки йәшерен һорау рәүешендәге мәсьәләне ала. Йомаҡтарҙың йөкмәткеһе кешенең тормошон, уны уратып алған ысынбарлыҡты сағылдыра: үҫемлек һәм хайуандар донъяһы, тәбиғәт күренештәре, хеҙмәт һәм көнкүреш әйберҙәре. Һәр сер асыҡ йәки

йәшерен формала ҡуйылған һорауҙы үҙ эсенә ала. Йомаҡты табыу – ул мәсьәләне хәл итеү, һорауға яуап биреү, ҡатмарлы фекерләү операцияһы башҡарыу.

Шулай итеп, әҙәбиәт элек-электән кеше күңелендә иң йылы, нескә хистәр, иҫ киткес матурлыҡ, изгелек, яҡтылыҡ уятыусы, кеше булырға өйрәтеүсе көстәрҙең береһе булған. Бөгөн мәктәптә әҙәбиәт уҡытыу тураһында һүҙ алып барғанда ла, беҙ уның үҙенсәлектәрен үҙәккә ҡуябыҙ. Был иһә баланың сәнғәт өлкәһендә генә түгел, ғөмүмән, һәр нимәгә ҡарата үҙ фекерен яҡлай алырға күнектерә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ғималова М.Ғ. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. V-XI синыфтар. – Өфө: Китап, 2005. – 522 б.
2. Иҙелбаев М.Х. Әҙәбиәт уҡытыу методикаһы. Юғары уҡыу йорттарының филология факультеты студенттары өсөн дәреслек. – Өфө: БДУ-ның РНБ, 2011. – 210 бит.
3. Иҙелбаев М.Х. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. – Өфө, 1988. – 242 бит.
4. Иҙелбаев М.Х. Мәктәптә әҙәбиәт дәрестәре. Башҡорт әҙәбиәтен уҡытыу методикаһы. – Өфө: Китап, 2013. – 200 бит.
5. Юлмөхәмәтов М.Б., Ҡунафин Ғ.С. «Башҡорт әҙәбиәте» дәреслегенә методик ҡулланма: уҡытыу туған (башҡорт) телдә алып барылған дөйөм белем биреү ойошмаларының 7 – 9-сы кластары өсөн / М.Б. Юлмөхәмәтов, Ғ.С. Ҡунафин. – Өфө: Китап, 2017. – 404 бит.

© Салаватова Ф.Р., Мухамадеева А.А., 2023

УДК 821.512.141

Мөхәмәтова З.А.,
4 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

М. АҠМУЛЛА ИЖАДЫНДА АҢ-БЕЛЕМГӘ ӨНДӘҮ МОТИВТАРЫ

Шағир Мифтахетдин Аҡмулла – XIX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт әҙәбиәтенең иң күренекле вәкиле. Ул яңы типтағы мәғрифәтсе, әҙәбиәтте үҫтереүҙә ғәйәт ҙур роль уйнаны.

Шағир наҙанлыҡты – ҡараңғы төн, белем алыуҙы яҡты көн менән сағыштыра:

Тормошо башҡа илдәрҙең көн шикелле,

Тормошо наҙан илдең төн шикелле [4, 22].

“Байлыҡ” төшөнсәһе үҙе үк Аҡмулла өсөн ике нәмәне – материаль һәм рухи байлыҡты аңлата. Уныңса, тик рухи байлыҡ ҡына ҡыҙығырға лайыҡлы, ә материаль муллыҡ, байығырға тырышыу шәхестең боҙолоуына, әхлаҡи яҡтан тарҡалыуына алып килә. Шуға ла ул донъя малына ҡыҙыҡмаҫҡа, ә үҙеңде-үҙең “эсле-тышлы” ағартырға, ғилем-һөнәргә ынтылырға саҡыра. Шул юл менән ул, социаль тигеҙһеҙлекте бөтөрөп, дөйөм хөр тормош ҡороп була, тип уйлай.

Шиғри образ өсөн халыҡтың көнкүрешенә хас әйберҙәрҙе файҙаланыу, туған тәбиғәттең үҫемлек һәм тереклек донъяһына мөрәжәғәт итеүе, шулай уҡ халыҡ ижады шишмәһенән килгән йор һүҙҙәрҙе, ғибрәтле әйтемдәрҙе киң ҡуллана. Мәҫәлән, ул Мәржәниҙе шоңҡарға, мәғрифәттә уның юғарылығына күтәрелә алмағандарҙы – ҡарағошҡа, Мәржәниҙең дошмандарын йөрәге осҡан төлкөгә оҡшата.

Һауала ул бер шоңҡар әйләнә осҡан
Беҙ йөрөйбөҙ, ҡарағоштай, эҙләп сыҫкан.
Төлкөләр унда сыҙап тора алмайҙар,
Гүйә, бер киң соҡорҙан ҡото осҡан [4, 12].

Аҡмулла шиғырҙары халыҡҡа тәрән мөхәббәт, иҙеүселәргә ҡарата әсе нәфрәт менән ижад ителгәндәр. Тапҡыр телле аяуһыҙ шағир булғаны өсөн байҙар, түрәләр Аҡмулланы яратмайҙар.

Мәғрифәтсенең поэзияһында уның күрергә теләгән идеаль кешене күҙ алдына килтерергә була. Тәрбиәле кеше – тәкәбберһеҙ, ғорур булмаған, ә бик ябай, ихлас, изге күңелле, әҙәпле, ғилемгә ынтылыусан кеше, ул туғандары менән араһын өҙмәҫ, яҡынына һәр саҡ ярҙам ҡулын һуҙыр, мәкерле уйҙа, насар ниәттә булмаҫ. Аҡмулла бөйөк мәғрифәтсе булараҡ шиғырында бөтөн проблемаларҙан бер сығыу юлын күрһәтә – шул проблемаларҙы бөртөкләп һыҙғылау түгел, ә тамыры менән йолҡоп ташлау, ул да булһа иманһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәш тора.

Милләттең алға китешен, мәҙәниәттең сәскә атыуын, ғөмүмән, бөтөн бер халыҡтың бәхетле тормошон айырым күренекле шәхестәргә бәйләп аңлатыу – мәғрифәтселектең типик бер һыҙаты. Башҡорт әҙәбиәтенең мәғрифәтселек дәүерендә уның ошо үҙенсәлек менән билдәләнеүсе күҙгә бәрелеп торған бер сифаты – хәҙерге әҙәби процеста бөтөнләй тип әйтерлек осрамай торған мәдхиә һәм мәрҫиә жанрҙарының киң таралған булыуы. Был жанрҙар Аҡмулла ижадында айырыуса популяр. Уның үҙ заманының күренекле кешеләренә арнап яҙған мәдхиәләре үҙе бер төркөм. Улар араһында камил эшләнеү йәһәтенән дә, шағирҙың донъяға ҡарашын тулыраҡ сағылдырыу яғынан

да, күләменең ҙурлығы менән дә «Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе» айырылып тора. 1888-1889 йылдарҙа ижад ителгән был әҫәр башта мәдхиә итеп яҙылған һәм автор уны Мәржәниҙең үҙенә ебәрергә йыйынып йөрөгән.

Әҫәр, ысынлап та, тулыһынса татар мәғрифәтсеһе күтәреп сыҡҡан реформаторлыҡ талаптарын яҡлап, Мәржәниҙең үҙен «Мәғрифәтсе тормоштоң байраҡсыһы итеп», уға дан йырлауға, уны мәдехләүгә, идеаллаштырыуға ҡоролған.

“Фазыл Мәржәни мәрҫиәһе” әҫәрендәге “хәҡиҡәт диңгеҙе” тигән һүҙбәйләнештең мәғәнәһе киң һәм ҙур. Шағир хәҡиҡәтте диңгеҙ тиеп күҙаллап, шунда бик оҫта йөҙөүсе лирик геройын ғына түгел, ә башҡаларға маяҡ булырҙай көслө образды сағылдыра. Артабан уның эшмәкәрлеге пафослы итеп һүрәтләнә:

Сәләмәтлек шишмәһе юлдар асып,

Хәҡиҡәт йылғаларын ағыҙған ул [12, 62].

Лирик геройҙың шишмәнән башлап, оло йылғаға тиклем юлы – ап-асыҡ халыҡҡа хеҙмәт итеү. Ҡарап үтелгән юлдарҙағы метонимия шағирҙы үтә ныҡ күҙәтеүсән, уй-хистәренең динамикала икәнлеген күрһәтә. М. Аҡмулла ижадындағы троптар һәр һүҙҙең мәғәнәһен балҡытып ебәреү, урынлы һәм тапҡыр ҡулланыу һүрәтләнеүсе предметтарҙы йәнле итеп күҙ алдына тергеҙергә булышлыҡ итә.

Аҡмулла, татар реформаторы Шиһабетдин Мәржәниҙең йөҙөндә мәғрифәтле тормоштоң байраҡсыһын күреп, уға дан йырлай. Уны ул “ҡараңғыла фонарь ҡабыҙған”, “хәкиҡәт йылғаларын ағыҙған”, “Мөһәндистәр (инженерҙар) һиҙмәгән ерҙән ҡыҙып… татлы һыуҙы тәрән”дән сығарған, “Һуҡырҙың күҙен асҡан”, “хәкиҡәт байрағын күтәреп барған көрәшселәр араһында… бер әмир” тип маҡтай; “һауала… әйләнеп осҡан” шоңҡарға, йылҡылар араһындағы толпарға, алыҫтан балҡып торған гәүһәргә, “бәһлеүәндәрҙән йығылыу күргәне юҡ” батырға тиңләп, Көнсығыштың илаһи шифриәтендәге дастан, ҡиссалар геройҙары рухындакәүҙәләндерә. Мәҙәниәттең сәскә атыуын, йәмғиәттең алға китеүен ошондай шәхестәрҙең физакәр эшмәкәрлегенә бәйләп ҡараған шағир юлайҡан татар уҡымышлыһы Ғ. Ҡурсауиға ла, башҡорт ғалим-әҙибе Р. Фәхретдиновҡа ла үҙенең тәрән ихтирамын белдерә. Ошондай уҡ мәҙех һүҙҙәрен ул Ибрай Теләү, Ғәбиҙулла Йыһангиров, Ҡарағоз Барылбай, Бикмөхәмәт Ҡарый улына арнаған әҫәрҙәрендә лә әйтеп бирә. Иҫке тәртиптәргә йәбешеп ятыусыларҙы шағир ҡара буяуҙар менән ҡылыҡһырлай, ҡутырға ҡунған себенгә, ҡара ҡабанға, аҡ маралды төкөп ятыр туҡал кәзәгә, “һауаға ҡарап өрөүсе”

ҡоторған эткә, “алтынға йәбешкән нәжескә” (бысраҡҡа) тиңләй, уларҙың наҙанлыҙтарынан, көнсөллөктәренән көлә.

М. Аҡмулланың мәғрифәттең кешеләрҙе бәхетле тормошҡа, рухи азатлыҡҡа, мәғәнәүи тигеҙлеккә илтер көсөнә мөкиббән китеп инаныуы, аң-белемгә һәм һөнәргә дан йырлауы, ғилем, аҡылдың наҙанлыҡ өҫтөнән тантана итеүе өсөн ярһып көрәшеүе бигерәк тә «Фазыл Мәржәни мәрҫиәһе» тигән әҫәрендә асыҡ күренә. Автор уны мәрҫиә тип атаһа ла, ул бөтә идея-художество үҙенсәлектәре, бөтә тәбиғәте менән мәдхиә (ода) жанрына яуап бирә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Өсөнсө том / яуаплы ред. Хөсәйенов Ғ.Б., Байымов Р.Н., Бикбаев Р.Т. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. – 544 бит.

2. Вилданов Ә.Х. Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте. 1981. – 168 бит.

3. Вильданов А.Х. Выдающийся мыслитель и педагог XIX века // Педагогический журнал Башкортостана. – 2005, № 1. – С. 158-169.

© Мөхәмәтова З.А., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141

Муллаголова А.Р.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

Н. ҒӘЙЕТБАЕВТЫҢ “ЙӘН” РОМАНЫНДА ОБРАЗДАР СИСТЕМАҺЫ

Наил Әсхәт улы Ғәйетбаев – прозаик, шағир, драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре (2011), Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге премия лауреаты (2003). Әҙәбиәткә мөкиббән ғашиҡ уҡыусылар оҫта яҙыусы Наил Ғәйетбаевты күпселек осраҡта тап драма әҫәрҙәре аша таный. Уның пьесалар өлкәһендә бик оҫта ижад итеүе күптән инде сер түгел. Ләкин Н. Ғәйетбаев әҙәбиәттең был төрө менән генә сикләнеп ҡалмай, тәрән йөкмәткеле повесть һәм романдары менән дә үҙен бынамын тигән прозаик итеп тә күрһәтте. Әҙәбиәткә лә яҙыусы нәҡ ошо проза төрө менән - “Көҙгө ямғырҙар миҙгеле” тигән повесть һәм хикәйәләр йыйынтығы менән килеп инә бит.

Был мәҡәләлә Н. Ғәйетбаевтың XX быуаттың һиҡһәнсе йылдар аҙағында балалар, үҫмерҙәр араһында популяр булған, реаллек менән

фантастика, ысынбарлыҡ менән мистика, тормошсанлыҡ менән шартлылыҡ, детективлыҡ синтезынан ойошҡан повестарының үҙенсәлекле бер дауамы тип ҡабул ителгән яңы "Йән" романы тураһында һүҙ алып барыласаҡ.

Наил Ғәйетбайҙың "Ағиҙел" журналының 2022 йылғы 5, 6, 7 һандарында донъя күргән "Йән" романында хикәйәләнгән бар ваҡиғалар, геройҙар ҡылған эш-ҡылыҡтар тәрән фәлсәфә менән һуғарылған, изгелек менән яуызлыҡ, сауап һәм гонаһ, ғәмәл һәм яза һ.б. ҡағылышлы дини тәғлимәттәр күҙлегенән яҡтыртылған. Романдың сюжет ҡоролошо эҙмә-эҙлекле, йөкмәткеһе яғынан бер-береһенә бәйләнешле итеп төҙөлгән. Әҫәрҙең тәүге битенән үк аҙағынаса тиерлек енәйәт эше – йәш ҡыҙ Сәкинәнең үлеме тикшерелә. Детектив ноталары менән һуғарылған был роман уҡыусы күңелендә аҙаҡҡыса интриға тыуҙыра. Романдың төп идеяһы, ваҡиғалар, сюжеты, геройҙары Ғәйнулла образына барып тоташа.

Ғәйнулла – оло йәштәрҙәге яңғыҙ тормош көтөүсе, дин тәғлимәттәренә мөкиббән бирелгән Буранлы ауылы ҡарты. Ул кеше йәненең, тәненән айырылғас, иркен осоп йөрөүе, башҡа йәндәр менән аралашыуы, Йәндең, тышҡы формаһы – тәне, кәүҙәһе үлгәндән һуң икенсе берәү ҡиәфәтендә ҡайтанан донъяға килеүенә, "киренән тыуыуы"на ышана, кеше йәндәре менән бәйләнешкә инә. Уның ошо һыҙаттары өсөн бар ауыл халҡы уға "Сәйер Ғәйнулла" тигән ҡушамат бирә. Ләкин әҫәр аҙағына был образдың "сәйерлегенә" икеләнә башлайһың. Сөнки әҫәр һуңында ул кешеләрҙе дөрөҫ юлға баҫтыра, гонаһтарынан азат итә, дингә әйҙәй. Бынан тыш Ғәйнулла әҫәр барышында бик күп яҡшы эштәр башҡара: Баймаҡтан килгән Айҙар менән Саматты үҙендә ҡундыра, Хәкимәне ҡурҡыныс эштәренән һаҡлап ҡала, Мөбәрәккә файҙалы кәңәштәр бирә. Бар ауыл кешеләре күңелдәрен тырнап торған эс серҙәрен, ҡырын эштәрен тик Ғәйнуллаға ғына ышанып һөйләйҙәр. Романды башлап китеүсе ваҡиға – аварияға эләккән йәш ҡала егете Самат. Уның йәне, һуштан яҙып ятҡан сағында, йәп-йәш, күҙ ҡамаштырғыс сибәр ҡыҙ йәне – Сәкинә менән осраша, уның фажиғәле һәләк булыуын ишетә. Егет, енәйәт эҙенә төшөү өсөн, Буранлы ауылына юллана һәм унда мөхәббәтен – Фәхриназды осрата. Ғәйнулла менән әңгәмәләшеүҙәр, ул биргән китаптар егеткә Хоҙайға яҡынлашыу өсөн юл аса. Тәүҙә бик ҡаты икеләнеүҙәр кисергән, дөрөҫ юл һайлай алмай интеккән егет роман аҙағында дөрөҫ юлға баҫа, бәхетен таба.

Ошо уҡ енәйәт эшен тикшерергә Буранлы ауылына килеп төшкән Айҙар исемле йәш тәфтишсе егет роман барышында шулай уҡ ҡаты икеләнеүҙәр кисерә: уның “идеаль” ғаилә критерийҙарына тап килгән Саниямы, әллә “идеаль” булмаған, ләкин күңеле һөйгән Хәкиәмә? Һуңлабыраҡ бәхеттәрен-мөхәббәттәрен табып ҡауышҡан Рәмил менән Ләйлә тормошон күреп, Айҙар, туйға әҙерләнеп йөрөгән еренән, Сания менән араһын өҙөп, йәне тартҡан Хәкимәгә өйләнергә була. Хәкимә өсөн ул хатта уның енәйәтен аҡларға, уның улын Искәндәрҙе үҙенекеләй ҡабул итергә, бергә ғаилә ҡоропға әҙер була.

Хәкимә – осраҡлы рәүештә Сәкинә һеңлеһен үлтергән, ауылда һылыуҙарҙан-һылыу һаналған, ҡаты холоҡло, ләкин шул уҡ ваҡытта был донъяла күп ыҙа күреп өлгөргән бәхетһеҙ ҡыҙ. Бер үҙе улы Искәндәрҙе үҫтерә. Күңеле сыҙамай, Ғәйнулла ҡартҡа үҙенең ҡылған гонаһтарын әйтеп һалғас, ҡыҙ тәүбәгә килә, дин юлына баҫа. Үҙенең барлыҡ булған бәхетһеҙлектәре ҡылған гонаһтары өсөн, кеше бәхетен үҙенеке иткәнгә Аллаһ тарафынан ебәрелә тигән фекергә килә һәм яратып йөрөгән Айҙар менән араларын өҙә. Улын, әсәһен алып, сит-ят ергә күсеп китеүе героиня күңелендәге киҫкен һынылыш тип, үҙ-үҙен язалауы тип ҡабул ҡылына.

Мөбәрәк – романдың серле, ҡыҙыҡлы образдарының береһе. Ул ата-әсәһе менән Буранлы ауылына яңы ғына күсеп килгән ун йәшлек малай, әҫәрҙәге енәйәт эшенең берҙән-бер шаһиты. Әҫәрҙә уҡыусыларҙы Мөбәрәктең балаларға хас булмаған фекерләү ҡеүәһе, донъяға ололарса ҡарашы, үҙен сәйер тотоуы, ауылдың элекке тормошон яҡшы белеүе аптыратырға мөмкин. Иң аҙаҡтан был ун йәшлек малай Мөбәрәк ҡиәфәтендә ергә ҡайтҡан, фани донъяла күп яуыз эштәр ҡылған, ҡатынын туҡмаған Фәүзиәнең мәрхүм ире Ғәббәстең йәне икәнлеге асыҡлана. Уның фекеренсә, ул был ергә Аллаһ тарафынан үткән ғүмерендәге гонаһтарын төҙәтер өсөн, йәғни тейешле язаһын алыр өсөн ҡайтҡан. Шуның өсөн иҫерек атаһының өйҙә боларыуын, әсәһен, үҙен туҡмауын ул үткән гонаһтары өсөн тейешле яза тип тыныс ҡабул итә.

Фәхриназ менән Шәүрә образдары ла сюжет үҫтерелешендә ярайһы уҡ әһәмиәтле образдар булып торалар. Фәхриназ – ошо уҡ ауылда йәшәүсе, аҡыллы, матур, йәш ҡыҙ, Сәкинәнең әхирәте. Үҙенең бәләкәйҙән бергә уйнап үҫкән әхирәтенең үлеменә һаман да ышана алмай, был ҡайғыны ауыр кисерә. Ләкин Буранлыға Сәкинәне эҙләп килеп сыҡҡан Самат ҡыҙҙың күңелендә ниндәйҙер өмөт нурҙарын уята. Аралашыу барышында егет менән ҡыҙ араһында мөхәббәт тойғолары уяна. Тик быға Фәхриназдың әсәһе Шәүрә ҡырҡа ҡаршы була. Иң тәүҙә

Шәүрә ҡаты холоҡло, барлыҡ ауыл халҡы кешеләре менән конфликтҡа инергә яратҡан үткер һүҙле, әсе телле ҡатын булараҡ һүрәтләнә, аҙаҡтан ул, әлеге лә баяғы, Ғәйнулла ҡарттың китаптарын уҡып үҙгәреп китә, аҡылға ултыра, күптән дошман һанаған күршеһе менән араларын яҡынайта. Был яһил ҡатында хатта намаҙ юлына баҫыу теләге лә уяна.

Романдың аҙағында барлыҡ геройҙар “таҙарыналар”, күҙҙәрен асалар, донъяға яңыса ҡараш менән бағалар. Һәр эшләнгән ҡырын, яуыз эш өсөн тейешле яза алынырға тейеш – романдың төп идеяһы шуға ҡайтып ҡала. Әгәр тейешле яза бирелмәһә, йәне тынғылыҡ тапмаған мәрхүмә Сәкинә иҫкәрткәнсә, һуңынан енәйәт эш өсөн, гонаһ ҡылған өсөн һәр кемде күпкә ауырыраҡ, ғазаплыраҡ яза көтәсәк. Яҙыусы ошондай финал менән кешеләрҙе сафлыҡҡа, изгелеккә саҡыра.

Әҙәбиәт исемлеге:

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 7 томда. Т. 7. – Өфө: Китап, 2019. 800 бит.

© Муллағолова А.Р., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 811.512.141

Муллағолова А.Р.,
5 курс, ФБФВиЖ, УУНиТ
Абдуллина Г.Р.,
филол. фәнд. докт., проф.

РИНАТ КАМАЛДЫҢ “ТАНЯ-ТАҢҺЫЛЫУ” РОМАНЫНДА ЭПИСТОЛЯР СТИЛГӘ ХАС ҮҘЕНСӘЛЕКТӘР

Эпистоляр стиль йөкмәткеһе, төҙөлөшө буйынса башҡа стилдәрҙән шаҡтай айырыла. Ул үҙ аллы булған телмәр төрөнә эйә. Төрлө ҡатлам шәхестәренең үҙ-ара мөнәсәбәттәрен, ысынбарлыҡ хаҡындағы тәҫәүураттарын, тормош-көнкүреш мәсьәләләрен, көндәлектәрҙе, ҡотлауҙарҙы сағылдыра. Шуның менән улар башҡорт телендә үҙен айырым стиль барлыҡҡа килтергән. Аралашыуҙың бер төрө, сараһы булараҡ, хаттарҙың үҙҙәренә генә хас телмәр үҙенсәлектәре, алымдары эшләнгән. Башҡорт әҙәбиәтендә күпселек яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә был стиль менән оҫта эш итәләр. Романдар оҫтаһы Ринат Камал да шулар иҫәбендә. Хат өлгөләре әҫәрҙәргә ниндәйҙер бер ҡабатланмаҫ үҙенсәлек, атмосфера өҫтәй. Ошо үҙенсәлектәрҙе Р. Камалдың “Таня-Таңһылыу” романы өлгөһөндә ҡарап үтәйек.

Был романдың үҙәгендә – Таңһылыу исемле ҡыҙҙың драматик һәм трагик яҙмышы ҡуйылған. Әҫәрҙең яртыһын тиерлек Таня-

Таңһылыуҙың хаттары биләй. Әҫәр жанры буйынса “сентименталь роман” тип билдәләнгән. Уға был статусты биреүгә, бәлки, бер ни тиклем хаттар ҙа булышлыҡ иткәндер. Сөнки тәбиғәте буйынса эпистоляр стиль эмоционаллеге, хистәр һәм тойғолар өҫтөнлөгө менән айырылып тора. Әҫәр сюжеты эпистоляр элементтар менән аралашып килгән хәтирәләргә ҡоролған. Петрик исемле урыҫ егетенә ғашиҡ булып, уға кейәүгә сығып, сит яҡтарҙа исемен, телен үҙгәртеп йәшәп ятҡан Таңһылыуҙың утыҙ ете хаты романдағы сюжетты үҫтерә. Был хаттарҙы ул үҙенең әхирәте Фәнисәгә яҙа. Улар ябай хат ҡына түгел, ә роман сюжетын тәшкил итеүсе өлөштәр. Бер ниндәй диалогһыҙ ҙа хәл-ваҡиғалар күҙ алдына баҫтырыла. Белеүебеҙсә, хаттар – дистант аралашыу ысулы булып тора. Хаттар диалогҡа ҡоролған монолог формаһында яҙыла. Тимәк, хатта бер кеше үҙенен хистәрен, уйҙарын, хәлдәрен, серҙәрен ҡағыҙ битенә тултырып яҙып ҡуя. Был адресанттың үҙ-үҙе менән аралашыуына, йә иһә монологка оҡшап китә. Ләкин шул хатына яуап булып, унын әңгәмәсеһе һорауҙарына яуап яҙа. Шулай итеп, хат алышыусылар араһында яҙма рәүештә диалог, бәйләнеш алып барыла. Мәҫәлән, Ринат Камалдың “Таня-Таңһылыу” әҫәренән бер хат өлгөһөн алайыҡ:

“*Һаумы, Фәнисәкәйем, ҡәҙерлем минең – иң яҡын әхирәткәйем!*

Ни хәлдәрҙә йәшәп ятҡан көнөң, диплом яҡланыңмы? Алдан ҡотларға рөхсәт ит! Хәҙер бөтә ыҙаларың артта ҡалды, тырышлығың емеше – ҡулыңда. Игелеген күрергә яҙһын. Көнләшәм һинән. Ул яҡҡа, был яҡҡа сабыулап йөрөп, томана наҙан ҡалдым инде...”. Бирелгән хатта мәғлүмәтте бер генә кеше еткерә һәм бер генә кешенең телмәре бирелә. Ләкин хат яҙыусының адресат, йәғни Фәнисә менән бәйләнеше өҙөлмәй. Төп герой уға төрлө һорауҙар бирә, өндәшә, хәлдәрен белешә һәм шунда уҡ, һорауҙарына яуап алғандай, хат яҙыуын артабан дауам итә. Һөҙөмтәлә хат эсендә ике кеше һөйләшкән кеүек диалог барлыҡҡа килә. Шуның өсөн дә романдың сюжеты Таңһылыуҙың хисле хаттарына нигеҙләнеп асыла. Ошолай хат алымы менән уңышлы эш итеү – яҙыусының ижади оҫталығының күрһәткесе.

Романдағы Таңһылыуҙың хаттары тәрән йөкмәткеле, оҙон поэмаға тиң. Сөнки һәр бер хатта ҡыҙҙың тойғолары, хистәре, әрнеүҙәре, шатлыҡтары сағыла:

“Алһыу таңдар атыр, ҡояш көлөр, ҡоштар һайрар, бөрөләр шартлап ярылыр, тип өмөтләнәбеҙ. Сафлыҡ, паклыҡ биләр донъяны...Әлбиттә, ҙәмгә өмөт, иман, инаныу кәрәк...Шунһыҙ ул йәшәй алмай...”

“Иҫәр, башһыҙ, һаман да ниҙер көтәм, нимәгәлер өмөт итәм. Күктән бәхет, диңгеҙҙән тыныслыҡ юрайым. Яҡты көн көтәм, йылы ямғыр ҡойор, тип өмөтләнәм.”

“Хәҙер мин үҙемдең бәләкәй генә һөйөнөстәремде лә күрергә – ҡәҙерләргә өйрәндем. Полина Сергеевна әйтмешләй, һин зәңгәр күккә һөйөн, ҡояшҡа һөйөн...”

Күренеүенсә, был юлдарҙа поэтика ярылып ята, Таңһылыуҙың үҙенең хистәр донъяһында талпыныуы, кисерештәре асыҡ сағыла. Һәр хатында Таңһылыуҙың нескә күңелле, йомшаҡ холоҡло, тыйнаҡ башҡорт ҡыҙы булыуы күренеп тора. Был осраҡта хаттар төп геройҙың холоҡ-фиғелен асыуҙа, уға психологик характеристика биреүҙә лә үҙәк ролде үтәй. Тимәк, романда Ринат Камал тарафынан хаттар стиле менән эш итеү тағы ла шул яғы менән отошло.

Ринат Камалдың "Таня-Таңһылыу" романындағы хаттарҙа матур әҙәбиәт, йәнле һөйләү стилдәре бергә үрелеп киләләр. Мәҫәлән, матур әҙәбиәт стиленә хас булған һүрәтләү саралары, риторик һорау, риторик өндәшеү, синонимдар, антонимдар ҡулланыу, фекер бөтөнлөгө – хаттарҙа йыш осрай торған күренеш: *"Берәй этлек уйланымы икән? Дөрөҫ яҙҙыммы? Ул алтын ҡулдарҙан ни файҙа! Әйтерһең дә, мине яҡты көмбәҙле хан һарайҙары көтә.. Хистәр даръяһы ҡосағында..."*. Шулай ҙа күп хаттар, бигерәк тә шәхси йүнәлештәгеләре, ябай, халыҡсан телдә, йәғни йәнле һөйләү стилендә яҙыла: *"Бисура, Петриктың свитерын һаман бәйләп бөтә алмайым, ҡултығынаса еткәйнем, шунда туҡтап ҡалдым. Юмор.* Был хатта *бисура, юмор, Петрик* кеүек йәнле һөйләшкә хас һүҙҙәр бар. Бер стилдең икенсеһендә сағылыуы шуның менән аңлатыла: хатты һәр кеше үҙенсә яҙа, бында бер ниндәй ҙә сикләүҙәр, ҡағиҙәләр юҡ. Хат яҙыусы ябай кеше икән – ябай, йәнле, халыҡсан телмәр ҡулланып яҙа, яҙыусы, йә шағир булһа – матур әҙәбиәт стиле һыҙаттарын ҡулланып, әҙәби әҫәргә оҡшатып яҙырға мөмкин.

Шулай уҡ эпистоляр стиль өсөн яңғыҙлыҡ исемдәрҙең, һандарҙың күпләп ҡулланылыуы хас. Романда һәр бер хат адресаттың исеменән башланып китә һәм дата менән тамамланып ҡуя. Иркәләүҙе, кесерәйтеүҙе белдергән исемдәр хат яҙыусының уға ҡарата үҙенсәлекле мөнәсәбәтен дә белдереп килә. Мәҫәлән:

“Алыҫтағы яғымлы дуҫым минең!...”

" Фәнисәкәйем! Һаумы, ҡәҙерлем минең... ”

“Ярай, пока. Бөтәгеҙгә лә сәләм. Таңһылыуың. Степной, ғинуар, 1982 йыл” (110)

Романдағы күпселек хаттарҙа постскриптумдар ҡулланылған. Улар хат яҙыусының әйтелеп бөтөлмәгән йәки онотолоп ҡалып иҫенә төшкән фекерен, йә иһә хаттан тыш өҫтәлмә яҙылған хәбәрен сағылдыра:

P. S. Ғәфү ит, кисә был хатты бөтөрә алмағайным – бөгөн дауам итәм.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән күренеүенсә, художестволы әҫәр тулыһынса геройҙарҙың хат алышыуынан ғына торорға мөмкин, йә булмаһа әҙәби әҫәр составына инә ала. Ринат Камалдың "Таня-Таңһылыу" сентименталь романы тап шундайҙар рәтендә. Романда хаттар, художестволы әҫәрҙең сюжетына органик рәүештә ҡушылып, уның йөкмәткеһе менән үҙ-ара эш итә, уның сюжетын формалаштырыуҙа ҡатнаша, героиняның үҙ-үҙен анализлауын көсәйтә, уға тәрән хистәрен, тойғоларын белдерергә ярҙам итә.

Шулай итеп, эпистоляр стиль яҙыусыға персонаждарҙың эске донъяһын асырға, уларҙың характерының төп һыҙаттарын асыҡларға, уҡыусы менән ышаныслы мөнәсәбәттәр урынлаштырырға мөмкинлек бирә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Камал. Р. Таня-Таңһылыу: Роман һәм повестар. – Өфө: Китап, 1996. 68 бит.

2. Даян Ҡ., Харис Ә. Стилистика. - Өфө: Башгосиздат, 1941. – 74 бит.

3. Сәйетбатталов Ғ.Г, Башҡорт теле. Стилистика. 3 том – Өфө: Китап, 2007. – 440 бит.

© Муллағолова А.Р., Абдуллина Г.Р., 2023

УДК 811.521

Мураками Э.Ф.,
Препод-ль японского языка УУНиТ

СОВРЕМЕННЫЕ МЕТОДЫ ОБУЧЕНИЯ ЯПОНСКОМУ ЯЗЫКУ РУССКОЯЗЫЧНЫХ СТУДЕНТОВ ПО ОБРАЗОВАТЕЛЬНОЙ ПРОГРАММЕ ЯПОНСКИХ ВУЗОВ. РОЛЬ ТРАДИЦИОННОЙ ЛИТЕРАТУРЫ И ФОЛЬКЛОРА В ИЗУЧЕНИИ ЯПОНСКОГО ЯЗЫКА

При обучении восточным языкам студентов-бакалавров в российской системе университетского образования принято начинать с элементарных основ иностранного языка, преподавая на русском языке в самом начале и продолжая так до конца обучения. Основной проблемой в таких случаях является недостаточное погружение в

языковую среду. В результате студенты привыкают использовать родной язык в сложных и непонятных моментах, возникающих в процессе изучения японского, и не могут развивать свои способности мышления на изучаемом языке. Но возможно ли выучить японский язык, не погружаясь в живую коммуникативную среду и не находясь в стране носителей языка? Очевидно, что добиться высоких результатов, к которым стремятся студенты-японоведы, в таком случае будет сложно. Для решения этой проблемы можно создать такую среду искусственно. Достаточно начать проводить занятия по учебной программе университета, на которых весь новый материал объясняется исключительно на японском языке.

Хорошим примером результатов такого подхода к обучению студентов может служить научная статья, основанная на опыте преподавания профессора Мегуми Сакамото, директора Центра японского языка для иностранцев при Токийском Университете Иностранных Языков (яп. 東京外国語大学). По словам профессора «Посещая занятия и высказывая свои мысли вместе, иностранные студенты делятся опытом обнаружения различий и сходств в мышлении, таким образом повышается их интерес к тому, что они изучают». «Кроме того, – подчеркивает профессор, – нет ничего необычного в том, что в моем классе могут быть студенты из 10 разных стран». Другими словами, Мегуми Сакамото говорит о том, что для того, чтобы научить иностранных студентов применять изучаемый язык на практике, совершенно не нужно постоянно прибегать к использованию их родных языков, для обучения важно использовать только японский. На занятиях достаточно создать атмосферу неформального общения, включающую интересы студентов, не ставя при этом основной целью занятия лишь расширение их знаний лексики и грамматики языка.

Я применила этот подход к обучению на занятиях, которые провожу на Факультете башкирской филологии, востоковедения и журналистики Уфимского Университета Науки и Технологий при работе со студентами 2-го и 4-го курсов с разным уровнем владения элементарной лексикой и грамматикой японского языка.

При знакомстве с ними в первую очередь сообщила, что общаюсь с ними только на японском. После этого начала небольшой рассказа о себе с использованием знакомых им японских слов и выражений, а потом перешла к интересующим их аспектам японской культуры и обучения по их специальности. Сначала студентам было непривычно

говорить только по-японски, и они давали друг-другу подсказки на русском языке, но по мере того, как мы вели беседу, основанную на принципах японского этикета и взаимно-уважительной культуре общения, они постепенно начали рассказывать о том, что их интересует в обучении, используя простую грамматику и лексику, которую изучали в университете.

Как работать с непонятными и сложными темами, и как объяснить их русскоязычным студентам на иностранном языке? Методы, заимствованные из упомянутой ранее системы обучения иностранцев в японских университетах - использование простых слов при объяснении сложных вещей, повторение с разной скоростью при необходимости, параллельное использование жестов и интонации, а также рисование картинок на доске или показ изображений по заранее подготовленным материалам по учебной программе. Этот метод помогает развитию зрительной памяти и особенно полезен при изучении иероглифов, которые с древних времен выводились из картинок. Есть еще один интересный прием, который редко используется при преподавании восточных языков в России. В японском языке есть слова, заимствованные из русского, английского и других иностранных языков. Например, японское слово «テーマ» (тэ:ма) образовано от русского слова «тема». Поскольку такие слова схожи с уже знакомыми словами из других языков, студенты легко их запоминают и часто используют.

Какие аспекты японского языка и японской культуры больше всего интересуют студентов-японоведов? Студенты второго курса предпочитают практиковать язык слушая японскую музыку, они также следят за японской медиа-сферой. На занятиях с ними мы часто говорим о популярных героях японских СМИ, а также разбираем тексты песен с параллельным прослушиванием. Благодаря разностороннему содержанию изучаемого контента студенты запоминают новые слова без специального заучивания.

Студенты-японоведы четвертого курса, напротив, не заинтересованы японской музыкой и медиа, они предпочитают изучать традиционную литературу и мифологию. На занятиях с ними мы также говорили о предметах духовной культуры, описывали японские талисманы «Манэки-нэко» и «Дарума», и деревянную куклу «Кокеси», оригиналы которых представлены в аудитории на кафедре восточной филологии университета, и говорили об их происхождении и значении в современной японской культуре.

В процессе преподавательской деятельности на Факультете башкирской филологии, востоковедения и журналистики Уфимского Университета Науки и Технологий я заметила, что большинство студентов-японоведов выбрали эту специальность, потому что им нравится культура Японии и они хотели бы посетить эту страну в будущем. На данный момент помимо занятий в университете на японском языке, хорошей практикой для них может стать работа в творческой сфере, например, в области создания контента на японском языке в интернете, или участие в олимпиадах по японскому языку, которые проводятся в России и включают в себя нестандартные творческие задания, это позволит им постоянно следить за быстро развивающимся современным японским языком и разговорным сленгом.

Список литературы:

Статья о преподавательском опыте профессора Мегуми Сакамото на сайте Токийского Университета Иностранных Языков.https://www.hakuhodofoundation.or.jp/yokogao/en/ukeire/01.html

© Мураками Э.Ф., 2023

УДК 821.512.141

Нарынбаева А.А.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ҒӘЛИ ИБРАҺИМОВТЫҢ “БЕР ПОЛК КЕШЕЛӘРЕ” РОМАНЫНДА СЮЖЕТ ҮҫТЕРЕЛЕШЕ

Кешелек тарихында булған иң яуыз күренештәрҙең береһе – ул һуғыш. Аяныслы һуғыш йылдары ҡалдырған яуызлыҡ, күҙ йәштәре, ата-әсәһеҙ ҡалған балалар һәм тол ҡалған ҡатындар ҡайғыһы, Ватандың батыр улдарының яуҙа түгелгән ҡаны йылдар, быуаттар буйына онотолмай ауыр яра булып йәшәй.

Бөйөк Ватан һуғышы темаһы һуғыштан һуңғы ун йыллыҡтарҙағы башҡорт прозаһында ватансыллык тойғоһо патриотик, героик тема менән айырылғыһыҙ берлектә сағылдырыла. Һуғышҡа бәйле әхләки-этик, философик проблемаларға иғтибар арта. Һуғыш афәтенең трагизмы, драматизмы героизм төшөнсәһе менән тығыҙ бәйләнештә, патриотик, гуманистик, интернациональ берҙәмлек мотивтары бөтә реаллегендә һүрәтләнә килде. Ҡаһарманлыҡ темаһы башҡорт әҙәбиәтенең төп темаларының береһе булып ҡала килә [1, 10].

Бөйөк Ватан һуғышының беренсе айҙарында уҡ күп кенә яҙыусылар – М. Кәрим, Х. Кәрим, А. Карнай, С. Мифтахов, М. Харис, М. Хәй, Х. Ҡунаҡбай, Б. Дим, А. Вәлиев, М. Абдуллин, Г. Йосопов, Ғ. Ибраһимов, Н. Нәжми, Ғ. Рамазанов, К. Мәргән, Ҡ. Даян, Ш. Биҡҡол, И. Абдуллин, Я. Ҡолмой, Ә. Бикчәнтәев, Я. Хамматов [2, 1] – биш тиҫтәнән артыҡ кеше фронт яланына юллана.

Өлкән быуын яҙыусылар С. Ҡудаш, Р. Ниғмәти, С. Агиш, Б. Бикбай тылда бик әүҙем агитацион эш алып баралар. Фронтовик яҙыусыларҙың һәм тылдағы әҙиптәрҙең көндәлектәре, хаттары, шиғырҙары, очерктары һәм башҡа әҫәрҙәре һалдаттарҙың батырлыҡтары, Ватанды һаҡлау, уның алдындағы бурыс тураһында илгә оран һалыу теләге хаҡында һөйләй.

Ил һәм халыҡ алдында булған етди бурысты үтәү, фронттың һәм тылдың хәл-торошо хаҡында бәйән итеү өсөн яуаплылыҡ хисе яҙыусыларға оператив рәүештә әҫәрҙәр ижад итергә этәргес була. Бөйөк һәм аяныслы һуғыш картиналарының уртаһында булған яҙыусылар һуғышты эске яҡтан һүрәтләй ала.

Халыҡтың берҙәмлеген, ҡаһарманлығын күреп, уларға көс, дәрт өҫтәп, алға әйҙәп агитация менән ярҙам иткән әҙиптәребеҙ маҡтауға, ихтирамға лайыҡ. Һүҙ сәнғәте кешегә тәҫьире ҙур булыуы башҡорт әҙәбиәтенең яңы юҫығҡта нығыныуына һәм тәрәнәйеүенә булышлыҡ итә. Һуғыш осоронда күп яҙыусы, шағирҙар, үҙ ҡәләмдәрен мылтыҡҡа алмаштырып Ватанды һаҡларға юллана. Аяуһыҙ дошман пуляһы аҫтында әҫәрҙәр ижад итеп кенә ҡалмай, ә һуғыш бөткәс тә күргән ваҡиғаларҙы, һуғыш яланында булған һалдаттарҙың батырлыҡтарын һүрәтләп ижадын дауам итә. Әҫәрҙәрҙә яуҙағы батырҙар ҡаһарманлығы, тыл хеҙмәтсәндәренең егәрлеге, Тыуған илгә ҡарата тәрән хистәр, дошманға ҡаршы нәфрәт үҙәк урынды ала.

Ауыр яу юлдары үткән фронтовик-яҙыусы Ғ. Ибраһимовтың таланты ҙур эпик жанрҙарҙа айырыуса тулыраҡ балҡыны, бер-бер артлы донъя күргән романдары Ғәли Ғизетдин улына киң танылыу алып килде. “Бер полк кешеләре” (1956) романы башҡорт әҙәбиәте тарихында Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларын киң эпик планда масштаблы итеп хикәйәләүҙең тәүге тәжрибәһе булды.

Ғ. Ибраһимовтың «Бер полк кешеләре» (1954) исемле эпик масштаблы, күп планлы романында персонаждар яу яландарында ла, тылда ла, Башҡортостандың нефть ҡалаһында ла һүрәтләнә. Алыҫ заставала нефтселәренең һәм сик һаҡсыларының һуғышҡа тиклемге хеҙмәте, тормошо йәш нефтсе Айбулат Әхмәров образы менән бәйле. Артабанғы бүлектәрҙә һуғыш хәрәкәттәре картиналары һәм тылдағы

батырҙарса хеҙмәт эпизодтары фашизмға ҡаршы көрәштә халыҡ ихтыярының бөткөһөҙ көсөн һәм берҙәмлеген күрһәтә.

Ғ. Ибраһимовтың “Бер полк кешеләре” романында совет патриотизмын, кешеләрҙең идея-сәйәси берҙәмлеген асыу маҡсат итеп ҡуйыла. Фронтта ҡаһарманлыҡтар ҡылған яугирҙар ҙа, тылда героик хеҙмәт күрһәткестәренә ирешкән хеҙмәт эйәләре лә – бер полк кешеләре, тигән идея күп һанлы геройҙар яҙмышы аша раҫлана. Яҙыусы персонаждар араһындағы шәхси мөнәсәбәттәрҙе яҡтыртыуға әллә ни урын ҡалдырмайса, уларҙың характерҙарын һуғыш эпизодтарында асыуҙы маҡсат итеп ҡуя.

Геройҙар теге йәки был көсөргәнешле һуғыш шарттарында ныҡлы үҙ позицияларына, ҡараштарына ярашлы хәрәкәт итәләр. Әҫәрҙәге бөтөн ваҡиғалар ҙа төп герой Айбулаттың күреүе, ҡабул итеүе аша бирелә. Роман фронттың ғәрәсәтле күренештәрен дә, алыҫ тыл картиналарын да эсенә ала, күп һанлы геройҙар хәрәкәт итә. Һуғыш алды көндәрендә Ишембай нефтселәре тормошон һүрәтләү менән асылған әҫәр, шул нефтселәрҙең бер вәкиле булған Айбулат Әхмәров образына бәйле рәүештә, ил сиген һаҡлаусылар хеҙмәтен сағылдырыуға тоташа. Артабан Бөйөк Ватан һуғышы картиналары яҡтыртыла.

Ғ. Ибраһимовтың романында һуғыштың оҙаҡ ваҡыт дауамындағы көндәлек ауыр, әммә үҙенсә ғәҙәти булып әүерелгән ысынбарлығы сағылдырыла. Ундағы геройҙар тормошонда ҡапыл дөрләп янған миҙгелдәр юҡ, һәр персонаж даими үҙ бурысын башҡара. Көндәлек окоп тормошонда, рухи ныҡлыҡ, таҫыллыҡ, ҡыйыулыҡ талап иткән разведка шарттарында, яраланып, госпиталдәрҙә уҙғарылған ауыр, ялҡытҡыс көндәрҙә уларҙың характер һыҙаттары, дошманға нәфрәттәренең көслөлөгө, Ватанға бирелгәнлек тойғоһоноң тәрәнлеге асыла.

Башҡорт әҙәбиәтендә ошоғаса һуғыш тураһында яҙылған әҫәрҙәрҙән айырмалы, Ғ. Ибраһимов “Бер полк кешеләре” романында ил эсендә төрлө рухи-әхлаҡи сифатҡа эйә кешеләрҙең дә булыуын, патриотик ынтылыштар менән йәшәгән совет халҡы менән бергә боҙоҡ теләкле, үҙен генә ҡайғыртыусы, йәнен һаҡлап ҡалырға ғына ынтылыусы бәндәләрҙең дә барлығын күрһәтә.

Ҡаранаев фронт һыҙығын ҡалдырып, дошман яғына ҡаса, һатлыҡ йәнгә әйләнә. Әсгәт склад мөдире булып алып, кешеләр ҡан ҡойғанда, ҡатын-ҡыҙ менән типтерә, башҡалар аслыҡтан миктәгәндә, балда-майҙа йөҙә. Ыңғай геройҙарҙың уларға ҡарата нәфрәтле мөнәсәбәте, әхлаҡи хөкөмө күрһәтелә.

Шулай итеп, романдың конфликты, һуғыш хаҡындағы ошоғаса донъя күргән әҫәрҙәрҙәге һымаҡ, совет халҡы менән фашист илбаҫарҙары араһындағы килешмәүсән ҡаршылыҡҡа ғына ҡайтып ҡалмай, ә тылдағы киҫкен әхлаҡи мөнәсәбәттәргә лә нигеҙләнә, Ватаны өсөн үлемгә барған меңәрләгән һалдаттар араһында дезертирҙар булыуын да күрһәтә. Шул рәүешле Ғ. Ибраһимов романы һуғыш ысынбарлығын дөрөҫ, тулы, төрлө ыңғай һәм кире сағылыштарында күрһәтеүе, реализм принциптарына тоғролоғо менән алға бер аҙым яһаны.

Ғ. Ибраһимовтың “Бер полк кешеләре” романындағы ҡырҡа реалистик стиль, эпик масштаблыҡ, панорам иңләп алып хикәйәләү артабан башҡорт прозаһында һуғыш ысынбарлығын һүрәтләүҙәге төп стиль ағымдарының береһе рәүешендә үҫеш алды. Романдың төп геройы Айбулат Әхмәров фронттың көндәлек тормошонда ла, йәшлек дуҫы медсестра Ләйләгә булған мөхәббәтендә лә, һуғышсы иптӗштәренә мөнәсәбәтендә лә күрһәтелә, уның күп кенә индивидуаль характер һыҙаттары асыла. Ул ҡайнар тәбиғәтле, һәр ваҡыт ғәҙеллеккә ынтылыусы, ҡыйыу, Ватанына бирелгән тоғро һалдат булып һынлана. Герой иң ҡурҡыныслы, яуаплы урындарҙа хәрәкәт итә. Яраланып госпиталдә ятып сыҡҡандан һуң, штабта хеҙмәт итергә тәғәйенләнгәс тә, Айбулат үҙенең яратҡан хеҙмәт урынына – разведкаға ебәреүҙәрен һорай, талап итә. Үҙен ҡыйыу, таҫыллы разведчик итеп таныта.

Ғ. Ибраһимов Айбулатты ла, башҡа яугирҙарҙы ла кәүҙәләндергәндә уларҙың тыныс төҙөлөш, хеҙмәт кешеләре булыуына, һуғыштың уларға көслә̆п тағылған ваҡытлы күренеш, мәжбүри вазифа икәнлегенә баҫым яһай. Айбулат был хаҡта: “Минең офицерлыҡ – ваҡытлы күренеш ул. Ә нефтсе булыу – тыныс хеҙмәт – минең төп эшем, ғүмер эшем!” – ти.

Башҡорт егеттәре Әхмәров менән Бүләков та, рус лейтенанты Ртищев менән украин сержанты Клименко ла, үзбәк һуғышсыһы Үткер Алиев та һуғыш ғәрәсәте эсендә лә үҙҙәренең тыныс хеҙмәт кешеһе булыуҙарын хәтерҙәренән сығармайҙар, фашизмды тиҙерәк тар-мар итеп, тыныс тормошҡа, үҙ эштәренә ҡайтыу тураһында хыялланалар. Әҫәрҙә һалдаттар тормошто сикһеҙ яратыусы, еңеүгә бөйөк ышаныс менән ҡараусы, тыл хеҙмәтсәндәре арыу белмәҫ һәм асыҡ күңелле итеп яҡтыртыла. Был әҫәрҙә һуғыш ысынбарлығының аяуһыҙлығы киҫкен яу яланындағы киҫкен алыштар, яугирҙарҙың атака алдынан һәм үлемесле һөжүмгә күтәрелгән мәлдәре психологик тәрән, нескә лиризм һәм тәрән драматизм бергә үрелеп һүрәтләнә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 6-сы том (1966-1994). – Өфө, Китап, 1996. 10б-сы бит.

2. Гареева Г.Н. Тема Великой ОТечественной войны и концепция героя-защитника родины в башкирской литературе // Современные проблемы науки и образования. – 2015. – № 1-1.

3. Ибраһимов, Ғәли.Бер полк кешеләре. – Өфө: Башҡ. кит. изд., 1956 . – 336 бит.

© Нарынбаева А.А., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Никитина К.,
4 курс, БФШһЖ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

XX БЫУАТ БАШЫ БАШҠОРТ ӘҘӘБИӘТЕНДӘ ДРАМАТУРГИЯНЫҢ ФОРМАЛАШЫУ ҺӘМ ҮҪЕҮ ЮЛДАРЫ

XIX быуат аҙағында башҡорт яҙыусыларының беренсе драма әҫәрҙәре ижад ителә. Өй шарттарында һәм мәҙрәсәләрҙә ҡуйылған был пьесалар ваҡытында нәшер ителмәй һәм беҙҙең көндәргәсә һаҡланып ҡалмаған. XX быуат башында әҙәп, наҙанлыҡ проблемаларына ҡағылған тәүге баҫма драма әҫәрҙәре нәшер ителә: Рабтиҙың «Ауыл тормошо, йәки Әҙәбиәт кисәһе» («Деревенская жизнь, или Литературный вечер»), А. Ғәлимовтың «Сыҫка туң майы мәсьәләһе йәки наҙан мулла» («Проблема сала, или Глупый мулла»), Я. Валиевтың «Аслыҡ ҡушты» («Повелел голод») һ.б.

Тәүге башҡорт драматургтары Бәхтийәр Бәхтигәрәй улы «Ер һатыу» драмаһы (1915), Х. Ибраһимов, Ғ. Ниязбаев, А. Таһиров, Ф. Туйкин һәм башҡалар. Таһировтың «Бисура» комедияһында наҙанлыҡтан килеп сыҡҡан юҡ-барға ышаныу, «Яңғура» драмаһында башҡорт халҡының милли-азатлыҡ көрәше күрһәтелә. Туйкиндың 1812 йылғы Ватан һуғышына арналған «Ватан ҡаһармандары» драмаһында Рәсәй өсөн киҫкен йылдарҙа башҡорт халҡының илһөйәрлек күтәрелеше кәүҙәләндерелә. Үҙенең «Башмағым» пьесаһы менән Ибраһимов башҡорт комедиографияһына нигеҙ һалды [5; 387].

Драма әҫәрҙәре ижад итеү өлкәһендә Афзал Таһиров (1890-1938) тәүге тәжрибәләр яһай. 1907 йылда ул «Бисура» исемле комедия яҙа. Автор бында мосолмандар араһында киң таралған дини хөрәфәттәрҙән,

наҙанлыҡтан көлә, ниндәйҙер фантастик «бисураларҙың» серле көскә эйә булыуын раҫлаусы шәриғәт уйҙырмаларын ҡыйыу фаш итә. Комедия тәү тапҡыр 1908 йылда Ҡазандағы «Мәржәниә» мәҙрәсәһенең уҡыусы-үҙешмәкәрҙәре тарафынан уйнала. Был осорҙа мәҙрәсә шәкерттәренең художество һәм әҙәби эшмәкәрлеге һиҙелерлек йәнләнә. Айырым-айырым әҙәби түңәрәктәргә ойошҡан шәкерттәр, йәштәрҙең көндәлек-тормошонда була торған берәй ваҡиға йәки күренешкә арнап, бер шаршаулы пьесалар яҙып, уларҙы үҙҙәре үк сәхнәлә уйнай. Күмәк төҫ ала торған бындай сығыштар әҙәби-художество кисәһе характерында була. Сәхнә уйындарының бында тыйылыуы, ислам диненең бер кеше һынын икенсе берәүҙең башҡарыуын гонаһ һанауы, һәүәҫкәрҙәргә мәҙрәсәлә артабан белем алыуҙан мәхрүм булыу ҡурҡынысын да тыуҙыра. Күп осраҡтарҙа скетч, интермедия йәки пародия кеүек еңел жанрҙа яҙылған бәләкәй күләмле пьесаларҙың авторҙары ла хәҙер билдәле түгел, ҡулъяҙмалар ҙа, йәшерен рәүештә ҡулдан-ҡулға күсеп йөрөп, бөтөнләй юғалып бөткән.

Сәғит Ағиш: «Хөсәйениә» мәҙрәсәһендә... йыш ҡына Афзал Таһировтың бик аҙ кеше ҡатнашҡан берәр шаршаулыҡ сәхнә әҫәрҙәрен ҡуялар. Күбеһенең исеме хәтерҙә ҡалмаған. Ләкин ятаҡханала тороп укыусылар тормошонан алып яҙылған «Салбарһыҙҙар» тигәне хәтерҙә ҡалған», – тип яҙҙы. Шәкерттәр драматургияһы асылда мәҙрәсә тормошон, уҡыусы йәштәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һәм көнкүрештә һүрәтләгән әҫәрҙәрҙән ғибәрәт. 1901 йылда «Ғосмания» мәҙрәсәһе шәкерттәренең береһе яҙып сәхнәгә ҡуйған «Ғизаләм» пьесаһында, мәҫәләлән, илке-һалҡы уҡыусыларҙан, урамда йәки башҡа ерҙә үҙҙәрен яҡшы тота белмәгәндәрҙән, хәйер-саҙаҡа һораусыларҙан һәм шәкерт намыҫына тап төшөрә торған башҡа йәмһеҙ ҡылыҡтарҙан көлөнә.

А. Таһировтың «Салбарһыҙҙар» пьесаһы ла бүлмәләш ике шәкерттең ятаҡхана тормошондағы комик ваҡиғаға ҡоролған. "...Урамға сығып йөрөр, берәй урынға барып ҡайтыр өсөн шәкерттәрҙең икеһенә кейергә яраҡлы бер генә салбар бар. Берҙән бер көн, уларҙың береһе театрға китеүгә, шәкерттәрҙең икенсеһе янына таныш ҡыҙы ҡунаҡҡа килеп инә. Бисара егет, оятҡа ҡалырынан ни эшләргә белмәй, ауырыуға һабышып, одеал аҫтына инеп ятырға мәжбүр була...". Автор ябай ғына бер көлкө ситуацияны яҙмаһының үҙәгенә ҡуйһа ла, «Салбарһыҙҙарҙың» төп мәғәнәһе ваҡиғаларҙы асылда комик планда яҡтыртыу менән генә сикләнмәй. А. Таһировтың бөтә драматургияһына хас булғанса, бында ла әҫәр нигеҙендә социаль тигеҙһеҙлек, ғәҙелһеҙлек мотивтарына ишара итеүҙе тойорға мөмкин. Бындай бәләкәй күләмле һәм еңел жанрҙа

яҙылған пьесалар дөйөм драматургия ҡанундарын, пьеса ижад итеү техникаһын үҙләштереүҙә башланғыс тәжрибә тупларға ярҙамлаша, милли драматургияны булдырыуға

1907–1911 йылдарҙа Ғ. Ғүмәрский Омск яҡтарында балалар уҡытып, сауҙагәрҙәрҙә ялланып эшләп йөрөй. «Уйламағанда ике никах» (1910) исемле комедияһын ул ошо яҡ сауҙагәрҙәр тормошонда «булған ваҡиғанан алып» яҙа. Пьесала бай сауҙагәр ҡыҙының ярлы хәлфәгә, ә аҫрауының күсергә бай рөхсәтенән башҡа тормошҡа сыға алыуҙары көлкөлө ситуацияларҙа һүрәтләнә. Әгәр автор йәштәр образдарында кешелек бәхете һәм хистәр сафлығы, тиңлек һәм ғәҙеллек, шәхес азатлығы һәм мөхәббәт ирке өсөн көрәшеүселәрҙе уңышлы ғына кәүҙәләндерһә, Әхмәт сауҙагәр менән уның ҡатыны Бибкәй йөҙөндә байҙарҙың бөтә мәкерлеген, рухи сикләнгәнлеген асып һалырға тырыша.

XX быуат башында Башҡортостанда әҙәбиәттең иң ҡатмарлы төрө булған, XIX быуат аҙағында саҡ моронлай башлаған драматургия йәйләнә төшә. Быға крайҙа революцион-демократик идеяларҙың йылдам таралыуы, баҙар иҡтисади шарттарында халыҡтарҙың үҙ-ара аралашыуы әүҙемләшеүе, Беренсе урыҫ революцияһы һәм унан һуңғы тарихи ваҡиғалар йылдарында уларҙың рухи уяныуы, мәҙәни яңылыҡтарға ынтылыуы бермә-бер көсәйеүе, милли матбуғат йәнләнеүе, алдынғы урыҫ һәм көнбайыш мәҙәниәте һәм әҙәбиәтенең башҡа халыҡтар араһына киң үтеп инеүе ныҡ булышлыҡ итә. Ул осорҙа Өфөлә, Ырымбурҙа һәм башҡа ҡалаларҙа күренекле урыҫ артистары, музыканттары йыш сығыш яһай, һәүәҫкәр артистар ҙа йөкмәткеләре һәм художестволы эшләнештәре менән театр сәхнәһенә күтәрелә. Бындай кисәләргә алдынғы ҡарашлы, яңылыҡҡа ынтылған мосолман йәштәре һәм шәкерттәре йыш барған, башҡорт халҡы араһында театр сәнғәте менән ҡыҙыҡһыныу көсәйә.

XX быуат башында башҡорт драматургияһының үҫеш-үҙгәрештәре һәм художестволы үҙенсәлектәре индивидуаль ижадҡа бәйле булған, бер-береһенән айырым йәшәмәгән жанрҙар һәм стилдәр системаһы ныҡлап формалаша. Трагедия жанры үҙен милли әҙәбиәт майҙанында күрһәтә алмаһа ла, комедия, драма жанрҙары, бер шаршаулыҡ драма (сценка), скетч, интермедия кеүек бәләкәй жанр формалары ярайһы үҫеш ала, таралыу таба.

XX быуат башында, бөтә Рәсәй масштабында социаль айырымланыуҙар һәм ҡаршылыҡтар көсәйгән, тарихи ваҡиғалар ҡуйырған, сәйәси, әхлаҡи-этик проблемалар киҫкенләшкән осорҙа, башҡорт драматургияһында йәмғиәттәге һәм кешеләге ошо киҫкенлектәр,

айырымланыуҙар, бәрелештәр арҡаһында көсәйә һәм арта барған кәмселектәрҙе фашлауға, көлөү аша тәнҡитләүгә ҡоролған комедия, скетч, интермедия ише жанрҙарға яҙыусылар йыш мөрәжәғәт итә. А.Таһиров артынса сатирик пафос менән һуғарылған пьесаны Ғиләж Ғүмәрский тыуҙыра. 1910 йылда ул "Уйламағанда ике никах" тигән тормош-көнкүреш комедияһын яҙа. Йәштәр образдарында драматург шәхес азатлығы һәм мөхәббәт ирке, бәхетле тормош һәм хистәр сафлығы, ғәҙеллек һәм тинлек өсөн көрәшеүселәрҙе уңышлы ғына кәүҙәләндерһә, Әхмәт сауҙагәр менән уның ҡатыны Бибекәй йөҙөндә инде байҙарҙың рухи сикләнгәнлектәрен һәм мәкерлектәрен шаҡтай сағыу асып һалыуға өлгәшә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте. XX быуат башы. Беренсе китап. Поэзия. (Төҙөүселәре: В. Әхмәзиев, И. Бүләков, Ғ. Хөсәйенов. Баш һүҙ авторы: В. Әхмәзиев). – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1983. – 299 б.

2. Башҡорт әҙәбиәте. XX быуат башы. Икенсе китап. Проза. Драматургия. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте,1984. – 591 б.

3. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 6 томда. Т. 2. Яуаплы ред. Ғ.Б. Хөсәйенов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 532 б.

© Никитина К., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141

Нәжметдинова Н.М.,
3 курс, БФШһЖ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

МОСТАЙ КӘРИМ ДРАМАЛАРЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИКАҺЫ, ПРОБЛЕМАТИКАҺЫ

Драматургия – Мостай Кәрим ижадының ҙур бер тармағы. Уның сәхнә әҫәрҙәре XX быуаттың икенсе яртыһындағы башҡорт драматургияһының үҙәгендә тора.

М. Кәримдең Бөйөк Ватан һуғышы темаһына арналған тәүге "Туй дауам итә" (1947) тигән лирик драмаһында яу эпик хәл-ваҡиғалары трагик, драматик һәм комик күренештәр, лирик сценалар менән аралаша.

М. Кәримдең "Йырланмаған йыр" социаль-психологик драмаһының (1961) үҙәгенә яуаплы компартия эшмәкәре – ҡала комитеты секретары Дүсмәт Ярлыҡапов ҡуйылған. Был образ аша автор ике йөҙлө, ялтыр һүҙҙәр һөйләгән, яңы башланғыстарҙы күтәреп алыусы

инициатор булып ҡыланған, һүҙҙә бер, ғәмәлдә бөтөнләй икенсе булған, партбилетына таянып карьераға үрләгән, туҡ, рәхәт тормошта йәшәгән етәкселәрҙең ысын йөҙөн асып бирә, конкрет ситуацияларҙа эске булмышын фаш итә.

Партияның ауыл хужалығын күтәрергә тигән саҡырыуын “күтәреп алған”, тәүгеләрҙән булып ауылға китергә ғариза биргән, әммә үҙен “партия өсөн ҡиммәтле, кәрәкле кадрмын” тип иҫәпләгән, ауылға ысынлап күсеп ҡайтыуҙы башына ла индереп сығармаған, күҙ буяу. Яҡшы булып күренеү менән шөғөлләнгән, “грандиоз башланғыс” уйлап тапҡан, һуңынан ул һабын күбеге кеүек шартлағас, бөтөн ғәйепте ҡалалағы кескәй предприятие директоры Арыҡбаевҡа япһарырға маташҡан Дүсмәт Ярлыҡаповтың ике йөҙлө, карьерист, эгоист, ярамһаҡланыусы әҙәм икәнлеге асыҡлана. Шәхес культы осоронда власҡа үрләгән, бойороҡ ысулы менән эш итеүсе, Арыҡбаев һымаҡ йомшаҡ тәбиғәтле кешеләргә үҙ ғәйебен еп-еңел япһарған, партия исеме артына ышыҡланып, баш-баштаҡлыҡ ҡылған демагог Ярлыҡапов йәмғиәткә, халыҡҡа, ғаиләһенә, яҡындарына матди һәм рухи зыян килтерә.

Уның янында йөрөгән элеке сауҙагәр малайы, “бәләкәс кенә бер иблис”, карьерист, ике йөҙлө, мәкер, хәйлә оҫтаһы, вазифа биләүсе көслөләргә ярай белеүсе, , Дилбәрҙең эскерһеҙ тойғоларын алдаусы, түбән йәнле кейәүе Вәзир Ҡәнзәфәров үҙ мәнфәғәте хаҡына әллә кемдәрҙе һатырға, тапап үтергә әҙер тороуы менән Ярлыҡаповтан да арттыра.

Элекке комсомолка, эшсе-наборщик ҡыҙы, ҡасандыр яҡты хыял-маҡсаттар менән янып йәшәгән Мәстүрә, Дүсмәткә кейәүгә сыҡҡас, ире һүҙенә, күҙенә ҡарап тороусы, түрә ирен хәстәрләүсе, ғаилә эсендә бикләнгән ҡатынға әйләнә. Финалда ул ире хаҡына үҙен ҡорбан итеүенең бушҡа булыуын аңлай: “Мин бөтә ғүмеремде һиңә арнаным, Дүсмәт. Һин ҙур эштәр башҡараһың, кешеләргә күп яҡшылыҡтар эшләйһең, кәрәк саҡта уларға таяныс булаһың, тип уйланым. Баҡһаң, һинең үҙеңә ҡырҡ яҡтан ҡырҡ терәү кәрәк икән. Бына минең ғүмерем кемгә сарыф булған”.

Драма дауамында ғүмер йыры менән рәттән мөхәббәт йыры, матурлыҡ һәм ямаҡлыҡ, батырлыҡ һәм бахырлыҡ мотивтары яңғырай. Дүсмәт менән Мәстүрәнең йырланып бөткән, Вәзир менән Дилбәрҙең башланған күңелһеҙ йырҙарына, уңмаған ғаилә тормоштарына рәссам Низам менән Дилбәрҙең, Исмәғил менән Рәхимәнең, Гөлбикә менән

Тимерғазының йырланаһы шат йырҙары, тиң мөхәббәттәре ҡаршы ҡуйыла.

Пьесалағы персонаждар ғәҙәти шарттарҙа, үҙ-ара һәүетемсә мөғәләмәләрҙә, әңгәмәләрҙә эстән яҡтыртып күрһәтелә. Атыу тауышы сығармаһа ла, стенала элеүле торған, Вәзирҙең буш ҡыуыҡлығына ишаралаған ҡыҫыр мылтыҡ, көҙгө моңһоу тәбиғәт, һары сәскәле күлдәклек тауар, рәссам Низамдың тәрән мәғәнәле картинаһы һб. деталдәр, символик образдар, ремаркалар, геройҙар телмәрен индивидуалләштереүсе кинәйәле тапҡыр фразалар, мәкәл, әйтемдәр характерҙарҙы асыуҙа, драматик хәрәкәтте үҫтереүҙә, психологик көсөргәнешле картиналар тыуҙырыуҙа мөһим идея-эстетик функция башҡара. Драматургтың жанр-стиль өлкәһендәге эҙләнеүҙәрен, табыштарын күрһәтә.

Башкыр тили – кыпчак тобундагы түрк тилдеринин бири, Волга-кыпчак подгруппасына кирет, башкырттардын улуттук тили, Башкыртстан Республикасынын мамлекеттик тили. Башкыр эли байыртадан байыркы түрк жазуусун колдонушкан жана 10-кылымда башталып, ислам динин кабыл алышып, андан соң араб жазуусун колдоно башташкан. 19-кылымдын ортосунан улуттук башкыр жазуусунун калыптанышы башталып, 1923-жылы араб графикасына негизделген алфавит бекитилген, 1929-жылы латын алфавитине негизделген башкыр алфавити (яналиф) пайда болгон. 1939-жылы кириллицага негизделген алфавит киргизилген. Башкыр тилинин азыркы алфавити 42 тамгадан турат: орус тилинин 33 тамгасына башкыр тилинин тыбыштык өзгөчөлүгүн белгилөө үчүн 9 тамга кабыл алынып, төмөнкүдөй башкыр алфавити пайда болгон:

Алфавит кириллицага негизделген, спецификалык тыбыштарга туура келген 9 кошумча белгиден турат: uvular plosives Ғғ [ɢ], Ҡҡ [q], тиштер аралык фрикативдер Ҙҙ [ð], Ҫҫ [θ], веляр мурун Ңң [ŋ], фарингаль Һһ]; алдыңкы тилдүү үндүүлөр: ачык Әә [æ], орто бийиктикте суперлабиализацияланган Өө [ø], үстүнкү Үү [ʏ] [6: https://alt.wikipedia.org/].

Ал эми кыргыз тили – Кыргыз Республикасынын мамлекеттик тили, түрк тилдеринин курамына, анын ичинде кыргыз-кыпчак тобунун алтай тобуна кирет. Кыргыз Республикасынын негизги калкы – кыргыздардын эне тили. Азыркы кыргыз тили 1928-жылы реформаланган араб алфавитин, 1927-жылы латын алфавитин, 1940-жылдан баштап, кириллицага негизделген алфавит киргизилген: орус тилинин 33 тамгасына кыргыз тилинин тыбыштык өзгөчөлүктөрүнө ылайыкталып ө, ң, ү тамгалары кошулуп, жалпысынан 36 тамга болуп түзүлгөн: а, б, в, г, д, е, ё, ж, з, и, й, к, л, м, н, ң, о, ө, п, р, с, т, у, ү, ф, х, ц, ч, ш, щ, ь, ы, ъ, э, ю,я. Булардын ичинен 22 тамга үнсүз тыбыштарды, 8 тамга үндүү тыбыштарды билдирет. 4 тамга (я, е, ё, ю) кыргыз тилинде йоттошкон тыбыштарды билдирсе, 2 тамга (ь, ъ) тыбышты билдирбейт, б.а., тыбышсыз тамга. Алфавиттеги ар бир тамга баш жана кичине (ь, ъ тамгаларынан башкасы), басма жана жазма түрлөргө ээ [4: 80-б.].

Кыргыз графикасынын төмөнкүдөй өзгөчөлүктөрү бар:

Кыргыз графикасында көпчүлүк тыбыштын ар бири өзүнчө тамга менен белгиленген: а, б, г, в, д, ж, з, и, й, л, м, ң, о, ө, п, р, с, т, у, ү, ф, х,

ц, ш, ч, ы, э. Бирок бардык учурда эле сөздөрдөгү тыбыштарга тамгалардын саны туура келбейт.

Созулма үндүүлөр кыска үндүүлөрдүн эки кайталанып жазылышы аркылуу туюнтулат: аа, оо, өө, уу, үү (тоо, суу, өөн, жаан, күү). Мындай учурда сөздөрдө тыбыштар аз, тамгалар көп болот. Мисалы, жээктүү деген сөздө жети тамга жазылып турат, бирок беш тыбыш бар: [ж], [ээ], [к], [т], [үү]. Ошондой эле суу деген сөздө да үч тамга жазылып турганы менен эки тыбыш бар: [с] жана [уу].

Бир эле [э] үндүү тыбышы сөз башында, ортосунда жана аягында эки түрдүү тамга менен э, е белгиленет: эне, эреже, эрте, эрке.

Кыргыз графикасында к, г, ж тамгалары экиден фонемалык вариантты билдирет. Алсак, үнсүз к, г тамгалары орус тилинен советтик мезгилде кабыл алынган сөздөрдү эске албаганда башка бардык сөздөрдө жоон үндүүлөр менен келип түпчүл, ичке үндүүлөр менен келип артчыл болуп, артикуляциялык жактан айырмаланса да (карга, каргыш, камылга, кереге, киргил, күзгү), бир фонема катары эсептелет. Ошондой эле үнсүз ж тамгасы орус тилинен кирген сөздөрдөгү жылчыкчыл ж (журнал, жюри, журналист, жираф) жана кыргыз тилиндеги башка сөздөрдөгү (жаш, жан, ажар) бириккен ж (дж) фонемалык варианттарды туюндурат.

Йоттошкон я [йа], ю [йу] тамгалар жанаша айтылган эки тыбышты белгилеш үчүн, б.а., алар эки тыбышты берет: таяк [тайак], аяк [айак], чие [чийе], иет [ийет], коён [койон], боёк [бойок], коюн [койун], оюн [ойун] ж.б.

Эгерде [й] тыбышынан кийин оо, уу созулмалары келсе, йоттошкон (е, ю) жана кыска о, у тамгалары менен жазылат: аюу, коюу, боёо ж.б.

Созулма [үү], [өө] тыбыштарынын кийин [й] тыбышы келсе, андай учурда [й] тыбышы өзүнөн мурдагы созулмалар менен бирикпейт: чийүү, кийүү, сүйүү, күйөө, сүйөө.

Үнсүз ф, х, щ тамгалары, ъ, ь белгилери дээрлик орус тилинен кабыл алынган сөздөрдө колдонулат: фонарь, фабрика, химия, художник, цирк, щетка, щи, лагерь, область, объект ж.б. [4: 80-81 б.].

Жыйынтыгында, кыргыз эли менен башкыр эли өтө жакын, тектеш, тууган элдерден, ошондон улам бул эки акындын – башкыр эл акыны Рами Гарипов менен кыргыз элинин төкмө акыны Барпы Алыкуловдун чыгармачылык жолу окшош, чыгармачылыгында эки элдин турмушундагы оош-кыйыштарды, жетишкендиктерди чагылдырышкан.

Башкыртстандын эл акыны Рами Ягафарович Гарипов 1932-жылы 12-февралда Башкырт АССРинин Салават районундагы Аркаул

айылында колхозчунун үй-бүлөсүндө туулган. Туулуп-өскөн айылындагы жети жылдык мектепти бүтүрүп, андан соң Уфадагы №9 орто мектепте окуган. 1950-1955-жылдары – А.М. Горький атындагы адабият институтунда окуган, аны бүтүргөндөн кийин «Башкортостан кеңеши» гезитинин, «Агидел» журналынын редакцияларында, башкыр китеп басмасында көркөм адабияттын редактору болуп иштеген. 1959-1964-жылдарда Рами Гарипов туулуп-өскөн жеринде жашап, Салават районунун «Юрюзан» колхозу менен «Саргамыш» совхозунун комсомол уюмунун катчысы, «Салават» райондук гезитинде бөлүм башчы болуп иштеген. 1964-1966-жылдары «Совет Башкортостан» гезитинин адабий кызматкери [7: https://ru.wikipedia.org/].

Рами Гариповдун биринчи ыры 1950-жылы «Аҙәби Башкортостан» журналында жарыяланган, ал эми биринчи ыр жыйнагы 1954-жылы «Юрюзан» деген ат менен жарык көгөн. Акындын туулган жерге, жаратылышка, өз элине арнаган ырлар жыйнактары 1958-жылы «Таш гүл», 1964-жылы «Ларк ыры» деген ат менен жарыяланган.

Рами Ягафарович Гариповдун поэзиясынын түпкү маанаиси – жашоонун маңызы, элдин тарыхый тагдыры, муундардын руханий байланышы, эне тилинин, маданиятынын келечегине болгон түйшүгү жөнүндөгү ой жүгүртүүлөр. Акын башкурт поэтикалык чыгармачылыгына, өзгөчө кубайыр (сказ - жомок) жанрларына, классикалык элдик ырларына көп кайрылган акын болгон жана анын кайра жаралышында жана өнүгүшүндө акындын эмгеги зор деп айтууга болот.

Рами Гариповдун эң белгилүү ырлар жыйнагы – «Туган тел» («Эне тил»); “Жыйнак”. – 3-том. – Уфа, 1996-1998; “Юрюзан”. Ырлары. – Уфа, 1954; Таш гүл. Лирика. – Уфа, 1958; “Учуу”. Ырлары. – Уфа, 1966; “Келишим сөзү”. – Уфа, 1969; “Рябинушка”. Ырлары. – Уфа, 1974; “Жылдыз ойлору”. Ырлары. – Уфа, 1979; “Кайтуу”. Ырлары жана поэмалары. – М., 1981 ж.б. [7: https://ru.wikipedia.org] менен жарыкка чыккан.

Ал эми кыргыз элинин төкмө акыны Барпы Алыкулов Жалал-Абад облусуна караштуу Сузак районунун Ачы кыштагында 1884-жылы дүйнөгө келген. Барпынын чыгармачылык ишинин башталышы эки кылым тогошкон мезгилине туура келет: Октябрь революциясына чейин жана революциядан кийинки мезгил. Октябрь төңкөрүшүнө чейинки чыгармаларында элдин караңгылыкка кептелип, оор күндөргө туш болгонун, ал эми үстөмдүк кылган таптын өкүлдөрү өкүмүн өктөм жүргүзүп элди эзип жатканын, өзүнө окшогон жарды-жалчылардын

күнүмдүк турмушун ырдады: “Тендик бир күн жарк этер”, “Алдамчы эшен”, “Сук молдо”, “Сопу” ж.б. Барпы акыйкат адам, аларды мыскылдап, кемчиликтерин тартынбай бетине айтып, чыгармачылыгын бул багытта улам күчөтүп отурган. Бирок, Барпы өзү мусулмачылыкты бекем кармаган адам болгон, болгону аны бетине карап алып, элди алдап жүргөн молдо-эшендердин терс сапаттарын ашкерелеген.

Акындын жарык көргөн эмгектери: Барпы [Алыкулов]: Тандалмалуу ырлар. 1949; Барпы [Алыкулов]: Тандалган чыгармалар.1955; Барпы [Алыкулов]: Чыгармалар. 1960; Барпы [Алыкулов]: (Чыгармаларынын бир томдук жыйнагы). 1970; Барпы [Алыкулов]: (Мөлмөлүм): Ырлар. 1974; Барпы [Алыкулов]: (Тандалмалар). 1984; Барпы: (Изилдөөлөр, эскерүүлөр, арноолор). 1994; Барпы: (Чыгармалар: биринчи том). 1995; Барпы: (Чыгармалар: 2-том). 2008; Барпы Алыкулов. 1998 ж.б. Ошентип, Барпы эки доор, эки түзүлүш көрүп, эки түрдүү турмушту башынан өткөргөн төкмө акын. Анын чыгармачылык жолунун бир кыры Совет бийлигине туш келет, замандаш өнөрлөштөрү сыяктуу эле жаңы заманды, социалистик курулуштун жүрүшүн ырларында камтыган.

Жыйынтыктап айтканда, кыргыз элинин төкмө акыны Барпы да, башкыр элинин акыны Рами да жашоонун маңызын, элдин тарыхый тагдырын, муундардын руханий байланышын, эне тилинин, маданиятынын келечегине болгон түйшүгү жөнүндөгү ой жүгүртүүлөрүн өз чыгармаларында камтып, аны элге жеткирген акындардан. Акындардагы негизги айырма – Барпы Алыкулов – төкмө акын, ал эми Рами Гарипов – жазгыч акын. Эки акын тең өз элинин кадыр-барктуу, сыйлуу акындарынан, кыргыз жана башкыр эли турганда акындарыбыздын аты, алардын чыгармалары унутулбайт жана өнүгүп-өсөт, өркүндөйт деп оюмду жыйынтыктайм.

Колдонулган адабият:

1. Барпы. Изилдөөлөр, эскерүүлөр, арноолор. Б., 1994;

2. Башкырт адабиятынын тарыхы. 6-томдо. – Т. 5. – Уфа, 1994.

3. Жапаров Ш., Сыдыкова Т. Кыргыз тилинин диалектологиясы – Бишкек, 2018.

4. Жапаров Ш., Сыдыкова Т. Азыркы кыргыз тили: фонетика, - Бишкек, 2015.

© Сыдыкова Т.К., 2023

UDC 80

Sädiýewa A.A.,
Magtymguly adyndaky Türkmen döwlet uniwersitetiniň
daşary ýurt dilleri kafedrasynyň mugallymy
Aşgabat, Turkmenistan
Gylyjowa G.N.,
Magtymguly adyndaky Türkmen döwlet uniwersitetiniň
daşary ýurt dilleri kafedrasynyň mugallymy
Aşgabat, Turkmenistan

TEBIGY UGURLY TALYPLARA DAŞARY ÝURT DILINI ÖWRETMEKDE MAGLUMAT-ARAGATNAŞYK SERIŞDELERINIŇ HYZMATY

Ýaşlaryň daşary ýurt dillerini suwara bilmegi baradaky alada Türkmen halkynyň Milli Lideri Gahryman Arkadagymyzyň we Arkadagly Serdarymyzyň ýurdumyzda ýöredýän ýaşlar syýasatynyň esasy ugurlaryndan biridir.Türkmenistanda daşary ýurt dillerini okatmagy kämilleşdirmek baradaky konsepsiýa bu maksada ýetmekde esasy ýol görkezij resminamadyr. Bu resminamanyň "Daşary ýurt dillerini okatmagy kämilleşdirmegiň esasy ugurlary" diýip atlandyrylan III bölüminde şeýle bellenýär:

"Konsepsiýa laýyklykda daşary ýurt dillerini okatmagy kämilleşditrmegiň maksatlaryna gönükdirilen wezipeleri çözmek üçin daşary ýurt dillerini okatmagyň döwrebap kommunikatiw usullary hyzmat edýär. Şu nukdaýnazardan daşary ýurt dilini okatmakda ulanylýan bilim tehnologiýalaryny okuw işinde ulanmak we yzygiderli kämilleşdirmek göz öňünde tutulýar.

Daşary ýurt dillerini okatmagy kämilleşdirmek işi:

- daşary ýurt dillerini okatmagyň üznüksizligi;
- kommunikatiwlik (aragatnaşyga ugrukdyrmak);
- interaktiwlik (özara işjeňlige ugrukdyrmak);
- innowasion bilim tehnologiýalaryny giňden peýdalanmak;
- daşary ýurt dillerini okatmagyň başarnyklary ýaly häzirkizaman bilim ýörelgelerine esaslanýar". (Türkmenistanda daşary ýurt dillerini okatmagy kämilleşdirmegiň esasy ugurlary)

XXI asyr jemgyýetçilik ýaşaýşynyň dürli ugurlarynda bolşy ýaly, bilim ulgamynda hem, şol sanda daşary ýurt dillerini okatmakda täze tehnologiýalaryň emele gelmegine getirdi. Geçen asyryň 70-nji-80-nji ýyllarynda iň täzeçil hasap edilen aň ýetiriş-kommunikatiw usulyň ýerine interaktiw tehnologiýalar geldi. Bu innowasion tehnologiýanyň esasy aýratynlygy okuw işine mugallymdyr talybyň iki taraplaýyn işjeň

gatnaşyklara giryänligidir. Şeýle usulyýetiň emele gelmeginde okatmagyň döwrebap serişdeleriniň has kämil, sanly tehnologiýalarynyň okuw işinde giňden ulanylmagy möhüm orny eýeleýär. Türkmen halkynyň Milli Lideriniň – Gahryman Arkadagymzyyň, Türkmenistanyň hormatly Prezidenti Arkadagly Serdarymyzyň taýsyz tagallalarynyň netijesinde ýurdumyzyň bilim ulgamyna iň döwrebap serişdeleriniň ornaşdyrylyşy dünýäniň ösen döwletlerindäkiden kem däldir. Biz şu makalamyzda şol aragatnaşyk-maglumat serişdelerini bilim berşiň dowamynda netijeli ulanmagyň mümkinçilikleri barada aýtmak isleýäris.

Daşary ýurt dillerini öwretmegiň pedagogik tehnologiýalary bütindünýä Internet toruny, meseleleýin okatmagyň usullaryny ulanmagy, şeýle hem okatmagyň işjeň usullaryndan (taslama, keşpli we işewür oýunlar, işewür gatnaşyklarda ýüze çykyp biljek dürli ýagdaýlary çözmek) çeýelik bilen peýdalanmagy göz öňünde tutýar. Bu bolsa mugallymyň öňünde başga bir meseläni goýýar – mugallym diňe bir öz okadýan dersini ýokary derejede bilmän, eýsem maglumat-aragatnaşyk serişdeleriniň mümkinçiliklerini hem olary okatmagyň tejribesinde netijeli ulanmagyň aýratynlyklaryny ýokary derejede bilmelidir.

Bu gün daşary ýurt dilini öwretmegiň tejribesinde maglumat-kommunikasiýa tehnologiýalaryny ulanmagyň mümkinçilikleri bellibir derejede döredilendir, okatmagyň ýokary netijeliligini üpjün etmek boýunça teklipler, usuly maslahatlar elýeterlidir.

Döwrümizde daşary ýurt dilini okatmagyň tejribesinde emele gelen birnäçe ugry bellemek bolar. Şol ugurlaryň birinjisi bilim edarasynyň bilim beriş giňişligini döretmek. Şu ugurdaky meseleleri çözmek üçin döwlet geljegiň ösen orta we ýokary bilim edaralaryny döretmek boýunça täzeçil maksatnamalary maliýeleşdirýär. Şol okuw mekdeplerinde multimedia serişdeleri bilen doly enjamlaşdyrylan dil öwreniş barlaghanalary (laboratoriýalary) ulanmaga berilýär. Şol barlaghanalarda talyplaryň topar bolup ýa-da ýekebaralaýyn, mugallymyň ýolbaşçylygyjda ýa-da öbaşdak öwrenmegine şertler döredilýär.

Ikinji ugur dil öwredilende kompýuter oýunlaryndan peýdalanmak bile baglydyr. Bu ugurda wezipe hökmünde zerur bolan kommunikatiw başarnygyň çäklerinde doly özleşdirmäge mümkinçilik berýän dilüsti aragatnaşyk etmegiň başarnyklaryny çuňlaşdyrýan kompýuter oýunlaryndan peýdalanmak göz öňünde tutulýar. Okuw oýny toparda gündelik ýaşaýyşda duş gelmegi mümkin bolan ýagdaý modelirlenýär, bu bolsa, öz gezeginde, talybyň dili has kämil öwrenmäge bolan höwesini ýokarlandyrýar. Dil öwredilende oýun usulyny ulanmagyň netijesi hökmünde bilim almagy,

başarnyklary kämilleşdirmegi, onuň höweslendiriji häsiýeti hökmünde bolsa, talyplarda döreýän gyzyklanmagy görkezmek bolar. Bu ugruň çäklerinde dili öwretmek nukdaýnazaryndan täze sanly tahnologiýalardan peýdalanyp döredilen oýun serişdeleriniň we programma üpjünçiliginiň peýdalanylmasynyň mümkindigini bellemek bolar. Şeýle serişdeleriň hem programma üpjünçiliklériniň ulanylmagy bilen öz içine okuw maglumatlarynyň köp mukdaryny, durmuşy ýagdaýlaryň birnäçesini alýan adaty gönükmelerden başlap, iň çylşyrymly ýagdaýlary göz öňünde tutýan kompýuter oýunlary döredilýär. Bu ugruň çäklerinde talyplara hödürlemek mümkin bolan oýun şekillei gönükmeleri mysal getirmek bolar.

Hearing mistakes

Tell or read a story that is well known to the students (it can be one they have recently worked on in class) introducing deliberate mistakes as you do so. When they hear a mistake, students put their hands up, call out the correction ,or note down the mistake.

General knowledge

Announce a general knowledge quiz and then ask different kinds of questions. The students can volunteer answers or you can ask them to write down what they think the answer might be.

Üçünji ugur bilim ulgamyna niýetlenen ýörite saýtlaryň, dürli temalardaky, şol sanda dil öwretmegiň maksatlary üçin ulanmaga niýetlenen maglumatlary öz içine alýan portallaryň döredilmegi bilen baglydyr.

Maglumat-aragatnaşyk tehnologiýalaryndan sapakda peýdalanylmagy:

Talyplaryň öwrenýän dilleri ene dili bolan söhbetdeşleri bilen janly aragatnaşyga girmegine;

Talyplary okuwa işjeň çekmäge we zerur dil gurşawyny döretmäge, şeýlelikde olaryň psihologik päsgelçilikleri ýeňip geçmegine şert döretmäge;

Talyplaryň döredijilik işjeňligini artdyrmaga, olaryň geljekki hünär başarnyklaryny kemala getirmäge;

Talyplaryň geljekki kärine halkara hünär başarnyklarynyň kemala gelmeginde esasy şertleriň biri bolan aragatnaşyk hem medeniýetara başarnyklaryny kämilleşdirmage;

Daşary ýurt dilini we şol dil ene dili bolan halkyň medeniýetini bilelikde öwrenmäge höwes döretmäge giň mümkinçilikler açýar.

Maglumat aragatnaşyk serişdeleriniň bu ugurda ulanylmagyna mysal hökmünde :

- internet maglumatlarynyň peýdalanyp, London barada tekst taýýarlaň. Şol tekst boýunça topardaşyň bilen bilen sorag-jogap alşyň;

- Internet malumatlaryndan peýdalanyp, Beýik Britaniýanyň tanymal şahsyýetleri barada söhbetdeşliik taýýarlaň we ş.m. gönükmeleri görkezmek bolar.

Daşary ýurt dillerini öwretmekde maglumat-aragatnaşyk serişdeleriniň ulanylmagynyň berýän ýene-de bir artykmaçlygy talyplaryň başarnyklaryna awtomatik usulda baha bermek olaryň netijeli özbaşdak işini guramaga şert döredilýändigindedir.

Sapakda multimedia serişdelerinden peýdalanylmagy bolsa dil öwrenýänleriň duýgusyna täsir edýär, talyplary dili öwrenmäge has erjel çemeleşmegine sebäp bolýar. Şeýle hem, bu usul talyplaryň biri-biri bilen oňyn gatnaşyk etmeklerine, mugallyma dil öwrenýänleriň psihologiýa-pedagogiki aýratynlyklaryny öwrenmäge, olaryň aň ýetirişini höweslendirmäge, oýun tehnologiýasyny ulanmaga oňyn şert döredýär. Şunda diňe bir talyby işjeň çemeleşmäge çekmek bilen çäklenilmän, eýsem öwrenen maglumatlaryny gündelik durmuşda ulanmaga höweslendirmäge mümkinçilik döreýär. Bu bolsa öwrenileni has berk özleşdirmegiň hem ýatda uzak wagtlap saklamagyň esasy şertidir..

Maglumat-aragatnaşyk serişdeleriniň okuw tejribesine ornaşdyrylmagy bilimiň didaktik mümkinçiliklerini giňeltmek bilen çäklenmän okuwyň mazmunyny baýlaşdyrýar. Daşary ýurt dilini öwretmekde maglumat-aragatnaşyk tehnologiýalarynyň ornaşdyrylmagy bilim berlişine täzeçe çemeleşme bilen doly sazlaşýar. Şeýle tehnologiýa talyplaryň okuwa has işjeň gatnaşmaklaryny gazandyrýar, mugallyma talyplara olaryň şahsy aýratynlyklaryny göz öňünde tutup çemeleşmäge mümkinçilik berýär.

Öwrediji kompýuter programmalarynyň täze nesli öz-özüni dolandyrmagy başarýan, döredijilikli işlemäge ukyply hünärmenleri taýýarlamak baradaky wezipäni çözmekde iň täsirli okuw serişdeleriniň biridir. Täze döwrüň usulyýeti “aň ýetirişi ulanyp bilem bermek”, “açyş etmek (ewristika) usuly bilen bilim bermek”, we beýleki ş.m. düşünjeler bilen baýlaşdy. Pikirlenmegi ösdürmek dil öwrenmegiň aýrylmaz bolegine öwrüldi. Okuwçylaryň bilim almakda şahsy çelgilerini emele getirmek üçin işjeň aň ýetirijilik işini höweslendirmeli. Talyplarda daşary ýurt dilini has kämil bilmäge höwes döretmek onuň kämillige barýan ýolunda içki hereketlendiriji güýç bolup hyzmat eder. Mugallym tarapyndan talybyň döredijilikli gözlegleri üçin höwes hem oňyn şert döredilmegi talybyň öz öňünde goýlan maksada düşünmegini, şol maksada ýetmek üçin etmeli hereketlerini bilmegini, özbaşdak bilim almak başarnygyny terbiýelemek, ýagny okuw maglumaty bilen ýokary derejede netijeli işlemäge bolan

jogapkärçiligini kemala getirmekdir. Şeýle edilmegi okuwyň netijeliligini gazanmagy we okuw toparynda agzybirligi üpjün etmegi ýeňilleşdirer.

Diýmek,okuwyň barşyna maglumat-aragatnaşyk serişdeleriniň giňden ornaşdyrylmagy:

onuň mazmunyny döwrebaplaşdyrmaga;

täze döwrüň talaplaryna laýyk gelýän hünärmenleri taýýarlamaga;

talyplary durmuşda gabat gelip biljek islendik ýagdaýdan daşary ýurt dilini ulanyp başa alyp çykmagy başarýan hünärmen edip ýetişdirmegiň netijeli ýoludyr.

Türkmen halkynyň Milli Lideri hormatly Arkadagymyz Gurbanguly Berdimuhammedowyň, Arkadagly Serdarymyz, Türkmenistanyň hormatly Prezidenti Serdar Berdimuhammedowyň taýsyz tagallalary bilen jemgyýetçilik ösüşiniň ähli ugurlarynda, şol sanda, milli bilim ulgamynda döredilen şertlerden peýdalanyp, ýaş nesle ýokary derejede bilim-terbiýe bermek, olary hünärine ökde hünärmenler edip ýetişdirmek üçin güýjüni gaýgyrman işlemek bilim işgärleriniň jana-jan borjudyr.

Edebiýatyň sanawy:

1. Ситникова, Т.В. Методика обучения будущих журналистов аналитическому чтению англоязычных текстов СМИ в жанре интервью / Т.В. Ситникова // Вестн. Минск. гос. лингв. ун-та. Сер. 2, Психология. Педагогика. Методика преподавания иностранных языков. – 2008. – № 2(14). – С. 154-164.

2. Создание облаков слов онлайн [Электронный ресурс]. – Режим доступа: http://www.wordclouds.com/. – Дата доступа: 1.10.2018.

3. Создание когнитивных карт онлайн [Электронный ресурс]. – Режим доступа : http://www.mind42.com/. – Дата доступа: 3.10.2018.

© Sädiýewa A.A., Gylyjowa G.N., 2023

УДК 821.512.141

Таһирова Г.Ф.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ФӘРЗӘНӘ АҡБУЛАТОВАНЫҢ ХИКӘЙӘ ҺӘМ ПОВЕСТАРЫНЫҢ ПРОБЛЕМАТИКАҺЫ

Журналист һәм яҙыусы Фәрзәнә Аҡбулатова ижады менән бөгөнгө көндә һоҡланмаған, уны ҡыҙыҡһынып уҡымаған кеше юҡтыр. Сөнки үҙенең балалар өсөн дә, ололарға төбәп тә яҙған әҫәрҙәрендә күренекле әҙибә ҡыҙыҡлы художестволы картиналар тыуҙыра. Уның прозаһында

беҙ мауыҡтырғыс та, фәлсәфәүи лә, хиссән дә, психологик яҡтан үткер ҙә сюжеттар менән осрашабыҙ.

Әммә Фәрзәнә Аҡбулатованың емешле ижады бик күп әҙәби тәнҡитселәр иғтибарында булһа ла, уның асылын өйрәнеү һәм уҡыусыларға еткереү алдағы көн мәсьәләһе тип уйлайбыҙ. Шуға ла, күренекле яҙыусының ижад хикәйә-повестарына мөрәжәғәт итеп, уларҙың идея-тематикаһын өйрәнмәксебеҙ.

Прозабыҙға тормошсан һәм юғары рухлы «Атай рухы» исемле хикәйәһе менән килеп ингән Фәрзәнә Аҡбулатованың әҫәрҙәрендә беҙ замана күренештәренең асылын да, социаль хәлде лә, ябай кешеләр йөҙөндә ғүмер мғәнәһен һәм уның әхлаҡи таяуҙарын аңларға тырышыуҙы ла күрә алабыҙ. Социаль-психологик проблемаларға мөрәжәғәт иткәнгә күрә, Фәрзәнә Аҡбулатованың хикәйә-повестарында тормош-көнкүреш, замана, йәмғиәт торошо кеүек темалар өҫтөнлөк итә, улар ғаилә йәшәйеше, ир һәм ҡатын мөнәсәбәттәре, мажаралар кеүек юҫыҡта асылып китә. Шул уҡ ваҡытта әҙибә үҙенең ҙурыраҡ жанрҙа яҙылған әҫәрҙәрендә тарихи темаға ла мөрәжәғәт итеп ҡуя.

Мәҫәлән, Фәрзәнә Аҡбулатованың бер китабына исем биргән «Уның исеме – мөхәббәт» исемле хикәйәһендә лә мөхәббәт өсмөйөшө яҡтыртыла. Әҙибәнең был әҫәрендә һуғыш осоро ҡатын-ҡыҙҙарының аслыҡҡа, һуғыш михнәттәренә түҙемлеге, сыҙамлығы, һөйгәндәрен яу ҡырынан көтә белеүе, мөхәббәт хаҡына көндәше менән йәшәгән иренең ҡылыҡтарына күҙ йома, кисерә, ғәфү итә белеүе тасуирлана.

Хикәйәнең төп геройы Фирүзә. Ирен тәүҙә ил һаҡларға ебәреп көтә. Тик ул бер йыл хеҙмәт иткәс, һуғыш башланыу сәбәпле, фронтҡа китә. Иренең, ҡаланан ҡайтып барышлай, ике батып барыусы сабыйҙы ҡотҡарыуы, больницаға эләгеүе хәбәрен ишетеү менән Фирүзә, барлыҡ үпкәләрен онотоп, һөйгәненең эргәһенән китмәй. Артабан Ғиззәт тә, һауығып бөтмәгән килеш больницанан сығып, тиҙерәк Фирүзәһен күрергә ашыға. Шулай итеп, был ике герой, тормош һынауҙарын еңеп, үҙ хаталарын танып, мөхәббәттәренең көсөнә инаналар.

Фәрзәнә Аҡбулатованың «Һыңар алҡа» хикәйәһендә лә ғаилә тематикаһы - үҙәктә. Бында күршегә донос яҙыу сәбәпле, тотош ғаилә тарҡала. Төп герой Сәйеттең атаһы – хәрби кеше. Тыуған төбәгенә, Башҡортостанға әсәһенә ҡунаҡҡа ҡайтҡас, күршеһе Вәлиуллин доносы менән Себергә ебәрелеп, юҡҡа сыға. Ғәзиз ата-әсәһенән яҙған үҫмер йылдар үтеү менән дә был кешене ғәфү итмәй, сөнки Вәлиуллин уларҙы йәшәгән йорттарынан мәхрүм иттерә, тыуған тупрағынан, һеңлеһенән айыра.

Фәрзәнә Аҡбулатованың «Таш ҡәлғә» хикәйәһе тасуирланған мөхит, дәүер, ысынбарлыҡ менән хыял уйҙырмаһы ҡатнашмаһынан тыуған, кинәйәгә, киңәйтелгән символикаға ҡоролған [3; 480-се б.]. Боронғо ҡәлғә тормошо, ундағы ҡан-ҡәрҙәштәребеҙҙең көнитмеше бөгөнгөбөҙ менән сағыштырыла, богөнгө булмышыбыҙҙы, йәшәйешебеҙҙе кешелек донъяһында тотҡан урыныбыҙҙы нығыраҡ танырға, аңларға булыша, ситтән тороп баһа бирергә мәжбүр итә. Хикәйәнең төп геройы дәүерҙән дәүергә күсеп йөрөй, бөгөнгөнән үткәнгә үтә, киләсәккә баға. Шул рәүешле дәүерҙәр алмашыныуы, фанилыҡтан баҡыйлыҡҡа күсеү, хыял менән ысынбарлыктың аралашыуы был әҫәр сиктәрендә бер ҡаршылыкһыҙ, еңел башҡарыла.

Туған халҡының оло фажиғәһен асып һалған хикәйәлә авторҙың үҙ баһаһы, ҡарашы ла сағыла, ул әсе сарказм менән һуғарыла. Автор милләте позицияһынан сығып фекер йөрөтә, донъяға үҙ халкы күҙлегенән тәнҡит менән баға. Таш Ҡәлғә - тәрән фәлсәфәүи мәғәнәгә дәғүә итеүсе символик образ. Ул - ҙур юғалтыуҙар кисергәндән һуң, донъянан айырылып, үҙ эсенә бикләнгән, хәҙер килеп эстән тарҡалған ил.

Тарихи тема ла Фәрзәнә Аҡбулатованың яратҡан художестволы материалы булып хеҙмәт итә. Уның «Әлморонда бал тәме» исемле киң билдәле повесы революция йылдарындағы геройҙарҙың төрлө асылын күрһәтә.

Совет власын ауылдарға урынлаштырам, «контрҙарҙы ҡырыам» тип килгән Шатморат милли яҡтан күркәм, мәҙәниәтле Фәйрүзәне осрата. Ошо урында ваҡиғалар ағышында лирик ағым пәйҙә була, Фәйрүзә менән Шатмораттың никахлашыуы күренеше заманаға ҡарата ҡаршылыҡлы күренеш булараҡ сағылдырыла. Ләкин халыҡ уны хуплап ҡаршы ала, революция юлында булғандарҙың халыҡ мәҙәниәтен һәм асылын һаҡлап ҡалырға ынтылышы күҙәтелә.

Был повеста Фәрзәнә Аҡбулатова, күп тиҫтә йылдар ҡалыплашҡан башҡорт әҙәбиәтендәге традицион позициянан ҡотолоп, дәһшәтле йылдарға икенселәй баһа бирелергә ынтыла. Һәҙиә Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романында яҡтыртылыш тапҡан ҡапма-ҡаршы бәрелештәр эсендә һүрәтләнгән синыфтарҙың бер үк халыҡтан булыуын, ул осорҙың бик сыбарлы икәнлеген һәм бер яҡлап ҡына баһалау дөрөҫ булмағанлығын күрһәтә.

Повеста милли тема ла күтәрелә. Ул Рәсих образында билдәләнә һәм уға Фәйрүзә биргән милли тәрбиә рухында һынландырыла. Кульминациялағы Рәсихтең бейеүе лә символик мәғәнәгә эйә. Тәүҙә

ҡурҡыу, йән һаклау хисе оялаған, «яңылыш берәй нәмә ысҡындырырһың да следующий званиенан тороп ҡалырһың» тип ҡалтыраған Рәсихтең меҫкен тойғоларын быуаттарҙан килгән башҡорттоң көрәш рухы, мөғәллимә Фәйрүзә һеңдергән рухи азатлыҡ, рух сәләмәтлеге, ғорурлыҡ хисе еңә: ҡыйғыр бөркөт тә, утлы дауыл да, мәңге юйылмаҫ яугир ҙа булып һынлана ул үҙенең бейеүендә, туй көнөндә Шайморат ағаһы бейегән бейеүҙе башҡарғанында.

Фәрзәнә Аҡбулатова революция юлынан ситкә тайпылып, халыҡ өсөн көрәшкәндәрҙең ғүмере аяныслы булыуын да һынландырырға ынтыла. Рәсихтең яҙмышы ла шуның бер сағылышы. Шулай ҙа, күпме йылдарҙан һуң да ул әлморон тәмен татырға тыуған ауылына әйләнеп ҡайта, уны бында ҡаны, милләте тарта. Шуның менән автор милли рухтың һәм уның асылының үлемһеҙлеген күрһәтә.

Был повеста үҫтерелгән «ауылға ҡайтыу» идея мотивы «Туғайҙарҙа турғай» хикәйәһендә лә үҫтерелә. Әҫәр хәтерләүҙәрҙән тора. Төп герой Ғәйнетдиндең ауылы Аҡбатыр төпкөлдә булғанлыҡтан бөтөрөлә, халҡы күсеп китә. Шул арҡала егет иң яҡын кешеһе, синыфташы Фәнисәне лә юғалта.

Төйөнләү өлөшө булып авторҙың автобуста йырсы Ғәйнетдинде осратыуы, уның менән әңгәмә ҡороуы күренә. Бында сюжеттың художестволы йөкмәткеһен байытыр өсөн автор тәбиғәт күренештәрен, уларға ҡағылған ырымдар ҡуллана. Аҡбатыр ауылының ҡороуына битараф булмаған, аҙаҡҡа тиклем өмөтөн юғалтмай йәшәгән ҡайһы бер кешеләрҙең ҡайғыһын һүрәтләй автор.

Ваҡиғалар үҫеше төп герой Ғәйнетдиндең иҫтәлектәренә, бала сағына алып ҡайта. Әҫәрҙең идея-проблематикаһы ла шунда асыла. Ауыл кешеләренең үҙ ерҙәрен ташлап китеп, ҡала шарттарына яраҡлашыуы ауыр кисерелеүе һүрәтләнә. Хикәйәлә бер сюжет һыҙығынан икенсеһе үрелеп сыға.

Ф. Аҡбулатова хикәйәлә тәбиғәттең бейек-бейек ҡыйғас тауҙары, зифа, ҡупшы ҡайындары, ғорур баҫҡан ҡарағайҙары, ныҡлы имәндәре һәм сәскәләре тураһында оҫта итеп тасуирлай. Перспективаһыҙ ауылдың тирә-яғы шундай матур, бай булыуға ҡарамаҫтан, ул ташландыҡ булып ҡала. Тик ишек алдындағы ҡарт имән менән тоғро Аҡтырнаҡ ҡына үҙ нигеҙен һаҡлап ҡала.

Йырсы булырға хыялланып, имтиханға барған Ғәйнетдиндең уйында тик тыуған ауылы, унда бер үҙе тороп ҡалған Аҡтырнағы була. Этте ташлап, ата-әсәһен ҡалаға алып китеүен ағаһы уға хат аша белдерә. Был кульминацияның иң юғары нөктәһе. Ғәйнетдин хатты уҡығас бик

ныҡ борсола, тоғро дуҫына хыянат иткеһе килмәй, шунлыҡтан имтиханын бирә алмай, әммә бының өсөн ҡайғырмай, ә, киреһенсә, шат йылмайып ауылына йүнәлә. Ҡалала уға ауылының саф һауаһы етмәй, ағаһының да рухһыҙлығы уны ныҡ борсой.

Сиселеш өлөшөндә Ғәйнетдин үҙе лә белмәй яратып йөрөгән мөхәббәте Фәнисәне Аҡбатырҙа осрата. Тыуған ауылынан күптән сығып киткән ике ауылдаш бик оҙаҡ ҡарап торалар Аҡбатыр туғайына. Фәнисәне ошо тыуған ерендә яңынан осратыуына Ғәйнетдин ныҡ шатлана, уның өсөн ауылына ҡот ҡайтҡан төҫлө була. «Бер-беребеҙҙең яҙмышы менән ҡыҙыҡһынырға ваҡыт тапманыҡ, буғай. Ә бит оло юлды күпме бергә үттек. Ошо урман-ҡырҙарыбыҙға һоҡландыҡ, уларға арнап әкиәттәр, хикәйәләр уйлап сығарҙыҡ… Йырҙар йырланыҡ!..» –тип үкенесен белдерә Фәнисә.

Әҫәрҙең төп проблемаһы булып ауылдың бөтөүе, халыҡтың тыуған ерен, ауылын уратып алған тәбиғәтен онота алмауы, уны, уның халҡын юҡһыныуы тора. Шул проблема йәштән дуҫ булып йөрөгән ике тиҫтерҙең юлын икегә айыра һәм ғүмерлеккә аҙаштыра.

Шулай итеп, Фәрзәнә Аҡбулатованың хикәйә-повестарына анализ уның әҫәрҙәрендә халыҡ яҙмышы, ғаилә көнкүреше, мөхәббәт кеүек темаларҙың өҫтөнлөк итеүен күрһәтә. Үҙенең ижад емештәрендә тарих һәм бөгөнгө көндө сағыштырып, автор милләттең үҙаңы, уның нигеҙе булған ауылдың киләсәге проблемалары өҫтөндә уйлана, кешеләр яҙмышында был мәсьәләләрҙе художестволы материалда хәл итә. Шуға ла, бөгөнгө көндә Фәрзәнә Аҡбулатова ижады үҙенең көнүҙәклеге, заманаға әленәнүәле әйләнеп ҡайтыуы менән айырылып тора һәм һәр йәһәттәнуҡыусылар иғтибарына лайыҡ.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Аҡбулатова Ф.Ф. Зәңгәр ҡаялар. – Өфө: Китап, 2004. – 254 бит.
2. Аҡбулатова Ф.Ф. Уның исеме – Мөхәббәт: повестар, хикәйәләр / Ф. Аҡбулатова. – Өфө: Китап, 2007. – 312 бит.
3. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары. – Өфө: БашДУ, 2012. – 522 бит.

© Таһирова Г.Ф., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Tahирова Р.Н.,
ассистент, Өфө университеты

ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ ЛЕКСИК САРАЛАРҘЫҢ ҠУЛЛАНЫЛЫШЫ

Шиғриәт – телдең стилистик байлығын, уның күркәмлеген сағылдырыусы бер сара. Хәҙерге башҡорт шиғриәте әҫәрҙәрендә һүҙҙең образлы көсө, уның мәғәнә киңлеге һәм тәрән хеҙмәте сағыла.

Һүҙҙәрҙең күсмә мәғәнәһендә генә түгел, тура мәғәнәһендә лә уйтойғоға эмоциональ тәҫьир итеү мөмкинлеге бар. Ул һөйләү телендә һәм әҙәбиәттә текст эсендә йөкмәткегә билдәле рәүештә ниндәйерәк һүҙҙе һайлауға һәм нисегерәк ҡулланыуға бәйләнгән.

Телдең һүҙ ҡаҙнаһы ғәжәйеп бай. Һәр кем туған теленең һүҙ байлығын үҙ тәжрибәһе, зиһене һәм хәтере мөмкинлек биргән ҡәҙәр уйтойғоларын тәҫьирлерәк еткерер өсөн теүәл төшөнсәле һәм тапҡырыраҡ мәғәнәле һүҙҙәрҙе, ҡалыплашҡан һүҙбәйләнештәрҙе ҡулланырға тырыша. Яҙыусы кешегә һүҙҙәрҙең, фразаларҙың иң аҫылдарын һайлау һәм тейешле урынына ҡуйып баҙлатып ебәреү мөһим.

Ниндәй генә әҫәрҙе алып, уны иғтибар менән ҡарамайыҡ, беҙ уның тексында тура мәғәнәһендә ҡулланылған бик күп һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр табабыҙ. Уларҙы, күсмә мәғәнәлә килмәгән өсөн генә художествоһыҙ тип атай алмайбыҙ, сөнки яҙыусы тарафынан дөрөҫ һайлап алынып, урынлы ҡулланылған һүҙҙәр үҙенең даими мәғәнәһендә лә тәҫьир итеү көсөнә эйә була.

Тап ана шул дөрөҫ һайлау һәм урынлы ҡулланыу арҡаһында әҫәргә шиғриәт өҫтәүсе һүҙҙәр ҙә була. Уларҙы образлылыҡтың лексик саралары тип атайҙар.

Күренекле әҙәбиәт белгесе, академик Ғайса Батырғәрәй улы Хөсәйенов һәм атаҡлы әҙәбиәтсе-ғалим, тәнҡитсе Ким Әбүзәр улы Әхмәтйәнов лексик сараларға синоним, антоним, омоним, әҙәби фразеология, идиома, афористика, тарихи принциптан архаизм, неологизм, варваризм, диалектизм, һүҙ уйнатыу кеүек бүлексәләрҙе билдәләйҙәр.

Мәғәнә оҡшашлығына йәки айырымлығына нигеҙләнгән лексик саралар хәҙерге башҡорт шиғриәтендә үҙенсәлекле урын биләй. Был саралар шиғриәтебеҙҙе байытып ҡына ҡалмай, ә уның эмоциональ-экспрессив тәбиғәтен, һүҙ ҡеүәһен бермә-бер арттыра.

Мәғәнә оҡшашлығына йәки айырымлығына нигеҙләнгән лексик сараларҙың тәүге төрө – синонимдар.

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә синонимдарға миҫалдарҙы күп осратырға мөмкин. Мәҫәлән, Салауат Әбүзәрҙең ҡыҙҙарына бағышланған «Күҙҙәр» исемле шиғырында:

Һеҙ юҡ саҡта, донъям дөм ҡараңғы,
Тома һуҡыр, зәғиф бер бәндә.
Төндәрем дә хатта ҡояшлылай
Һеҙ булһағыҙ минең эргәмдә.

Шағир ҡыҙҙарына булған саф, атайҙарса хәстәрлекле оло һөйөүен шиғыр юлдарына һалған. «Дөм ҡараңғы, тома һуҡыр, зәғиф» тигән һүҙҙәр был шиғыр юлдарында синоним булып киләләр. Ҡыҙҙары өйҙә булмаған саҡта шағир күңеле әрней, үҙен хатта зәғиф кешегә тиңләй. Тимәк, ҡулланылған синонимдар шағирҙың күңел торошон сағылдырыусы һүрәтләү сараһы булып тора.

Зөлфиә Ханнанова шиғриәтендә лә синонимдар байтаҡ. Миҫал өсөн «Инә бөркөт» шиғырын ҡарап үтәйек.

Һауаларҙа оса инә бөркөт,
Аҡлы ҡаурыйҙары нисә икән?
Мал-тыуарым ишле, донъям етеш
Йәнкәйемде ниҙәр киҫә икән?!

Шағирә тормошонда барыһы ла һәйбәт – . «мал-тыуары ишле, донъяһы етеш», әммә күңел төбөндә ниндәйҙер төйөн ята.

Һүрәтләү сараһы булараҡ, хәҙерге башҡорт шиғриәтендә антонимдар киң ҡулланыла. Бигерәк тә, Лариса Абдуллина ижадында был сараға миҫалдарҙы күп осратырға мөмкин.

Ялҡыныңда миңә – шундай рәхәт,
Ялҡыныңда миңә – ҡыйын да. («Беҙ икебеҙ... »)
Төндәр шундай оҙон, тиһең,
Ә көндәр шундай ҡыҫҡа.
Үлсәүҙәрең башҡалыр шул,
Йөрәкте һалғас усҡа.
(«Төндәр шундай оҙон, тиһең... »)

Үрҙә килтерелгән миҫалдарҙан күренеүенсә, антонимдар ҙа шиғриәттә ҙур роль уйнай. Улар кешенең күңел стихияһының ҡаршылыҡлы, тормош юлының һикәлтәле булыуын күрһәтә. Лариса Абдуллина шиғриәтендә был сара лирик геройҙың мөхәббәт хистәренә сорналған күңелен асыуға булышлыҡ итә.

Салауат Әбүзәр шиғриәтендә лә антонимдар даими ҡулланыла.

Батырға ла, ҡурҡаҡа ла
Ҡая уртаҡ:

Батыр башҡа менә, ә өңөнә
Боҫа ҡурҡаҡ.
(«Батырға ла, ҡурҡаҡҡа ла... »)

Миҫалдарҙан күренеүенсә, Лариса Абдуллина шиғриәтенән айырмалы рәүештә, Салауат Әбүзәр ижадында антонимдар кеше тормошо, беҙҙе уратып алған донъя менән бәйле. Улар ысынбарлыҡтың ҡаршылыҡлы ла, ҡытыршылыҡлы ла, ике яҡлы ла булыуын күрһәтеүгә булышлыҡ иткән.

Һүрәтләү сараһы булараҡ омонимдарҙың ҡулланылышы шиғырҙарҙың рифмаһы менән бәйле. Салауат Әбүзәр шиғриәтендә улар үҙенсәлекле ҡулланылыш таба. Унда омонимдарҙың омофон (бер төрлө әйтелеп тә, төрлөсә яҙылған) тип аталған төркөмсәһенә лә миҫалдар ҙа бар.

Һин бәләгә тарығанда,
Дуҫлыҡ һынала...
Һин бәләгә тарығанда
Дуҫлыҡ һына ла.

Һүҙ уйнатыу, исеменән үк күренеүенсә, теге йәки был һүҙҙең мәғәнәһен аңлы рәүештә башҡа берәй һүҙгә «бороп ебәреүгә» нигеҙләнә. Бер-береһе менән мәғәнәүи мөнәсәбәткә ингәндә, әгәр ҙә ике һүҙ ғибрәтле йөкмәткe йәки көлкө уята икән, тимәк, беҙҙең алдыбыҙҙа – һүҙ уйнатыу [6, 148].

Һүҙ уйнатыуға миҫал итеп Зөлфиә Ханнановаңың «Онлайн» шиғырын килтерергә мөмкин:

Ул иртән дә онлайн,
Ул кисен дә онлайн.
Телефондан уны ҡарап,
Эшемә гел һуңлайым.
Көндөҙ ҙә ул онлайн,
Төндә лә ул онлайн.

Шаярыу ҡатыш яҙылған был шиғырҙа, шағирә махсус рәүештә «онлайн» һүҙенә баҫым яһап, заманса юмористик әҫәр тыуҙырған.

Шулай итеп, мәғәнә оҡшашлығына йәки айырымлығына нигеҙләнгән лексик саралар хәҙерге башҡорт шиғриәтендә даими ҡулланыла. Бигерәк тә шағирҙар ижадында синоним, антоним, омоним кеүек лексик сараларға миҫалдар байтаҡ.

Һүҙҙәрҙең тарихына һәм географияһына бәйләнешле лексик саралар шиғриәттә һирәк осраған, әммә шул уҡ ваҡытта ҡыҙыҡлы ҡулланылыш алған һүрәтләү саралары булып торалар. Улар теге йәки

был яҙыусы йәки шағирҙың телмәрен байыта, уҡыусыға алып барып еткерер фекерен аныҡыраҡ итеү өсөн ҡулланыла.

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә, бигерәк тә, профессионализмдарға миҫалдар байтаҡ. Ниндәй ҙә булһа берәй һөнәрҙең әҙәби әҫәрҙә ҡулланылған махсус төшөнсәләре профессионализмдар тип атала [6, 152]. Салауат Әбүзәрҙең «Өмөт» тигән шиғырын ҡарап үтәйек.

Мин – диңгеҙҙәй йөҙгән карап,
Капитан – өмөт...
Туғыҙ валлы тулҡындарҙың
Ғәйрәтен еңеп
Йөҙөп бара. Матростарым
Минең – шиғырҙар.
Был юлы ла штормды
Йырып сығырҙар.

Шиғыр юлдарынан күренеүенсә, Салауат Әбүзәр диңгеҙселәр профессияһына бәйле профессиональ терминдар ҡулланған. Әммә бында профессия булараҡ, ысын диңгеҙселәр хаҡында һүҙ алып барылмай. Шағир үҙенең шиғыр яҙыу процессы, ижад ҡомары хаҡында һүҙ йөрөтөп, үҙ шөғөлөн диңгеҙселәр профессияһы менән сағыштырып тәрән мәғәнәле әҫәр ижад иткән.

Ә бына Лариса Абдуллинаның «Башҡорт теле уҡытыусыһы – яугир» тигән шиғыры иһә, махсус рәүештә мәктәптә балаларға белем биреүсе, халҡыбыҙ рухын өләшеүсе – башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларына бағышланған. Был шиғырҙағы профессионализмдар мәктәп тормошона, мәғарифҡа бәйле.

Муҡсаһына китап ҡына түгел,
Халыҡ рухын һалып иң элек,
Килеп инде мәктәп тупһаһынан –
Белем йорто китте терелеп.

Шулай итеп, шағирҙар профессиональ терминдарҙы үҙ әҫәрҙәрендә төрлө маҡсат менән файҙаланып, үҙ уҡыусыһына тос фекерҙәрен еткерә.

Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә архаизмдар бик һирәк осрай, ә шулай ҙа ҡулланылыш сфераһы бик үҙенсәлекле:

Ниндәйен ҙур, оло ҡәлғәнән дә
Ҡалыр икән бары хараба.
Әллә хөсөт, әллә мәкер көҫәп,
Яттар керҙе беҙҙең араға.
(З. Ханнанова «Беҙҙең ғаилә»)
Мин – ҡәлғә. Минең эсемдә

Һаҡлана бауыр итем.
Миңә ҡурсалау, яҡлау хас
Ҡурҡыу, албырғау ситен.
(Л. Абдуллина «Мин ҡатын-ҡыҙ»)

Был шиғыр юлдарында “ҡәлғә, хараба, собханалла, тәҡдир” һүҙҙәре архаизмдар булып килә. Һүҙҙәрҙең тарихына һәм географияһына бәйләнешле лексик саралар хәҙерге башҡорт шиғриәтендә үҙенсәлекле урын алып тора. Был саралар, әлбиттә, шағирҙың һүҙ ҡеүәһен арттырыуға, уҡыусыға әйтергә теләгән фекерен тулыраҡ, ҡыҙыҡлыраҡ итеп еткереүгә булышлыҡ итә.

Шулай итеп, хәҙерге поэзияла мәғәнә тәрәнлеген тыуҙырыусы, шағирҙың эске күңел кисерештәрен стилистик йәһәттән төрлө образдарҙа һүрәтләй алыусы, киң хеҙмәт үтәүсе лексик һүрәтләү саралары киң ҡулланыла, улар индивидуаль-стилистик йәһәттән үҙенсәлекле.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Абдуллина Л.Х. Еләк тәме. Шиғырҙар. – Өфө: Китап, 2006. – 120 бит.
2. Псәнчин В.Ш. Телдең күркәмлек саралары. Өфө: Китап, 1984. – 298 бит.
3. Псәнчин В.Ш. Һүҙ тылсымы. – Өфө: Китап, 1996. – 280 бит.
4. Әбүзәр С.Н. Ғәмәл дәфтәре: шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 2017.– 302 бит.
5. Әхмәтйәнов К. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2004. – 312 бит.

© Таһирова Р.Н., 2023

УДК 821.512.141

Таһирова Р.Н.,
ассистент, Өфө университеты

РАУИЛ БИКБАЕВ ЛИРИКАҺЫНЫҢ ОБРАЗ ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Шиғриәттә образлылыҡ тыуҙырыу аша шағир донъяны танып-белеүгә өлгәшә. Ләкин шиғыр йәки поэма – «үҙ эсендәге әйбер» генә түгел. Уның тышҡы бөтөнлөгө лә образлылыҡ тыуҙырыусы мөһим шарттарҙың береһе һанала. Уҡыусының яңы замандарҙың художестволы фекерләүен тыныс ҡалдыра икән, бындай әҫәрҙе юғары шиғриәтле тип һанауы ҡыйын. Уҡыусыларҙың яңынан-яңы быуынын яулау – поэзияның үлемһеҙлек билдәһе. Бер мәҡәләһен Ә.

Харисовтың «Әҫәрҙең уҡылыу бәхете» тип атауында ҙур мәғәнә бар ине. Образлылыҡ – әҫәрҙең рухын, уның ҡан ағышын билдәләүсе төшөнсә [5, 124].

Шиғриәт – ул шағирҙың «иле». Ә был тылсымлы илгә һуҡмаҡтар төрлөсә һалына. Берәүҙәр тау-ташлы, боролмалы юлдар, икенселәр иһә йыр-моңдар аша килеп инә. Сөнки шиғриәт менән моң донъяһы тығыҙ бәйләнгән, шиғырҙың иң тәүге сифаты ла моң ул. Ә поэзияның нигеҙендә хис, моң, образлы фекер ята.

Рауил Бикбаевтың шиғриәте лә тотошлай образлы һуҡмаҡтарҙан һалынған ижад. Шағир ижадында образ саралары бик үҙенсәлекле, уның ижадының йөкмәткеһе һәм художество торошо ла шағирҙың бай һәм күп яҡлы лирикаһының йөкмәткеһенән килә.

Академик Ғайса Хөсәйенов яҙыуынса, Рауил Бикбаев башҡорт шиғриәтенең төп мисәүҙәренә инеп ижад иткән шағирҙарҙың береһе [4, 14].

Тәүге йыйынтыҡтың «Дала офоҡтары» тип аталыуы юҡҡа ғына түгел. Сөнки шағир: «Тыуған далаларымдағы киңлекте, һәр һыртҡа күтәрелгәс, бар тарафтарға саҡырып торған ҡабатланмаҫ офоҡтарҙы миңә башҡаса бер ҡайҙа ла күрергә тура килмәне. Бында ҡарашың бер генә ҡаршылыҡҡа ла барын төртөлмәй, сәхрә-яландарҙы кинәнеп байҡай. Даламды һағынғанда мин барыһынан да бигерәк шул киңлектәрҙе һағынам. Ысынлап та, далаһыҙ тыным ҡыҫыла, далаһыҙ күҙем тала. Елдәр ҙә бит бында тау-таш яры ғынан, ағас араһынан йәшенеп-боҫоноп өрмәй, иҫһә, бер юлы бар даланы тултырып, ҡоласын киреп иҫә, дауыл-бурандары килһә, бар даланы айҡап-иңләп килә», тип яҙғайны [1, 26]. Китаптағы шиғырҙарҙа иң матур хистәр аша тыуған яҡ, уның тәбиғәте, тормош хаҡында уйланыуҙар, күңел кисерештәре, әсә һәм замандаш образдары төп урынды алып тора. «Балтырған», «Сал сәс», «Йәшәртелгән дала», «Уралыма» шиғырҙарының лирик геройы заман ағышында барыусы ғына түгел, ә күп үҙенсәлектәрҙе алдан тойоп, актив хәрәкәт итеүсе шәхес тә.

Р. Бикбаев үҙенең тәүге йыйынтығында уҡ нескә күңелле лирик, заман мәсьәләләрен эпик ҡоласлы итеп һүрәтләй алыуы менән танылды. Шуға ла «Вокзал» поэмаһын да заман ағышын, ваҡыт арауығын, ваҡиғалар сылбырын күңел донъяһының тәрән хистәре аша бирә. Шағир тап дөйөмләштерелгән вокзал образы аша йәмғиәтебеҙҙең, кешеләрҙең бар һулышын, үткәнен һәм бөгөнгөһөн күрһәтә алды.

«Ҡош юлы» (1967) йыйынтығында Р. Бикбаевтың шиғри таланты нығына, фекер даирәһе фәлсәфәгә табан киңәйә барҙы. Әҫәрҙәрендәге

лирик герой тарих төпкөлдәренә бағып, күп һорауҙарға яуап эҙләй, хыялдары менән изгелек донъяһын иңләй, ҡош юлы буйлап тормош юлдарын барлай.

Автор өсөн донъяны яралтҡан мөхәббәт һәр тарафтан яңыра, һүҙ-образдар аша байыға бара. Тыуған ергә булған ҡарашы «Мин баш эйәм ҡайғыларҙан түгел, үҙ еремде өҙөлөп һөйгәнгә» тип ҡанатлана ғына.

Р. Бикбаевтың «Автобиография» (1969) шиғри йыйынтығының идея-тематикаһының үҙәгенә:

– Тыуған йылың ҡайһы?

– Халҡым тыуған йыл.

– Ҡыуған юлың ҡайһы?

– Халҡым ҡыуған юл, –

тигән юлдар билдәләй [2, 201]. Шағир үҙ халҡының бер тамсыһы булһа ла, уның үткәне, бөгөнгөһө һәм киләсәге менән айырылғыһыҙ берлектә икәнлеген иҫбатлай. Шуға ла китапҡа исем биргән юлдар авторҙың шәхсиәтенә генә ҡайтарылып ҡалмай, ә халыҡ, ер яҙмышы менән үлсәнә. Тик Р.Бикбаев үҙенсәлекле лирик «мин»енән ҡыйыу дөйөмләштереүҙәргә, фекер ептәрен илаһи хистәр аша бирергә өлгәшә.

«Лирика» (1971) китабында Р. Бикбаев шиғри фекере киңлектәрҙе иңләй бара, күңел юшҡындарын заман еле һәм дауылы менән юя бара. Юҡҡа ғынамы ни «булһаң икән дауыл ҡанатлы!» тип ярһыған лирик геройҙың психологик кисерештәрен «Туғыҙынсы май», «Томан», «Бала саҡ илендә» әҫәрҙәрендә күрергә мөмкин.

Авторҙың «Болгар шиғырҙарынан» шиғырҙар циклы ҡараштарҙы эпик киңлеккә генә әйҙәмәй, ә уртаҡ яҙмышлы – Еребеҙ образын һәр яҡлап асыҡлай ғына.

«Ғүмер уртаһы» (1976), «Һөйөнсө» (1979), «Ерем балҡышы» (1982), «Бураҙналар» (1984), «Яҙмышым» (1988) йыйынтыҡтарын да шағир һүҙе һәлмәкләнә, ҡараш-уйҙар тәрәнәйә, ил, ер яҙмышы йөрәктәрҙән сыҡҡан, хис-тойғоларҙан туҡылған әҫәрҙәрҙән тора. Автор ир уртаһына еткәс, хафалар менән алға баға һәм үҙенең тормош маҡсатын:

Ир уртаһы илдең тотҡаһы тип,

Ҡарай бөгөн беҙгә ил күҙе, –

тип яҡшы аңлай.

Шулай уҡ шағирҙың «Мөсәл ярым ғүмер», «Эҙләйем», «Күк әрем» поэмалары лиро-эпик жанрҙың сиктәрен тематик яҡтан да, стиль үҙенсәлектәре менән дә байытты. «Күк әрем» поэмаһында лирик геройҙың тыуған яҡтарға ҡайтыуы, ундағы хәтирәләрҙең өр-яңынан күҙ

алдынан үтеүенә бер образ – әрем сәбәпсе була. Шағир образды бик оҫта уйната, фекер төйөнөн шуға бәйләп, иҫ киткес бай ваҡиғаларҙы бәйән итә [4, 28].

Лирик герой оҙаҡ йылдар тыуған яҡтарында булмаған, ә ҡайтыу менән:

Ҡайһы ишегеңде ҡағайым һуң
Тыуған өйһөҙ тыуған ауылым! –

тип аҙап ҡала. Әммә ауыл, ауыл инде. Ауылдаштары һағынып, хөрмәт менән ҡаршылайҙар. Герой хәтирәләргә бирелә, атай еренең үткәне һәм бөгөнгөһө хаҡында уйлай. Атай ҡайғыларҙан хәлһеҙләнеп бөгөлөп төшкән. Шулай булмай ни, ағаһы һәм ҡустылары Бөйөк Ватан һуғышы яланында ятып ҡалған. Еңеү яҙы шатлыҡ менән бергә ҡара ҡайғы ла килтерә, атаһы йәннәткә күсә. «Мөсәл ярым ғүмер» әҫәре жанры буйынса тарихи-романтик поэма. Башҡортостан тарихы иҫәпһеҙ-һанһыҙ күтәрелештәр, ихтилалдар менән билдәләнгән. Тап шундай ваҡиғаларҙа ҡатнашыусы ун һигеҙ йәшлек шағир – лирик образ. Йәш шағирҙың донъяға ҡарашы, йәшәү рәүеше поэманы формалаштыра. Р.Бикбаев шиғриәтендә тарихи тематика һәм арҙаҡлы шәхес образдары айырым урынды алып тора. Салауат батырға арналған «Ер һәм диңгеҙ» балладаһы, «Мәмерйә», «Һаумы, Салауат!», «Ҡурай һәм ҡауырһын», «Салауаттың саңғы эҙҙәре», «... Күңелебеҙҙә уҫаллыҡ юҡ!» һ.б. бик күп әҫәрҙәрендә милли геройыбыҙҙың тере образын тыуҙыра.

Р.Бикбаев ижадында «Йыр» балладаһы, «Тамғалы уҡ» ғибрәтле хикәйәте, «Ностальгия», «Система», «Һыуһаным – һыуҙар биреген», «Баҙар балтаһы» поэмалары айырым урынды алып тора. Сөнки шағирҙың фекерләү ҡеүәһе, фәлсәфәүи уйланыуҙар даирәһе, замандың иң актуаль мәсьәләләре, халыҡ яҙмышы бар асылында ошо әҫәрҙәреңдә сағылыш тапты. Шағир үткер поэтик фекер аша халҡының үткәнен барлай, бөгөнгөһөн күҙаллай, киләсәген һәр йәһәттән төҫмөрләй.

Р.Бикбаевтың 2002 йылда «Ағиҙел» журналында «Йөҙ ҙә бер хәҙис» тип аталған дүрт юллыҡтары донъя күрҙе. Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаевтың хәҙистәрҙе башҡорт телендә шиғри юлдарға һалыуы халҡыбыҙ өсөн ҡыуаныслы яңылыҡ булды.

Дөйөмләштереп шуны әйтергә кәрәк, башҡорт поэзияһында Р.Бикбаев лирикаһы социаль йүнәлешле, барлыҡ әҫәрҙәре ха лыҡсан булыуы менән айырылып тора. Бигерәк тә, фекер тәрәнле ген хасил иткән фәлсәфәүи лирикаһы – ижадының бер биҙәге.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Бикбаев Р.Т. Шағир һүҙе – шағир намыҫы. – Өфө, 1997. – 214 бит.

2. Рауил Бикбаев. Һайланма әҫәрҙәр. I том: шиғырҙар, поэмалар. – Өфө: Китап, 2008. – 527 бит.

3. Рауил Бикбаев. Һайланма әҫәрҙәр. II том: шиғырҙар, хәҙистәр һәм тәржемәләр. – Өфө: Китап, 2008. – 560 бит.

4. Хөсәйенов Ғ.Б. Рауил Бикбаев. Тормошо һәм ижады. – Өфө: Китап, 2008. – 249 бит.

5. Әхмәтйәнов К.Ә. Поэтик образлылыҡ. – Өфө: Китап, 1964. – 191 бит.

© Таһирова Р.Н., 2023

УДК 821.512.141

Тимерғәлиева А.Р.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ӘНҮӘР БИКЧӘНТАЕВТЫҢ “БӨРКӨТ ҺАУАЛА ҮЛӘ” ПОВЕСЫНДА БАТЫРЛЫҠ ТЕМАҺЫ САҒЫЛЫШЫ

Әнүәр Бикчәнтәев – башҡорт прозаһын заманының актуаль проблемаларын күтәргән романдары менән байытҡан күренекле әҙиптәрҙең береһе. Балалар өсөн иң гүзәл проза өлгөләре ижад иткән, улар психологияһын бөтә нескәлектәрендә тойоп, оҫта итеп һүрәтләгән яҙыусы ла ул.

Әнүәр Һаҙый улы Бикчәнтәев 1913 йылдың 4 октябрендә Өфөлә хеҙмәткәр ғаиләһендә тыуа. 1921 йылғы аслыҡ мәлендә, Әнүәргә һигеҙ йәш булғанда, уларҙың ғаиләһе Ырымбурға күсеп китә. Мәктәпте, педтехникумды ла ул ошонда тамамлай.

Ырымбур педтехникумынан һуң бер нисә йыл мәктәптә эшләп ала. 1931йылда Архангельск ҡалаһы ете йыллыҡ мәктәбендәуҡытыу бүлеге мөдире вазифаһын башҡара, ә 1932 йылда Алыҫ Көнсығыштағы Яңы Өфө тигән ауылда уҡытыусылыҡ эшен дауам итә. 1933 йылда Өфөгә килеп, журналистика юлын һайлай: “Коммуна” газетаһы редакцияһында эш башлай. 1935-1937 Ҡыҙыл Аримяла хеҙмәт итеү йылдары. Унан һуң әҙип «Йәш коммунар», « Красная Башкирия», «Ленинсы» һ.б. газеталарҙа эшләй.

Әнүәр Бикчәнтаев Бөйөк Ватан һуғышы башланыу менән, “Ленинсы” гәзитендә редактор урынбаҫары булып эшләгән ерҙән, үҙе теләп, фронтҡа китә.

.Фронтта дивизия политбүлеге начальнигының комсомол эше буйынса ярҙамсыһы, хәрби газеталар хеҙмәткәре була. Европағаса

илдәрҙе азат итеүҙә ҡатнашып, ҙур хәрби юл үтә. Калинин өлкәһендә ҡаты алыштарҙың береһендә ҡамауҙа ҡалған отряд менән командалыҡ итеп, ҡуласаны йырып сыға, Карпат һәм Дунай, Курск, Корсунь-Шевченковск өсөн ҡаты бәрелештәрҙә, Венгрия һәм вена ерҙәрен азат итеүҙә ҡатнаша. Фронтта бик күп батырлыҡтар күрһәтеп, орден-миҙалдар менән бүләкләнә.

Әҙәбиәткә Ә. Бикчәнтәев утыҙынсы йылдарҙа ижади эҙләнеүҙәре менән килеп инә. Хикәйә, очерктар жанрында ижад ҡәләмен һынап ҡарай.

Тәүге хикәйәһе 1934 йылда «Коммуна» газетаһында «Лондонға хат» исеме аҫтында сыға. 1944 йылда "Ҡыҙыл мәктәр" исемле тәүге хикәйә һәм новеллалар китабы донъя күрә. Йыйынтыҡҡа ингән «мәңгелек ҡәләм», «Маяҡтың бөтөүе», «Хәтерлә», «Монах ҡатын», «Арбат», «Дуҫым, рәхмәт», «Ғәлиә» әҫәрҙәрендә совет һалдаттарының батырлығы, халыҡтар араһындағы дуҫлыҡ һүрәтләнә. Был хикәйәләрҙәге вәҡиғалар нигеҙҙә авторҙың үҙенең күргәндәренә, документаль фактҡарға ҡорола. Ә инде 1946 йылда сыҡҡан "Рус һалдаты тураһында новеллалар" китабында яугир һалдат батырлығын һүрәтләү менән бергә уның индивидуаль характерын да асырға ынтылыш бар. "Ерән Яноштың зары", "Ян Гус майҙанындағы сәғәт", "Һалдат бункер ишеген асты" һ.б. хикәйә һәм новеллаларҙа совет һалдаттарының Европа илдәренә азатлыҡ алып килеүе сағылдырыла.

"Һалдат бункер ишеген асты" әҫәрендә, мәҫәлән, быға тиклем ҡараңғыла ер аҫтында дошман снарядтарынан йәшенеп ҡалған чехарҙы ҡотҡарып, һалдаттың бункер ишеген асыуы – Европаға яҡты көндәрҙең тыуыуы ул. Шулай уҡ автор совет һалдатына, азат итеүсегә Европа халыҡтарыныңтөрлө уйҙа, төрлө ҡарашта булыуын да бирә. "Зәңгәр күҙҙәр", "Алҡа" хикәйәләрендә азат итеүсегә европалыларҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүе бирелһә, ""Чардаш та киреһенсә, ҡарт скрипкасы мадьяр Шандор үҙ ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, совет һалдаттарына ярҙам итеүе сағылдырыла.

Һуғыштан һуң яҙылған "Бөркөт һауала үлә" ("Үлемһеҙлеккә хоҡуҡ", 1950) повесы Әнүәр Биксҫнтәевҡа киң танылыу алып килә. Әҫәр рус, поляк, болгар, ҡытай телдәрендә баҫылып сыға. Был повесын автор Александр Матросов образын тыуҙырыуға арнай, ҡурҡыу белмәҫ совет һалдаты, беҙҙең яҡташыбыҙ, Ватан һуғышының данлы геройы Александр Матросов образын асып һала. Әҫәрҙе ижад иткәндә автор конкрет тарихи фактҡарға, документаль материалдарға таяна, ләкин ул

ваҡытта геройҙың Учалы районы башҡорто булыуы, ысын исем һәм фамилияһы Шәкирйән Мөхәмәтйәнов икәнлеге билдәле булмай.

Әҫәрҙә Сашаның тормошондағы ике этап һүрәтләнә – тәүгеһе- Өфө балалар колонияһында үткән йылдары, икенсеһе – Саша – һалдаттың фронт юлдары. Автор Саша образын идеаллаштырмай, киреһенсә, тормоштағыса ҡатмарлы характерлы, колонияға килгәс тә, әллә ни бындағы тәртиптәр менән иҫәпләшеп бармаусы үҫмер итеп бирә. Башта Саша колониянан ҡасып китергә, ҡабаттан ирекле урам тормошона ла сумырға ла ынтылып ҡуя. Әҙип повеста йәш үҫмерҙең тормош хаҡында хыял итеүҙән реаль, уйлап эш итеүгә ҡарашы үҙгәрә барыуын күрһәтә.

Диңгеҙ романтикаһы менән хыялланған Саша томошта үҙен бөтөнләй көтмәгән, уйламаған ситуацияла реалләштерә. Колонияла Сашаның характеры ҙур үҙгәреү юлын үтә.Балалалр йортонда үҙе кеүек үҫмерҙәр Богомолов, Ленька Сивый, Еремеев, Митька Рыжий, Рәшит Ғабдрахмановтар менән бер коллектив булып йәшәп китеүҙәре, тора-бара хеҙмәткә ылығыуы, ихтыяр көсө формалаша башлауы күренә.

Сашала һәм Рәшиттә патриотик тойғолар, Тыуған илгә һөйөү һәм ныҡлы характер һыҙаттары тәрбиәләнеүҙә, әлбиттә, колония начальнигы Петр Филлипович Стасюктың, Катеринчук һәм Ольга Васильевна кеүек тәрбиәсе һәм уҡытыусыларҙың, урмансы Мөхәррәм ҡарттың, ҡарауылсы Апуш бабайҙың ҙур йоғонтоһон күрһәтә автор. Мәҫәлән, Ольга Васильевна Сашаны фронтҡа оҙатҡанда: “Быға тиклем һеҙҙең турала бөтә әсәләрҙең әсәһе – Тыуған ил ҡайғыртты. Хәҙер уны һаҡларға тейешһегеҙ”, – ти. Сашаны уратып алған мөхитте – төрлө характерлы һәм төрлө быуын кешеләренең нигеҙен бирә. Повеста халыҡ һәм герой бер-береһенән айырылғыһыҙ күҙ алдына баҫа. Повеста халыҡ һәм герой бер-береһенән айырылғыһыҙ күҙ алдына баҫа.

Исемен үлемһеҙ иткән батырлыҡҡа Саша тормош баҫҡыстары үтеп килә. Чернушки ауылы өсөн барған һуғыштарҙа иптәштәренә баш ҡалҡытырға һәм бер аҙым алға атларға ирек бирмәгән амбразураға табан барған Сашаның башынан ниндәй генә йән әсетерлек уйҙар үтмәй: “Ана амбразура!.. Унан татылдап, ҡыҙарған пулемет көбәге сығып тора. О, ни тиклем яуызлыҡ ул көбәктә! Ул үлем сәсә!.. Егеттәрҙе унан ҡотҡарырға кәрәк. Улар Чернушкиҙы азат итергә һүҙ бирҙеләр бит!” – көбәктә булған яуызлыҡты юҡ итәм тип йүгерә ҡаһарман.

Шулай итеп, авторҙың был повесы бер үҫмерҙең – Матросовтың биографияһы ғына булмайынса, тотош хлыҡтың героик образын тыуҙырған әҫәр булды.

Был донъяла һәр кеше йәшәргә тыуа, Сашаның йәш кенә башы һәм ҡурҡыу белмәҫ йөрәге үлеменән йәшәү араһында үлемде һайлай һәм үҙенең батырлығы менән башҡаларҙың ғүмерен һаҡлап алып ҡала.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда 4-се том: Башҡорт совет әҙәбиәте 1941-1955 йылдар. Томдың редколлегияһы: Р. Шәкүр, Р. Нурғәлин, Т. Килмөхәмәмәтов. – Өфө: Китап, 1993. – 445 бит.

2. Бикчәнтаев Ә.Һ. Әҫәрҙәр. Өс томда. 3 том. Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984. – 496 бит.

3. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаһында Бөйөк Ватан һуғышы темаһы һәм яугир образы//Ағиҙел. – 2015. – № 4. – 148-163-се биттәр.

4. Башҡорт теленең академик һүҙлеге: 10 томда. Т. III (в-и хәрефтәре) / Ф.Г. Хисаметдинова редакцияһында. – Өфө: Китап, 2012. – 864 бит.

© Тимерғәлиева А.Р., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 801.81:82.6 (575.2) (04)

Уркумбаева А.Б.,
Старший преподаватель, Академия МВД Кыргызской Республики им. генерал-майора милиции Алиева Э.А.
Кыргызская Республика, г.Бишкек

ПУТИ СОЗДАНИЯ ПИСЬМЕННЫХ ТЕКСТОВ ЭПОСА «МАНАС»

Душа, словесное искусство, бескрайний поток талантов и великолепное мастерство кыргызского народа проявляются наиболее впечатляющим образом через их устное творчество. Веками они передавали свои мысли, мечты, чувства и знания, а также отражали великие трудности и радости своей жизни, свои моменты счастья и страданий через словесные произведения. Однако всем нам хорошо известно, что устное наследие никогда не бывает вечным.

С момента, когда эти произведения впервые были зафиксированы на бумаге, они прошли через несколько изменений. «Были ли они дословно перенесены с устного рассказа на письменный текст, или могли ли произойти потери слов или даже целых страниц в процессе записи на магнитофон для последующего воспроизведения? Были ли предприняты какие-либо шаги при переводе текста на бумагу или в книжный формат с целью придать тексту более приятное звучание, сделать его более запоминающимся или логично структурированным?» Эти вопросы продолжают оставаться актуальными. Из-за этого

возникают разрывы и отличия между устным текстом, перенесенным на бумагу, и текстом, представленным в книжном формате.

Письменные тексты могут быть созданы с использованием разнообразных методов. Мы решили классифицировать эти методы, разделив их на три основные группы.

1. Запись текста непосредственно во время рассказа, используя метод стенографии.

2. Перенос устного текста с аудиокассеты на бумагу.

3. Творческое создание новой версии с использованием алфавитного метода на бумажном носителе, основанного на устных рассказах «Манаса», «Семетея» и «Сейтека», преобразованных в иную форму, стиль и жанр.

1. Записать текст, перенося эпос из уст рассказчика на бумагу. В этом случае существует вероятность того, что оригинальная версия устного текста не будет в точности сохранена. Например, манасчы чувствует, что когда писец записывает его речь, он больше не испытывает ту же степень свободы, что раньше. Тексты, которые он произносит, кажется, уже не так легко возникают в ходе импровизации, как это было ранее. Он ощущает, что какая-то внешняя сила старается придать этим словам какую-то определенную форму. Причина заключается в том, что «писцы, записывавшие текст (в период, когда не существовало стенограмм и магнитофонов), никогда не могли угнаться за темпом и ритмом создания песни. Они либо оставались в отчаянии, либо просили повторить. Даже после нескольких попыток текст так и не удавалось воспроизвести таким же, как в оригинале. Иногда темп падал, иногда повышался тон.

Но самое печальное заключается в том, что рассказчик терял мелодию, и ритм песни нарушался. В результате процесс создания эпоса приходил в тупик, и рассказчик не мог расслабиться до тех пор, пока не находил эту утраченную гармонию» [6, с. 53]. В.В. Радлов также выразил это мнение, говоря: «Работа над записью песни была довольно сложной. Поскольку манасчы, конечно, не привыкли так медленно произносить текст, он часто обрывал нить истории и запутывался в противоречиях, и каждый мой вопрос еще больше отвлекал его от его обычного пения» [5, с. 34] Необходимо также учитывать, что интонация, слова, выражающие внутренние чувства и повторения часто остаются незаписанными на бумаге. Давайте проиллюстрируем это на примере нескольких цитат:

1. «К. Мифтаков вспоминает, что тексты, связанные с биографией сказителя Сагымбая, которые он написал в начале рукописи, были утеряны по неизвестным причинам. Возможно, нумерация этих заметок, состоящих из 20 или 60 страниц и написанных черным карандашом в начале тетради, была проставлена до утери материала...» [3, с. 58]

2. «На начальном этапе работы над текстом в подготовке к его публикации возникает фундаментальный вопрос: "Принадлежит ли каждое слово в этом тексте рассказчику, и если да, то каким образом и в какой форме он мог бы произнести эти слова?" Этот вопрос возник по причине того, что большинство слов в тексте, начиная с первой страницы рукописи, записано в форме, существенно отличающейся от того, как мы привыкли услышать. Это вызывает сомнения в том, действительно ли рассказчик мог бы произнести эти слова так, как они написаны», – подчеркивает выдающийся ученый С. Мусаев. [3, с. 58]»

Подытоживая, стоит отметить, что устный текст, перенесенный на бумагу (за исключением случаев использования стенограммы или магнитофона), «признается текстом, возникшим в уникальных условиях и ситуациях» [6, с. 53].

2. Копирование текста аудиозаписи эпоса на бумагу. Процесс записи текста, изначально произносимого устно, с помощью различных технических средств. В этом контексте, важно отметить, что использование специальных средств записи и воспроизведения звука, таких как магнитофон, позволяет получить верную и точную копию оригинального текста, прозвучавшего устно. Один из первых методов записи текста этим способом - это фонозапись. Текст, который был записан на фонограмму или в фонотеку, может обладать высокой степенью точности и правильности, в отличие от текста, записанного с использованием письменного алфавитного метода. Важно отметить, что такой метод требует от фонографа специальных навыков и внимательности. Однако остаётся открытым вопрос о том, насколько полно и точно он перенёс записанный текст на бумагу. Здесь, следует уделить особое внимание информации о фонографе и фонотеке.

Фонограф – одно из первых устройств для записи и воспроизведения звука. Тем не менее, несмотря на свою историческую значимость, это устройство имело свои недостатки. Звук записывался на тонкую фольгу, что снижало качество записи, и лишь небольшое количество копий могло быть сделано. При этом, в процессе записи громкие звуки могли повреждать поверхность фольги, делая звук менее чётким и качественным. Например, русский исследователь Б. В.

Смирнов, изучая культуру кыргызского народа до революции, встретил в 1903 году сказитель по имени Кенжекара из Чуйской долины и «записал голос певца при аккомпанементе каяка» [7, с. 391].

Давайте рассмотрим ещё один пример – запись устного текста с использованием магнитофона. Это техническое устройство предоставляло заметные преимущества перед другими средствами аудио и видеозаписи, обеспечивая надежное сохранение текста на магнитной пленке.

Таким образом, ученые подчеркнули, что «перевод слов, рожденных в устной традиции, на письменный носитель, такой как бумага, означает окончание древней практики и символизирует конец ее живости и динамики». [6, с. 53]

А в письменном тексте эпоса, наряду с самим сюжетом, описание, сравнения, художественные выражения событий, сцен, персонажей, топонимов, коней, образы женщин, подвиги героев, ход войны и многое другое, а также использование рифмы, структур стихотворения остаются практически неизменными.

В процессе написания текста, рассказчик может корректировать только те части, которые ему не нравятся, и представлять читателю уже готовый материал. По своим художественным особенностям и способам описания, письменный текст эпоса сходен с письменной литературой.

Именно так, настоящие хранители устного эпического текста «Манаса» и авторы письменных вариантов, соответствующих потребностям своего времени, обладают искусством слова в высшей степени. Они обладали исключительным талантом и трудолюбием. Эти люди не только виртуозно пересказывали эпос, но и сами создавали бесценные варианты «Манаса», придавая каждому свой уникальный оттенок.

Список литературы:

1. Азизов Ш. Манас. В кн. Классические исследования и тексты. –Б.: Принт-Экспресс, 2019. – 496 с.

2. Жумалиев К. М. Жазгыч манасчылар и семетейчилер / К.М. Жумалиев. –Б.: 2004. – 105 с.

3. Орозбакова С. Манас / С. Орозбаков. том 1. – Б.: 1995. – 566 с.

4. История кыргызской литературы. Манас и манасчи. – Б.: Кут-Бер, 2017. – 676 с.

5. Радлов В. Образцы народной литературы северных тюркских племен. В кн. Энциклопедический феномен эпоса «Манас». – Б.: 1995. – 472 с.

© Уркумбаева А.Б., 2023

УДК 821.512.141

Усманова Ә.А.,
аспирант, Өфө университеты

МӘҮЛИТ ЯМАЛЕТДИНДЫҢ «ИШМӨХӘМӘТ СӘСӘН» РОМАН-ЭССЕҺЫНДА ТӘҠДИРҘЕҢ САҒЫЛЫШЫ

Тәҡдир – донъяла бөтә нәмә лә Аллаһтың теләге буйынса башҡарыла тигән дини инаныс, ышаныу. Диндә – кешенең ғүмерен, уның ҡотҡарылыуы йәки Аллаһ ихтыяры менән мәңгелектә хөкөм итеүҙе алдан билдәләү. Тәҡдиргә ышаныу – имандың төп шарттарының береһе. Кеше үҙенә яҙылған яҙмышты юғары аң тарафынан бирелгән ихтыяры буйынса һайлай. Ни генә ҡылһа ла, ул Аллаһ ризалығы менән, уның ҡеүәтләүе буйынса тормошҡа аша. Тыумыш, енес, ғүмер оҙонлоғо, ата-әсәй һайланыла алмай. Шуға улар өсөн яуап бирелмәй, ә был тормошта кешенең үҙ ихтыяры, теләге менән эшләнгән яҡшы һәм насар ғәмәлдәр өсөн яуап тотола [2].

Тәҡдир хаҡындағы уй-фекерҙәр тупланмаһын үҙ эсенә күренекле яҙыусы Мәүлит Ямалетдиндың «Ишмөхәмәт сәсән» роман-эссеһы ала. Ул сюжетҡа ярашлы үрелеп килә һәм төп геройҙар телмәре аша уҡыусыға еткерелә. Әҫәрҙә 3 тиҫтәнән, 35 тапҡырҙан ашыуыраҡ «тәҡдир» һүҙе ҡулланылыу осрағы күҙәтелә (тәҡдирҙер инде, тәҡдиренә яҙған өлөшө, тәҡдирҙең аяуһыҙлығы, тәҡдир ғәли йәнәптәренең һынауы, тәҡдир атының дилбегәһе һ.б.). Был түбәндәге миҫалдарҙа тулыраҡ сағыла.

Романдың башында автор уҡыусыны төп герой Балапан ҡарт менән таныштыра.Ул үҙ яҙмышынан ҡәнәғәт, үтеп киткән тормошонан да риза. Ҡарттың йәнен тик бер генә үкенес тойғоһо өйкәй – ғүмерҙең үтеүе, ҡартлыҡтың шулай тиҙ килеп етеүе. Тик бының өсөн бер кемгә лә үпкәләп булмай, сөнки ул Хоҙай тарафынан тәҡдир ҡылынған өлөш [3, 9-сы б.].

Үҫмер Ишмөхәмәттең атаһы Ғәбди телгә алынғанда ла тәҡдир мәсьәләһе иғтибарһыҙ ҡалмай. Ҡаты сиргә тарыусылар холоҡтары буйынса ике төргә бүленә, тип билдәләй автор. Берәүҙәре үҙҙәре дусар булған рәнйеүҙе маңлайҙарына яҙылған тәҡдир рәүешендә ҡабул итә һәм донъяның фанилығына күнә. Икенсе төркөмдәгеләр иһә өҫтәренә төшкән ауырыуҙарға күнегә алмай, үпкәселгә әүерелә. Ғәбди икенсе төркөмгә ҡарай [3, 28-се б.]. Ҡыҙғанысҡа күрә, үпкә ауырыуы көслөрәк булып сыға. Нишләмәк кәрәк, әҙәм балаһының тәҡдире шул. Әсе хәкиҡәткә түҙмәй сара юҡ [3, 64-се б.].

Романда йәш сағынан уҡ ҡурайсы, йырсы һәм ҡобайырсы булып танылған, Байыҡ, Буранбай һ.б. сәсәндәрҙе күреп белгән, Перовскийҙың яратҡан ҡурайсыларының береһе булған төп герой Ишмөхәмәттең аң төпкөлө психологияһы тулыһынса асыла [1, 217-се б.]. Уның да уйҙары гел генә тәҡдир, киләсәк тормош, күрәсәк янында урала: «Ахыр сиктә һәммәһен дә бер иш тәҡдир көткәс, ниңә унда-бында күсеп аҙапланырға, ғөмүмән, ниңә ҡайҙалыр ынтылырға, сәбәләнергә? Анау йәшел үләнгә талпан һымаҡ ҡаҙалып утлап йөрөгән мал-тыуар ниндәй маҡсатта ҡорһағын тултыра? Көллөһөнөң дә яҙмышы һуңғы сиктә ҡаҙанға барып тоташа түгелме? Тик улар быны аңламай, белмәй генә. Ә кеше? Эйе, ер йөҙөндәге тереклек араһынан бары тик әҙәм балаһы үҙен алда ни көткәнен яҡшы төшөнә» [3, 77-се б.].

Инде түшәктә ятҡан Балапан ҡарттың һуңғы һүҙҙәре лә иғтибарға лайыҡ. Бер ҡасан да төшөнкөлөккә бирелмә, сөнки донъя көсһөҙҙәрҙе яратмай. Тәҡдир, ти ул Ишмөхәмәткә [3, 94-се б.].

Мәҙлит Ямалетдин бер кем дә тыуғанда уҡ маңлайына яҙылған тәҡдирен белмәй, тормош шуныһы менән йыуаныслы ла, аяныслы ла тигән фекерҙә [3, 97-се б.]. Тәҡдирҙе ябайлаштырып «күрәсәк» тип тә атай ул [3, 173-сө б.]. Кешенең тәҡдиренә йәшәү өсөн көрәш ҡомары һалынған. Кешелек донъяһы тарихындағы фажиғәләр ҙә, кәмиттәр ҙә ошо үҙенсәлеккә бәйле, тип билдәләй яҙыусы [3, 256-сы б.]. Уның иң тәүге сағылышын Яҙыусы фекеренсә, тормош бер нәмәгә лә ҡарамайынса алға уҡтала. Уға һинең ҡайғы-хәсрәттәрең менән ҡыуаныстарың булды ни ҙә, булманы ни. Донъяның үҙ ҡанундары үҙендә, үлсәмдәре башҡа. Әҙәм балаһының мәңгелек күк хөкөмө менән булдырылған был ҡанундарға, йәшәйештең ҡаты талаптарына, уның тайпылышһыҙ шарттарына буйһонмай сара юҡ. Тик кешеләр, үҙ ҡанундарын уйлап сығарып, төрлөсә хөкөм йөрөтөргә тырышыусан. Ләкин улар Алла тип аталған юғары көс ихтыяры менән урынлаштырылған мөһабәт һәм дәһшәтле ҡанундар янында тау эргәһендәге ҡом бөртөгө, даръя йәнәшәһендәге бер тамсы. Әҙәм балаһының бар ғүмере – тормош тип аталған мауыҡтырғыс та, үкенесле лә ғәмәлгә буйһоноп йәшәү, ата-бабалар тарафынан меңәр йылдар буйы булдырылған ғөрөф-ғәҙәттәргә таянып донъя көтөү. Ә тормош юлында кеше ни генә күрмәй, ниҙәр кисермәй. Унда бөтәһе лә бар [3, 97-се б.].

Ғөмүмән, автор кешелектән күпкә юғарыраҡ булған аң барлығын таный. Яҡты донъяның Аллаһы Тәғәлә ҡанундары буйынса төҙөлөүен дә һыҙыҡ өҫтөнә алып үтә. Был тормошта бер күренеш тә осраҡлы, бер нәмә лә артыҡ йә кәм дә түгел икәнлегенә ишара яһай. Бөтә тереклек тик

Аллаһтың тәҡдиренә ярашлы көн күрә. Яҙмыштан уҙмыш булмағандай, ер йөҙөндә бығаса ҡөҙрәтле тәҡдирҙән ялтарып ҡотолған әҙәмдең дә булғаны юҡ һәм булмаясаҡ та, сөнки кеше үҙенә тәғәйенләнгән күрәсәкте ниндәйҙер ваҡытҡа тиҙләтә лә, кисектерә лә алмай [3, 305-се б.].

Дөйөм алғанда, Мәүлит Ямалетдиндың барлыҡ әҫәрҙәрендә лә тиерлек тап дини тематика ҙур сағылыш таба. Уның поэзияһы ла, прозаһы ла дини мотивтар һәм Ислам дине фәлсәфәһе менән ярайһы һуғарылған.

Әҙәбиәт исемлеге:

1.Кунафин Ғ.С. XIX быуаттың беренсе яртыһында башҡорт фольклоры һәм ауыҙ-тел ижады. Башҡорт университеты докладтары, 2019. – № 2. – 213-219-сы б.

2.Тәҡдир. Башҡорт википедияһы. Электрон сығанаҡ. URL: https://ba.wikipedia.org/wiki/%D0%A2%D3%99%D2%A1%D0%B4%D0%B8%D1%80. – Сығанаҡ ҡулланылған дата: 18.10.2023 й.

3.Ямалетдин М. Ишмөхәмәт сәсән: роман-эссе. – Өфө: Китап, 2022. – 384 бит.

© Усманова А.А., 2023

УДК 811.512.141

Үҙәнбаева Н.С.,
3курс, БФШһЖ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ПРОЗАҺЫНДА БӘЛӘКӘЙ ЖАНРҘАР (ХИКӘЙӘТ, ХИКМӘТ)

Башҡорт әҙәбиәтендә Көнсығыш әҙәбиәтенән килеп ингән жанрҙар йыш осрай торған күренеш. Уның йоғонтоһонда бик күп әҙиптәр үҙҙәренең әҫәрҙәрен ижад иткән.

Хикәйәт – Яҡын, Урта Көнсығыш һәм Көньяҡ-Көнсығыш Азия халыҡтарында теләһә ниндәй ҙур сюжетлы сәсмә йәки шиғри әҫәрҙе аңлатҡан әҙәби термин. Тар мәғәнәлә – күләме буйынса хикәйә һәм новелла менән тиң булған бәләкәй эпик жанр. Уға романтик стиль, тарихи ваҡиғаға йәки легендаға нигеҙләнгән хикмәтле сюжет хас.

Күренекле ғалим К. Әхмәтйәнов хикәйәткә түбәндәгесә билдәләмә бирә: “Хикәйәт – ул эпостың сағыштырмаса яңы жанры. Халыҡ ижадының айырым мотивтарын ижади үҙләштереү һәм уны новаторҙарса артабан үҫтереү һөҙөмтәһендә һуңғы осорҙа юғары

романтикалы һәм тәрән фәлсәфәле бер килке әҫәр барлыҡҡа килде. Уларҙа халыҡ тормошоноң дөйөм яҡтары кеше яҙмышы аша символик характерҙа асыла". Ысынлап та, ҡайһы бер хикәйәттәрҙә башҡорт мифологик әкиәттәренән, ҡобайырҙарынан, легендаларынан килгән мотивтар асыҡ күренеп тора. Шуға күрә, башҡорт хикәйәттәренең төп сығанағы - халыҡ ижады, тип әйтергә мөмкин. Ә икенсе төп сығанағы - яҙма әҙәбиәт, дөрөҫөрәге, Көнсығыш әҙәбиәте.

Башҡорт әҙәбиәтендә хикәйәттәрҙең типик миҫалдары: Ғ. Ғүмәрҙең "Инсебикә-таш", "Митрошка ташы", З. Биишеваныҡ "Мөхәббәт һәм нәфрәт", "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" әҫәрҙәре. Ошо хикәйәттәрҙең барыһы ла уҡыусыларға аҡыл-фәһем еткереүгә йүнәлтелгән. Уларҙың йөкмәткеләре үҙләштереүгә бик еңел, сөнки жанр яғынан улар әкиәткә яҡын һәм ябай тел менән яҙылған. Мәҫәлән, "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" әҫәрендә ике кешенең яҙмыштары, Һөнәрсенең эшенә ҡарата эшләнгән ғәҙелһеҙлек менән һуңынан фашланған ялған тасуирлана. "Ҡырын эш ҡырҡ йылдан һуң да беленә", – был мәҡәл тап килеп тора ошо хәл-ваҡиғаларға.

Хикмәт – көнсығыш әҙәбиәте жанры, күләме буйынса ҙур булмаған, күпселек осраҡта фәлсәфәне йәки тормош тәжрибәһен, фәһемле һығымтаны үҙ эсенә алған шиғри әҫәр. Ғәрәп теленән тәржемәһе ғәжәп ҙур аҡыл, тәрән белем, тигәнде аңлата. Поэзияла ике һәм дүрт юллы хикмәттәр, прозала хикмәтле йөкмәткеле ҡыҫҡа хикәйәт, сәсмә хикмәт жанрҙары барлыҡҡа килгән. Тағы тапҡырыраҡ әйтелгәндәре әйтем, әйтемсәләр ише афористик хикмәтле һүҙ рәүешен алған. Бөтә донъяға билдәле Ғүмәр Хәйәм хикмәттәре шуның классик өлгөһө. "Ҡағиҙә булараҡ хикмәттәр аҡыллы һүҙҙән башлана ла, аҙаҡтан миҫалдар менән нығытыла, ә йомғаҡлап ҡуйыусы мораль авторҙың үҙ-үҙенә мөрәжәғәтен тәшкил итеүсе поэтик клише формаһын ала", – тип яҙған академик Ғ. Хөсәйенов. Боронғо төрки поэзияһынан Әхмәт Йәсәүи, Сөләймән Баҡырғани хикмәттәре башҡорт халҡы араһында киң таралған. Милли поэзияла Мәүлә Ҡолой хикмәт жанрының бер оҫтаһы, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Сәйфи Ҡудаш, Назар Нәжми, Ҡәҙим Аралбай, Фәйзи Ғүмәров, Рауил Ниғмәтуллин хикмәт жанрын яңынан тергеҙеләр. Атап үтелгән әҙиптәр башлыса хикмәттәрен шиғри юлда ижад иткәндәр. Бөгөнгө башҡорт прозаһында хикмәт жанрында ижад итеүселәр аҙ. Был жанр тел маһирлығы, оҫталыҡ талап итә.

Шағир Рауил Ниғмәтуллиндың ижадына туҡталып китәйек. Шағир юғары ҡиммәттәрҙе өҫтөн ҡуя, тупаҫлыҡ, кешелекһеҙлек, әҙәпһеҙлек кеүек һыҙаттарҙы тәнҡитләй:

Торғанда ла йондоҙҙарға башы тейеп,
Сәләм бирер башын эйеп үтә бөйөк.
Үтә тәпәш үрләп алһа үтә бейек,
Яратыр тик торғаныңды уға бейеп.

Тағы бер хикмәт оҫтаһы – Фәйзи Ғүмәров. Шағирҙың әҫәрҙәре фәһем, тәрән аҡыл, әхлаҡ, файҙалы кәңәштәр менән һуғарылған. Уларҙа тәрән эске мәғәнә ята:

Эй, уҡыусым! Иғтибар ит минең һүҙгә,
Әйткем килә бына шуны аҙаҡ һеҙгә:
“Юҡ-бар нәмә яҙған был!” – тип ғәйепләмә,
Тамсыларҙан йыйыла бит ҙур диңгеҙ ҙә!

Шулай итеп, хәҙерге башҡорт әҙәбиәтендә хикәйәт менән хикмәт жанрҙарындағы әҫәрҙәр күп ижад ителмәһә лә, улар тарихта билдәле бер эҙ ҡалдырған. З. Биишева, Ғ. Ғүмәр, М. Кәрим, С. Ҡудаш, Ҡ. Аралбай, Ф. Ғүмәров, Р. Нигмәтуллин кеүек әҙиптәр ярҙамында бындай бәләкәй жанрҙар үҙҙәренең актуаллеген юғалтманы.

Әҙәбиәт: исемлеге:

1. Ҡасҡынова Г.Н. Башҡорт шиғриәте һәм Шәреҡ поэтик традицияларының уҡыу ҡулланмаһы. – Бөрө: Бөрө дәүләт соц.-пед. акад., 2011. 110 бит.

2. Хусаинов Г.Б. Башкирская литература XI-XVIII вв.: Учебное пособие для вузов. – Уфа: Гилем, 1996. – 156 с.

3. Әхмәтйәнов К.Ә. Әҙәбиәт теорияһы. – Өфө: Китап, 2018. – 400 бит.

© Үҙәнбаева Н.С., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141

Хайсарова З.Э.,
БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

ҒӘЛИ СОҠОРОЙ ИЖАДЫНЫҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ЙӨКМӘТКЕһЕ

Башҡорт әҙәбиәте тарихында XIX быуаттың тәүге яртыһы, беренсенән, уға тиклем булған осорға органик рәүештә бәйләнеүе, икенсенән, төрки яҙма әҙәби теленең башҡорт, татар һөйләү телдәре һәм башҡорт фольклор теле менән үҙ-ара йоғнто яһашып үҫеүенә юл ярған осор булыуы яғынан билдәләнә. Урал–Волга буйы төрки яҙма әҙәби теле бигерәк тә суфыйсылыҡ әҙәбиәте телендә сағылыш таба. Уның башҡорт

һөйләү теленә яҡынайыу тенденцияһы Башҡортостанда мәғрифәтселек хәрәкәтенең башланыуы менән бәйләнгән.

XIX быуаттың беренсе яртыһында суфыйсылыҡ поэзияһы тарала. Башҡорттарҙан сыҡҡан Т. Ялсығол әл-Башҡорди (1767−1838), Ғ. Усман (1752−1834), Мәнди Ҡотош-Ҡыпсаҡи (1761−1849), Ә. Ҡарғалы (1784−1824), Һ. Сәлихов (1794−1867), Ш. Зәки (1825−65), Ғ. Соҡорой (1826−89) − был ағымдың иң күренекле вәкилдәре. Уларҙың ижадында донъяуи мотивтар ҙа сағылыш таба. Ғ. Усман, Ш. Зәки,Ғ. Соҡорой ижадтарында әҙәбиәттең урта быуаттарҙан яңы заманға күсеү билдәләре сағыла [2, 30].

Ғ. Соҡорой (Мөхәммәтғәли Ғәбдессалих улы Кейеков, 1826-1889) – XIX быуат башҡорт әҙиптәренән шаҡтай һәм күп яҡлы әҙәби мираҫ ҡалдырыусыларҙың береһе. Ул, бер яҡтан, суфыйсылыҡ поэзияһы традицияларын дауам иткән шағир. Уның мәдхиә, мәрҫиә, мөнәжәт, ҡасидә, ғәзәл, хикмәт ише жанрҙар системаһы тоташ норматив поэтика ҡанунынса яҙышҡан. Уларҙың йөкмәткеһе, идея-эстетик асылы ла суфыйсылыҡ рухы менән һуғарылған. Икенсе яҡтан, авторҙың автобиографик шиғырҙары, пейзаж лирикаһы, мәдехтәре конкрет тормош, көнкүреш деталдәренә бай, шәхестәргә аныҡ поэтик характеристика биргән реалистик принципта һәм стилдә яҙышған.

Ғәли Соҡорой шулай уҡ суфыйсылыҡ әҙәбиәтенең һуңғы вәкилдәренән һанала. Ул XIX быуаттың һуңғы яртыһында ла ижад иткән. Уның әҙәби мираҫы һан яғынан бик ҙур.

Әҙиптең поэтик стиле үҙенсәлекле. Әҫәрҙәренең күпселеге робағи формаһына эйәреп яҙылған һәм улар, беренсе нәүбәттә, йөкмәткеһе менән түгел, ә төҙөк формаһы, махсус һүҙҙәрҙе һайлап алыуы менән генә айырыла.

Ғ. Соҡоройҙоң яратҡан поэтик алымы булып тәүших (акростих) тора. Уның күп кенә әҫәрҙәрендә шиғыр юлдарының баш хәрефтәренән авторҙың псевдонимын (мулла Мөхәммәдғәли Чоҡрый) йәки шиғыр бағышланған кешенең исемен төҙөргә мөмкин [3, 65].

Соҡоройҙоң ҡоро рифмаға ҡоролған күпселек назымдары ғәрәп һәм фарсы һүҙҙәре менән нык сыбарланған төрки телендә яҙылған. Уның ғәрәп һүҙҙәре менән сиктән тыш мауығыуын үҙ ваҡытында Ҡәюм Насыри ҙа тәнҡитләгән һәм үҙенең саф төрки теле яғында булыуын белдергән.

Ғәли Соҡоройҙың поэтик әҫәрҙәре араһында йөкмәткеһе һәм теле яғынан “Мәдхе Ҡазан” (“Ҡазанды маҡтау”) шиғри китабы айырылып

тора. Унда башҡорт халҡының һөйләү теленә хас элементтар йыш ҡулланыла:

Иң әүүәл йортлары бик саф,
Икенче, ирләре бик саф,
Өченче, жырлары бик саф…
“*Иң әүәл, йортлары бик саф (таҙа),*
Икенсе, ирҙәре бик саф (күңелле),
Өсөнсө, йырҙары бик саф (моңло)…”

Һүрәтләүенең реаллеге һәм теленең аңлайышлылығы яғынан шағирҙың “Манзумате Ғәлийә” (“Ғәли назымдары”) тигән иң ҙур күләмле ҡулъяҙма дәфтәренә туплағған шиғырҙары айырылып тора. Тәбиғәтте һүрәтләгәндә, мәҫәлән, Соҡорой башҡорт һүҙҙәрен күп индерә.

“Фөсүле әрбәғә” (“Йылдың дүрт миҙгеле”) шиғырынан миҫал:

Сыуытды ҡыш көнөн, ҡарлар йағырды,
Аҡызды су итеб йаз айларында.
Тамам донйа йөзө аҡ ҡар булубән,
Тотар боз су йөзөн һәр жайларында.
“*Һыуытты ҡыш көнөн, ҡарҙар яуҙырҙы,*
Ағыҙҙы һыу итеп яҙ айҙарында.
Донъя йөҙө тамам ап-аҡ ҡар булғас,
Боҙло һыуҙы тотто һәр тарафында.

Башҡорт халыҡ һөйләү теленең йоғонтоһо бигерәк тә уның “Хажнамә” тигән ҡулъяҙмаһында ныҡ күренә [4, 126].

XIX быуатта Ғәли Соҡорой «Тәуарихи Болғарийа йәки Тәҡриби Ғәри» китабында тәуарих поэтикаһы географик, этнографик, биографик өлөштәр тығыҙыраҡ үрелеп һәм киңәйтелеп, конкрет тарихи-милли һыҙатлы жанр юғарылығын ала. Унда легендалар, фантастик моменттар һаҡланыу менән бергә, һуңғы дәүерҙәргә ҡараған өлөштәрҙә тарихи факттар, ысынбарлыҡ өҫтөнлөк итә.

Мәғрифәтселек хәрәкәте менән берлектә тыуған мәғрифәтселек эстетикаһы прозала яңы идея-эстетик принциптарҙың, жанр һәм стиль системаларының яңырыуына, әҙәби телдең демократлашыуына, ғөмүмән, яңы әҙәбиәттең нығыныуына мөһим этәргес бирә. Мәғрифәтселек идеяларын пропагандалауҙа һәм сәнғәтсә сағылдырыуҙа проза жанрҙарының күпкә ҡулайыраҡ һәм үтемлерәк яҡтары беленә. Һөҙөмтәлә ике быуат әҙәбиәте милли проза яңы әҙәбиәттең реалистик нигеҙҙәрен баҙыҡлашҡан үҙәк әҙәби төргә әүерелә.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте антологияһы, ике томда. II том. XIX быуат. – Өфө: Китап, 2007. – 388 бит.

2. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Икенсе том / яуаплы ред. Хөсәйенов Ғ.Б., Байымов Р.Н., Бикбаев Р.Т. − Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 582 бит.

3. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Өсөнсө том / яуаплы ред. Хөсәйенов Ғ.Б., Байымов Р.Н., Бикбаев Р.Т. − Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1991. −544 бит.

4. Ҡунафин Ғ.С. XIX башҡорт әҙәбиәте. – Өфө: Китап, 2010. – 408 бит.

© Хайсарова З.Э., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141

Хасанова А.Р.,
3 курс, БФШһЖ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф. Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

М. АҡМУЛЛА ШИҒРИӘТЕНДӘ АҢ-БЕЛЕМГӘ ӨНДӘҮ МОТИВТАРЫ

XIX быуаттың икенсе яртыһы – башҡорт поэзияһында иҫке традицион йүнәлеш яйлап тамамланыуға барған, яңы йүнәлеш - мәғрифәтселек реализмы барлыҡҡа килгән һәм нығынған осор. Башҡорт поэзияһында мәғрифәтселек реализмының тыуыуы һәм нығынып китеүе, иң беренсе сиратта, Мифтахетдин Аҡмулла исеме менән бәйле. Ул - иҫкелек менән яңылыҡ көрәшенең сая һәм драматик, хатта трагик яҡтарын, шиғриәтендә боронғо традицион әҙәбиәттән яңы әҙәбиәткә күсештең боролошло моменттарын, ҡыйыу новаторлыҡ башланғыстарын сағылдырған шағир булыу менән фәһемле. Поэзияла ул реалистик, халыҡсан-демократик йүнәлеште нигеҙләй, яҙма һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте традицияларын оҫта берләштерә, поэтикаға күп яңылыҡтар өҫтәй. Аҡмулла шиғриәтенең ҡабатланмаҫ үҙ поэтик хикмәте, ҡиммәте бар.

Аҡмулла нимә тураһында яҙһа ла: ярлыларҙың ауыр тормошо, йә байҙарҙың рәхимһеҙлеге, йә дин әһелдәренең ике йөҙлөлөгө, йә йәшәү мәғәнәһе, тәбиғәт, йә кешелек проблемалары, рухи байлыҡмы ул – һәр саҡ бөтәһен дә аң-белем, ғилем, һөнәр, әхлаҡ, мәҙәниәт мәсьәләләренә алып килеп бәйләй. Был мәсьәләләр әле Аҡмуллаға тиклем үк ижад иткән М. Иванов, С. Күкләшев, Ә. Ҡарғалы, М. Биксурин, Һ. Салихов,

Ш. Зәки кеүек шағир һәм ғалим-яҙыусылар ижадында ла бер ни тиклем сағылыш тапҡайны.

Мифтахетдин Аҡмулла, аң-белем, һөнәргә эйә булыу яҡтылыҡҡа, бәхеткә илтер юл икәнен күрһәтә. Һәм, Салауат Юлаевтан һуң беренсе тапҡыр халҡына “башҡорттарым!” – тип мөрәжәғәт итә.

“Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!” тип аталған хитапта Аҡмулла мәғрифәтселек идеялары менән һуғыралған хис-тойғоларын, нәсихәттәрен әйтеп бирә:

Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!
Арабыҙҙа наҙандар күп, уҡыу һирәк.
Аңғыра айыуҙан Уралдағы ҡурҡмандай,
Эй, туғандар, наҙанлыҡтан ҡурҡыу кәрәк!
Илтифат ит: уҡыуҙалыр шәрафәттәр,
Яһиллыҡтан килә ятыр ҙур афәттәр.
Уҡығандар күктә осор, һыуҙа йөҙөр,
Юҡтыр унда әүлиәлек, кәрамәттәр.
Уҡығанға был донъяла жәләл булыр,
Харам тигән күп шәйҙәр хәләл булыр.
Ырыҫ, дәүләт шишмәһен асам тиһәң,
Ғилем-һөнәр бирҙән-бер әмәл булыр. [4, 117]

Белем – кешенең иң ҙур ҡаҙанышы, бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлығы. Белем – кешеләрҙең ихтирамы, наҙанлыҡҡа, дошманға, ҡараңғылыҡҡа ҡаршы ҡоралы ул.

Эҙләһәң, табылыр эҙләгәнең,
Белем ал белемгә дуҫлашҡан менән
(Егетлек хасиәте – мәғрифәттә)

Ҡалыплашҡан ҡанундар буйынса, аҡыл менән йөрәк – ҡапма-ҡаршы категориялар. Ҡайһы берәүҙәр хис-тойғоларға бирелеп, аҡылына буйһонмай. Хистәрен йүгәнләй алмаған шундай әҙәмдәр тормошонда ҙур хаталар ебәрә:

“Аҙ эшкә асыуланып, динен боҙор,
иманын көфөрлөккә һатыр, тигән”
(“Нәсихәттәр”).

“Аҡыл” концептына “иң ҡәҙерле, ғәзиз” мәғәнәләре хас. Аҡыл – гәүһәр, ти автор “Кәңәш” шиғырында.

Тотанаҡлылыҡ, сабырлыҡ кеүек сифаттар аҡыллыларҙа була. Шуға күрә аҡыл дыуамаллыҡҡа ҡаршы сыға:

“Бәхетең артыр, кемдәр юлай ҡашыңа – һарылмаһаң;
серең ситкә сығарма, ярылмаһаң.”

(“Аҡыл”)

Идея йүнәлеше йәһәтенән Аҡмулла поэзияһы шағирҙың дөйөм мәғрифәтселек ҡараштары менән билдәләнгән. Нимә тураһында ғына яҙмаһын, уның төп иғтибары һәр саҡ бер нәмәгә әхләҡ, ғилем, һөнәр, мәҙәниәт мәсьәләләренә ҡайтып ҡала. Шуға ла уның шиғырҙары күбеһе өгөт-нәсихәткә ҡоролған, уларҙа белемгә, сафлыҡҡа, ғәҙеллеккә саҡырыу ҙур урын алған.

Мәғрифәтсе булараҡ Аҡмулла сабыр холоҡло булыуҙы, әҙәплелекте, аҡыллылыҡты “иман” төшөнсәһе менән бер ҡатарға ҡуйып ҡарай. “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк”, “Бәхет”, “Уяныу”, “Өмөт” кеүек шиғырҙарында был мотив асыҡтан-асыҡ бирелгән. Шағир өсөн белем, аҡыл, мәғрифәт – ул сикһеҙ юғары киңлек. Шуғалыр ҙа уның моделен тыуҙырғанда Аҡмулла ай, күк, йондоҙҙар кеүек ҡосмик образдар ҡуллана: *“Мәржәни – ул Тимерҡаҙыҡ! Булмаһа, ҡибла тапмай аҙашырһың. Ҡараңғыла йүн белмәй, юлдан яҙып”, “Уҡығандар күктә осор”, “Ғилем – бер нур”, “Ҡоторған эт һауаға ҡарап өргән менән, асманда торған айҙың нуры китмәҫ”.*

Шағир наҙанлыҡты – ҡараңғы төн, белем алыуҙы яҡты көн менән сағыштыра:

Тормошо башҡа илдәрҙең көн шикелле,
Тормошо наҙан илдең төн шикелле.

Бөгөнгө көндә лә Аҡмулланың әйткән һүҙҙәренең әһәмиәте көслө. Бигерәк тә балалар интернетҡа әүрәп, китап ҡәҙерен ебәрер осорҙа аң-белемгә, китап уҡыуға саҡырыу бик мөһим. “Китап ҡарау – ғәҙәтебеҙ буш ваҡытта” ти Мифтахетдин Аҡмулла “Фазыл Мәржәниҙең мәрҫиәһе”ндә. Китап уҡыу интернет буйлау менән алышыныуы бик ҡыҙғаныс, әлбиттә. Ошо уҡ шиғырында “Хәҡиҡәтен күргәндән һуң, ҡыуанғандан, китаптарын ҡараймын ғашиҡ булып”, - ти йәнә. Тағы ла ошондай юлдар бар Аҡмулланың әле һүҙ барған әҫәрендә:

Ашҡан бер ғалим сыҡһа, яманлайбыҙ,
Мәжлесте ғәйбәт менән тамамлайбыҙ.
Эшебеҙ – йә мыҫҡыллау, йәки хурлау,
Үҙебеҙҙе һәр ғәйептән аманлайбыҙ.

Бөгөнгө интернет заманында уғата хаҡ, актуаль яңғырай кеүек был һүҙҙәр. Күпме кеше бер-береһен тикшерә, бер-береһенән хата эҙләй, үҙен хаҡ күреп, башҡаларҙан сүп йөйнәй кеүек бит?!

Шулай итеп, бөйөк мәғрифәтсе Аҡмулланың “Башҡорттарым, уҡыу кәрәк!”, тип оран һалыуы ла, “...Иң әүәл ғилемеңде уңайлап ал!”, “Хәл килһә, төрлө фәнде белмәк кәрәк” кеүек һәм башҡа ялҡынлы

идеялары менән бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмай, киреһенсә, көндән-көн әһәмиәтлерәк яңғырай кеүек.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Аҡмулла. Шиғырҙар / Төҙ., аңлатмалар һәм баш һүҙ авт. Ә. Вилданов. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 224 б.

2. Вилданов Ә. Аҡмулла – яҡтылыҡ йырсыһы. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 168 б.

3. Вилданов Ә.Х. Мәғрифәт, яҡтылыҡ йырсыһы // Аҡмулла. Шиғырҙар. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1981. – 224 б.

4. Ҡунафин Ғ.С. Аҡмулланың шиғри йәйғоро. – Өфө, 2006.

© Салаватова Ф.Р., Хасанова А.Р., 2023

УДК 80

Хисматуллина З.Р.,
магистрант, УУниТ
Кульсарина И.Г.,
канд. филол. наук , доц.

РЕПРЕЗЕНТАЦИЯ КОНЦЕПТА «БАШКИРСКАЯ КУЛЬТУРА» В ПРОЗЕ А.П. ФИЛИППОВА

В творчестве известного русского писателя А.П. Филиппова ярко отразилась неповторимая башкирская национально-художественная картина мира. В его разножанровых произведениях рельефно воссозданы геокультурное пространство Башкортостана, его природа, историческое прошлое и настоящее народов края.

В отечественной науке проделана значительная работа по исследованию концепта как основной единицы когнитивной деятельности. С.Г. Воркачёв, проанализировав различные подходы к определению концепта в лингвистике, заключает: «Концепт – это единица коллективного знания/сознания (отправляющая к высшим духовным ценностям), имеющая языковое выражение и отмеченная этнокультурной спецификой» [2, с. 93]. Особое внимание уделяется концепту в литературоведении. Были опубликованы работы С.А. Аскольдова-Алексеева, В.А. Масловой, Т.И. Васильевой и др. Как было отмечено исследователями, художественный концепт отличается от познавательного не только своей творческой природой, сферой функционирования и индивидуально-авторским наполнением [1, с. 52].

По справедливому мнению литературоведов, произведения А.П. Филиппова пронизаны сыновней любовью к родному краю,

искренним, уважительным отношением к землякам, независимо от их национальности [4, с. 329; 3, с. 92].

Концептуальное поле «материальная культура башкир» в прозе А.П. Филиппова представлено такими этнокультурными реалиями, как национальные блюда (кумыс, бишбармак, крут), музыкальные инструменты (курай, кубыз), национальная одежда и т.д.

Башкирская безэквивалентная лексика придает прозе русского писателя особый стиль: «Руки старого отца не брали в горсть жирный бишбармак, а губы не знали, шипучей влаги кумыса» [5, с. 131]. «Ты передай им вот немного казылыка, немного сушеного гуся. Зарип это любит» [5, с. 183].

В рассказе «Запах травы» есть раздел «Тюбетейка», повествующий о приключениях Салиха, хозяина этого головного убора. Кадыр-бабай узнал в тюбетейке мальчика узор, похожий на той, которую нашел прошлым летом в своем огороде: «Утром вышел я на огород, гляжу – больно уж поредели арбузные грядки <…>. Стою так на огороде, гляжу, а под самыми ногами тюбетейка чья-то валяется» [5, с. 221].

Особое внимание уделяет А.П. Филиппов кураю, одному из культурных символов башкирского народа. В рассказе «Чистейшие мелодии курая» музыкальный инструмент помогает выразить душевные терзания двух влюбленных – Зарипа и Миннигуль, которым не суждено соединиться: «Какая же сила выплескивает из обычной лесной травы эти пленительные звуки, переворачивающие всю душу. В ней и тоска по чему-то светлому, вековая боль и извечная надежда на счастье» [5, с. 190]. В рассказе автор использовал интересный прием: дает словесное оформление песни-мелодии курая, исполненной Зарипом. В тексте произведения этот фрагмент выделен курсивом. В нем воспевается образ возлюбленной («глаза твои – две влажные смородины», «волосы твои, как ночной ветер») и выражается печаль разлуки («Возлюбленная, услышь биение моей тоски…»). Курай является показателем не только материальной, но и духовной культуры народа. В рассказе «Запах травы» писатель снова обращается к образу курая: «Вечером, после трудной работы разводили общий костер. Собирались к нему. Завязывался разговор. А потом кто-нибудь вытянет из скошенного ряда травы еще не высохшую трубку курая. Хрипловато и монотонно выплеснет эта неприхотливая тростинка чистейшую мелодию» [5, с. 217].

В репрезентации концептосферы «духовная культура башкир» в прозе А.П. Филиппова значительную роль играют сюжеты и мотивы башкирского фольклора. Образцы народного творчества во многих

случаях усиливают идейно-эстетическую значимость произведения, обогащают его язык, помогают раскрыть психологию и характеры героев, глубже показать национальные образы. В рассказе «Единственная дочь Ибрагима» русский писатель обращается к пословице: «Хорош аркан, когда длинный, а язык – короткий» [5, с. 198]. Так подумал герой рассказа Ибрагим, узнав о том, что Садык не раскрыл его дочери давнюю семейную тайну. В вышеназванном рассказе также использован сюжет башкирской легенды о птицах Сак и Сук. Главный герой вспоминает историю, рассказанную ему когда-то дедом, услышав ночью монотонные птичьи крики, похожие на детский плач. Птицы напомнили старику о грустных событиях, произошедших в военное время.

Раскрывая духовный мир башкир, автор особое внимание уделяет их мусульманской ментальности: «Все говорят, что дед Хафиз учился в медресе большого города Оренбурга» [5, с. 121]. При этом он не забывает и об общечеловеческих ценностях. Так, в рассказе «Телефонистка Зина» Алексей говорит своему другу Асхату: «У тебя мать – добрейшая женщина. Чистая и святая. Хоть она и молится втихаря своему Аллаху, а христианской морали у нее хватило б на целый монастырь и всю епархию. Когда я встречался, бывало, с ней, помнишь, в деревню приезжали, или когда она у тебя гостила, она всегда говорит мне: «Вера разная, а Бог одна» [5, с. 154].

Иногда автор прибегает к речевым этикетным выражениям на башкирском языке. Это делается с целью создания речевой характеристики персонажа: «Спасибо на добром слове, – добродушно ответила ему. – Не помочь ли решил по-соседски? – засомневалась она и добавила: – Уж больно что-то не похоже на тебя… рахим итеп…» [5, с. 231]; «Прибежала жена Мазита Марфуга-апа: – Арума, улым, – тихо улыбаясь, сказала она по-башкирски. – Вот узелок принесла. Возьми для Мазита. Здесь топленый жир с луком, вытопки. В лапшу хорошо класть, вкусно. И курута немного…» [5, с. 183].

В своих произведениях русский писатель обращается к именам известных деятелей башкирской культуры: «Старое сердце, как книга. Раскрой и перелистай. Ты увидишь много красивого. Оно звенит и поет, как стихи Мажита Гафури и Мустая Карима…» [5, с. 121].

Таким образом, творческое обращение к башкирским этнокультурным маркерам помогло А.П.Филиппову рельефно представить национальные характеры героев и художественно

достоверно воспроизвести историческое прошлое и настоящее башкирского края.

Список литературы:

1. Васильева Т.И. Литературоведческий подход к изучению художественного концепта // Филологические науки. Вопросы теории и практики. – Тамбов: Грамота, 2012. – № 7 (18): в 2-х ч. –Ч.1. – С. 51-54.

2. Воркачёв С.Г. Методологические основания лингвоконцептологии // Теоретическая и прикладная лингвистика. – Воронеж, 2002. – Вып. 3. – С. 19-95.

3. Кульсарина И.Г. Башкирская национальная картина мира в творчестве А.П. Филиппова// Культура русской речи в пространстве современного общества и образования: материалы II заочной международной научно-практической конференции. – Уфа: Уфимского ЮИ МВД России, 2018. – С. 89-92.

4. Рахимкулов М. Г. От Горького до наших дней: художественно-краеведческие очерки. Часть 2. XX век. – Уфа, 2013. – 352 с.

5. Филиппов А. П. Избранное. В 3 т. Т.3. – Уфа: Китап, 2008. – 472 с.

© Хисматуллина З.Р., Кульсарина И.Г., 2023

УДК 821.512.141

Хөснөтдинов И.К.,
3 курс,БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ХӘҘЕРГЕ БАШҠОРТ ПРОЗАҺЫНДА ВАТАН АЗАТЛЫҒЫ ӨСӨН КӨРӘШ ТЕМАҺЫ

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарына арналған, илебеҙ бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшселәрҙең мөһәбәт образдарын һынландырған әҫәрҙәр алтмышынсы-етмешенсе йылдар прозаһының төп идея-эстетик йүнәлештәренең береһен билдәләйҙәр.

Илебеҙ кешеләренең һуғыштағы батырлығы элеккерәк әҫәрҙәрҙә бер аҙ тура һыҙыҡлыраҡ хәл ителһә, башлыса дошманға нәфрәт тойғоһона, уға ҡаршы көрәштә ҡурҡыу һәм аяу белмәүгә баҫым яһалһа, прозаиктар хәҙер фашизмға ҡаршы көрәштең ҡатмарлылығын һүрәтләргә, патриотизм һәм рух ныҡлығының асылына үтеп керергә, социаль тамырҙарын асырға, һуғыш һәм кеше проблемаһын әхләҡи планда хәл итергә тырышалар.

Д. Исламовтың «Мәскәү юлы» (1967) романында Ватан һуғышы ваҡиғалары киң масштабта, панорамалы итеп тә һүрәтләнә, шул уҡ ваҡытта геройҙарҙың эске донъяһын, драматик мәл менән бәйле кисерештәрен, ҡараш-ынтылыштарын яҡтыртыуға ла етди иғтибар бирелә. Рухи-әхләҡи көстө сағылдырыу яғынан романдың ҡырҡынсы йылдар башындағы тыныс, яҡты тормошто һүрәтләү менән башланыуы әһәмиәтле роль уйнай. Башҡортостан ауылдарының береһендә һабантуйға йыйылған халыҡтың, фашистарҙың илебеҙгә баҫып инеүе тураһындағы хәбәрҙе ишетеү менән, күңелле байрамды ҡырыҫ митингыға әүерелдереп ебәреүе үҡ халыҡ массаларының илде һаҡлар өсөн дәррәү күтәрелергә әҙер тороуын күрһәтә.

Артабан әҫәрҙә ир-аттарҙың яу ҡырына китеүе лә, Ҡыҙыл Армия частарының тыныс шарттарҙан ҡапыл һуғыш эсенә ташланыуы ла, дошман ҡыҫымы аҫтында артҡа сигенеүҙәр ҙә, ҡамалыуҙа ҡалып, уны йырып сығыуҙар ҙа, Мәскәү эргәһендә гитлерсыларҙың һөжүмен туҡтатып, тәүге еңеүгә өлгәшеүҙәр ҙә киң һәм тәфсилләп сағылдырыла. Шул уҡ ваҡытта алыҫ тылда барған күренештәр ҙә тасуирлана.

Геройҙар тормошта, көрәш һыҙығында тотҡан урындары, дәрәжәләре, характер һыҙаттары, ҡараштары, ҡылыҡтары менән төрлөләр. Унда башҡорт ауылының ябай крәҫтиәндәренән алып Ҡыҙыл Армия генералдарына тиклем күп төрлө персонаждар хәрәкәт итә. Һуғыш һымаҡ иң киҫкен, бөтә булмышыңды асып һалыуҙы талап иткән ситуация уларҙың бөтәһенең дә тыныс шарттарҙа күҙгә ташланмаған байтаҡ сифаттарын өҫкә ҡалҡыта, яланғасландырып күрһәтә.

Яҙыусыларҙың һаман үҫә барған ижади тәжрибәһенә, күп милләтле туғандаш әҙәбиәттәр тәжрибәһенә бәйле рәүештә һуғыш темаһын хәл итеү башҡорт прозаһында артабан камиллаша, уның үҙенә генә хас законлыҡтар нығыраҡ асыҡлана бара. Һуғыш тураһындағы әҫәрҙәрҙең проблематикаһы киңәйә, улар жанр һәм стиль эҙләнеүҙәре яғынан байый, хикәйәләү структураһы төрлөләнә бара. Ниндәй ваҡиғаларҙы һайлауҙарына һәм уларҙы нисек һүрәтләүҙәренә, геройҙарҙы кәүҙәләндереүҙә ниндәйерәк ысулдар ҡулланылыуына, стиль үҙенсәлектәренә ҡарап, был әҫәрҙәр бер нисә төркөмдө тәшкил итәләр.

В. Исхаҡовтың «Бәхтизин» (1973), Я.Хамматовтың «Тыуған көн» (1975) романдарында бер персонаж үҙәккә ҡуйыла, уның герой булып формалашыуы процесы ла, көрәш юлы ла оҙайлы ваҡыт һуҙымында сағылдырыла. Был әҫәрҙәр конкрет тарихи шәхестәрҙең – һуғышта фиҙәкәрлек күрһәткән Башҡортостан улдары Әхтәм Бәхтизиндың,

Ғәбделбәр Фәтхинуровтың – Нур Фәтиховтың, Миңлеғәле Ғөбәйзуллиндың героик рухын тарихи-биографик планда кәүҙәләндерҙеләр.

И.Ғиззәтуллиндың «Икенсе бейеклек» (1977), Ә. Чаныштың «Саңҡ-саңҡ итә Ирәндек бөркөтө» (1978), И. Абдуллиндың «Тол ҡатындар иламай» (1979) романдары, Ғ. Аллаяровтың «Бер юлдан» (1969), «Хинган тауҙары аша» (1975), З. Хисмәтуллиндың «Таң алдынан» (1970) повестары Совет һуғышсыларының дөйөмләштерелгән образдарын үҙәккә ҡуйҙы. Уларҙа ла геройҙарҙың тормош һәм көрәш юлдары шаҡтай оҙайлы ваҡыт эсендә күрһәтелә, характерҙары формалашыу процесын яҡтыртыуға ҙур ғына урын бирелә, һуғыш уларҙың ошо тормош юлының иң көсөргәнешле, иң яуаплы этабы булараҡ һүрәтләнә.

В. Исхаҡов романында Бәхтизиндың революцияға тиклемге үҫмерлек осоро, беренсе донъя һуғышы, революционер-көрәшсе булып китеүе, артабан граждандар һуғышындағы батырлыҡтары хикәйә ителә. Ватан һуғышында дивизия менән командалыҡ итеп, фронтта физәкәрлек күрһәтеүе – уның бөтә үҫеш юлының логик дауамы, ғүмеренең лайыҡлы йомғағы була.

И. Ғиззәтуллиндың «Икенсе бейеклек» романында ла геройҙарҙың үҫеш һәм йәшәү юлында һуғыш иң көсөргәнешле, иң яуаплы бер мәл итеп бирелә. В. Исхаҡов романында герой яулап алған беренсе бейеклек граждандар һуғышында еңеү булһа, И. Ғиззәтуллин әҫәрендә ул – колхоздар ойоштороу, ауылға яңы тормош сатҡылары, яңы культура индереү өсөн көрәш була; ә инде Ватан һуғышы – геройҙар өсөн тағы ла яуаплыраҡ, ауырыраҡ һәм юғарыраҡ икенсе бейеклек төҫөндә һүрәтләнә.

Был әҫәрҙәрҙә геройҙарҙың фронт шарттарында асылған ныҡлы характеры уларҙың сирек быуат буйынса формалашҡан, бейеклектәрҙән-бейеклектәргә сағылана килгән кешелек һыҙаттарының яңы бер яҡтылыҡ менән балҡыуы тип ҡабул ителә.

Я. Хамматовтың «Тыуған көн» романында геройҙың йондоҙ булып күтәрелер тәүге бейеклеге ошо һуғыш йылдарына тура килә. Я. Хамматов геройҙың тыуған көнөнән башлап ил азатлығы, халыҡ бәхете өсөн ғүмерен бирерҙәй патриот булып үҫеүгә килтергән һәр фактты тәфсилләп күрһәтә, персонаж тормошондағы ябай ғына көнкүреш деталдәренә лә уның һуңғы яҙмышы яҡтылығынан ҡарап тәрән мәғәнә һала, художестволы дөйөмләштереү яһай.

Миңлеғәле Ғөбәйҙуллиндың үҫмер йылдары ауылдарҙы үҙгәртеп ҡороу өсөн барған ҡыҙыу көрәш һәм рәсми пропагандаға, һәр яңылыҡҡа мөкиббән киткән йәштәр араһында ысынлап та йәшәгән романтик күтәренкелек мәленә тура килә. Бик йәшләй ул күмәк эшкә, ижтимағи тормошҡа ҡатнашып китә. Йәшлек романтикаһы Миңлеғәле күңеленә шиғри илһам уты һала. Герой шул осорҙоң типик алдынғы йәш кешеһе булып кәүҙәләнә.

Яҙыусылар һуғыш геройҙарының характерын, физәкәрлек сифаттарын бер фокусҡа туплап, конкрет бер эпизод аша ла ҡалҡыу итеп бирҙеләр. Бындай әҫәрҙәр башҡорт хәрби прозаһының икенсе бер төркөмөн тәшкил итте.

Ә. Хәкимовтың «Осар ҡоштар» (1970), «Күпер» (1974), «Аҡһаҡ бүре» (1976) повестарында геройҙар һуғыштың конкрет без эпизодына, айырым бер операцияға бәйле рәүештә композицион үҙәкте тәшкил иткән ваҡиға тирәһенә туплап һүрәтләнәләр. «Осар ҡоштар» әҫәрендә Днепр аръяғында дошман тылына ташланған кескәй генә десант отрядының фашистар менән аяуһыҙ бәрелештәре, партизан һәм ауыл кешеләре менән бәйләнешкә инеп, һөжүм итеүсе совет ғәскәрҙәренә юл асыу факты алына. Ваҡиғаларҙың ҡуйылышы, хәл-хәрәкәттәрҙең киҫкенлеге ун алты йәшлек радист Кәрим Аҙнабаевты, шулай уҡ Ваня Рябчиковты, Мәхмүт Жакиевты, лейтенант Чукреевты, партизан Платон бабайҙы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бөтә кисереш-тойғолары менән характерларға мөмкинлек биргән.

Фронт һыҙығы аша үтеп, партизандар менән бәйләнешкә инергә тейешле кес кенә отрядтың дошман менән осрашып, ваҡытынан алда бәрелешкә инеүе һәм шул арҡала тыуған көсөргәнеш «Аҡһаҡ бүре» повесының сюжет нигеҙендә ята. Ә.Хәкимов дошман менән бәрелештең иң киҫкен моменттарында геройҙарҙың үҙ-үҙҙәрен нисек тотоуын тәфсилләп һүрәтләй, улар күңелендә ҡайнаған хис-тойғоларға ҙур иғтибар бирә.

«Аҡһаҡ бүре» повесында һуғыштың локаль бер күренешен – кескәй отрядтың, көтмәгәндә дошман менән осрашып, ваҡытынан алда бәрелешкә инеүен хикәйәләү аша яҙыусы ҙур һуғыш йылъяҙмаһында, оло көрәш процесында ошо бәләкәй генә хәрби эпизодтың да мөһимлеген күрһәтә, яугирҙарҙың ватансыллыҡ хистәрен, физаҡәрлек сифаттарын аса. Һуғыштың кеше тормошоноң гуманистик йөкмәткеһенә генә түгел, ә тәбиғәткә лә ят нәмә булыуы хаҡындағы фәлсәфәүи фекер символик характерҙағы Аҡһаҡ бүре образында бирелә.

Ә. Хәкимдең «Күпер» повесының композицион үҙәген Австрия ерендә стратегик яҡтан мөһим күпер өсөн барған көрәш тәшкил итә, Бөйөк Ватан һуғышынан һуң фашизмға ҡаршы көрәштә Европа илдәре менән беҙҙең ил араһындағы дуҫлыҡ күпере барлыҡҡа килеүе символик тәрән мәғәнәле раҫлана.

Әҫәр башында хәрби училищены яңы тамамлаған Әхтәм Ҡадиров бар көсөнә тиҙерәк һуғыш яланына барып етергә, алғы һыҙыҡты күрергә ашҡына. Дошман менән алышырға, Еңеүгә үҙ өлөшөн индерергә хыялланған егет һуғыштың унан башҡа ғына бөтөп ҡуйыуынан ҡурҡа. Ләкин бер көнө тыныс тормоштоң айҙарына, йылдарына торошло һуғыш бик тиҙ егет күңелендәге еңел ҡараштарҙы юҡҡа сығара. Уҡыусы күҙ алдынан геройҙың аҡрынлап рухи үҫә барыуы, сынығыуы үтә. Фронт ваҡиғалары тәьҫирендә, долгов һымаҡ һалдаттар менән аралашыу һөҙөмтәһендә тыуған эске күңел йәшәйеше диалектикаһы асыла. Бигерәк тә рота командиры Васильев үҙ-үҙен тотошо, баҫалҡы тәбиғәте, кешелеклеге, бай рухы менән Әхтәмгә һуғыш һәм тыныс тормош һабаҡтарын аңларға ярҙам итә.

Һуғыштың локаль бер күренешендә генә лә яҙыусы һәр бәрелештең оло көрәш процесында тотҡан урынын билдәләй, ошонда совет кешеләренең патриотизм тойғолары, физәкәрлек һыҙаттары ла сағыла. Геройҙар үткән тормоштарын да күҙ алдынан уҙғаралар, киләсәк тураһындағы хыялдары ла асыла, көрәштәштәре менән мөнәсәбәттәре лә яҡтыртыла, дошманға ҡараштары ла сағыу булып асыла.

Ә. Хәкимовтың повестары, Ә.Вахитов билдәләүенсә, геройҙар психологияһын нескә итеп сағылдырыуы һәм эске драматизмы яғынан В. Быков повестары менән ауаздаштар.

Һуғышсы-геройҙың гуманизмы төрлө милләт улдарының тығыҙ берҙәмлегендә лә күҙгә ташлана, бөтә әҫәрҙәрҙә лә интернационализм идеяһы раҫлана. Совет кешеләренең батырлығын, кәрәк булғанда ғүмерҙәрен дә ҡорбан итеүгә барыуын яҙыусылар уларҙың юғары әхләге менән нигеҙләйҙәр.

Йыйып әйткәндә, әҙиптәр һуғышсы геройҙарҙың күңел түрен асыуға ныҡ иғтибар бирәләр. Тәү планда персонаждарҙың рухи донъяһына психологик анализ, кешеләрҙәге батырлыҡ сығанағын юллау тора. Етмешенсе йылдарҙағы хәрби прозаның яңы бер үҙенсәлеге шунда, хәҙер яҙыусылар һуғыш күренештәрен һүрәтләүҙән дә бигерәк, ут эсендәге кешене, һуғыштың шәхес яҙмышына яһаған йоғонтоһон, яугирҙың кисерештәрен сағылдырыуҙы иғтибар үҙәгенә ҡуялар.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. – 7 томда. Т. 6. – Өфө: Китап, 1996. 710 бит.

2. Вахитов Ә.Х. Жанр и стиль в башкирской прозе. – Уфа; Башкирское книжное издательство, 1982.

3. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары: монография. – Өфө; БашДУ БНҮ, 2012.

© Хөснөтдинов И.К., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Хәйҙәрова А.Р.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.,

ФИЛОСОФ-ШАҒИР ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ЙӘШӘҮ АСЫЛЫ САҒЫЛЫШЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең ижады – башҡорт әҙәбиәтенең XX быуаттың 40-сы йылдарынан алып хәҙергәсә йылдам үҫешен иң сағыу сағылдырған һәм милли художество ҡаҙаныштары кимәлен билдәләшкән юғары һүҙ сәнғәте ул. Халыҡ шағиры поэзияһының, драматургияһының һәм проза әҫәрҙәренең күркәм өлгөләре әҙәбиәтебеҙҙең алтын фондын тәшкил итә. Уларҙа халыҡтың меңәр йыл туплаған әҙәп-әхләк, эстетик, рухи тәжрибәләре ижади үҙләштерелеп, яңыса, заманса балҡыш ала. М. Кәримдең шиғыр һәм поэмаларында, хикәйә һәм повестарында, сәхнә әҫәрҙәрендә үткәндең һәм хәҙергенең, халыҡ һәм ил тормошоноң драматик ваҡиғалар, тетрәнеүҙәр һәм фажиғәләр, еңеүҙәр һәм еңелеүҙәр, ҡайғы һәм шатлыҡтар менән тулы күренештәренең күп яҡлы һүрәтләнешен, кешенең рухи донъяһының сәнғәтсә тәрән тасуирланыуын күрергә мөмкин.

Беҙ был мәҡәләлә халыҡ шағиры Мостай Кәрим шиғриәтенең философик асылы хаҡында уй-фекер йөрөтәбеҙ. “60-сы йылдар уртаһынан әҙәби эҙләнеүҙәрҙең объекты уҙған йылдарҙа йыш ҡына иғтибарға алынмаған йәки ситләп үтелгән тормош процесстары булды. Донъяны, йәшәү мәғәнәһен, ғөмүмән, мәңгелек темаларҙы яңыса фәлсәфәүи аңлауға ынтылыш көсәйҙе”, – тип билдәләнде әҙәбиәт ғилемендә.

Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең философик уйланыуҙарға ҡоролған тәүге шиғри юлдарын “Ҡайтыу” (1945), “Уйҙар” (1946) әҫәрҙәрендә осратырға була:

Теләмәнем шаян шатлыҡты,
Бәхет кәрәк, шатлыҡ ваҡытлы (“Ҡайтыу”)

Мин килмешәк булып тыуманым:
Оло юлдың йотоп туҙанын,
Һыйыныр ер тапмай донъяла,
Мин уҙғынсы булып уҙмамын...

Тормош тын күл түгел. Тып-тын йәшәп,
Шым-шым ғына донъя ҡуймамын (“Уйҙар”)

– был юлдарҙа философ-шағир булып етешәһе һүҙ оҫтаһының тәүге күҙәтеүҙәре, донъя һәм шәхестең йәшәү асылын аңларға ынтылыуы сағыла. Уттар-һыуҙар кискән шағир уларҙы аңламай буламы?

Арабыҙҙан тик бер кеше юғалды
Ниндәй тулы донъя нисек буш ҡалды...

– бындай юлдар менән автор кешеләрҙең ниндәй уникаль булыуын әйтергә теләне.

Философик уйланыуҙар, Кеше, Космос, Тәбиғәт феноменын аңларға ынтылыу айырыуса шағирҙың “Европа – Азия” циклында күҙгә нығыраҡ ташлана:

Ҡыйыу баҫҡан тура эҙҙән
Ғәләм атлай,
Ҡыйыш баҫҡан яңғыҙ эҙҙе
Үлән ҡаплай. (“Бер йыр йырланған”)

...Ә бит башың эйелмәһә,
Һауалар шундай бейек,

...Ун ғүмерең миңә кәрәк түгел,
Бер яҙмышым шуға торорлоҡ. (“Россиянмын”)

...Сөнки ул бит мәңгелектән
Мәңгелеккә
Осоп бара...
Сөнки Ҡояш бөтә яҡты
Тигеҙ нурлай,

Үҙ юлында саҡ ҡына ла
Туҡтап тормай.

Тимәк, шағирҙың донъяны ҡабул итеүе, баһалауы йәшәйеш ниәтен, уның ҡапма-ҡаршылыҡтарын, берҙәмлеген һәм эҙмә-эҙлеклелеген таныуға таяна, философик лирикаһының поэтикаһын фекер йәнәшәлеге, символизм билдәләй. Йылдар уҙа, Ваҡыт аға, автор ҙа тәбиғәтте нығыраҡ аңлай бара, ҡәҙимге күренештәрҙә, ваҡиғаларҙың тәбиғи ағышында зиһене аҡыл эйәләре күреҙәйҙәрҙе шәйләй, йәнәшәлек һәм ҡапма-ҡаршылыҡтар уңышлы антитеза, тойғолар хәрәкәте, тел ҡеүәһе ярҙамында хәтергә уйылып ҡалыр шиғри юлдар тыуҙыра:

Өй артында ҙур ҡара таш ята.
Тамсы шуны, кәйефе килгәндә,
Тама-тама, ана, үтә тиште
Әллә биш-алты йыл тигәндә.
Ун алты йыл тоташ тырышам мин,
Күпме булды тилереп шашҡандар.
Мин барыбер тамсынан да көсһөҙ,
Һин нығыраҡ икән таштан да.

Шағирҙың философияға ҡоролған иң тәүге, бер бөтөн, тәрән мәғәнәгә эйә, уҡыусыһын тәрән уйға һалыр уңышлы әҫәре тип баһалайбыҙ был юлдарҙы.

Ошо уҡ 1956 йылда Мостай Кәрим йәнә бер үлемһеҙ шиғырын ижад итте, шулар менән 37 йәшлек һүҙ оҫтаһы үҙен маһир ижадсы, тәрән философ итеп таныттты:

Йәшәйһе бар, һаҡла үҙеңде, – тиһең,
Теләктәрең, эйе, хаҡ һымаҡ.
Ләкин мин бит бөтә ғүмерем буйы
Бәйгеләрҙә сапҡан ат һымаҡ.
Донъя беҙҙән генә ҡалмаған ул,
Бер саҡ килер үлем – ят ҡунаҡ.
Ауһам ине шул саҡ бәйгеләрҙә
Йөрәге ярылып үлгән ат һымаҡ.

Был юлдарҙы һәр кем үҙенсә, үҙ эске донъяһы киңлегенән сығып аңлай, үҙенсә баһалай.

Йыһан һәм Кеше мөнәсәбәте, фанилыҡта Шәхес роле һәм эшмәкәрлеге – Мостай Кәрим философияһының асылын билдәләр төп критерий ул. Автор байтаҡ әҫәрҙәрендә ошо глобаль философик проблемаға иғтибар итә килде:

Кеше көслө.

Ҡулда тота олонон ул
Был Йыһандың.
Кеше көслө.
Бер һелкетһә, тупылдашып йондоҙ
Ҡойолор.
Ағастағы алма төҫлө.
Көслө кеше!,

Кеше бөйөк. Бәлки, шуғалыр ҙа
Кесерәйгән кеүек ҡаялар.

...Түңгәккә болот уралмай.
Ҡағылмай йәшен.
Зарланма.
Зарлана күрмә.
Юғары кешем!.

Шағирҙың “Вәғәҙәләр бирмә”, “Әйләнә карусель, әйләнә” шиғырҙарының йөкмәткеһе, төп темаһы ошондай философияға ҡоролған, уларҙа шағир уҙған быуаттың икенсе яртыһындағы йәшәйешебеҙҙе Заман, Ваҡыт категорияһы аша баһалай, үҙен борсоған тарихи-ижтимағи мәсьәләләрҙе кинәйәләү алымы менән һүрәтләй, шулар аша аҡыл эйәһенең тәнҡитле фекерен уҡыусыһына еткерә. “Вәғәҙәләр бирмә” шиғырын ентекләберәк ҡарап сығайыҡ:

Вәғәҙәләр бирмә. Үттек инде
Еңел-елпе йәшәр осорҙо.
Ирәймәйек, дуҫым, “Һап!” тиәйек,
Һикереп сыҡҡас ҡына соҡорҙо.

Хәҙер инде беҙҙең буш хыялдар
Ярһып сапмай ҡағыҙ юртаҡта,
Табандарҙа тупраҡ тойһаҡ ҡына,
Ҡеүәтебеҙ арта шул саҡта.

– был шиғыр менән автор вәғәҙәләрҙең, анттарҙың кәрәкһеҙлеге, уларҙы ваҡыты алдан бирмәү тураһында һүҙ йөрөтә. Әгәр ҙә һинең нимәлер эшләргә теләгең бар икән, уны тормошҡа ашырғас ҡына, кешеләр менән бүлешергә мөмкин. Юғиһә, һинең вәғәҙәләрең буш һуҙ булып ҡаласаҡтар.

Донъяның йәмен һәм тәмен, тормоштоң ҡатмарлығын тәрәнерәк тойған һайын, М. Кәрим поэзияһының асылы философик төҫ ала бара,

шиғырҙың, образдарҙың структураһы ҡатмарлана, һүҙҙәр һәлмәгерәк һәм хикмәтлерәк була килә кеүек. “Сигеү сигә ҡыҙҙар”, “Һағыныу”, “Тәбиғәттә шундай миҙгел бар...”, “Мин киткәндә...”, “Яҙғы гөрләүектәр” тибындағы бик күп шиғырҙарҙың тел төбө мәғәнәһен, соғоллоғон, ябайлыҡтың ҡатмарлығын тойоп төшөнөргә генә мөмкин. Уларҙа хис һәм фекер төптәрәк ята. Уй-хистәрҙең ағышы, ғәҙәттә, тәбиғәт, миҙгел күренештәренә төрөлөп йәки ым-ишаралы поэтик деталдәргә сорналып бирелеүсән.

Профессор И.И. Вәлиев Мостай Кәрим ижадын өйрәнеп, уның афоризмдарҙан торған йыйынтығын нәшер итте. (“Нравственные уроки Мустая Карима”, Уфа, 2008.) Беҙ ҙә аҡыл камиллығын, философик идеяны сағылдырған ҡайһы бер шиғри өлгөләр килтерәбеҙ:

Өндәреңдә яҡшы кешеләр күр,
Төндәреңдә матлы төштәр күр”,
Йылын түгел, хатта айын
Аҙнаһын
Һөйгәнеңдән һуң йәшәргә
Яҙмаһын,
Донъя фани.
Киткән кире ҡайтмай,
Ә килгәндәр килә китергә.
Ғаҡылым аяҙ.

Ғөмүмән, беҙ шундай һығымтаға килә алабыҙ: Мостай Кәрим үҙенең шиғырҙарында төрлө темаларға мөрәжәғәт иткән, һәм асылда фәлсәфәүи темаларға арналған шиғырҙары аша беҙ авторҙың эске донъяһын, күңелен күрә алабыҙ, борсоған һорауҙары, уйланыуҙары тураһында һүҙ йөрөтә алабыҙ. Фәлсәфәүи шиғырҙары аша автор үҙенең тормошҡа булған мөнәсәбәтен еткерә һәм дә уҡыусыны мәңгелек булған һорауҙарға, тирә-яҡ донъяға, шул донъяла булған роле тураһында уйландыра.

Список литературы:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы. Алты томда. 5-се том. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993. – 596 бит.

2. Кәрим Мостай. Әҫәрҙәр биш томда, 1-се том: шиғырҙар, поэмалар, либретто. − Өфө: Башҡортостан “Китап” нәшриәте, 1995. – 416 бит.

3. Хөсәйенов Ғ.Б. Мостай Кәрим: − Шәхес. Шағир. Драматург. Прозаик. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1994. – 416 бит.

© Хәйҙәрова А.Р., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Хәмитова Л.Ю.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

БУЛАТ РАФИҠОВ ИЖАДЫНДА ТАРИХИ ҮТКӘН ҺӘМ БӨГӨНГӨ ЗАМАН БӘЙЛӘНЕШЕ

Күренекле яҙыусы һәм йәмәғәт эшмәкәре, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, халыҡтың милли рухын ҡеүәтләп ебәреүсе ырыуҙар хәрәкәтен етәкләүсе, күп йылдар “Ағизел” журналының баш мөхәррире булған Булат Рафиҡов ижады башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүгә һиҙелерлек ҙур өлөш индерҙе.

Булат Заһрый улы Рафиҡов 1934 йылда Мәләүез районы Дәүләткол ауылында тыуған. Стәрлетамаҡ педагогия училищеһын тамамлағас, 1954 йылда Башҡорт дәүләт университетына уҡырға инә. Студент йылдарынан уҡ гәзит-журналдарҙа репортаждар, очерктар, фельетондар баҫтыра башлай. Матбуғат биттәрендә йыш ҡына урын алған шиғырҙарын 1965 йылда “Ғәжәбстан” исемле йыйынтыҡ итеп сығара. Был китапҡа ингән шиғырҙарҙың күбеһендә – мөғжизәләргә бай донъяның ғәжәп яҡтарын асыусы эскерһеҙ лирик герой тойғолары.

Замандаштың рухи донъяһына тағы ла тәрәнерәк үтеп инеү, уның ил өсөн башҡарған эштәрен, фиҙаҡәрлеген, көрәшен һынландырыу, гражданлыҡ пафосының артабан көсәйә төшөүе, идея-художество йөкмәткеһенең тәрәнәйеүе Б. Рафиҡовтың “Кисеүҙәр” (1977), “Йыһан сәғәтсеһе” (1982) йыйынтыҡтары өсөн характерлы булдылар.

“Йыһан күкрәгендә” шиғырында хеҙмәт кешеһенә бәхет даулап, тыныслыҡ һәм дуҫлыҡ хаҡына көндән-көн ярһыбыраҡ, көслөрәк тибеүсе ер-йөрәк өсөн герой ғорурлыҡ кисерә. Ҡапҡа ҡағыусы таңдарҙы дәүергә хужа булып ҡаршылаусы (“Мираҫ”), ныҡлы ышаныс менән тыуасаҡ иртәгәһенә йөҙ тотоусы шағир, шул уҡ ваҡытта, үҙенең тамыр-сығанаҡтары менән боронғо үткәненә, ҡурай йәнле нәҫел-ырыуына тәрән береккәнен, “тарта мине тарих төпкөлдәре һәр дүрт миҙгелдә” тип һыҙыҡ өҫтөнә ала.

Шул уҡ тарих төпкөлдәре тартыуы шағирҙың тормош күренештәренә, донъяға ҡарашын киңәйтә. Йәшерәк саҡта аҡ ҡылғанды бер сибәрҙең өлпәй башына оҡшатһа, бөгөн инде ул, ир уртаһына етеп, төп булмышына яҡыная төшкәс, мең йыллыҡ сер һаҡлаусы дала ҡылғанын аҡһаҡалдарға оҡшата. (“Аҡ ҡылған”).

Б. Рафиҡовтың байтаҡ шиғырҙарында 1941 йылдың хәтәр еле яҙмышына ҡағылған шиғри кисерештәре, күңел һыҙланыуҙары, ауырлыҡҡа баш эймәүсе замандаштары өсөн ғорурлыҡ хистәре сағылыш алған.

“Табын” шиғырында тыуасаҡ тыныс таңдар өсөн, яуҙа һәләк булған яҡындарының һынын күңелендә тере һаҡлаған шағир, ҡылған сәсле тыуған яғында табын ҡора. Табын түрендә – хәтер ебе, шағир ғүмеренең асылып килгән бөрө мәле. Унда уның туғандары, ауылдаштары әлегә тере, яуға китеүсе ағайҙарын шағир шул табындан оҙатып ҡалмаҡсы. Яҡты бөгөнгөһө өсөн ғүмерҙәрен ҡорбан иткән ағайҙары алдында герой һуңғы бурысын үтәмәксе.

Б. Рафиҡовтың ижады өсөн шуныһы характерлы: шиғри юлдарҙа урын алған ваҡиғалар, тос фекерҙәр, поэтик образдар – кешеләрҙең ҡамғаҡ хәленә ҡалыуы, сал ҡылғанлы дала, үр елдәре йотоп сынығыусы ирҙәр, бүре ҡамауында башаҡтан ҡайтыусы балалар һ.б. – артабан уның “Сал ҡылған”, “Үр елдәре”, “Ҡараһаҡал” һымаҡ проза әҫәрҙәрендә үҫтерәләсәк, фәлсәфәүи йөкмәткеһе киңәйтелеп, эпик дөйөмләштереүгә дәғүә итәсәк художестволы деталь булдылар.

Б. Рафиҡовтың ижады өсөн шуныһы характерлы: шиғри юлдарҙа урын алған ваҡиғалар, тос фекерҙәр, поэтик образдар – кешеләрҙең ҡамғаҡ хәленә ҡалыуы, сал ҡылғанлы дала, үр елдәре йотоп сынығыусы ирҙәр, бүре ҡамауында башаҡтан ҡайтыусы балалар һ.б. – артабан уның “Сал ҡылған”, “Үр елдәре”, “Ҡараһаҡал” һымаҡ проза әҫәрҙәрендә үҫтерәләсәк, фәлсәфәүи йөкмәткеһе киңәйтелеп, эпик дөйөмләштереүгә дәғүә итәсәк художестволы деталь булдылар.

Халыҡтың үткән шанлы-ҡанлы йәшәйешенә, сал тарихына тамырҙары береккән, йыһан киңлектәрен иркен байҡар киләсәгенә ышаныслы ҡараған замандаштың рухи донъяһын, кисерештәрен сағылдырыусы Б. Рафиҡовтың шиғри әҫәрҙәре баҙыҡлана барып, “Ҡулдар хәтере”, “Йыһан сәғәтсеһе” поэмаларында был үҙенсәлектәр тағы ла сағыуыраҡ һыҙатланыш тапты.

Шулай итеп, Булат Рафиҡовтың шиғриәтендәге иң төп һыҙат, уның ижад йөҙөн билдәләүсе, прозаһы менән тығыҙ бәйләүсе, теҙмә һәм сәсмә әҫәрҙәренең тос идея-эстетик йөкмәткеле булыуына килтереүсе сифат – тарихилыҡ, быуаттар төпкөлө тамырҙарын барлау, халыҡтың шанлы үткәненә бар иғтибарҙы туплау.

Етмешенсе йылдарҙа Б. Рафиҡов, журналислыҡ эшендә һәләтен сарлағандан, бай тәжрибә туплағандан һуң, прозаға килде.

Уның проза әҫәрҙәре араһында очерк, фельетон, хикәйә,повесть, роман кеүек төрлө жанрҙарҙың булыуы ижадының күп ҡырлығы, баҙыҡлығы хаҡында һөйләй.

Б. Рафиҡовтың киң күләмле эпик әҫәрҙәренең тәүгеһе булған “Сал ҡылған” (1981) романында етмешенсе йылдар башындағы ауыл тормошо яҡтыртыла, хеҙмәт процесына бәйле геройҙарҙың характерҙары формалашыуы, шәхес булараҡ өлгөрөп етеүҙәре һүрәтләнә.

Әҫәрҙә байтаҡ геройҙарҙың холоҡ-фиғеленә, рухи һыҙаттарына яҡтылыҡ һибеүсе, нәҫел-нәсәбен, тамырҙарын юллаусы шәжәрәләр нигеҙендә быуындар бәйләнешенә, мәшһүр Кинйәһолтанға һәйкәл асыу ваҡиғаһы аша рухи мираҫҡа, ғөрөф-ғәҙәттәргә, туған телгә, халыҡтың ауыҙ-тел ижадына һаҡ ҡараш тыуҙырыу кеүек әхлаҡи-этик проблемалар күтәрелә. Отставкалағы полковник Хәсән Ибраһимовтың ғаилә ағзаларының яҙмышы, бигерәк тә уның кесе улы, әҫәрҙең төп геройы Рәшит Ибраһимовтың яуаплы эштә, кешеләр менән етәкселек итеүҙә, тормош ҡаршылыҡтары менән көрәштә рухи яңырыш кисереүе сюжет үҫтерелешенең үҙәгендә тора.

Роман башында “Ташҡаҙан” колхозының партком секретары Айрат Ҡыпсаҡбаевтың мәшһүр йырсы Кинйәһолтанға һәйкәл асыу тантанаһын ауылда ҙур үҙгәртеп ҡороуҙар эшенең башы итеү, колхозсыларҙың рухи донъяһына йоғонто яһау, халыҡты дәртләндереү, тыуған яҡ өсөн ғорурлыҡ хистәре уятыу өсөн һалған тырышлыҡтары район етәкселәренең, бигерәк тә ауыл хужалығы идараһы начальнигы Абдуллиндың “мәжусилекте, дини йолаларҙы тергеҙергә маташыу” тип ҡыра һуғыуҙары, колхоз председателе менән парторгка шелтә биреүе, эштәренән бушатыуы менән тамамлана. Халыҡ рухын һаҡлау, уның хәтерен яңыртыу кеүек мөһим мәсьәлә, шулай итеп, етди ҡаршылыҡҡа осрай. Конфликт төйөнләнеш ала һәм ул колхоз идараһын күсереп йөрөтөү ваҡиғаларына нигеҙләнеп тыуған икенсе ҡырҡыу әхлаҡи конфликт менән тығыҙ бәйләнештә сиселеш таба.

Социаль-фәлсәфәүи йөкмәткеһалынған, әхлаҡи-этик конфликттың үҙәген тәшкил иткән, ваҡиғаларҙың динамик алышынып тороуына нигеҙләнгән, көсөргәнешле сюжет ептәрен бер төйөргә йыйнаусы мажаралы колхоз идараһын бер ярҙан икенсе ярға күсереп йөрөтөү ваҡиғаһына ҡарата мөнәсәбәттә күп геройҙарҙың характер үҙенсәлектәре, шәхси һыҙаттары асыла. Идараны күсереүгә ҡаршы һәм быны хуплаусылар араһында барлыҡҡа килгән ҡырҡыу конфликттың сиселеше ғәҙеллек өсөн көрәш, халыҡтың ата-бабалары йәшәгән төйәктә

рухи тамырҙарын өҙөлөүҙәрен һаҡлап ҡалыу өсөн алышыуы булып ҡабул ителә.

Конфликтлы ситуацияның бер яғында тыуған ауылы Фәрҡәште ҡаланан кәм булмаған типовой поселокка әйләндереү хыялы менән янған, бының хужалыҡ өсөн файҙаһыҙ, халыҡ өсөн өҫтәмә уңайһыҙлыҡтар тыуҙырыусы нәмә икәнлеген һис бер иҫәпкә алмай, алдына ҡуйған маҡсатына ынтылыусы Абдуллин һәм колхоздың яңы партком секретары Монасыпов тора.

Әле ике колхозды бергә ҡушыу йыйылышынан һуң уҡ, Абдуллин райкомдың беренсе секретары Ҡасимовға дошманын еңеп ҡайтыусы булып рапорт бирә. Ә Ҡасимовтың үҙенә ниәтен тормошҡа ашырыуҙа тәүәкәллек етешмәй. Матур һүҙ һөйләп, үҙен күрһәтә белеүҙән башлаған, тик йәшерәк саҡта ахмаҡлыҡ ҡылып, фашланыу ҡурҡынысынан элекке дуҫына ҡол булып, хыялдарынан баш тартып торорға мәжбүр булған Монасыпов аҫтыртын ғына авантюраға әҙерләнә. Колхозсылар фекерен, халыҡ мәнфәғәтен иҫәпкә алыу уның иҫенә лә инеп сыҡмай, выждан ғазаплауҙарынан да азат был кеше.

Тартыштың икенсе яғында торған Өйәңке халҡы был көрәштә Рәшит Ибраһимовҡа таяна. Ошоға тиклем колхоз председателе Искәндәров, ҡулға-ҡул тотоношоп, ярҙамлашып эшләһәләр, әле иһә улар араһында беренсе булыу өсөн көрәш бара. Был көрәштә Рәшит ҡайһылыр бер яҡты һайларға, ныҡлы үҙ ҡарашын булдырырға, выжданы ҡушыуынса эшләргә тейеш.

Йәш, тәжрибәһеҙ егеткә Монасыповтың мәкерлегенә ҡаршы сығыу, газетаға мәҡәлә яҙыу тәүҙә дуҫлыҡҡа хыянат итеү һымағыраҡ ҡабул ителә. Өс йыл һуҙымындағы ваҡиғаларҙы ҡабаттан күҙаллап, баһалап, икеләнеүҙәр, көсөргәнешле рухи һыныҫыш кисергәндән һуң, Рәшит тормоштоң төп принциптары өсөн көрәштә ҡаты булырға кәрәк тигән ныҡлы фекергә килә.

Романда “Ташҡаҙан” йырының Рәшит күңелендә ваҡыт-ваҡыт яңырып китеүе, үҙен ата-бабалар һөйәге күмелгән сал ҡылғанлы дала – сал тарих буйлап атта сабып барғандай хис итеүе, ярһыу тойғоларға бирелеүе, шиғри күңелле егеттең ошо төйәккә тамырҙары менән берегеүенә, уның ҡурсыусыһы булыуына ишаралаусы художестволы деталь ул.

Әҙәбиәт исемлеге:

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 7 томда. Т. 6. – Өфө; Китап, 1996. – 710 бит.

© Хәмитова Л.Ю., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Шакирова А.А.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

МӨХӘМӘТСӘЛИМ ӨМӨТБАЕВ ИЖАДЫНЫҢ ЭНЦИКЛОПЕДИК ХАРАКТЕРЫ

Әҙип һәм ғалим Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев башҡорт әҙәбиәте тарихында үҙенең күп яҡлы талант эйәһе булыуы менән ҙур роль уйнай.

Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенең бөтә ижады менән ул туған халҡын ағартыу эшенә хеҙмәт итергә тырышҡан, төп иғтибарын мәғариф, әхлаҡ, этика мәсьәләләренә йүнәлткән, уларҙа ижтимағи прогресты тәьмин итеүсе, туған халҡын бәхеткә илтеүсе иң төп көстәрҙең береһен күргән, шуға үҙ ижады менән ысын күңелдән хеҙмәт иткән. Уларҙа халыҡ яҙмышы, тәбиғәт һәм кеше, уның йәмғиәттәге урыны, йәшәүҙең мәғәнәһе, донъяның фанилығы тураһында уйланыу ҙа, кешене кеше иткән намыҫлылыҡ, ғәҙеллек, тоғролоҡ, эскерһеҙлек, итәғәтлелек, шәфҡәтлелек һәм башҡа шундай юғары әхлаҡ сифаттарын данлау ҙа, уларҙың киреһен тәнҡитләү ҙә, ғилем һәм тәрбиә хаҡында фекер йөрөтөү ҙә хатта ислам ҡанундарына тартылы, дәүләтле кешеләрҙең халыҡ араһында именлек һәм ғәҙеллек урынлаштырыусы изге йәндәр булыуына ышаныу, ярлыларға ярҙам ҡулдарын һуҙасаҡтарына өмөт итеү мотивтары бар.

М. Өмөтбаев күпселек шиғырҙарында ул мәғрифәтсе кеше, йәки М. Ломоносов поэзияһындағыса ғалим-шағир булып ҡаа. «Йәдкәр» китабына ингән 38 шиғырының күбеһе тарихтан, этнографиянан, көнкүрештән кешеләргә белем, мәғлүмәттәр биреү маҡсаты, тәбиғәтте, тыуған-үҫкән ерҙе аңлау һәм ҡәҙерләү, туған халҡының тарихы һәм яҙмышы хаҡында уйланыуҙар менән һуғарылған [1, 18].

М. Өмөтбаев ижадының ҙур бер өлөшөн поэтик әҫәрҙәр тәшкил итә. Мәғрифәтселек идеялары М. Өмөтбаев шиғырҙарында сағылыш таба. Үҙенең бөтә ижады менән ул туған халҡын ағартыу эшенә хеҙмәт итергә тырышҡан, төп иғтибарын мәғариф, әхлаҡ, этика мәсьәләләренә йүнәлткән, туған халҡын бәхеткә илтеүсе иң төп көстәрҙең береһе итеп күргән, шуға үҙ ижады менән ысын күңелдән хеҙмәт итә. Әҙәбиәткә ул тәрбиә, аң-белем биреү һәм әхлаҡ дәреслеге итеберәк ҡарай. Һөҙөмтәлә уның шиғырҙарында, бигерәктә «Нәсихәт», «Бәйет», «Васыят вәнәсихәт» кеүек ижад юлының тәүге этабында тыуған әҫәрҙәрендә өгөт-нәсихәтселек шаҡтай урын ала. Улар башлыса ысынбарлыҡҡа,

башҡорт халҡының тормош тәжрибәһенә, уның ауыҙ-тел ижадынан килгән күркәм традицияларға нигеҙләнә. Уларҙа халыҡ яҙмышы, тәбиғәт һәм кеше, уның йәмғиәттәге урыны, йәшәүҙең мәғәнәһе, донъяның фанилығы тураһында уйланыуҙа, кешене кеше иткән намыҫлылыҡ, ғәҙеллек, тоғролоҡ, эскерһеҙлек, итәғәтлелек, шәфҡәтлелек һәм башҡа шундай юғары әхлаҡ сифаттарын данлауҙа, уларҙың киреһен тәнҡитләүҙә, ғилем һәм тәрбиә хаҡында фекер йөрөтөүҙә, хатта исламҡанундарына тартылыу, батшаның бар кешеләрҙең халыҡ араһында именлек һәм ғәҙеллек урынлаштырыусы изге йәндәр булыуына ышаныу, ярлыларға ярҙам ҡулдарын һуҙасаҡтарына өмөт итеү, дини тәртип-йолаларҙы теүәл үтәргә саҡырыуҙары ла бар. Былар бер-береһе менән ярайһыуҡ ҡатмарлы бәйләнештә булып, донъяға ҡарашында шаҡтай ҡаршылыҡ барлығын иҫбат итә. Шағир, бер яҡтан, кешенең йәмғиәттәге урыны, дәрәжәһе байлыҡ менән түгел, башҡарға эше, белем һәм әхлаҡ кимәле менән билдәләнергә тейеш тип, тәнҡитләһә, туған халҡын ҡараңғы донъяһынан сығырға, ғилемгә эйә булырға, үҙендә юғары әхлаҡ сифаттары тәрбиәләргә өндәһә, икенсе яҡтан, ошо маҡсаттарҙа, халыҡтың инанған нәмәһе булараҡ, динде файҙаланырға, уны фән һәм реаль тормош менән яраштырға тырыша. Ләкин М. Өмөтбаев шиғриәтенең асылын мәғрифәтселек ҡараштары, тыуған еренә һәм халҡына тәрән мөхәббәт, теләктәшлек, уны йәберләүсе, ҡыйырһытыусыларға ҡаршы нәфрәт хистәре менән һуғарылған әҫәрҙәре билдәләй. Улрҙа халыҡ һәм уның реаль тормошо, үткәне һәм бөгөнгөһө үҙенең сағылышын таба. Уларҙың геройы – туған халҡының яҙмышы тураһында ҡайғыртып, уның шатлығын да, ҡайғыһын да уртаҡлашып йәшәгән тәрән уйлы, ҡайнар хисле граждан, тыуған ерен ғәзиз йәнеләй күргән ялҡынлы патриот. М. Өмөтбаев беренсе сиратта үҙен Башҡортостандың һәм башҡорт халҡының тарихы, материаль һәм рухи мәҙәниәте тураһында һөйләүсе шағир-тарихсы, шағир-этнограф булараҡ таныта. Был тәбиғи, сөнки әҙәбиәткә ғилем сығанағы итеп ҡараған мәғрифәтсе өсөн иң мөһиме - шиғыр юлдары аша кешегә белем, мәғлүмәт биреү. Шуға ла уның бер төркөм шиғырҙарында («Үткән ғүмер – ҡалған хәтер», «Урмансы», «Үткән заманда башҡорт ҡыҙҙарының оҙатылыуы» һ.б.) башҡорт халҡының тарихындағы мөһим хәл-ваҡиғаларҙы, мәҙәни тормошондағы күренештәрҙе теҙеп һөйләп сығыу өҫтөнлөк итә. Ул башҡорт халҡының килеп сығыуы, этник составы, биләгән ерҙәре һәм һыуҙары, шөғөлләнгән кәсеп-һөнәрҙәре хаҡында һөйләй, рухи мәҙәниәт өлкәһендәге әлегәсә әҙ өйрәнелгән бик ҡатмарлы этнографик күренеште – башҡорттарҙың туй йолаһын

ентекләп тасуирлай. Ә инде «Үткән ғүмер – ҡалған хәтер» тигән шиғырында һүҙҙе туған халҡының үҙ ирке менән Мәскәү дәүләтенә ҡушылыуы көнөнән алып ул үҙе йәшәгән осорға тиклемге тарихи үткәне хаҡында йөрөтә.

Йөкмәткеһе менән башҡа шиғырҙарҙан шаҡтай айырылып торған «Ҡайыш илә Йүкә» әҫәре менән М. Өмөтбаев үҙен башҡорт әҙәбиәтендә мәҫәл традицияһын нығытыусы итеп таныта. Мәҫәл бер-береһенә ҡаршы ике көстөң – Ҡайыш менән Йүкәнең тәбиғәтен, уларға хас сифаттарҙы һүрәтләүҙән башлана:

Ҡайыш тәрбиәлелер һәм аҙ эшләй,
Уның өҫтөн биҙәйҙәр алтын-көмөшкә.
Ҡайыш майлы өсөн хөрмәт табалыр,
Йүкәлә ул юҡ өсөн, кәм баһалыр.
Мәғәр һыу Йүкәнең төҫөн асалыр,
Һыу илә күп ергә дәүләт сәсәлер.

Ҡайыш ошо рәүешле һыуға сумып, төҫөн аса-аса йөрөгән Йүкәнән ныҡ көнләшә. Берҙән-бер көндө ул Йүкә илен бөтөнләй туҙҙырып ташларға иҫәп тотоп, уның еренә килә. Улар араһында ҡыҙыу алыш башлана. Хәле бөтә башланымы, Йүкә төшә һалып һыу эсә, уның шунда уҡ ҡеүәте артып китә. Йүкәнән күрмәксе, Ҡайыш та һыуға сумып ала һәм һәләкәткә юлыға: ул бөтөнләй ебеп төшә, унда «май әҫәре ҡалмай».

М. Өмөтбаевтың тәржемәләре менән танышыу барышында ошондай мөһим бер күренеш күҙгә салына: әҙиптең тәржемә өлкәһендәге эшмәкәрлеге уның туған халҡының ауыҙ-тел ижады, тарихы менән ҡыҙыҡһыныуының көсәйгән бер осорона тура килә. Әҙиптең матур әҙәбиәттән яһаған тәржемәләренең бөтәһе лә тип әйтерлек фольклор өлгөләренә йә иһә уларға нигеҙләнеп яҙылған әҫәрҙәргә ҡарай. Билдәле, фольклор әҫәрҙәрен йәки уларға яҡын торған яҙма әҙәбиәт әҫәрҙәрен тәржемә итеү үҙе үк М. Өмөтбаевтан тәржемәләрҙе халыҡҡа аңлайышлы телдә башҡарыуын талап итә һәм ул шулай эшләй ҙә. Ә был инде яҙма әҙәбиәт телен халыҡтың һөйләү теленә, матур әҙәбиәтте ауы-тел әҙәбиәтенә яҡынайтыу йүнәлешендә алға бер аҙым яһау тигән һүҙ. А. Пушкиндың «Романс», «Наслаждение», «Делибаш» һәм «Бахчисарайский фонтан» әҫәрҙәрен киң халыҡ массаһына аңлайышлы татар теленә тәржемә итеүе уның тәржемә өлкәһендә яһай иң ҡыйыу һәм, әйтергә кәрәк, иң уңышлы аҙымы була [2, 45].

Башҡорт фольклоры йөҙөндә туған халҡы тарихының ташҡа баҫылмаған китабын күреп, уны үҙ хеҙмәттәрендә мөмкин тиклем

файҙаланырға тырышыу менән бер рәттән, М. Өмөтбаев башҡорт һәм татар ғалим-яҙыусыларның яҙмаларын, шәжәрәләрҙе,тәуарихтарҙы өйрәнеүгә лә ҙур иғтибар бүлә. Ғалим шәжәрәләрҙе мөһим тарихи сығанаҡ тип иҫәпләй. Асылда ул шул осорҙа шәжәрәне тәүгеләрҙән булып фәнни өйрәнеү объектына әүерелдерә. Кесе һәм кәлсер табын ырыуҙары, әйле ҡәбиләһе тайпаһының баҫма рәүештә донъя күреүҙәре һәм ғилми әйләнешкә кереүҙәре менән беҙ уға бурыслы. М. Өмөтбаев мәғрифәтсе шағир, публицист һәм тәржемәсе булараҡ ҡына түгел, мәғрифәтсе ғалим булараҡ та тәрән эҙ ҡалдыра. Уның күп яҡлы ғилми мираҫының ҙур өлөшөн башҡорт халҡының тарихына һәм этнографияһына арналған хеҙмәттәр тәшкил итә. Уларҙың барлығҡа килеүе урыҫ мәҙәниәтенең һәм фәненең, ғалим-яҙыусыларының М. Өмөтбаевҡа яһаған йоғонтоһо мөһим роль уйнай.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Вильданов А.Х., Кунафин Г.С. Башкирские просветители-демократы XIX века: Издательство “Наука”: М., 1961. – 128 с.

2. Йәдкәр:[шиғырҙар, публицистик, тарихи этнографик яҙмалар, тәржемәләр, халыҡ ижады өлгөләре] / Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев. – Өфө: Китап, 2011. – 344 бит.

© Шакирова А..А., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 070

Шакирова А.Р.,
студентка УУНиТ
Гареева Г.Н.,
док-р филол. наук, проф.

РОЛЬ МЕДИАКОММУНИКАЦИИ В ЖУРНАЛИСТИКЕ

Журналистика и медиакоммуникации это две тесно связанные между собой области.

Медиакоммуникации изучают коммуникацию с помощью различных медиа-платформ, влияние медиа на общество. С развитием цифровых технологий, появилось больше возможности для передачи информации, например социальные сети. Социальные сети это очень динамичная сфера, которая открывает новые возможности для передачи информации. Вместе с развитием социальных сетей стало возрастать количество «фейковых» новостей. Медиакоммуникации в связи с этим благоприятствуют продвижению медиа-грамотности в обществе.

Медиакоммуникации затрагивают множество сфер, таких как традиционная журналистика, реклама, аналитика, менеджмент и другие.

Журналистика – это деятельность по сбору, обработке и распространению актуальной информации, с помощью печатных изданий, радио, телевидения и других средств массовой коммуникации. Главная задача журналистики состоит в оперативном информировании общественности актуальной информацией. Для получения информации журналисты используют способ анализа документов, наблюдения, интервью и другие. Журналисты не просто освещают события, которые произошли на данное время, они могут провести работу по сопоставлению фактов из прошлого и настоящего. Журналистика лучше всего может предоставить обществу данную информацию. Любой специалист ищет сенсацию, но как правило, они качественно проверяют полученную информацию, чтобы распространять только достоверные, надёжные новости. С другой стороны журналист не является безусловно достоверным источником информации, поскольку он использует разного рода источники, в которых могут быть не самые конкретные и истинные данные. Или же журналисты могут выражать в материале необъективные, а субъективные мнения. Так же некоторые, следуют редакционной цензуре и используют только удобную для них информацию. Журналист должен разбираться в теории и практике средств массовой информации.

Журналистика и медиакоммуникации тесно связаны друг с другом. Журналистика является частью медиакоммуникаций, так как журналисты используют различные медиа-платформы для распространения информации. В то же время, медиакоммуникации изучают процессы и воздействие медиа на общество, что присутствует и в работе журналистов.

На сегодняшний день в сети интернет есть достаточно много источников данных, информации и способов их обработки.Задача журналистов и медиакоммуникаций изготовить хороший журналистский материал, который будет удобен для подачи обществу.

Журналистика и медиакоммуникации имеют большое значение в современном информационном обществе. Они дают возможность обществу получать информацию о происходящих событиях, анализировать её, сформулировать свою точку зрения и выразиться.

© Шакирова А.Р., Гареева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Шәйҙуллина А.М.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Ғәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ЗӘЙНӘБ БИИШЕВА ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ ИДЕЯ-ТЕМАТИК ЙӨКМӘТКЕһЕ

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның халыҡтың бай ижади традицияларына таянып яҙылған үҙенсәлекле стилле, юғары поэтикалы теҙмә һәм сәсмә, сәхнә әҫәрҙәре өсөн лирик-психологик ағым, күтәренке романтик яңғыраш, киң һәм талғын эпик хикәйәләү хас.

Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Биишева 1908 йылдың 2 ғинуарында элекке Ырымбур губернаһы Орск өйәҙе Бөрйән-Ҡыпсаҡ волосы (хәҙерге Күгәрсен районы) Туйымбәт ауылында хәлфә ғаиләһендә тыуған. Әсәһе үлеп, етем ҡала. Бала сағы Исем ауылында үтә, шунда мәктәптә уҡый. Атаһы үлгәс, Ибрай ауыл мәктәбендә уҡый. 1926-1929 йылдарҙа Ырымбур педагогия техникумында белем ала. 1929 йылдан Баймаҡ районының Билал мәктәбендә уҡыта, Башҡортостан китап нәшриәтендә эшләй. 1934-1938 йылдарҙа Мәсетле, Салауат райондарында газета редакцияларында эшләй. 1941-1946 йылдарҙа Башҡортостан дәүләт радиоһында, 1947-1951 йылдарҙа Башҡортостан китап нәшриәтендә бүлек мөдире була.

З. Биишеваның “Гөрләүектәр араһында” тигән тәүге хикәйәһе 1930 йылда “Октябрь” журналында, 1942 йылда “Партизан малай” повесы баҫыла. Илленсе-алтмышынсы йылдарҙа баҫылып сыҡҡан “Ярҙамсы”, “Башаҡ”, “Ҡояш нимә тине”, “Өмөт бөрөләре”, “Йәшел йүгән” һ.б. хикәйәләрендә балаларҙың уҡыуға, хеҙмәткә, дуҫлыҡҡа мөнәсәбәттәре сағылды. “Дуҫ булайыҡ” (1954) повесында төрлө милләт балаларының эскерһеҙ дуҫлыҡтары, Ҡыҙрас һәм Юлдаш исемле үҫмерҙәрҙең характерҙары, психологияһы мауыҡтырғыс ваҡиғалар эсендә һүрәтләнә.

Илленсе-алтмышынсы йылдарҙағы шиғриәтендә З. Биишева Тыуған ил, тыуған ер, Ватан, кеше ғүмере, уның хеҙмәте, бәхете хаҡында уйланды, мөхәббәт көсө, тәбиғәт гүзәллеге, йәшлек дәрте тураһында йырланы. Йыш ҡына антитеза алымы аша шағирә “Йәшәр инем”, “Яҙға оҡшатам мин”, “Йырлап алайым әле”, “Ышанмайым көҙгә”, “Тағы ла яҙ” кеүек шиғырҙарында кәмһетелгән шәхестең ауыр үткәне менән бөгөнгөтормошон ҡапма-ҡаршы ҡуя, кеше ғүмерендәге үҙгәреш, боролош мәлен сағылдыра.

Гражданлыҡ лирикаһына ҡараған “Ҡуш ҡарағай”, “Теләк”, “Бәхет өләшәм”, “Йыһандарға ашҡан”, “Кещесә” һ.б. шиғырҙарында З. Биишева Тыуған илде, халыҡтар дуҫлығын данланы, кеше бәхетенең, йәшәү мәғәнәһенең халыҡҡа хеҙмәт итеүҙә икәнлеген раҫланы, кешенең кешелекле, ябай, ихлас күңелен яҡын күрҙе.

Һикһәненсе-туҡһанынсы йылдарҙа яҙылған “Салауат монологы”, “Имән” поэмаларында шағирә милләттең тарихи яҙмышы, уның уҙғаны һәм киләсәге мәсьәләләре тураһында борсолоп уйланды, шәхестең халыҡҡа, тыуған еренә тоғролоғоноң, кешенең рухи нығлығығының сығанаҡтары барланды, халыҡтың киләсәге өмөтлө булырына тәрән ышаныс әҫәрҙәрҙе оптимистик яңғырашлы итте..

З. Биишеваның берәр строфанан ғына торған, афоризмға ынтылған “Йәшәү бәхете”, “Еңел түгел”, “Булмаһа” тигән парсаларына оло фәлсәфәүи йөкмәтке, тәрән фекер һалынған

З.Биишеваның ҙур күләмле эпик әҫәрендә – “Гөлъямал” (1949-1951) шиғри повесында тарихи үткәндәрҙән алып хәҙерге заманға тиклемге осор яҡтыртыла, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының үткән ауыр тормошо һәм Совет власы осорондағы яҡты яҙмышы Гөлъямал образында күрһәтелә. Әҫәрҙә революцияға тиклем Һарун байға көнө-төнө эшләп тә уңмаған, рәхәт күрмәгән Йомағолдоң ҡыҙы Гөльямалдың бөтә тормошо – социаль йәһәттән кәмһетелеүҙәре, рус уҡытыусыһы Анна Ивановна ярҙамында яҡтылыҡҡа ынтылыуы, Совет осоронда етәксе шәхес булып формалашыуы, хөкүмәт ағзаһы - Юғары Совет депутаты булып китеүе художестволы сағылыш таба. Гөлъямалдың хәтерҙә ҡалырлыҡ балалыҡ, йәшлек йылдары эпизодтарын тасуирлау аша, героиняның тормошон ил һәм халыҡ көнкүрешенә, тарихына бәйләп хикәйәләү юлы менән уның художестволы биографияһы тыуҙырыла.

“Гөлбәҙәр” драматик поэмаһында граждандар һуғышы осоронда ауылда барған синфи көрәш ваҡиғалары, ярлы крәҫтиәндәрҙең аңы үҫеүе, азатлыҡ өсөн көрәшкә күтәрелеүҙәре һүрәтләнә. Бай улы Ишбайҙың ялағай Аһылбай менән бергәләшеп, Зәйниҙе Себергә ебәреү маҡсаты менән, үҙҙәре урлаған атты намыҫлы шахтер егеткә япһарырға тырышыуҙары, Харрас байҙың, Гөлбәҙәр уға килергә риза булмағас, Тимербулат менән Гөлшатты эштән ҡыуып сығарыуы, Ишбайҙың аҡтар ғәскәре сафына китеүе һәм аҙаҡ килеп Гөлбәҙәрҙең, ата - әсәһен бөлгөнлөктән ҡотҡарыу өсөн, Харрас байға сығырға ризалыҡ биреүе сюжет көсөргәнешлеген тыуҙыра, ярлылар менән байҙар араһында мөнәсәбәттәр ҡырҡыулашыуын күрһәтә. Халыҡтың үҙенсәлекле

тормош-көнкүрешен күҙ алдына баҫтырыу маҡсатында авторҙың туй йолаларына мөрәжәғәт итеүе поэманың милли ерлеген көсәйтә.

З. Биишеваның конкрет тарихи осорҙа – Беренсе донъя һуғышының аҙағында барған синфи ҡаршылыҡтарҙы һүрәтләгән “Нәҙер” (1966) шиғри драмаһының үҙәгенә йола ҡорбаны Зәлифә яҙмышы ҡуйылған, ике донъя көрәше йөкмәткеле һәм асыҡ күрһәтелгән. “Серле ҡурай” әкиәт-пьесаһында яҡшылыҡ менән яуызлыҡ араһындағы мәңгелек көрәш һүрәтләнә, халыҡ һәм батыр, батырлыҡ һәм ике йөҙлөлөк, азатлыҡ һәм ҡоллоҡ кеүек ижтимағи-фәлсәфәүи проблемалар ҡуйыла. Пьесала дөйөмләштерелгән тыуған ил, халыҡ образы булып һынландырылған Ер-әсә халыҡ азатлығы өсөн көрәшкә сыҡҡан Кинйәбайға тыуған ерҙә үҫкән ҡырлы, моңло, серле ҡурай бүләк итә, уға рухи ныҡлыҡ, ышаныс өҫтәй, көс бирә.

З. Биишеваның алтмышынсы йылдарҙа яҙылған, кеше бәхете, кеше хеҙмәте һәм уның әҙәп-әхлағы, намыҫ сафлығы хаҡында кинәйәле уйланыуҙарға, фәлсәфәгә ҡоролған “Мөхәббәт һәм нәфрәт”, “Һөнәрсе һәм өйрәнсек” хикәйәттәре халыҡ ижады традицияларына киң таяна, контраст алымы аша яуызлыҡ һәм яҡшылыҡ көрәше ҡалҡыу сағылдырыла, образдарҙың ыңғай һәм кире һыҙаттары ҡабартып күрһәтелә. “Мөхәббәт һәм нәфрәт” хикәйәтендә Уралдан алыҫта, күк диңгеҙ буйында йәшәгән балыҡсылар ырыуынан булған Юламан ҡарт, уның улы Буранша, ейәнсәре Зөлхизә яҙмыштары драматик буяуҙарҙа һүрәтләнә. “Һөнәрсе һәм өйрәнсек” хикәйәтендә Кавказ яҡтарындағы тау халыҡтары тормошо тасуирлана, илаһи талант эйәһе һөнәрсенең көршәктәрен, ул үлгәс, үҙемдеке тип алдап һатып ятыусы өйрәнсектең нисек фаш ҡылыныуы хикәйәләнә.

Шулай итеп, З. Биишева ижадындағы “Мөхәббәт һәм нәфрәт”, “Нәҙер”, “Тылсымлы ҡурай” кеүек драматургия әҫәрҙәре халыҡ ижады поэтикаһына нигеҙләнеп, фольклор алымдарын киң файҙаланып яҙылғандар. Уларҙағы Ирәмәл батыр, Ай, Бөркөт, Сәсән, Ер әсә, Юха батша, Алабай, Һарыбай һ.б образ-характерҙар йыш ҡына киң дөйөмләштерелгән фәлсәфи символика төҫөн алып китә.

Шулай итеп, З.Биишева ижадындағы төп әҫәре “Яҡтыға” трилогияһын яҙыуға әҙәбиәттең өс төрөндә лә – поэзия, проза һәм драматургияла ырамлы эшләп, оло тәжрибә туплап, оҫталыҡ мәктәбе үтеп килде. Яҙыусы яңы дәүер тыуҙырған кешеләр яҙмышын нәҫер һәм хикәйәләрҙән – повестарға, шиғырҙарҙан – поэмаға, әкиәттәрҙән – хикәйәттәргә һәм фәлсәфәүи драмаға табан үҫә барған төрлө жанрҙарҙа сағылдырҙы, кешеләр араһындағы ҡатмарлы мөнәсәбәттәрҙе

психологик тәрәнлектә һүрәтләү оҫталығына килде, статик образдарҙан ҙур фәлсәфәүи дөйөмләштерҙәргәсә күтәрелде.

Әҙәбиәт исемлеге:

Башҡорт әҙәбиәте тарихы. 7 томда. Т. 5.. – Өфө: Китап, 1993. – 596 бит.

© Шәйҙуллина А.М., Гәрәева Г.Н., 2023

821.512.141

Шәрәфетдинова Г.А.,
3 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фән. докт., проф.,

“ҠОТАҘҒУ БЕЛЕК” ӘҪӘРЕНДӘ ӘҘӘП-ӘХЛАҠ, ДИНИ ПРОБЛЕМАЛАР САҒЫЛЫШЫ

Төркн халыҡтарының беҙҙең көндәргә тиклем һаҡланып ҡалған иң боронғо уртаҡ поэтик ҡомартҡыларының береһе Йософ Баласағунлының “Ҡотаҙғу белек” (“Ҡот килтереүсе белем”) (1069-1070) әҫәре. Ул 13 меңгә яҡын шиғри юлдан, 73 бүлектән торған шаҡтай ҙур күләмле әҫәр.

X быуатта Икенсе төркн ҡағанаты тарҡалып, үҙ аллы ваҡ йәмғиәттәргә бүленгәс, Йософ Баласағунлы йәшәгән дәүерҙә дәүләт ҡоролошо һәм шуға бәйле төп социаль-сәйәси хәлдәр көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһенә әйләнә. «Ҡотазғу белек»тә уларҙың иң мөһимдәре ҡуҙғатыла. Уның авторы өсөн шулар араһынан Ғәҙеллек, Именлек, Аҡыл һәм Түҙемлек һанала. Ошо төшөнсәләрҙе үҙҙәрендә кәүҙәләндергән дүрт геройҙың бер-береһенә һорауҙары, яуаптары, әңгәмәләшеүҙәре рәүешендә ҡоролған был әҫәр. Көнтуғды – ил башлығы, дәүләт менән идара итеүҙә ғәҙеллек билгеһе. Айтулды – Көнтуғдының баш вәзире, уңышлыҡ һәм далан килтереү билгеһе. Уғдулмыш Айтулдының улы, аҡыл кәүҙәләнеше. Удғурмыш Айтулдының кесе туғаны, тотороҡлолоҡ, түҙемлек, булғаны менән ҡәнәғәтлек алыу билгеһе.

XI быуаттағы фәлсәфә ислам менән тығыҙ бәйләнештә була, шуға күрә Йософ Баласағунлы, дәүерҙең мәғрифәтсеһе булараҡ, үҙенең һәр эшендә лә дини тематиканы ҡуллана. Ул Аллаға ышаныу һәм намыҫлылыҡ ике донъяла ла бәхеткә юл күрһәтеүселәр, ә яуыз булған уй-ниәттәр һәм әҙәпһеҙлек кешенең йөрәген ҡарайталар, теге донъяла ҡаты язалыҡҡа килтерәләр тип иҫәпләй.

Йософ Баласағунлының дини-философик ҡарашы Аллаға ышаныуға нигеҙләнә. Уныңса, Алланың асылын аңлап бөтөрөрлөк түгел. Аллаһы Тәғәләнең башы ла, аҙағы ла юҡ, Ул мәңгелек, Уға бер кемдең дә кәрәге юҡ, ә бөтә тере йәндең дә Унда мохтажы бик ҙур. Хоҙай бер, Уға тиңдәштәр юҡ. Барлыҡ тере һәм тере булмаған – Уның яралмыһы.

Поэмала үлемдән һуңғы ғүмер Алланы аңлауҙа ҙур роль уйнай. Һәр кеше йәшәгән ваҡыттағы туплаған эштәрең, белемдәрең теге донъяла кире аласаҡ. Иман һәм итәғәттән башланып киткән игелекле эштәрҙең муллыҡлығы һуңғы сиктә Алланың хуплауына, ожмахта бирелгән урынға алып килә. Иман һәм итәғәттең сығанағы булып суфыйсылыҡ, йәғни – тәриҡәт (ислам аскетлығының юлы) һәм ғибәҙәт (исламда Аллаға ғибәҙәт ҡылыу ышаныу) тора.

Шунлыҡтан Удғурмыш поэмала төп геройҙарҙың береһе булып тора. Ул яҡшы кеше генә түгел, ә аҡыл эйәһе лә, йәмғиәт кешеләре өсөн үрнәк тә. Удғурмыш яңғыҙлыҡта йәшәй, ул шәхестең кешелек донъяһына булған файҙаһы – аҡыллы кәңәш түгел, ә йәмғиәткә зыян килтермәҫкә һәм береһендә үсектермәҫкә тип иҫәпләй.

Мәңгелек тормошҡа юл – ул яңғыҙлыҡта, социумдан айырым йәшәүҙә, үҙеңде Аллаға табыныуға арнау тип һанай Удғурмыш. Бындай сценарий менән автор уҡыусыларҙы суфыйсылыҡҡа һәм тәриҡәткә өндәй тип уйларға мөмкин.

Йософ Баласағунлының Удғурмыш исемле геройына килгәндә ул ситләшкәнлекте кәүҙәләндерә тип әйтергә кәрәк. Удғурмыш – дәрүиш, аскет, шулай ҙа ул шәйех (суфыйсылар берҙәмлеге башлығы), уның мөрите (уҡыусыһы) бар. Был герой уҡыусы кешене үҙ тормошон юғары баһаларға, дөрөҫ уйлап төҙөргә мәжбүр итә.

Удғурмыш береһенә лә табынырға теләмәй. Ул Көнтуғдыға тик кәрәкле кәңәштәр генә бирергә килергә риза.

Удғурмыш суфый вәғәзе үҙ эсенә түбәндәге төп һығымталарҙы ала: был илдәге бөтә иғуаларҙан баш тартыу, кешеләр араһынан китеү, нәфселекте еңеп сығыу һәм үҙ тәнеңде баҫалҡы итеү. Был суфыйсыларҙың “нәфселекте”, дөрөҫөрәге күңелдәге бөтә кире сифаттарҙы юҡ итеү тәғлимәтенә тап килә. Удғурмыш шулай уҡ өйләнешеүгә һәм балаларға ҡаршы, был да уның Урта Азия суфыйсылығына ҡарауын раҫлай.

Уғдулмыштың нәсихәттәре ике төрлө характерлана. Бер яҡтан ул кешеләргә табыныуға гуманистик өгөт, яҡшы эштәр башҡарырға

саҡырыу. Икенсе яҡтан ул тулыһынса донъянан һәм кешеләргә табыныуҙан ваз кисеү.

Поэма аҙағында Айтулды һәм Удғурмыш үләләр. Был осраҡлы түгел. Бәхет һәм Ситләшкәнлелек символдары үлә, ә Көнтуғды һәм Уғдулмыш – Ғәҙеллек һәм Аҡыллылыҡ образдары тере ҡалалар. Ул, һис шикһеҙ, Йософ Баласағунлы фекере менән бәйле: һуңғы ике сифатты шағир мөһимерәк тип һанай, шуға күрә улар мәңгелек, ә бәхет һәм ситләшкәнлелекте кешенең булдыҡһыҙлы һыҙатына индерә. Удғурмыштың үлеүе – ул уның тормош принциптарының үлеүе, идара итеүсе Көндуғды алдында юҡҡа сығыуы.

Үҙенең геройҙары аша Йософ Баласағунлы игелекле эштәр башҡармағаны, ғибәҙәт ҡылмағаны өсөн үкенесен белдерә һәм башҡаларҙы ваҡытында эш итергә саҡыра.

Йософ Баласағунлының дини-философик ҡарашы дини-сөнни уйланыуҙарға нигеҙләнә. Был “Ҡотаҙғу белек” поэмаһында, асылда, Алланың барлығы тураһында фекерләүен, Уның бер һәм билдәле булыуын, Алланың кеше менән бәйләнешен, ҡәбер тормошон һәм ғөмүмән тормош этаптарын һүрәтләүҙә асыҡ күренә.

Шул уҡ ваҡытта шағир ислам ҡанундарына ҡаршы ҡуйылған исламға тиклемге һәм уға ҡағылмаған мәҙәниәт элементтарын һанға һуҡмай. Йософ Баласағунлы барыһы ла Алланан тора, сөнки ул бөтә нәмәне лә алдан белә тигәнгә ышана.

Үҙенең динен алмаштырған йәмғиәт еңел генә быуатлыҡ мәҙәниәтенән баш тарта алмай. Шул саҡта улар яңы дингә таянып йә элекке мәҙәниәтте төҙөйҙәр, йә уны яңы дини тәғлимәт элементтарына әүерелдерәләр. Үҙ ваҡытында Пәйғәмбәр сәхәбәләре лә тулыһынса мәжүсилек мәҙәниәте йоғонтоһонан баш тарта алманылар. “Ҡотағзу белек” поэмаһында исламға тиклем осор элементтары бар. Ҡайһы бер эҙләнеүселәр белдереүенсә, шағир шул осор һәм хәҙерге мәҙәниәттәренә мөрәжәғәт итеп, шәхескә, йәмғиәткә һәм дәүләткә аң-зиһендә төпләнгән идеаль йәшәү рәүешен һәм тормош юлын тәҡдим иткән. Шул уҡ ваҡытта кешеләр сөнни ислам позицияһында тороп ҡала.

Әҫәрҙә төрлө йәмғиәт тормошо бәхетенең нигеҙен тәшкил иткән ышаныу, ғәҙеллек, шәфҡәтлелек, хикмәт, намыҫлылыҡ, кешелеклек һәм башҡа шәхес сифаттары күҙ алдына баҫтырыла. Йософ Баласағунлы буйынса был һыҙаттар бәрәкәттең асылы булып торалар һәм улар үҙгәрмәүсән дә, ваҡыт арауығына ла бәйле түгел.

Әлбиттә, Йософ Баласағунлының әхлаҡи ҡараштары араһында иң беренсе урынды әхлаҡи тәрбиә проблемалары тураһында уйланыуҙар

алған. Автор айырыуса иғтибарын йәштәргә тәрбиә биреүгә, уларҙы әхлаҡи яҡтан формалаштырыуға йүнәлтә. Шағир, аҡыл эйәһе фекеренсә, әхлаҡи камиллыҡ кешенең йәшәү рәүешенең нигеҙе булып тора. Тәрбиә һәм белем биреүҙә кешенең эске һәм тышҡы донъяһы тиңдәш, уның физик һәм рухи матурлығы берҙәм булырға тейеш.

Поэмала Йософ Баласағунлының педагогик ҡараштары киң генә сағылыш таба. Ул балаларҙы тәрбиәләү мәсьәләһенә тотош бүлектәр арнай, ғаиләлә ир баланы һәм ҡыҙ балаларҙы тәрбиәләү нескәлектәренә айырым туҡтала. Балаларҙы тәрбиәләү проблемаһына ҡарата авторҙың позицияһы түбәндәгесә: баланың рухи һәм физик йәһәттән сәләмәт булып үҫеүе, беренсе сиратта, ғаиләлә алған тәрбиәнән тора. Шуға күрә лә ата-әсә үҙе уларға төрлө йәһәттән өлгө булырға тейеш. Автор ата-әсәнең тәрбиә эштәрендә талапсан булыуы кәрәклеген аңлата. Әҙип фекеренсә, тәрбиәһеҙлек – ул балаларҙың үҙҙәре өсөн дә, ата-әсә өсөн дә оло бәхетһеҙлек.

Шулай итеп, бөйөк шағир, философ, шул дәүерҙең мәғрифәтсеһе булараҡ, үҙенең һәр эшендә лә дини, әҙәп-әхлаҡ тематикаларын асып килә. Ул Аллаға ышаныу һәм намыҫлылыҡ бәхеткә юл күрһәтеүселәр, ә яуыз булған уй-ниәттәр һәм әҙәпһеҙлек кешенең йөрәген ҡарайтыусылар, теге донъяла ҡаты язалыҡҡа килтереүселәр, тип иҫәпләй. Йософ Баласағунлының әхлаҡи ҡараштары араһында тәү сиратта әхлаҡи тәрбиә проблемалары тураһында уйланыуҙары иғтибарға лайыҡ.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Башҡорт әҙәбиәте тарихы: 7 томда. Т. 1. Урта быуаттар осоро.– Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 606 бит.

2. Башҡорт әҙәбиәте антологияһы. 2 томда. Т. 1. – Өфө: Китап, 1999. – 13–19-сы биттәр.

3. Хөсәйенов Ғ.Б. Быуаттар тауышы. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1984.

© Шарафутдинова Г.А., Гареева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Әбделмәнова Р.Р.,
5 курс,БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ӘҘӘБИӘТ ДӘРЕСТӘРЕНӘ ЗАМАНСА ҠАРАШ

Заманса дәрес – традицион уҡытыу алымдарын һәм заманса педагогик технологияларҙы берләштереү ул. Хәҙерге дәрес уҡыусыларҙың ижади һәләттәрен, ғәҙәти булмаған фекерләүен үҫтереүгә булышлыҡ итергә тейеш. Заманса дәрестә уҡыусыны интеллектуаль яҡтан үҫтереү өсөн шарттар, шулай уҡ хеҙмәттәшлеккә һәм ижадилыҡҡа ҙур урын бирелеүе мөһим. Айырыуса был әҙәбиәт дәрестәренә хас булырға тейеш тигән фекерҙәбеҙ.

Ниндәй һуң ул заманса әҙәбиәт дәресе? Һис шикһеҙ, мәғлүмәти-коммуникацион технологияларҙы файҙаланыу дәрескә бирелгән ваҡытты экономиялай, дәрестә яңы йөкмәткене менән тулыландыра, креативлыҡты үҫтерә, уҡыусыларҙың ҡыҙыҡһыныусанлығын арттыра, уларҙың мәғлүмәтлелеген формалаштыра, компьютер программалары менән рациональ эшләү күнекмәләрен, заман менән бергә атлау мөмкинлеген бирә.

Заманса педагогик технологиялар уҡыусыларҙың мәғлүмәтте әүҙем ҡабул итеүгә һәләтлелеген үҫтереүгә, мәсьәләне төрлө күҙлектән ҡарарға әҙер булыуына, үҙ фекерҙәре барышын күҙәтеп бара белеүгә һәм логик һығымталар, алған белемдәрен һәм төрлө осраҡтарҙа алған күнекмәләрен ҡуллана белеүгә йүнәлтелгән. Уҡыу һәм яҙыу аша тәнҡитле фекерләүҙе үҫтереү, мәктәп предметтарын интеграциялау, дебат, модулле, проект технологиялары кеүек технологиялар, әлбиттә, дөйөм белем биреү һәм тәрбиәүи бурысты күҙ уңында тота: шәхестең заманса, даими үҙгәреүсән донъяла ориентирлашырға һәләтле компетентлығын формалаштырыу, уҡыусыларҙың тикшеренеү оҫталыҡтарын формалаштырыу сараһы булып сығыш яһай ала.

Дәрестең методик формаһын һайлағанда бөтә хәл итеүҙе талап иткән белем биреү бурыстары комплексына таяныу зарур. Әҙәбиәт дәрестәрен шартлы рәүештә дүрт блокҡа бүлергә мөмкин: 1) позицион дәрестәр; 2) тикшеренеү дәрестәре; 3) имитация дәрестәре; 4) аналитик дәрестәр.

Уҡыусыларҙың ижади һәләтен асыуға һәр эш төрө, дәрес йөкмәткеһе, дәрес төрҙәре ярҙам итә ала. Сөнки дәрес – баланың һәләтен асыусы, кешелек сифаттарын формалаштырыусы, рухи үҫешенә

йүнәлеш биреүсе аң-белем кимәлен үҫтереүсе тәрбиә берәмеге. Дәрес формалары уҡыусыларҙа ҙур аудитория менән аралашырға, идара итергә, дипломатик бәйләнештәр булдырырға, үҙенең фекерҙәрен әйтергә өйрәтә.

Дәрес төрҙәренә килгәндә, түбәндәге миҫалдар килтерергә мөмкин:

1. Дәрес-суд. Тәкдим ителгән әҫәр – И. Абдуллин "13 председатель".

2. Дәрес-диспут. Ғ. Хөсәйенов парсалары, И. Бураҡаев "Башҡорт көсө".

3. Дәрес-сәйәхәт. С. Злобин "Салауат Юлаев".

4. Дәрес-конференция. М. Кәрим "Өс таған".

5. Дәрес-осрашыу. Т. Ғарипова "Бөйрәкәй".

Һәр уҡыусы – асылмаған хазина. Был хазинаны балҡытыу, талантын асыу өсөн әҫәрҙе уҡығандан һуң уҡыусыға төрлө ижади эштәр тәкдим итергә мөмкин. Уның өсөн, әлбиттә, уҡытыусыға уҡыусы талантын күрә, үҫтерергә, дөрөҫ баһалай белергә кәрәк.

Ижади эштәр, мәҫәлән, шундай булырға мөмкин:

1) Әҫәрҙәргә иллюстрациялар эшләү;

2) Әҫәрҙәрҙе дауам итеп яҙыу;

3) Әҙәби әҫәрҙәр буйынса сценарий төҙөү;

4) Кроссворд, ребус, викторина, тест һорауҙары төҙөү;

5) Әҫәрҙәге геройҙарға хат яҙыу, һ.б.

Фекерләү – уй-хыял йөрөтөүҙең иң юғары, иң камил төрө. Уҡыусылар фекерләүе уҡыусының үҙ аллы эшмәкәрлек сифатына әйләнергә тейеш. Ә бының проблемалы һорауҙар аша хәл итергә мөмкин. Мәҫәлән, профессор Р.Ғ. Аҙнағолов төрлө әҫәрҙәр буйынса шундай һорауҙар тәкдим итә:

1) З. Биишева үҙенең "Һөнәрсе менән Өйрәнсек" әҫәрендә ни өсөн "Ялғандың бото ҡыҫҡа" тигән әйтемде ҡулланған?

2) Үҙ исемеңде мәңгеләштереү төшөнсәһен нисек аңлайһығыҙ? Был хаҡта яҙыусылар үҙҙәренең әҫәрҙәрендә ни тиҙәр? (Мәҫәлән, Ф. Иҫәнғолов "Хәмит күпере", З. Биишева "Һөнәрсе менән Өйрәнсек").

3) М. Өмөтбаев "Башҡортҡа өс нәмәне белеү мотлаҡ" тигән. Нимәләр улар? Һеҙ нисек аңлайһығыҙ?

4) Нимә ул рух, башҡортлоҡ? Башҡортостандың халыҡ шағиры Назар Нәжми үҙенең "Урал" поэмаһында был төшөнсәләрҙе нисек тасуирлай?

Уҡыусыларҙың яуаптары төрлөсә булырға мөмкин. Һәр кеше үҙенсә фекерләй, уйлағанын әйтә. Ул эҙләнә, фекер йөрөтә, дөрөҫлөктө

үҙе аса. Был уның үҫешен, күҙәтеүсәнлеген, әүҙемлеген, үҙ аллылығын үҫтерә. Һәр уҡыусы проблемалы һорауҙарҙы сискәндә үҙенең шәхес булыуын тойорға тейеш.

Әҙәбиәт дәрестәрендә әҫәрҙәргә төрлө схемалар, проектар ҡулланыу шулай уҡ яҡшы һөҙөмтә бирә. Ул ниндәйҙер идея, фекер өҫтөндә эҙмә-эҙлекле эшләүгә, ниндәйҙер һөҙөмтә сығарыуға алып килә, балаларҙың фантазияһын үҫтерә. Синыфтан тыш сараларҙа ҡатнаштырыу уҡыусының әүҙемлеген үҫтерә һәм интеллектын, ҡыҙыҡһыныуҙарын һәм ынтылыштарын үҫтереү системаһында төп предмет булараҡ сығыш яһай. Әҙәбиәт дәрестәре мәктәптә балаларҙы дөйөм эстетик һәм әхлаҡи тәрбиәләүсе, уларҙың аңын формалаштырыусы, төрлө һәләттәрен асыусы белем һәм тәрбиә дәрестәре ул. Әҙәбиәт дәрестәрендә баланың шәхес булараҡ формалашыуына, уның үҙ тормош юлын һайлауға, үҙ асылын эҙләүгә һәм аңлауға яуап бирә.

Күренә ғалимдарҙың фекеренсә, әҙәбиәт алдында торған төп бурыстарҙың береһе – хәҙерге осорҙа көслө рухлы яңы кеше тәрбиәләү бурысының быға ҡаса күрелмәгән кимәлдә үткер ҡуйылышын да билдәләргә кәрәк. Былар барыһы бергә башҡорт яҙыусыларын кеше психологияһының тәрән төпкөлөнә үтеп инеүгә һәм камил яҡтыртыуға, әҙәби шәхестең психологик кисерешен, тормошон һәм хәрәкәтен ентекле өйрәнеүгә йүнәлтә, ә был, үҙ сиратында, уҡыусыларҙа үҙ йәшәүенең асылын табырға ярҙам итә.

Әҫәрҙәрҙе ентекле анализлау ҙур иғтибар талап итә. Дәрестәрҙә әҫәрҙең йөкмәткеһен генә өйрәнеү дөрөҫ булмаҫ ине. Эйе, йөкмәткеһен белеү мотлаҡ кәрәк. Ә әҫәрҙең эсендә булыу, унда ҡатнашыу, шул донъяға инеү, үҙ фекереңде белдереп, матур образдарға, күренештәргә һоҡланыу, улар менән бергә ҡайғырып, шатланып, хисләнеп фәһем алыу, ә кире образдарға, күренештәргә ҡарата нәфрәтләнеп, уларҙан ғибрәт алыу – әҫәрҙе ентекле өйрәнеү була. Әҫәрҙе уҡығанда уның проблемаһының ҡуйылышына ҙур иғтибар бирергә кәрәк. Тап ошонда авторҙың донъя һәм кеше концепцияһы, уның уйҙары һәм кисерештәре урын ала. Проблематика кимәлендә уҡыусыға бәхәскә урын ҡала, теге йәки был ҡиммәттәр системаһы тикшерелеүгә дусар ителә, һорауҙар ҡуйыла, донъяға, тормошҡа ҡараштар тыуа. Был ҡараштар милли, фәлсәфәүи яуаптар менән тулылана. Әҫәрҙең идеяһын сискәндә, уҡыусылар фәлсәфәүи һәм этик эҙләнеүҙәргә, кешелектең мәңгелек һорауҙарына яуап ала, дөрөҫлөккә юл таба.

һуңғы осорҙа әҙәбиәт донъяһында, шулай уҡ башҡорт әҙәбиәтендә кешенең уй-кисерештәрен, психологияһын һүрәтләү, уға ҙур иғтибар бүлеү күҙәтелә. Психологизм – геройҙарҙың күңел донъяһын, уларҙың хис-тойғоларын, кисерештәрен, кәйефтәрен, уй-фекерҙәрен йәғни кешенең психик рухи тормошон художестволы һүрәтләү. Тик психологик анализ ярҙамында ғына кешенең эске һәм тышҡы йәшәйешен бер бөтөн тулы итеп һүрәтләүгә ирешергә, геройҙың күңел донъяһын эстетик яҡтан өйрәнергә мөмкин.

Бөгөнгө әҙәбиәт дәрестәренә иң мөһим талаптарҙың береһе – заман менән бергә атлау. Замана балаларына заман технологиялары ярҙамында белем биреү. Шул рәүешле генә хәҙерге уҡыусының иғтибарын йәлеп итеүгә, уның әҙәбиәт дәрестәрендә ҡатнашлығын үҫтереүгә ирешергә мөмкин. Һәр уҡытыусы көндән-көн үҙгәреп торған тенденцияларға асыҡ һәм уҡытыу процесына индерергә әҙер булырға тейеш! Сөнки заман башҡа – заң башҡа!

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Баһауетдинова М.И., Йәғәфәрова Г.Н. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте дәрестәрендә яңы технологияларҙы ҡулланыу (методик ҡулланма). – Өфө, ФМҮ "Педкнига", 2008. – 204 бит.

2. Дәүләтшина М.С. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 1-се киҫәк. – Өфө: Китап, 2010. – 120 бит.

3. Дәүләтшина М.С., Ғәбитова З.М. Башҡорт телен уҡытыу методикаһы: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған мәктәптәр өсөн. 2-се киҫәк. – Өфө: Китап, 2011. – 88 бит.

4. Ғәбитова З.М. Телмәр үҫтереү дәрестәре. Башҡорт телен дәүләт теле итеп өйрәнеүселәр өсөн. – Китап, 2009. – 128 бит.

© Әбделмәнова Р.Р., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Әбйәлилова Г.Р.,
студент, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ӘХИӘР ХӘКИМОВ ӘҪӘРҘӘРЕНДӘ ҺУҒЫШ ТЕМАҺЫ

Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, Бөйөк Ватан һуғышы ветераны Әхиәр Хәсән улы Хәкимовтың прозаик булараҡ таланты 1970-се йылдарҙа балҡып асылып китә. Алтмышынсы йылдарҙа үҙен филология фәндәре

кандидаты, профессиональ тәнҡитсе, талантлы әҙәбиәт белгесе итеп таныҡкан, «Литература и современность” (1967) тигән әҙәби-тәнҡит һәм ғилми тикшеренеү мәсьәләләре хаҡындағы йыйынтыҡ, Мостай Кәрим шиғриәте үҙенсәлектәрен тикшергән “С веком наравне” (Ташкент, 1971) исемле монография сығарып өлгөргән талантлы ғалим артабан баш көллө ижад эшенә сума.

Әхиәр Хәкимдең бер-бер артлы донъя күргән “Гөлбикә” (1970), “Осар ҡоштар” (1974), “Йәйғор” (1976), “Бәйге” (1977), “Аҡһаҡ бүре” (1978), “Күпер” (1979), “Туй” (1981) повестары башҡорт әҙәбиәтенә үҙенсәлекле стиле менән айырылып торған әҙип, повестар оҫтаһы килеүен ныҡлы таныта.

Ә.Хәкимдең тәүге “Гөлбикә” повесында ташсы һөнәренә эйә булырға, үҙ ҡулдары менән яңы йорттар, гүзәл һарайҙар һалырға хыялланған, үҙ алдына оло маҡсаттар ҡуйып йәшәгән йәш ҡыҙ Гөлбикәнең яҡты, маҡсатлы ынтылыштары һүрәтләнә. Үҙ эшенең оҫтаһы булһа ла, байығыу, үҙ мәнфәғәтеңде генә ҡайғыртыу кеүек уйҙар-ихтыяждар эсендә янған Борһандың кешелек булмышы героиняның романтик юғарылыҡҡа ҡуйып һүрәтләнгән образы янында бик меҫкен, йәмһеҙ күренә. Төрлө өлкәгә ҡараусы мәсьәләләргә, төрлө кешеләргә, тормошҡа, хеҙмәткә мөнәсәбәттә героиняның эскерһеҙ, асыҡ, алсаҡ, ихлас, яҡты һәм кешелекле күңеле балҡып асылып китә.

Артабан яҙыусы заман темаһынан ситләшеп, Бөйөк Ватан һуғышы ваҡиғаларына арналған ҙур шәлкем повестар ижад итә.

Әйтергә кәрәк, 1970-се йылдарҙың икенсе яртыһынан башлап әҙәбиәттә азатлыҡ һаҡсыһы, көрәшсе герой концепцияһы яҡтыртылышында һиҙелерлек үҙгәрештәр билдәләнде. Ә. Хәким, М. Кәрим, Т. Ғиниәтуллин һымаҡ яҙыусылар беренсе планға айырым шәхесте сығарҙылар, йәш кешенең һуғышта үҙен нисек тотоуына төп иғтибарҙы йүнәлттеләр, төрлө көсөргәнешле ситуацияларҙа йәш герой күңелендә барған ҡатмарлы хис-кисерештәрҙе – күңел диалектикаһын һүрәтләүгә ҙур урын бирҙеләр. Бындай әҫәрҙәр, дөйөм алғанда, барлыҡ йәш, быуындары әле ҡатып та өлгөрмәгән һуғыш быуынының социаль–психологик портретын тыуҙырҙы.

Һуғыш ваҡиғаларын урын һәм ваҡыт яғынан үтә компакт, йыйнаҡ, ыҡсым һүрәтләгән был повестарҙа, геройҙарҙың үткән тыныс тормоштарын хәтерләүҙәрен, бөгөнгө яҙмыштары тураһында уйланыуҙарын, киләсәккә яҡты пландар-хыялдар ҡороуын да ситуация тәбиғәтенә ярашлы сюжет һыҙығына үреп ебәреү уларҙағы идея–эстетик йөкмәтке һыйҙырышын ҙурайтты.

Рус ғалимәһе Л. Иванова баталь картиналарҙы, окоп тормошон хикәйәләүсе әҫәрҙәргә алмашҡа килгән, һуғыштың киҫкен ситуацияларында хәрәкәт иткән геройҙарҙы үҙәккә ҡуйған 1970-80-се йылдар эсендәге әҫәрҙәрҙә яҙыусыларҙың эске кисерештәрҙе тәрән анализлауға иғтибар бүлеүҙәрен һыҙыҡ өҫтөнә алып, былай тине: «Писатели пристальное внимание уделяют показу человека–борца, мыслящего, сознательного, убежденного, твердого, солдата, представляющего собой не только человека с ружьем, но и яркую индивидуальность, неповторимую личность человека, солдата, самоотверженно выполнившего свой воинский долг» [2, с. 53].

Һуғыштың фажиғәле коллизиялары хаҡында хикәйәләй барып, Ә. Хәким дә совет кешеләренең нәҡ ана шул ҡиммәтле рухи сифаттарын, һуғыш осороноң бар ауырлыҡтарын иңендә күтәргәндәрҙең, ҡырыҫ һынауҙар аша үткәндәрҙең ҡаһарманлығының әхлаҡи юғарылығын, күңел матурлығын ҡалҡыу һүрәтләүгә өлгәште. Был күренеш гуманизм идеялары һәм шәхес яҙмышының халыҡ яҙмышынан айырылғыһыҙлығын яҡтыртыу менән тығыҙ бәйлелектә художестволы хәл ителде.

Ә. Хәкимдең "Осар ҡоштар", "Йәйғор", "Аҡһаҡ бүре" "Күпер", повестарында һуғыштың конкрет бер эпизодын ентекле тасуирлауға, айырым бер хәрби операцияға бәйле рәүештә композицион үҙәкте тәшкил иткән ваҡиға һүрәтләнә, ошо ваҡиға тирәләй геройҙарҙың характерҙары балҡып асылып китә.

«Осар ҡоштар» повесында кескәй десант отрядының партизандар менән бәйләнешкә инеү заданиеһын үтәү юлында дошман менән аяуһыҙ бәрелешкә инеүҙәре көсөргәнешле сюжет үҫтерелешен тәьмин итә. Етеҙ алмашынып тороусы көсөргәнешле ваҡиғалар теҙмәһендә, киҫкен ситуациялар эсендә, үҫеп-үҙгәреп тороусы хәл-хәрәкәттәр ҡуйылығанда радист Кәрим Аҙнабаевтың, лейтенант Чукреевтың, десантсылар Ваня Рябчиковтың, Мәхмүт Жакиевтың, партизандар һәм ауыл кешеләре менән бәйләнешкә инеп, совет ғәскәрҙәренә юл асыу өсөн үҙ-үҙҙәрен аямай көрәшеүҙәре тасуирлана.

Ваҡиғалар драматизмына тулы ҡыҫҡа ғына ваҡыт арауығында хәрбиҙәрҙең кисерештәр менән тулы күңел донъяһы бар киренкелегендә психологик тәрән яҡтыртыла. Бөтә әҫәр буйынса осар ҡоштар – десантсылар һәм аяҙ көҙгө күктә теҙелеп осҡан моңһоу торналар хаҡындағы ассоциатив–лирик образ һуҙылып бара. Был ассоциациялар аша Ғатау ҡарт, летчик Мазһар, Степан бабай һымаҡ

ярҙамсы образдар ҙа сюжет һыҙығына индерелә. Образлы йәнәшәлектәр "Осар ҡоштар" повесының лирик–романтик стилен билдәләшә.

«Йәйғор» повесында хикәйәләү ике быуын яҙмышын ниндәйҙер кимәлдә бер-береһенә ҡаршы ҡуйыу рәүешендә алып барыла. Ислам улы Юлайҙы ла үҙ йәшәү принциптарына буйһондормаҡсы, үҙ ихтыярын уға көсләп таҡмаҡсы була. Күп йылдар колхозда хисапсы булып эшләгән, абруй ҡазанған. Сын яһау йорто, байлыҡ-мөлкәт тулы донъяһы, дуҫ-иптәштәре килһә, һығылып торған табыны әҙер булған, Алмабикәһе менән сирек быуат һүҙгә килешмәй, күҙ ҡараштарынан уҡ бер-береһен аңлашып йәшәгән илле йәштәрҙәге ир мөхәббәт, һөйөү тигән һүҙҙәрҙе юҡ нәмә, китап уйҙырмаһы тип иҫәйләй. Шуға ла ул Юлайҙың үкһеҙ етем һатыусы ҡыҙ Сафураны яратыуына ҡаршы төшә, улының тойғоларына һалҡынлыҡ, күңел һуҡырлығы күрһәтә. Тойғо менән йәшәп өйрәнмәгән Ислам айыҡ аҡыл менән көн күреүҙе алға ҡуя. Колхоз председателе менән ҡоҙалашыуҙы. Уның ҡыҙы Венераны килен итеп төшөрөүҙе ҡулай һанай.

Шул юҫыҡта ике быуын – ата менән ул араһында конфликт килеп тыуа. Атаның улын аңламауы йәш егет күңелендә ғазаплы кисерештәр уята, торонбаш кеүек ҡара көйөп йөрөүенә килтерә. Юлай, мөхәббәтенә ҡаршы ҡуйылған кәртәләрҙе алып ташлағанда ғына, атаһына үҙенең хаҡлығын төшөндөрөп, уның фатихаһын алғанда ғына, романтик тәбиғәтле, киноларҙағы, китаптарҙағы оло мөхәббәтте көтөп йәшәгән, хисапсы ярҙамсыһы татлы телле Ҡарамдың тоҙағына эләккән тәжрибәһеҙ, йәш һылыу ҡыҙ Сафураның йөрәген яулағанда ғына үҙенең бәхетле буласағын, йәйғор төҫлө тормошта йәшәйәсәген аңлай. Шуға ынтыла, ныҡышмал көрәшә. Шулай уҡ тракторсы егеткә колхозда ойоштороласаҡ комсомол йәштәр бригадаһын етәкләүгә ризалыҡ биреү өсөн дә көсөргәнешле уйланыу, шикләнеүен еңеү, үҙ мөмкинлектәрен самалап ҡарау, тәүәккәллек кәрәк була. Шулай итеп, күләме менән ҡыҫҡа, йөкмәткеһе яғынан тығыҙ, төйөрөм повеста ҡатмарлы яҙмыштар, драматик кисерештәр бик мул бирелә.

Ил алдында бурысымды үтәнем, тип вайымһыҙлыҡҡа бирелгән, туҡлыҡты, етеш көнкүреште, олпат кешеләр, түрәләр менән туғанлашып йәшәүҙе бәхет һанаған Исламдың битараф, һәүетемсә күңелен улының Сафураға булған мөхәббәте болоҡһотоп, ҡуҙғытып ебәрә. Иллегә яҡынлашҡан ирҙең, үткән ғүмерен күҙ уңынан үткәреп, һығымталар яһарға ынтылыуы күңелендә баҫтырып тотҡан утлы хәтирәләрҙе яңырта. Ислам һуғыштың һәләкәтле ваҡиғалары хаҡында хәтерләүҙәрен ситкә этәргә, оноторға теләй. Үҙ-үҙен мәжбүр итеп

бөгөнгө тормош, көндәлек мәшәкәттәр тураһында уйларға тырыша. Ләкин ваҡыт үтеү менән, аң эшмәкәрлеге, хәтер активлаша бара. Исламдың күҙ алдына сирек быуат элек булып үткән ваҡиғалар баҫа.

Йәйге төндәрҙә йоҡоларҙан уятырлыҡ иҫтәлектәр алыҫ Белорус ерендәге ҡанлы бәрелеште, йәшлек мөхәббәтен – етен сәсле, зәңгәр күҙле белорус ҡыҙы Ганнаны күҙ алдына баҫтыра. Егерме биш йыл буйы уға бер уй тынғы бирмәй: яугир дуҫтары Виктор Миронов менән Николай Глуховтың һәләк булыуында ул ғәйепле түгел микән? Был билдәһеҙлек уның выжданын даими ғазаплап тора. Тынғыһыҙ һалдат хәтеренең Исламды, йәйге уттай эш өҫтөндә, Белоруссияға юлланырға мәжбүр итеүе тәбиғи хәл итеп ҡабул ителә. Герой башҡалар өсөн ҡапыл тойолған, ә үҙе өсөн оҙайлы тиҫтә йылдарҙан һуң ғына тәүәкәлләгән сәфәргә сыға.

Әҫәрҙә кешенең ҡатмарлы һуғыш ситуацияларында, фажиғәле мәлдәрҙә лә, тыныс тормош шарттарында ла әхлаҡлелектең, юғары баҫҡысында ҡалыу бурысы, ауыр һынауҙарҙа сыныҡҡан ҡиммәтле кешелеклелек сифаттарын юғалтмай, ғүмер ахырынаса һаҡлай белергә тейешлеге һыҙыҡ өҫтөнә алына. Сюжет төйнәлеше шәхес күңелендә барған боролошто һүрәтләү тирәһенә туплана.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Гәрәева Г.Н. Башҡорт прозаиктары. – Өфө: БНҮ, 2012. 494 бит.

2. Иванова Л. Литература о войне в идейно-художественных исканиях современной прозы // Великая Отечественная война в современной литературе. – М.: Наука, 1982. – С.53.

© Әбйәлилова Г.Р., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 80

Әлимбаева Г. Ғ.,
филол.фәнд.канд., өлкән уҡытыусы
Өфө университеты

БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ПАРЛЫ ҺАНДАРҘЫҢ СТРУКТУР-СЕМАНТИК ТӨРКӨМСӘЛӘРЕ

Башҡорт тел ғилемендә һандарҙың яһалышы йәһәтенән парлы төрҙәрен өйрәнеү бөтөнләй күҙәтелмәһә лә, был һүҙ төркөмө эсендә нигеҙҙәрҙең ишләшеү осраҡтарына күҙ һалып, уларҙың үҙенсәлектәрен билдәләргә була. Һандарҙың бөтә төркөмсәләренә тиерлек ҡараған берәмектәр үҙ-ара ишләшә ала. Шуны әйтеп үтергә кәрәк: һандар ишләшкән формаларҙың бөтәһе өсөн дә тиерлек яҡынса сама, йәки

тәртип мәғәнәһен белдереү хас. Грамматик йәһәттән күпселеге уларҙың сама һандары төркөмсәһенә ҡарай, әлбиттә. Шулай ҙа нәфис-публицистик әҙәбиәттән алынған миҫалдарҙы ҡарап үтеү артыҡ булмаҫ:

-төп һандарҙың ишләшеүе: *1. Уны машинкала баҫҡанда* ***биш-алты*** *битенән көскә бер бит сығалыр, моғайын* (Н. Мусин). *2. Мин* ***бер-ике*** *көн редакцияға бармайым, өйҙә ултырып эшләй торған эшем бар* (Н. Мусин). *3. Оло юл ағастары һирәкләнә төшкән урман аша килә-килә лә,* ***ҡырҡ-илле*** *шәхси хужалыҡтан торған ауылды ситләтеп үтеп, һөҙәк яр аҫтына төшә* (Р. Әхмәтов). *4. Ҡаршылағы йорттарға ни бары* ***дүрт-биш*** *метр ара ҡалғайны* (Р. Әхмәтов). *5. Лидерға* ***дүрт-биш*** *бүре яңыҡтан һөжүм итә* (С. Ильясов). *6. Көн эҫеһендә* ***ете-һигеҙ*** *сәғәткә ялға тупланған* (Л. Шакирова). *7. БыҒаулының һәр хәрәкәте күҙәтеү аҫтында, эргәһенән* ***ике-өс*** *кеше һис өҙөлмәй* (Ғ. Хөсәйенов). *8. Ул бына шуларҙың барыһынан да ҡотолоу өсөн «яңыса», «советса» тороргә булып,* ***ун биш-егерме*** *һыйырҙы* ***биш-алтыға****,* ***етмеш-һикһән*** *һарығын* ***егерме-утыҙға****, иллеләп йылҡыны ун алтыға ҡалдырып, бейәне лә биште генә һауа* (Һ. Дәүләтшина). *9. Ауылдаштары араһында* ***дүрт-биш*** *мөғәлимәне, элекке колхоздың өлкән бухгалтерын, ауыл хакимиәтендә эшләп хаҡлы ялға сыҡҡан ханымды һәм башҡа – яҡынса ун биштән ашыу яҡташын таныны* (И. Исламов).

10. ***Өс-дүрт*** *шағир бергә йыйылдымы,*

Онотола фани донъяһы (Т. Ниәтшин).

Һорау киҫәксәһе ҡабул иткән һандар ҙа ишләшергә мөмкин, мәҫәлән: *Яман төштәгеләй ошолай ғүмер һөрөп ятҡанда,* ***икеме-өсмө*** *туған тейешле Ғәзиз ағаһы килеп инде* (М. Хужин);

-рәт һандарының ишләшеүе: *1.* ***Икенсе-өсөнсө*** *урындарҙы Норвегия менән Франция командалары бүлеште* (“Йәшлек” гәзитенән). *2.* ***Егерменсе-утыҙынсы*** *йылдарҙа тәүҙә ғәрәп графикаһында башҡорт әҙәби яҙма телен булдырыуға, һуңыраҡ латин һәм рус графикаларына күсеүгә бәйле саралар алға сыға* (“Башҡортостан укытыусыһы” журналынан) *3. Зәйнәб Биишева өсөн* ***илленсе-алтмышынсы*** *йылдар – жанр һәм форма өлкәһендә лә актив эҙләнеүҙәр, ҙур табыштар осоро* (Ә. Вахитов). *4. Мәкәләмде башҡорт әҙәбиәтенең* ***алтмышынсы-етмешенсе*** *йылдарҙағы ижади күтәрелешенән башлауымдың үҙ сәбәптәре бар* (Р.Бикбаев). *5. Торлаҡ төҙөү буйынса беҙ илдә* ***бишенсе-алтынсы*** *урында киләбеҙ* (“Башҡортостан” гәзитенән);

- йыйыу һандарының ишләшеүе: *1. Етмәһә, ҡараштар* ***икәү-өсәү*** *түгел, күп* (И.Нурғәлиев). *2. Бала-саға иһә һәр ғаиләлә* ***бишәү-алтау*** (“Шоңҡар” журналынан);

- сама һандарының ишләшеүе: *1. Ҡасабала немецтар,* ***утыҙлап-ҡырҡлап*** *танк* (Й. Солтанов). *2. Энәһе күп:* ***йөҙләп-меңләп****, бер ни тегә алмай йүнләп* (Йомаҡ). *3. Хәйер, хайуандар бит беҙгә ҡарағанда* ***йөҙләғән-меңләғән*** *тапҡыр яҡшыраҡ ишетә, күрә, еҫ һиҙә, тәм тоя* (“Йәшлек” гәзитенән);

- бүлем һандарының ишләшеүе: *1. Райондар күп булғас,* ***өсәр-дүртәр*** *төбәк вәкилдәре бер командаға берләштерелә* (“Яйыҡ” гәзитенән). *2. Хәйер, донъяға* ***бишәр-алтышар*** *бала бүләк итеү кеүек ҙур яуаплылыҡты иңдәренә алған әсәләр һәм уларҙың ғаиләләре үҙҙәре лә ҡул ҡаушырып ултырмай, тырыш, аҡыллы сабыйҙарына тейешле тәрбиә һәм белем биреп, ҙур тормош юлына сығарыу маҡсатында алдарына оло бурыстар ҡуйып йәшәй* (“Йәшлек” гәзитенән). *3.* ***Егермешәр-утыҙар*** *йыл кеше тупһаһын тапағандар өсөн ошо үҙе мөғжизә түгелме ни?!* (“Йәшлек” гәзитенән). *4. – Шуларҙы ҡоторто-оп,* ***утыҙар-ҡырҡар*** *гектар ер биреп байыттылар* (И. Исламов);

- төп һәм башҡа төркөмсәләргә ҡараған һандарҙың ишләшеүе: *1. Ултырғыстарҙың, эскәмйәләрҙең дағыр-доғор итеүҙәре,* ***утыҙ-ҡырҡлап*** *кешенең әле генә бер юлы һөйләшә башлауҙары, шау-шыуҙар араһында ҡайнашып, Айбикә лә коридорға сыҡты* (Һ. Дәүләтшина). *2. Былтыр ҡортсолоҡ менән шөғөлләнгән* ***дүрт-бишләп*** *ғаилә еңел автомобиль һатып алған* (М. Ғабдрахманова).

Башҡорт телендә шулай уҡ үҙенсәлекле юл менән яһалған, *“әллә нисә, күп, һанап бөткөһөҙ”* мәғәнәһен биреүсе ***ҡырҡмаһа-ҡырҡ*** парлы һаны бар: *1. Хәҙер сәсеүлек булмағас, халыҡ баҫыу аша,* ***ҡырҡмаһа-ҡырҡ*** *юл һалып бөткән* (И. Исламов). *2. Һәр беребеҙ шешлек әҙерләүҙең ҡырҡмаһа-ҡырҡ ысулын белә* (“Йәшлек” гәзитенән). *3. Бынан тыш, хужалыҡтарҙың* ***ҡырҡмаһа-ҡырҡ*** *төрлө эш-мәшәкәтен ойоштороуҙа ла көндәлек сығымдары артҡандан-арта* (“Башҡортостан” гәзитенән). *4.* ***Ҡырҡмаһа-ҡырҡ*** *еренән ямау һалынған киндер елкән, мачтаға уралғас, һуғыш майҙанында тар-мар ителгән ғәскәрҙең байрағын хәтерләтә* (Г. Ғиззәтуллина). *5.* ***Ҡырҡмаһа-ҡырҡ*** *төрлө эше ярылып ятһа ла, ул бошонмай* (Л. Басирова).

Шулай итеп, һан һүҙ төркөмө араһында ла парлы конструкциялар күп кенә. Әлбиттә, уларҙың күптәре грамматик яҡтан ҡарағанда, сама һандары төркөмсәһенә ҡарай. Ишләшеү процесында иһә һандың бөтә тиерлек төркөмсәһе ҡатнаша ала.

© Әлимбаева Г.Ғ., 2023

УДК 811.161.1

Юсупова Г.А.,
5 курс, ФБФВиЖ, УУНиТ
Кульсарина И.Г.,
канд. филол. наук, доц.

ЯЗЫКОВЫЕ И СТИЛИСТИЧЕСКИЕ ОСОБЕННОСТИ ПОЭЗИИ МАРИНЫ ЦВЕТАЕВОЙ

Поэзия Марины Цветаевой характеризуется особой интонацией и ритмом, умелым использованием стилистических приемов и средств выразительности в создании ярких и запоминающихся образов. Как было указано исследователями, использованные поэтессой средства языка «напряжены до крайности, доходят до своих последних пределов…», ее поэзия «…как бы выжимает все соки из языка. И язык превосходит здесь себя самого» [2, с. 25].

В стихотворениях М. Цветаевой часто встречаются следующие средства художественной выразительности: антитеза, анафора, эпифора, градация, синтаксический параллелизм и повтор.

Один из излюбленных приемов Марины Цветаевой − антитеза. Используя противопоставления, автор создает своеобразный внутренний мир лирической героини:

«Жив, а не умер
Демон во мне!
В теле как в трюме,
В себе как в тюрьме» («Жив, а не умер…») [6, с. 579].

В поэзии Марины Цветаевой часто встречается антитеза философско-поэтического типа: «добро» – «зло», «действие» – «рефлексия», «красота» – «уродство», «вера» – «рассудок», «дух (душа)» – «тело», «юность» – «старость», «мгновение» – «вечность»:

«–”Добро любила ль, всем сердцем страстно?
Зло – возмущало ль тебя оно?”.
– “О Боже правый, со всем согласна!
Я так устала. Мне всё равно!”» [6, с. 8].

В творчестве М.Цветаевой особо выделяется прием синтаксического параллелизма.

«Синтаксический параллелизм – конструктивный принцип (релевантная особенность) устройства синтаксических конструкций, в частности стилистических фигур; он является частным случаем симметрии и – шире – повтора и заключается в тождественном (полном или частичном) строении синтаксических конструкций» [3, с.28].

…Легко обо мне подумай,

Легко обо мне забудь… (Цветаева М. «Идешь, на меня похожий») [6, с. 114].

В произведениях М. Цветаевой параллелизм синтаксических конструкций сочетается с использованием одинаковых анафор и эпифор, что придает особую экспрессию стихотворению.

«Анафора (от греч. anaphora – вынесение вверх), или единоначатие – стилистическая фигура, заключающаяся в повторении тождественных элементов (звуков, сочетаний звуков, морфем, слов или сочетаний слов) в начале нескольких отрезков речи» [7, с. 41]. Например:

«Мне нравится, что Вы больны не мной,

Мне нравится, что я больна не Вами,

Что никогда тяжелый шар земной

Не уплывет под нашими ногами» («Мне нравится, что Вы больны не мной...») [6, с. 157];

«Еще и еще песни

Слагайте о моем кресте.

Еще и еще перстни

Целуйте на моей руке» («Еще и еще песни…») [6, с. 171].

Эпифора (греч. – добавка; – после, phora – несущий), или концовка – стилистическая фигура, заключающаяся в повторении тождественных элементов в конце нескольких (чаще параллельных) отрезков речи:

«Небесным странником – мне – страннице –

Предстал – ты.

И речи странные – мне – страннице

Шептал – ты» [6, с.172].

В поэзии Марины Цветаевой для создания экспрессии часто используется прием градации. Это – стилистическая фигура, состоящая в таком расположении частей высказывания (слов, отрезков предложений), при котором каждая последующая включает в себя усиливающиеся (реже уменьшающееся) значение или экспрессию [4, с. 32].

«Не думаю, не жалуюсь, не спорю,

Не сплю.

Не рвусь ни к солнцу, ни к луне, ни к морю,

Ни к кораблю» [6, с.140].

Стилистическая функция оксюморона в поэзии М. Цветаевой своеобразна и помогает рельефно передать тонкую поэтическую натуру автора.

Например:

«Вся стража − розами увенчана:
Слепая, шалая толпа! −
Всех ослепила − ибо женщина,
Всё вижу − ибо я слепа» («Да, друг невиданный, неслыханный…») [6, с. 361].

Ярко выразить сложность отношений героини с миром помогает прием оксюморона в сочетании с синтаксическим параллелизмом:

«Мне и тогда на земле
Не было места,
Мне и тогда на земле
Всюду был дом» («Искательница приключений…») [6, с. 211].

Таким образом, поэтические и синтаксические конструкции придают стихотворениям М. Цветаевой особую выразительность и философскую глубину.

Список литературы:

1. Алёхина Н.В. Синтаксис как доминанта структуры поэтического текста: дис.. канд.филол. наук / Н.В. Алёхина. – Владивосток, 2005. – 177 с.

2. Бахтин М.М. Проблемы содержания, материала и формы в словесном художественном творчестве / М.М. Бахтин // Бахтин М.М. Литературно-критические статьи. – М.: Художеств. лит., 1986. – С. 26–89.

3. Бубекова Л.Б. Синтаксическая компрессия и синтаксическая редукция в поэзии М. Цветаевой / Л.Б. Бубекова // Марина Цветаева в контексте культуры Серебряного века: материалы Четвертых международных цветаевских чтений. – Елабуга: Изд-во ЕГПУ, 2008. – С. 27-29.

4. Зубова Л.В. Потенциальные свойства языка в поэзии М. Цветаевой / Л.В.Зубова. −Л.: Изд-во ЛГУ, 1987. −144 с.

5. Зубова Л.В. Поэзия Марины Цветаевой: лингвистический аспект / Л.В. Зубова. – Л.: Изд-во ЛГУ, 1989. – 264 с.

6. Цветаева М.И. Полное собрание стихотворений //Электронное издание
http://library.lgaki.info:404/2017/Цветаева%20М_Стихотворения.pdf.

7. Ожегов С.И., Шведова Н.Ю. Толковый словарь русского языка. – М., 1993. [Электронный ресурс] URL https://cyberlan.com.ua › uploads

© Юсупова Г.А., Кульсарина И.Г., 2023

УДК 821.512.141

Яҙыкбаева З.Р.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Салауатова Ф.Р.,
филол. фәнд. канд., доц.

УРТА КЛАСТАРҘА БАШҠОРТ ХАЛЫҠ ИЖАДЫН ӨЙРӘНЕҮ

5 синыфта “Башҡорт халыҡ ижады”на дөйөм бер бүлек бирелә. Башланғыс синыфтарҙа үтелгән фольклор әҫәрҙәрен ҡабатлап һәм тулыландырып “башҡорт халыҡ ижады”на аңлатма бирелә.

Һеҙ ололарҙан, тиҫтерҙәрегеҙҙән әленән-әле әкиәт, легенда, йомаҡ, мәҡәл ишетә тораһығыҙ. Ундай әҫәрҙәрҙе уҡып та беләһегеҙ. Улар һүҙгә оҫта, хыялға бай кешеләр тарафынан ҡасандыр ижад ителгән дә башҡалар хәтеренә күскән. Шулай телдән-телгә, быуындан быуынға, урындан-урынға күсә торғас, шымара-шымара беҙҙең көндәргә лә килеп еткән.

Тимәк, телдән тыуып, телдән башҡарыла торған әҫәрҙәрҙе камиллаштырыуҙа күмәк кеше, тотош халыҡ ҡатнашҡан.

Башҡорт халыҡ ижады – быуаттар буйы һаҡланып, быуындан быуынға күсеп килеүсе аҫыл ҡомартҡы, ҡиммәтле хазина, изге аманат, ҡәҙерле мираҫ, хатта хәтер ҙә ул.

“Башҡорт халыҡ йола ижады – быуаттар буйы халыҡтың тормош-көнкүрешен, күңел, рух булмышының ыңғай, камил йәшәйешен тәьмин иткән борон мираҫ. уны инҡар итеү – алтынды быраҡҡа буяп ташлауға бәрәбәр,”- тип яҙа ғалим Ә. Сөләймәнов.

Ғөмүмән, мәҡәл-әйтемдәр, йомаҡтар, көләмәстәр кеүек афористик жанрҙарға, әкиәт, легенда-риүәйәт, эпос, ҡобайырҙарға халҡыбыҙҙың культураһының төп асылы һалынған, тәрбиә принциптары бирелгән. Халыҡ педагогикаһының, этномәҙәниәттең ижади шәхес үҫтереүҙә роле ҙур.

Илебеҙҙең йәш граждандарының идея һәм рухи нығыныуында художестволы әҙәбиәт, бигерәк тә йөкмәткеһе һәм формаһы буйынса милли характерҙа булған әҙәбиәт ҙур роль уйнай. Ул уҡыусыларҙа донъяға ҡараш, идея инанғанлығы, йәмғиәт күренештәренә һәм сәнғәткә мөнәсәбәт тәрбиәләй. Шул уҡ ваҡытта әҙәбиәт балаларҙы әхлаҡи яҡтан тәрбиәләүҙә, илебеҙҙең мәҙәни һәм рухи байлыҡтарының сығанаҡтарына яҡынайтыуҙа, кеше рухының бөйөкләгән һәм матурлығын аңлау, үҙеңде кеше итеп тәрбиәләүҙә әһәмиәтле. Художестволы әҙәбиәттең тәрбиәүи мөмкинлектәрен, гармоник үҫкән

йәш быуынды формалаштырыуҙағы ролен тағы ла юғарыраҡ күтәреү, уҡытыу процесында тәрбиә биреүҙе комплекслы хәл итеү-ижтимағи-сәйәси, әхлаҡ һәм хеҙмәт тәрбиәһенең берҙәмлеген тәьмин итеү-мәктәптәр алдында торған иң актуаль бурыстарҙың береһе булып ҡала.

Был бурыстарҙы әҙәбиәт дәрестәрен мәктәптә үткәрелә торған бөтә төр кластан тыш эштәр менән тығыҙ бәйләнештә алып барғанда ғына, ошо эшкә бөтә мәктәп коллективын йәлеп иткәндә генә үтәп сығырға мөмкин.

Әҙәбиәт дәрестәре менән тығыҙ һәм айырылғыһыҙ берҙәмлектә үткәрелә торған кластан тыш эштәр системаһында уҡыусыларҙың кластан тыш уҡыуын ойоштороу, уларҙа художестволы әҙәбиәткә мөхәббәт тәрбиәләү, китап уҡый белеү күнекмәләрен үҫтереү бурыстары айырыуса мөһим урын тота. Һәр әҙәбиәт уҡытыусыһы мәктәп программаһын үтеү, дәрес биреү менән генә сикләнмәҫкә, бәлки уҡыусыларҙа бөтә ғүмере буйы художестволы әҫәрҙе уҡыуға дәрт, һүҙ сәнғәтенә мөхәббәт тәрбиәләү, унда һалынған фекер һәм тойғоларҙы төшөнә, тоя белеү, әҙәби әҫәр уҡыуҙан эстетик ләззәт ала белеү күнекмәләрен тәрбиәләүҙе бурыс итеп ҡуйырға тейеш. Нәфис әҙәбиәткә мөхәббәт мәктәпкәсә йәштән үк тәрбиәләнә башлай. Бәләкәй йәштән үк балаларҙа әҙәбиәт менән, бигерәк тә әкиәттәр, йомаҡтар, мәҡәлдәр, йырҙар менән ҡыҙыҡһыныу көслө була.

Уҡыусыларҙа китап уҡыу теләге тәрбиәләү, әҫәрҙә һүрәтләнгән тормош картиналарын, образдарҙы йәнле итеп күҙ алдына баҫтыра белеү, әҙәби геройҙар тормошон, уларҙың яҙмышын үҙҙәренә яҡын ҡабул итә, улар менән бергә кисерә белеү, унда һүрәтләнгәндәрҙе үҙ тормошо йәки үҙен уратып алған тормош күренештәре менән сағыштыра белеү һәләтлеген үҫтереү бурысын уҡытыусы һәр саҡ күҙ уңында тоторға тейеш.

Уҡыусыларҙың китап уҡыу культураһын, В.Г. Белинский әйткәнсә, “уҡыу талантын” үҫтереү буйынса күнекмәләр биреүҙе иҫенә төшкәндә бер эшләп алыу рәүешендә генә түгел, бәлки даими һәм системалы эшләгәндә генә тормошҡа ашырырға мөмкин.

М. Горькийҙың: “Китапты – белем шишмәһен яратығыҙ. Тик ул ғына беҙҙе рухи яҡтан көслө, намыҫлы, аҡыллы кеше итә, кешене ысын күңелдән яратырға, уның хеҙмәтен ихтирам итергә һәм шул бөйөк хеҙмәттең гүзәл емештәрен йөрәгең менән тойорға өйрәтә”, - тигән һүҙҙәрен килтереү, уны һәр балаға аңлатыу, уларҙың хәтерҙәрендә ҡалдырыу китап уҡыуға дәртләндереүҙә ҙур роль уйнай.

Уҡыусыларға китапҡа мөхәббәт кесе йәштән үк тәрбиәләнә. Балаларҙа әҙәбиәткә мөхәббәт уятыу, уларҙың уҡыуы менән етәкселек итеү, китапты яратырға, һаҡларға өйрәтеү – уҡытыусының изге бурысы ул. Уҡыусыларҙа китапҡа мөхәббәт тәрбиәләүҙә әҙәбиәт уҡытыусыһы башҡа фәндәрҙең уҡытыусылары һәм китапханасы менән бергә эшләргә, уҡыусыларға китаптар тәҡдим итеү, уҡыу конференциялары, кисәләр, диспуттар, конкурстар ойоштороу, инсценировкалар ҡуйыу, әҙәби аҙналыҡтар, айлыҡтар үткәреү кеүек эштәрҙе бергә планлаштырырға, класс етәкселәре менән тығыҙ бәйләнештә эшләргә тейеш.

Китапты уҡырға тәҡдим итеү генә етмәй, уҡытыусы уҡыусыларға уны аңларға ярҙам итергә лә тейеш Дәрестәр йәнле, күңелле үтһен өсөн, уҡытыусыға был дәрестәрҙе үткәреү методтарын, алымдарын төрләндереү тураһында уйланырға кәрәк.

Әгәр ҙә дәрес үҙ ерең, ауылың, районың менән бәйләнгән булһа, балаларҙың ҡыҙыҡһыныуы арта, иҫтә нығыраҡ ҡала.

Һәр бер халыҡтың үҙҙәренә генә хас: йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре, легенда-риүәйәттәре, таҡмаҡтары, йырҙары, мәҡәлдәре, һынамыштары була.

V-VI кластарҙа мәктәп тормошо, көҙ, халыҡ ижады, граждандар һуғышы осорондағы көрәш, һуғыштан һуңғы тыныс хеҙмәт, көҙгө, ҡышҡы, яҙғы, йәйге тәбиғәт темаларына яҙылған халыҡ ижады темалары алына. Үҙ аллы уҡыу өсөн нигеҙҙә, ошо темаларға ҡарата һайланғандар һәм уҡыусыларҙың белемдәрен тағы ла тәрәнәйтеүгә, үҙ аллы уҡыу, үҙ аллы анализлау күнекмәләрен үҫтереүгә йүнәлтеләләр.

Туған әҙәбиәт дәрестәренең тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, география, туған тел, туғандаш әҙәбиәттәр, фольклор, сәнғәт төрҙәре менән күп яҡлы, күп аспектлы бәйләнештәрен билдәләү, уларҙың белем биреү, донъяға фәнни ҡараш, формалаштырыуҙа тотҡан урынын, метод һәм алымдарын асыҡлау – уҡытыу барышын интенсивлаштырыуға ирешеүҙә төп шарттарҙың береһе булып тора.

Ошоларҙан сығып халыҡтың тарихын, башҡорт халҡының үткән тормошон күҙаллау булараҡ һәр синыфта халыҡ ижадын өйрәнеүгә ҙур урын бирелә.

Мәктәп программаһына фольклор әҫәрҙәренең бөтә мөһим жанрҙары ла ингән, тиерлек. Улар бөтәһе бергә 14: мәҡәл, йомаҡ, әйтеш, көләмәс, йыр, таҡмаҡ, сеңләү, ҡобайыр, ҡулъяҙма, бәйет, әкиәт, легенда һәм риүәйәт. Уның етәүһе бәләкәй күләмле, етәүһе ҙур күләмле жанрҙар иҫәбенән һанала.

Шулай итеп, фольклор әҫәрҙәре һәр синыф һайын ябайҙан ҡатмарлыға барыу принцибы нигеҙендә өйрәнелә. Түбәндәге синыфтарҙа халыҡ ижадын өйрәнеү әкиәт, мәҡәл, йомаҡ кеүек жанрҙар менән башланып, синыфтан синыфҡа күләме яғынан ҙурыраҡ, ҡатмарлыраҡ жанрҙарға ҡараған әҫәрҙәрҙе өйрәнеүгә күсә барыла.

© Яҙыҡбаева З.Р., Салауатова Ф.Р., 2023

УДК 821.512.141

Якупов Ф.Ф.,
5 курс, БФШһЖФ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫ ОСОРО БАШҠОРТ ШИҒРИӘТЕНДӘ ЖАНР ФОРМАЛАРЫ

Һуғыш осоро башҡорт шиғриәтенең үҙәгендә Тыуған илде һаҡлау, патриотизм темаһы торҙо. Поэтик жанр формаларының үҫешен был осорҙоң героик атмосфераһы билдәләне. Яу йылдарының тәүге көндәрендә айырыуса халыҡты илде һаҡлауға саҡырған публицистик пафослы шиғырҙар күпләп ижад ителә. Өндәү-саҡырыуға ҡоролған шиғыр-плакат, шиғыр-агитка кеүек формалар халыҡҡа заман рухын, заман һулышын уңышлы еткерә алдылар.

Р.Ниғмәтиҙең “Үс ал, патриот!”, “Баҫыуға, туғандар!”, “Күберәк нефть, иптәштәр!”, Б. Бикбайҙың “Ҡоралға, иптәштәр!”, “Ҡалтыраһын ер шары!”, С. Ҡудаштың “Уяу тор!”, “Онотма һин!”, “Әйҙә, егет, сафҡа баҫ!” кеүек агитшиғырҙарында авторҙар ил азатлығы өсөн яуға күтәрелергә, иген баҫыуҙарында һәм нефть производствоһында тырышып эшләргә, илбаҫарҙарҙан үс алырға саҡырҙылар. Р. Ниғмәти фашистарға ҡаршы кәрәште “иң ғәҙел һәм бөйөк көрәш” тип атаны, “Баҫыуға, туғандар!” шиғырында “һәр ашлыҡ бөртөгө – ул пуля, граната һәм ҡылыс, һәр бөртөк Гитлерға бомбалай ҡурҡыныс! Әйҙәгеҙ, баҫыуға күмәкләп, эркелеп. Юғалып ҡалмаһын ашлыҡтың бөртөгө!” тип саҡырҙы.

Шиғри хат, шиғри наказ жанрҙары массаларға мөрәжәғәт итеүҙең, халыҡтың көсөн көрәшкә мобилизациялауҙың шулай уҡ уңышлы формаһы була. Р.Ниғмәтиҙең “Башҡортостан һүҙе”, М. Кәримдең “Башҡорт халҡына яуап хаты”, М. Харистың “Хат”, Ф. Мөхәмәтйәновтың “Тағы хат яҙып ебәр”, И. Ғиззәтуллиндың “Һалдат хаттары”, М. Тажиҙың “Хат яҙылар…” һәм башҡа шиғырҙарҙа иле өсөн ғүмерен бирергә әҙер, шул уҡ ваҡытта, тыуған яҡтарын, ғаиләһен,

һөйгәндәрен, ата-әсәһен һағынған окоптағы, фронттың алғы һыҙығындағы яугирҙарҙың, уларҙың фронттан еңеү менән ҡайтыуҙарын көткән тылдағыларҙың уй-тойғолары сағылдырылды. “Хат” шиғырында М. Харистың лирик геройы әсәһенә хатында башҡаларға ғүмер бирер өсөн йығылған улын йәш түкмәйенсә, уның менән ғорурланып иҫкә алыуҙарын үтенә.

Яу йылдарында лирик шиғырҙарҙа геройҙың батыр, ҡаһарман характер сифаттары рухи донъяһының матур сифаттары менән байытылды. Күңелендә саф һәм оло мөхәббәт тойғолары йөрөткән лирик герой күркәм яҡтары менән күҙ алдына баҫты. Шиғырҙарҙың гражданлыҡ, мөхәббәт һәм пейзаж лирикаһына ҡарағандарын да, бар төрҙәрен дә осратырға мөмкин ине. М. Кәрим, Т. Морат, Х. Кәрим, М. Харис, М. Тажи һ.б. шағирҙарҙың шиғырҙарында мөхәббәт тойғоларына бай күңелле шул осор замандаш образы һынландырылды.

М. Кәримдең “Беҙҙе таңмы әллә солғағайны” (1943) шиғырының лирик геройы – фронттан ҡайтҡан яугир. Күҙе алдында һәр ваҡыт тере күмер булып көйрәп торған һуғыш эҙҙәрен иҫенән сығара алмаған һалдатҡа өй тынлығы, тыныс тормош, наҙлау һүҙҙәре бер аҙ сәйер тойола, күңеле лә ҡатҡан. Онотолған иркәләү-наҙлауҙарҙы, шатлыҡ тойғоларын ҡабат ҡайтарғаны өсөн һөйгәненә рәхмәт һүҙҙәрен әйтә ул. Т. Мораттың “Һинең карточкаң” (1943) шиғырының геройын һөйгәненең түш кеҫәһендә йөрөткән фотоһы батырлыҡтарға рухландыра.

Был йылдарҙа утыҙынсы йылдарҙа әҙәбиәтебеҙгә килеп инеп нығынған баллада жанры ла ижад ителеүҙән туҡтамай. Киреһенсә, патриотизм тематикаһы был жанрҙы активлаштырып ебәрә. М. Харистың “Батыр тураһында баллада”, Р.Ниғмәтиҙең “Әсә һүҙе”, кеүек балладалары яҙылды.

Һуғыш осоро шиғриәтендә йырҙар ҙа ҙур ғына урын алды. Йырҙарҙың төрлө типтары халыҡ кәйефенең, фронт, һуғыш темаһының төрлө яҡтарын сағылдырҙылар. Р. Ниғмәтиҙең “Еңеүселәргә дан”, Б. Бикбайҙың “Башҡорт атлылары”, Ғ. Әмириҙең “Батырҙар йыры”, Ҡ. Даяндың “Гөлсирәнең һөйгәне” кеүектәре героик рухлы, күтәренке пафослы булһа, С. Кулибайҙың “Сатирик куплеттар”, Ҡ. Даяндың “Фронт йырҙары” еңел көйлө сатирик таҡмаҡтар, йырҙар булалар.

Б. Бикбайҙың “Фрицтың кресы” тибындағы сатирик шиғырҙар был осор башҡорт шиғриәтендә шулай уҡ айырыуса популяр булды. Әлбиттә, уларҙа күп ерҙәр баҫып алыуға өмөтләнгән, ләкин совет иленә килеп көлкөгә ҡалған немец һалдаттарының, Гитлерҙың сатирик образдары күҙ алдына баҫты.

Б. Бикбайҙың “Ҡулъяулыҡ” шиғыры менән шиғриәткә элегия жанры килеп инә.

Һуғыш йылдары әҙәбиәтебеҙгә Р. Ниғмәтиҙең “Һинең кәләшеңдең хаттары”, “Егеттең яуаптары”, “Үлтер, улым, фашисты!”, “Герой тураһында поэма”, М. Кәримдең “Таныш булмаған ҡунаҡ”, “Декабрь йыры”, “Үлмәҫбай”, М. Тажиҙың “Урал егете”, “Ҡайтҡан шатлыҡ”, Т. Мораттың “Ата һүҙе” һәм башҡа төрлө характерҙағы бик күп поэмаларҙы бирҙе. Халыҡ ижадының күркәм традицияларына таянған Р. Ниғмәти, М. Кәрим поэмалары был жанрҙың аҫыл үрнәктәре булдылар.Уларҙа ҡыйыу ҡаһармандарҙың батырлығы йырланды.

Р. Ниғмәти “Герой тураһында поэма”нда летчик Вася хаҡында бәйән итә. Уның образы ябай ғына штрихтар аша бирелә. Летчик Вася хәл иткес моментта башҡаларҙың ғүмерен һаҡлап ҡалыу өсөн үҙенең ғүмерен ҡорбан итә. Боеприпастары бөткәс, дошман самолеты өҫтөнә үҙенең тимер ҡарсығаһы менән ташланып, совет аэродромын бомба утына тотоуҙан һаҡлап алып ҡала. Уның батырлығы аша бик күп совет летчиктарының образын дөйөмләштереп бирҙе автор.

“Һинең кәләшеңдең хаттары”, “Егеттең яуаптары” поэмаларында шағир егет һәм ҡыҙҙың мөхәббәтенә, улар араһындағы саф тойғоларға һәйкәл ҡоя. Мөхәббәт егетте йәшәтә, еңеүҙәргә рухландыра. Аралары алыҫайған һайын, мөхәббәттәре тәрәнәйә бара. Ҡыҙҙың һөйөүе ни тиклем көслө булһа, дошманға нәфрәте лә шундай уҡ тәрән. “Мин үлһәм, бәхетле һәм гүзәл тормош миңә һәйкәл булыр”,- ти егет. “Үлтер, улым, фашисты!” поэмаһындағы яңғыраған юлдар бөтә совет халҡын көрәшкә рухландырған һүҙҙәр булдылар. Яугирға бөтә Башҡортостан исеменән сал Урал өндәшә, батыр улдарын дошманды ҡыйратып, еңеү менән әйләнеп ҡайтырға саҡыра, наказ һүҙҙәре халыҡтың йөрәк түренән сыҡҡан һүҙҙәр булып яңғырай.

М. Кәрим “Үлмәҫбай” поэмаһында шаян, йор һүҙле, теремек Үлмәҫбай “Декабрь йыры”нда батыр йөрәкле, ҡыйыу Юлдаш образдарында һалдаттар батырлығын халыҡ ижады традицияларына таянып, оҫта еткерҙе.

Һуғыш йылдарында дошман тотҡонлоғонда ижад иткән башҡорт шағирҙары Рәхим Саттаров һәм Хәйретдин Мөжәй шиғырҙарында ла замандың героик рухы, Тыуған илде һағыныу тойғолары өҫтөнлөк итә.

Шулай итеп, һуғыш осоро башҡорт шиғриәтендә яҙыусыларҙың заман һулышын еткерерҙәй жанрҙар тирәһендә эҙләнеүҙәрен һәм уңыштарға өлгәшеүҙәрен күрергә мөмкин.

Әҙәбиәт исемлеге:
Башҡорт әҙәбиәте тарих: 7 томда: Т. 4. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1993.

© Яҡупов Ф.Ф., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141.09

Янбаева И.И.,
Л.Н.Гумилев ис. Евразия милли университетының 2 курс студенты, Ҡазағстан Республикаһы, Астана ҡалаһы
Әлибаев З.А.,
филол. фәнд. канд., доц.

БАШҠОРТ ҺҮҘ СӘНҒӘТЕНДӘ ӘЙТЕШ ЖАНРЫ: СЫҒАНАҠТАРЫ ҺӘМ ПОЭТИК ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Башҡорт халыҡ ижадының популяр жанрҙарының береһе булған әйтешкә күренекле ғалим Ғ.Б. Хөсәйенов шундай билдәләмә бирә: “*Әйтеш* – халыҡ ижадының бер поэтик жанры: ике йырау йәки сәсәндең һүҙ маһирлығында ярышыуы, шул ярышта импровизация менән әйтелгән шиғыр йә ҡобайырҙар” [5, 231-се бит.]. Башҡорт фольклорында Ҡобағош һәм Айбағош сәсәндәрҙең, Ҡарас сәсән менән ҡазаҡ аҡыны Боҳарҙың әйтештәре классик өлгөләр сифатында халыҡ хәтерендә нығынып ҡалған.

Ғәҙәттә йырау йәки сәсәндәр ике ырыуҙың йәки ике халыҡтың мәнфәғәттәрен ҡайғыртыусы шәхестәр булып сығыш яһай, бәхәсле мәсьәләләрҙе ҡорал көсө менән түгел, ә һүҙ һәм аҡыл көсө менән хәл итергә тырышҡан. Аҡмырҙа ла исеме киң билдәле Ҡобағыш сәсән менән әйтешкә сыға, ҡәҙимге традиция буйынса, үҙенең дәғүәсеһенә йомаҡ ҡойоп мөрәжәғәт итә:

Хандан да ҡурҡмаҫ бар микән, әү,
Бейҙән ерекмәҫ бар микән?
Йәки:
Хандан ғәйәр кем булыр, ау,
Бейҙән ғайәр кем булыр?

Был жанрҙың тәбиғәте хаҡында сәсәндәр ижадын ентекле өйрәнгән М.Х. Иҙелбаев: “Аҡмырҙаның йомағы ла, Ҡобағоштоң яуабы ла халыҡҡа төбәлгән, уларҙың телмәренә ғәҙәттә әйтештәргә хас була торған театр элементтары тәбиғи рәүештә индереп ебәрелгән”, – тип яҙа [4, 83-сө бит].

Ҡарас сәсән менән Аҡша батыр араһындағы әйтеш тә бик үҙенсәлекле. Бер көн йөҙләп ҡазаҡ башҡорттарҙың Яйыҡ буйына

барымта менән килә: хәҙерге Науруз ауылы яны туғайында йөрөгән йылҡы көтөүен ҡыуып алып китергә итә. Ҡарас, был хәбәрҙе ишеткәс, утыҙлап һыбайлы эйәртеп ҡаҙаҡтарҙың эҙенән төшә. Ҡыуып еткәс, үҙе генә барымтасыларҙың башлығы алдына сығып, уның менән һөйләшә, йәғни әйтешкә инә. Ҡарастың әйтештәге телмәре өс өлөштән тора. Тәүгеһендә ул башлыса дошманын үҙе менән таныштыра, үҙен дәғүәсеһенән күпкә өҫтөн ҡуя, уны алышта хур итәсәгенә шикләнмәй:

Атыңды әйт, был донъянан юйырмын мин,
Уғымды ҡыҙыл ҡанға буярмын мин.
Илеңдә аша тыуған батыр булһаң,
Хур итмәй, тәрбиәләп ҡуйырмын мин.

Аҡшаның да батыр даны үҙ илендә, күрше ҡалмыҡтар араһында таралған икән, уны ҡаҙаҡ ханы йортонда ла яҡшы беләләр. Ул үҙенең ил-йорт эсендәге бәҫен яҡшы белә, шуға ла:

Батырмын тип маҡтандың,
Һынашмай тороп, ҡапылдан.
Аҡша батыр тигәндә,
Күп батыры ҡалмыҡтың
Яҙа ине аҡылдан, –

тип яуап бирә, үҙенең данлы батыр икәнлегенә үҙ дәлилдәрен килтерергә тырыша.

Икенсе телмәр иһә ҡоралына – уҡ-һаҙағына, үҙенә теләк теләүгә ҡоролған. Йола буйынса, Ҡарас менән Аҡша сиратлап бер-береһенә уҡ аталар. Башҡорт батырының ҡулынан һәләк булған Аҡша батырға ҡәбер ҡаҙып, уны күмеп ҡуялар. Ҡаҙаҡтар еңелә, йылҡы көтөүе үҙ эйәһенә кире ҡайтарыла. Осөнсө телмәр Аҡшаның батырлығын данлауға арналған. Элек-электән халыҡ араһында ҡурҡыу белмәҫ дошманды ла ихтирам итеү, бәрелештә үлгән осраҡта, уны ҡәҙерләп күмеү йолаһы йәшәп килгән, моғайын. Ҡарас шул йоланы еренә еткереп үтәй, тимәк, ул шул йоланы тота.

Бынан һуң һинән батыр күрмәҫ күҙем.
Урынлы, маҡтанһаң да, әйткән һүҙең;
Ут йөрәк арыҫландай Аҡша батыр,
Ҡуяйым тәрбиәләп мин дә үҙем.
Таш менән ҡурған итеп ҡаҙҙым гүрең,
Аталыр исемең менән ятҡан урын.

[2, 217-220-се биттәр].

Халҡыбыҙҙың музыкаль мәҙәниәтендә романтик дастандарға яҡын торған *йыр-әйтеш* жанры ла мәғлүм. Мәҫәлән, атаҡлы фольклорсы Ә.М.

Сөләймәнов билдәләүенсә, татар, хаҡас халыҡтарында варианттары билдәле “Хан ҡыҙы” йыры егет менән ҡыҙҙың уларҙың мөхәббәттәре тураһындағы һорау-яуап формаһына ҡоролған диалог-ярыштан ғибәрәт [5, 321-се бит]. Был рәүешле ижад ителгән әҫәрҙәрҙә, күренеүенсә, ике кеше араһындағы диалогтар, лирик хис-тойғолар беренсе планға сыға, уларҙа бәхәс-полемикаға артыҡ урын ҡалдырылмай, йомаҡ ҡойоу, һорауҙарҙы уй йомоуға ҡороу маҡсаты ла юҡ, йөкмәткеһе лә башлыса көнкүреш тематикалы. Ошондай сифаттар ҡайһы бер *башҡорт иртәктәре йәки тарихи хикәйәттенә лә* хас. “Мәргән менән Маянһылыу”, “Тарғын менән Ҡужаҡ”, “Ҡыпсаҡ егете менән башҡорт ҡыҙы” һ.б. ҡомартҡыларҙы шундайҙар рәтенә индерергә мөмкин.

Әйтештәр үҙҙәренең айырым сифаттары менән *нәзирә* жанрына ла бик яҡын. Ғәрәп теленән ул “яуап” тип тәржемә ителеп, “ярыш, бәхәс” тигән мәғәнәләрҙе лә үҙ эсенә ала. Әгәр ҙә әйтеш, фольклор емеше булараҡ, күберәк телдән, импровизация юлы менән, кәмендә ике йырау, сәсән йәки шағир ҡатнашлығында башҡарылһа, нәзирә иһә ниндәй ҙә булһа шағирҙың үҙенә тиклем йәшәгән авторҙың айырым әҫәренә яуап рәүешендә яҙыла. Ул – әҙәбиәт жанры. Айырыуса шәреғ әҙәбиәттәрендә уның үрнәктәре күп, көнбайыш халыҡтарында ла шуға яҡын жанр формалары бар. Яңы быуын шағиры үҙе үрнәк итеп алған әҫәрҙең төҙөлөшөн, строфа үлсәмен, рифмалар системаһын һаҡлап, идея йәһәтенән айырылып торған, һүҙ сәнғәтендә яңы һүҙ булырҙай әҫәр ижад итә. Һәр замандың рухи ҡиммәттәре, идеалдары, йәмғиәттә хөкөм һөргән тәртиптәр үҙенә башҡа, шунлыҡтан яңы быуын әҙибе үткән заман күренештәренә тәнҡит менән ҡарай, теге йәки был мәсьәләләргә, традицион сюжет һәм образдарға үҙенсә баһа бирә. Йәғни, ул үҙенә тиклемге ижадсы менән бәхәскә инә. Мәҫәлән, Низамиҙың (XII быуат) билдәле хәмсәһенә яуап рәүешендә Дихләүи, Джами, Науаи кеүек атаҡлы әҙиптәрҙең биш мәснәүиҙән (йәки поэма) торған хәмсәләре донъяға килә. Ғ. Науаиҙың мәснәүиҙәренән “Ҡоштар теле” әҫәре Ф. Аттарҙың “Ҡоштар әңгәмәһе”нә нәзирә булып тора. Яңы осор шағиры Р. Ниғмәтиҙең “Тимер юлы” шиғыры рус яҙыусыһы Н. Некрасовтың “Железная дорога” поэмаһына нәзирә рәүешендә яҙылғанлығы билдәле [1, 24-се бит]. Ысынлап та, әгәр рус яҙыусыһы Себер тимер юлын меңәрләгән эшселәрҙең һөйәктәре өҫтөндә ҡалҡып сығыуын тасуирлап, шул образ аша Рәсәй империяһының халыҡтарҙы изеүсән сәйәсәтен фашлаһа, башҡорт яҙыусыһы үткән быуаттың утыҙынсы йылдарында Өфө-Ишембай тимер юлы төҙөлөүен совет иленең бөйөк ҡаҙанышы,

уның еңеүле, ышаныслы аҙымдар менән алға барыуын данлап сыға. Бер үк образға яңы шарттарҙа өр-яңы мәғәнә һалына.

Аңлашылыуынса, яңы һәм иҫке әҫәрҙәр, авторҙар араһында оло ваҡыт арауығы ята, ике-өс, хатта унан да күберәк быуаттарҙан һуң да бер үк әҫәргә әллә күпме нәзирә яҙылыуы ихтимал.

Был жанр яҙма мәҙәниәттә традиция менән новаторлыҡ күренештәрен берлектә ҡарарға мөмкинлек бирә, уның булмышы һәм йәшәйеше тик нәфис әҙәбиәт менән генә сикләнмәй.“Нәзирә жанры үҙенсәлектәре әҙәби әҫәр генә түгел, ә ғилми проза, ярым документаль хеҙмәттәргә лә йоғоусан”, – тип яҙа, мәҫәлән, әҙәбиәтсе ғалим И.К. Янбаев. Ул Джами менән Ансари, әл-Исфихани менән Зәмәхшәри, Р. Фәхретдинов менән Ш. Мәржәни һ.б. хеҙмәттәре араһындағы шундай бәйләнештәрҙе күҙәтеп, әлеге һығымтаға килә [8, 68-69-сы биттәр].

Фарсы телле әҙәбиәттә урта быуаттарҙа уҡ үҙенең тәғәйенләнеше һәм вазифаһы менән беҙҙәге әйтеш жанрына яҡын *мөнәзирә* жанры йәшәгән. Ул да шиғри бәхәс формаһын алып киткән. Был ярышта бер төбәктә йәшәгән шағирҙар ҙа, төрлә әҙәби йүнәлештәрҙең, мәктәптәрҙең вәкилдәре булған әҙиптәр ҙә ҡатнашҡан. Әйтәйек, уларҙың береһе импровизация юлы менән берәй шиғри юлды башлап ебәрһә, икенсеһе дауам итергә тейеш булған. Ул әҙиптәрҙең ижад маһирлығына, үҙенә тиклем йәшәгән бөйөк шағирҙарҙың мираҫын белеү кимәленә үҙенсәлекле имтихан төҫөн дә алып киткән. Мәҫәлән, Мәхмүт Ғәзнәүи солтанға үҙ әҫәрен бүләккә алып барған А. Фирҙәүси менән һарай шағиры Унсури араһында, Бағдад хакимы һарайында ижад иткән Хатими (X быуат) менән шунда уҡ хеҙмәткә саҡырылған атаҡлы шағир Мөтәнәбби араһында шундай көсөргәнешле ярыштарҙың булыуы киң билдәле [1, 132-се бит].

Шиғри бәйгеләргә оҡшаш күренештәр рус әҙәбиәтендә лә бар, әлбиттә. Әйтәйек, XVIII, XIX-XX быуат башында ижад иткән ҡайһы бер рус шағирҙары үҙ-ара ярышыуҙан бигерәк, үҙҙәре һөйләшеп килешкән ниндәй ҙә булһа тема буйынса яҡшыраҡ әҫәр яҙыу йәки айырым әҫәрҙе тәржемә итеү шарты менән ярыш ойоштороп ғандар. Мәҫәлән, К.Д. Бальмонд менән В.Я. Брюсов араһындағы оҙаҡ йылдарға һуҙылған әҙәби бәхәстәренең үҙенсәлектәрен өйрәнеүгә айырым хеҙмәттәр арналған [3].

Әйтеш жанры мәғрифәтселәр ижадында ла күҙәтелә. Мәҫәлән, Мифтахетдин Аҡмулла 1894 йылда Өфөгә килеп башҡорт зыялылары, шул иҫәптән, Ризаитдин Фәхретдинов менән яҡындан таныша. Байтаҡ күренекле шәхестәр ҡатнашҡан бер мәжлестә М.Аҡмулла менән М.Өмөтбаевтың шиғыр әйтеше ойошторола [7, 16-сы бит].

Шулай итеп, башҡорт һүҙ сәнғәтендә әйтеш жанрының бик боронғо осорҙарҙан уҡ билдәле булыуын ышаныслы раҫлай алабыҙ. Уның бер тамыры халыҡ ижадына – йырау һәм сәсәндәрҙеңимпровизацияһына барып ялғанһа, икенсеһе – фольклор йоғонтоһон кисергән милли әҙәби традицияларҙың үҫеше менән бәйле. Шул уҡ ваҡытта ундай тәжрибәнең, бүтән жанр формаларының йәшәү рәүешенә хас булған кеүек, башҡорт рухиәтен борондан уҡ һуғарып килгән шәрҡ мәҙәниәте ҡаҙаныштары менән дә бәйләргә мөмкин.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Баимов Р.Н. Великие лики и литературные памятники Востока. Уфа: Гилем, 2005. 496 с.

2. Башҡорт халыҡ ижады. 5-се том. Тарихи ҡобайырҙар, хикәйәттәр (иртәктәр). – Өфө: Китап, 2000. 392 бит.

3. Жиронкина О.А. К.Д. Бальмонд и В.Я. Брюсов: состязание в поэтической практике. Автореферат дис. на соиск. ученой степени канд. филол. наук. М., 2013. 25 с.

4. Иҙелбаев М.Х. Тарихи дәүерҙәр һәм ауыҙ-тел әҙәбиәте / Башҡорт дәүләт университеты нәшриәте. – Өфө, 1999. 110 бит.

5. История башкирского народа. В семи томах. Том 2. М.: Наука, 2009. 378 с.

6. Хөсәйенов Ғ.Б. Әҙәбиәт ғилеме һүҙлеге. – Өфө: Китап, 2006. 248 бит.

7. Яйыҡбаев К.Я. Мәғрифәтсе мөғәллимдәр, күренекле уҡытыусылар һәм мәғариф эшмәкәрҙәре (тарихи-педагогик очерктар һәм һүрәтләмәләр). Беренсе китап. – Өфө: Китап, 2003. 256 бит.

8. Янбаев И.К. Шәрҡ эпик традицияларының һәм Риза Фәхретдиновтың “Аҫар” китаптары. – Өфө: БДУ, 2005. 153 бит.

© Янбаева И.И., Әлибаев З.А., 2023

УДК 821.512.141.09

Янбаев И.К.,
филол. фәнд. канд., доц.,
Өфө университеты

Т. ҒАРИПОВАНЫҢ «БӨЙРӘКӘЙ» РОМАНЫНДА ДИУАНАЛЫҠ ФЕНОМЕНЫ

Милли мәҙәниәттәрҙә диуана (юродивый) тибындағы геройҙарҙың үҙ урыны бар. Боронғо осорҙан бөгөнгө көнгә кәҙәр, йәмғиәттә уларға ҡарата формалашҡан ҡараштарҙан сығып, был архетиптың әҙәби герой сифатындағы билдәле эволюция кисереүе, уның функциональ

йөкмәткеһенең даими үзгәреше күзәтелә. Мәҫәлән, рус әҙәбиәтендә XIX быуаттың икенсе яртыһында уҡ оҙайлы ваҡыт эсендә трансформация кисергән был психологик типтың төрлө яҡлап һүрәтләнешен асыҡ күргә мөмкин. Ғилми әҙәбиәттә Л.Н. Толстойҙың “Детство” повесы, Г.И. Успенскийҙың “Парамон юродивый”, “Алеша Горшок” , Н.С.Лесковтың “Шерамур” хикәйәләре, М.Е. Салтыков-Щедриндың “Губернские очерки”, “История одного города” әҫәрҙәре, Ф.М. Достоевскийҙың “Бедные люди”, “Идиот” романдарының геройҙары ентекле өйрәнелгән [5]. Башҡорт әҙәбиәтендә бындай геройҙарҙы Мостай Кәрим, Мирас Иҙелбаев, Мөнир Ҡунафин һ.б әҙиптәрҙең әҫәрҙәрендә байтаҡ осратырға була.

Беҙ иһә әлегә халыҡ аңында ныҒынып киткән милли типтың конкрет яҙыусы әҫәрендә художестволы кәүҙәләндерелеү үҙенсәлектәренә иғтибар итмәксебеҙ.

“Бөйрәкәй” романында донъя әҙәбиәттәрендә күптән билдәле Юродивый образына бик тә яҡын Шаңгәрәй образы бар. “Сүп-сар өйөмө араһында шуларҙан да бысрағыраҡ” Шаңгәрәйҙе, “бала аҡыллы, еткән егетте” Шарик тип тә йөрөтәләр. Тумалаҡ битле, ҙур башлы, ҡыҫҡа ғына аяҡлы Хоҙай бәндәһенә ныҡлап йәбешкән ул ҡушамат. Эттәргә генә таҡмалы ҡушамат Ишмөхәммәт-Ишмәмәттең тәүге ҡатынынан тыуған был малай әсәһе тере саҡта “урамда эт талаштырып, әбей-һәбейҙең кәртәһенә төшөп йомортҡаһын урлап, баҙына төшөп ҡаймағын ялап, эт өрҙөрөп, кеше көлдөрөп, ауылда йәшәгән” был кешенең булмышына ҡарап бирелгән. Ул исемдең тағылыуын тағы ла үҙе тәпәш, үҙе йыуан кәүҙәле диуананың шар һымаҡ, муйынһыҙ, тирмән ташылай “иләмһеҙ ҙур башлы” булыуы, “туптай тәгәрәп йөрөүе” менән дә бәйләргә мөмкин. Шаңгәрәй образы характер булараҡ түгел, ә психологик тип булараҡ уйланылған.

Ейәнсәрен үҙенә биреүҙе һорап йөрөгән Һатыбал диуана хаҡында һүҙ сыҡҡанында Күкһыу өләсәһе ейәнсәре Барсынға: “Хоҙай бәндәгә зиһен менән тойомдо тигеҙ бүлешмәй... Берәүҙә – зиһен, тойом юҡ; икенселә тойом көслө – зиһен юҡ” тип, диуананан үҙен кисереүҙе, ярлыҡауҙы һорарға тейешлекте төшөндөрөргә тырыша. Ысынлап та, Һатыбалдарға иш Алла бәндәһе Шаңгәрәй тойомлау, башҡалар күҙенә күренмәгән нәмәләрҙе күрә алыу һәләтенә эйә. Уның: “Ихшанбай, һинең... мөһөрөң... ни ереңдә?” – тип һорауында, “мөһөрөңдө күрһәт” тип бәйләнеүендә лә ҙур мәғәнә бар. Ихсанбайҙың атаһы Сибәғәт ҡарттың уң битендә, ҡолаҡ эргәһендә урыҫ тәреһенә оҡшаған ҡара миңдең булыуы, ул нәҫел тамғаһының улына, Гөлбаныуҙан тыуған игеҙ

ейәндәренә лә күсеүе әйтелә. Ул малайҙарҙың Хашимдың түгел, ә Ихсанбай улдары икәнен дә, Гөлбаныуҙың һәләкәтенә уның ғына сәбәпсе икәнен, Рауза кеүек үк, ул да яҡшы белә, Тәңребирҙе әүлиәнең ҡылысын табып, “Ихсанбайҙың эсендә” ултырған ҡатынды ҡотҡарыу теләгән йөрәтә. Фәүзиәнең үҙ ейәндәренә кеше күҙенән йәшереп азыҡ-түлек, икмәк-фәләп биреп тороуын да яҡшы төшөнөп тора. Игеҙәктәр һәләк булғас, ап-аҡтан кейенгән ҡарсыҡтың төндәрен көл араһын соҡоп, Йәнтимер менән Биктимерҙең һөйәктәрен эҙләп ултырыуын да, Ишмөхәмәт ҡиәфәтендә өйөнә килеп йәшәй башлаған әүермән Ихсанбайҙың да үҙ атаһы түгеллеген Шәңгәрәй яҡшы һиҙә, Хашимға: “Атам юҡ минең! <...> Беҙҙең өйгә убыр эйәләсте!”,- тип һөйләй. Күктәрҙә аҡ фәрештәләргә ҡаршы өҙлөкһөҙ һуғыш алып барған ҡара фәрештәләрҙең береһе итеп күрә ул Ихсанбай-Ишмәмәтте. Әсәһенең “диуананы рәнйеткән кешегә ҡот йоҡмай” тигән һүҙҙәрен тиҙ онотҡан Хашим да ҡайһы саҡ шулай уйлап ҡуя: диуаналарҙы Хаҡ Тәғәлә бәндәнең игелеген үлсәр өсөн яратмаған микән?. Ноҡотсо, им-томсо, күрәҙәсе Мөғлифә ҡарсыҡ та яҙмыш юратырға килгән Ишмөхәмәт менән Зарифаға, сәйлек аҡсаларынан баш тартып: “Хәйер-фатиханы күберәк шул баланан алырға тырыш. Диуананы рәнйеткән бәндә тамуҡта яныр булыр...”, – ти.

Күрәҙәлек сифаттарын да йөрәтә Шәңгәрәй: сабый хөкөмөндәге бәндәләр, ат менән эт кеүек, уҫал кешене үтәнән-үтә күрә, имеш. Мәҙинәнең балаһы хаҡында һүҙ сыҡҡас, ул Хашимға: “Минең атам да сәңгелдәктә ята... Алыҫта!”, – ти. Ихсанбай тарафынан үлтерелгән атаһы Ишмөхәмәттең кәүҙәһенең яр ситендә үҫкән, Барсынбикәгә мәңгелектең үҙе кеүек тойолған ҡарама ағасының дәү ботаҡтарынан торған сатырға эленеп ҡалыуы – ер менән күк араһында, һәс тә сәңгелдәктә ятҡандай тороп ҡалыуын күҙаллап әйтеүе был.

Булмыштарына күрә, бындай типтар тышҡы ҡиәфәте, кейем-һалымы менән дә бүтәндәрҙән айырылып тороусан. Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышына барған Шәңгәрәйҙең портреты шулай бирелә: “Аҡ күлдәк, ҡыҙыл галстук, Рауза алып биргән йәшел пинжәк, ҡара салбар тышынан Хөсәйен өҫтөнән систерелгән, ләкин ҡарамаҡҡа ярайһы бөтөн һырма, табанлы булһа ла әллә ни һыйы китмәгән аҡ быйма, ҡышҡы ҡуян тиреһенән тегелгән, хужаһының өлкән башынан ҡош ояһы һымағыраҡ сукайып ултырған бүрек кейгән...”. Раузаның улы Хөсәйендең тыуған көнөнә тип әҙерләнеп, пинжәгенә кәнсир ҡалайынан ҡырҡып йондоҙҙар, “миҙалдар” тағып алған Шәңгәрәй кеүек образдар әҙәбиәттә байтаҡ.

Мәзинәнең ире вафат булғас Шәңгәрәй өсөн донъя ҡараңғылана, ҡояш Әптеләхәт ҡәберенә инеп ятҡандай тойола. Уның төштәре лә ысынға сығыусан. Мәҫәлән, Әптеләхәт үлгәс күргән төшөндә мәрхүм үҙен Саяф үлтереүе хаҡында хәбәр бирә. Диуаналарға хас типик сифаттар байтаҡ Шәңгәрәйҙә. Рауза әйтмешләй, мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға уның. “Кешеләр уны иҫәр ти, ә үҙҙәре Шәңгәрәй белгәндең яртыһын да белмәйҙәр. Ул хатта ҡайһы саҡ аптырай биреп тә ҡуя: артыҡ күпте белгәнгә уны һармаҡ тип уйламайҙар микән?”, – тип уйлана диуана үҙе хаҡында. Әптеләхәт ҡәбере, хәс әүлиә ҡәбереләй, ҙур шар кеүек яҡтырып, нур бөркөп торғандай. Ул, әүлиәләй, иҫе инәле-сығалы булып, мәрхүмдең ҡәбере янында ойоп та китә. Үҙе ҡатнашҡан “Алырым-алырым аҫыл ҡош” уйынындағы мәскәй әбей ише, Шәңгәрәй үҙе – күктә, шул уҡ ваҡытта ергә лә йәбешкән, “ятҡан һайын һөйәктәре ергә нығыраҡ һеңә, ә йәне бейеккәрәк оса”. Шул рәүешле мәрткә киткән Шәңгәрәйҙе, үлгәнгә һанап, бүтән кеше өсөн тәғәйенләп ҡаҙылған ҡәбергә ерләп ҡуялар. Уның ҡәберен һыйырҙар туҙҙырып ташлай. Мал, йән эйәләре тере йәнде һиҙә икәнлегенә ышанып, ҡәберҙе кире асалар. “Меҫкен Шәңгәрәй тар ғына гүре күпме туларға ирек бирһә, шул тиклем тулаған, йөҙтүбән әйләнеп ятҡан, бармаҡтары ер тырнап йәнгә талашыуҙан ҡанап, тырнаҡтары айырылып бөткән, киң асылған күҙҙәрендә аптырау һәм һыҙланыу ҡатҡан”. Уны тейешле ғәмәлдәрен үтәп, еренә еткереп, ҡайтанан ерләйҙәр.

Т. Ғарипова гөнаһһыҙ, һис кемгә зыяны теймәгән, бала холоҡло Алла бәндәһенең үлемен шул рәүешле тасуир итеп, уның саф, эскерһеҙ бер йән, бүтәндәргә ҡарағанда ла ер йөҙөндә йәшәргә лайыҡлы әҙәм балаһы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алырға теләй һымаҡ.

Әҫәрҙә ниндәйҙер сәбәп менән сәйер холоҡло булып киткән, толпарҙар, дөлдөлдәр тоҡомонан булған Һарайғыр ише ат ене ҡағылған Хөсәйен образы ла күпмелер диуаналыҡ сифаттарын йөрөтә. Раузаның Шәңгәрәйгә ҡарап: “Был донъяла ике иҫәр булһа, берһе һин, икенсеһе Хөсәйен!”, – тиеүендә оло мәғәнә бар.

Романда Тирәкле ауылы аша “Аллаһу – хаҡ! Аллаһу – хаҡ!”, тип һөрәнләп үтеп йөрөгән һәләмә кейемле Һыуһаҡ бабай ҙа шундай Алла бәндәләренең берһе. Уның типажы, әҫәрҙә тоҡан идея-художество йөкмәткеһе Шәңгәрәй менән ат ене ҡағылған Хөсәйен образдарына яҡыныраҡ. Һыуһаҡ бабай – прототиплы герой. Әҙибәнең тыуған яҡтарында ҡыҙырынып, ауылдан-ауылға йөрөп тамаҡ туйҙырған шундай ҡушаматлы кешенең булыуы билдәле, уның хаҡында халыҡ хәтерендә байтаҡ хәтирәләр һаҡлана. Был эскерһеҙ Һыуһаҡ бабай, йәки

олораҡтар әйтеүенсә – Шаһишәриф диуана, “һыуһаҡ” һүҙен йыш ҡабатлап йөрөр, айырыуса көрһөнгән саҡтарында “Аллаһуһаҡ, Аллаһуһаҡ” тиер булған. Ололар уға ҡарата бик ихтирамлы, яҡшы мөғәмәлә, яҡты йөҙ күрһәткән, халыҡ уны изге, гөнаһһыҙ йән тип иҫәпләгән, уны хәлдән килгәнсә ашатып-эсереп, тоғона ризыҡ һалып оҙатыр булған. Мосафирҙы хөрмәт итеүҙең ҙур сауаплы ғәмәл икәне, уның доғаһы ҡабул булыуы хаҡында риүәйәттәр йөрөгән.

Әҫәрҙә прототип геройҙар уның менән генә сикләнмәй. Исемдәре, эш-ҡылыҡтары, тормоштарының айырым факттары туранан-тура телгә алынмаһа ла, романда үҙәк урынды биләп тороусы архитипик образдарҙы тыуҙырғанда (Бәндәбикә, Күкһыу, Барсынбикә, Мөғлифә) әҙибә халҡыбыҙҙың арҙаҡлы рухани, әүлиә-күрәҙәселәрен – мәшһүр Бәндәбикәне, Мөжәүир, Ғ. Сәйеди, Мөхәммәтсабир Халиҡов, Әбйәлил әүлиә, Шәмсетдин хажи һ.б. – күҙ уңында тотоуы айырым асыҡ.

Шәңгәрәй образы әҫәрҙәге уйҙырма һәм ысынбарлыҡ, реалистик һәм мифологик ҡараштарҙың берлеген сағылдырыуға, романдың сюжет-композицион төйөндәрен барлыҡҡа килтереүгә ярҙам итә, бүтән геройҙарҙың тәбиғәтен, ҡылыҡтарын асып һалыуға булышлыҡ итә. Асылда Шәңгәрәй образы әҫәрҙә диуаналыҡ феноменын һәр яҡлап кәүҙәләндергән, социаль яҡтан әһәмиәтле психологик тип булараҡ сығыш яһай. Киңерәк ҡарағанда, ул яҙыусының донъяға ҡараштары моделен сағылдырыуҙа ҙур урын тота, уның йәмғиәттә хөкөм һөргән кире күренештәргә, рухи ҡоллоҡҡа төшөүенә, халыҡтың әхлаҡи яҡтан түбән тәгәрәүенә, рухи ҡиммәттәрҙең оҫоҙланып, юҡҡа сығыуына ҡаршы протесын символлаштыра.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ғарипова Т.Х. Бөйрәкәй: роман-эпопея / Таңсулпан Ғарипова. – Өфө: Китап, 2020. – 720 бит.

2. Иҙелбаев М.Х. Иҙел йорт: роман. Беренсе китап. Үҫмер егет менән ат башы. – Өфө: Китап, 2013. – 382 бит.

3. Һөйөндөков Хәлил. "Һыуһаҡ бабай" кем ул, йәки диуаналарға мәрхәмәтле булайыҡ! // Киске Өфө, 2021. № 15. 10-16 апрель.

4. Яҡшыбаева Л.Ә. Халҡыбыҙ изгеләре / Лира Әхмәт-Яҡшыбаева. – Өфө: Китап, 2014. – 600 бит.

5. Янчевская К.А. Юродство в русской литературе второй половины XIX века: автореф. дис. на соискание ученой степени канд. филол. наук. Барнаул, 2004. – 22 с.

© Янбаев И.К., 2023

УДК 821.512.141.09

Янгирова Т.Э.,
4 курс, ФБФВиЖ, УУНиТ, г. Стерлитамак
Янбаев И.К.,
канд. филол. наук, доц.

РОЛЬ ДИАЛОГОВ И МОНОЛОГОВ В ЭССЕ М. КАРИМА

Мустай Карим – выдающийся башкирский поэт, прозаик, драматург, публицист и общественный деятель. В его многогранном творчестве отдельное место занимают эссе.

Главное, что бросается в глаза при прочтении эссе Мустая Карима – это, конечно же, диалоги и монологи. Чтобы не загромаждать тексты репликами, писатель старается использовать монологи. Практически все монологи служат вводной частью к эссе. Так, например, в «Золотом дереве» писатель беседуя со старым золотоискателем погружает читателя в проблему и сразу же заставляет задуматься: «*Золото, что в земле, – начал он, – оно еще не золото. Его нет, коли пока я не нашел. Но я хорошо знаю, что найду его, и тогда оно станет золотом. Это еще присказка, – продол жал старатель, – а сказка в другом. Золотая жила в земле, что твое поваленное дерево, имеет свой ствол и свои ветки. Только листьев нет. Попал на одну из ветвей, по ней ты и идешь. Но тебе неведомо, куда оно ведет. Если к стволу с тогда удача. Ошибся направлением – досада горькая. Кротом бестолковым ругаешь себя. Вот так. – Старик впервые посмотрел мне в глаза. – За рисковое дело взялся, сын. Но тайна твоих удач не под землей. Глазами души гляди на мир. Тебе лучше будет видно...»* [1, с. 240].

В этом монологе говорится о вере и уверенности в достижении цели. Монолог начинается с утверждения, что золото, находящееся в земле, не может быть названо золотом, пока оно не будет найдено. Говорящий уверен, что найдет золото и только тогда оно примет свою истинную ценность.

Далее монолог переходит к использованию аналогии между золотом и поваленным деревом. Золотая жила в земле сравнивается со стволом и ветками дерева, по которым наш герой идет в поисках золота. Смысл аналогии заключается в том, что мы не всегда знаем, куда нас приведут наши решения.

Старик говорит о том, что если наш выбор приведет нас «к стволу», куда мы на самом деле хотим попасть, то это будет удачей. Ошибка в направлении приведет к разочарованию и горечи.

Затем старик делится своим советом. Он считает, что ключ к удаче исходит не из земли, где лежит золото, а из нашего внутреннего мира. Говоря о глазах души, старик подчеркивает важность взгляда на мир с умением видеть и понимать его внутреннюю сущность.

Общий тон монолога выражает оптимизм и веру в себя. Это представление о том, что необходима смелость и риск, чтобы достичь своей цели, но что истинное счастье и успех происходят из осознания себя и взгляда на мир с трезвыми и умными глазами души.

Диалоги и монологи используется для того, чтобы передать точку зрения не только самого автора, но и собеседника. Благодаря этому и развивается критическое мышление, которое со временем помогает анализировать происходящее не только из одних уст.

Несомненно, герои Мустая Карима обладают богатым лексическим запасом. Одни из них рассуждают об абстрактных понятиях, другие – о конкретных. Так, например, многие из них включает в свои реплики метафоры, эпитеты и фразеологизмы. В «Аксаковских местах» М. Карима можно проследить метафору ***цифры «лежат»*** в реплике товарища Межлумова*: «Эти цифры пока «лежат» глубоко в земле, но я думаю, что они внушительны»* [1, с. 233]**.**

В эссе и очерках Мустая Карима описываются встречи с очень мудрыми и образованными людьми, у которых за спиной имеется долгий и тернистый путь. Эти люди стремились «плыть против течения» и не останавливались, несмотря на отсутствие поддержки. Они продолжали заниматься своим немаловажным делом.

Примером таких людей является Хаммат Усманов, председатель местного колхоза, с которым Мустай Карим беседует в университете культуры в г. Янауле. В этой беседе писатель приводит интересную аналогию, сравнивая рост малого стебелька с ростом человека. Он говорит, что для роста даже малого стебелька необходима не только влажная почва, но и теплый свет солнца.

Эта аналогия говорит о том, что для развития и процветания человеку необходимы не только материальные блага, но и инициатива. Только при наличии света солнца (то есть поддержки, интереса со стороны общества) человек может достичь своего потенциала и расти. Этот пример Хаммата Усманова подтверждает факт того, что инициатива и стремление к развитию необходимы для достижения успеха, даже в условиях, где поддержка или признание от других людей отсутствуют: «*Если бы десять лет назад мы заговорили об открытии*

университета культуры на селе, то многие нас засмеяли бы: хватили, мол, лишнее. А теперь это стало потребностью людей» [1, с. 241].

Кроме того, в эссе Мустая Карима нередко зарождаются диалоги с иностранными личностями. Это помогает нам понять суть вопроса глубже, то есть далеко за пределами Отечества. Так, к примеру, в «Заветной судьбе» присутствуют реплики по поводу творчества великого киргизского писателя Чингиза Айтматова. Говорящий в первом предложении использует форму газетного репортажа, отмечая, что чем больше популярности писатель достигает за рубежом, тем больше притеснений ему приходится переживать на родине. Это может указывать на противоречивое отношение власти к писателям, которые получают признание за границей: «*У нас в газетах пишут так – чем популярнее советский писатель за рубежом, тем больше притесняют его у себя на родине. Очень популярен у нас Ч. Айтматов. Каково его положение у вас?*» [1, с. 275].

Затем говорящий утверждает, что Ч. Айтматов очень популярен в СССР: «*Очень высокое и в литературе, и в обществе, и в правительстве*» [1, с. 275]. Это свидетельствует о высокой оценке писателя и его литературных работ со стороны общества.

В репликах Мустая Карима с собеседником нередко проявляются черты национального самосознания. Данное самосознание является очень важным оружием на пути к становлению и развитию культуры, образования и общества в целом. Люди, борющиеся за сохранение национальной идентичности, используют как традиционные методы, так и экспериментируют новые:

– Чего ты больше всего боишься в твоем деле?

– Потерять нить, – ответил он и уточнил, – нить, что связывает традиции с экспериментом, сердце с разумом.

– В таком случае, почему столь рьяно занимаешься опытами? – не унимался я.

– Во-первых, эксперимент в нашем ремесле – суть движения. К тому же, во-вторых, вкусы у зрителя разные, а театр в городе один. Я хочу создать единство из разнообразия [1, с. 284-285].

Продолжая тему национального самосознания, стоит учитывать, что Мустай Карим обращался к творчеству не только башкирский поэтов и писателей. Его перо нередко писало о творческих личностях, проживающих далеко за пределами БАССР. Публицист чаще раскрывал творчество тюркоязычных писателей и поэтов. В эссе «Возмужание» Мустай Карим пытается дать положительную оценку творчеству

казахского писателя и драматурга Сабита Досанова: «*Многие годы я по возможности слежу за творчеством Сабита Досанова. Он не из тех счастливых талантов, которые вспыхивают сразу, завоевывают признание и славу*» [1, с. 287]. Стоит понимать, что данный писатель зачастую в своих произведениях обращается ко всему казахскому народу, который, как и другие, находится в «застое», так как для развития языка необходимо непрерывные действия: развитие национального образования, литературы, драматургии и культуры. Его точку зрения, несомненно, разделяет и сам Мустай Карим: «*Теперь он в своей прозе и публицистике, как говорят сейчас, выходит на прямой диалог со своим народом. А в диалоге неизбежны и претензии, и упреки. Значит, более смелым становится мысль писателя, более чутким – его сердце*» [1, с. 288]. Однако более эмоциональным и содержательным является краткий монолог-обращение писателя: «*Думай, размышляй, казах*!» [1, с. 288].

Таким образом, монологи и диалоги в эссе Мустая Карима играют немаловажную роль. Они не только заключает в себе ту или иную информацию, необходимую для развития сюжета, но и выступает в изобразительной функции, рисуя облик героя, у которого своя манера речевого поведения. Кроме этого, благодаря диалогам и монологам мы можем проследить за лексическим запасом того или иного субъекта речи и за его целями, мотивами.

Список литературы:

1. Мостай Кәрим. Әҫәрҙәр. XI том: очерктар, баһаламалар, ҡыҫҡа мәҡәләләр, хаттар. – Өфө: Китап, 2020. – 440 б.

2. Мустай Карим. Мгновения жизни / М. Карим; пер. И. Каримов. – Уфа: Китап, 2004. – 376 с.

© Янгирова Т.Э., Янбаев И.К., 2023

УДК 821.512.141

Ярмөхәмәтова Г.Э.,
3 курс, БФШһЖ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

ТАҢСУЛПАН ҒАРИПОВАНЫҢ “ҠАНАТЛЫ БӘХЕТКӘЙЕМ” ПОВЕСЫНЫҢ ХУДОЖЕСТВО ҮҘЕНСӘЛЕКТӘРЕ

Хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙ прозаһы – тормош тураһында проза. Ҡатын-ҡыҙ прозаһында авторҙар яңғыҙ геройҙар тыуҙырмай, улар сюжет

һыҙығының бөтә асыштарын сағылдыра. Хәҙерге заман ҡатын-ҡыҙ прозаһында сюжеттың нигеҙе – көнкүреш тарихы, ул һәр кем менән бөтөнләй мажараға әйләнергә мөмкин.

Ҡатын-ҡыҙ прозаһының үҙенсәлектәре һүрәтләнгән хәлде еңеп сығыуҙан түгел, ә геройҙарҙың ниндәй һабаҡтарҙан алыуынан тора. Уҡыусы ла үҙ фекерен белдерә, маҡсатына ирешә. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙ прозаһын йыш ҡына фәлсәфәүи сигенеүле көнкүреш әҫәрҙәренә индерәләр.

Ҡатын-ҡыҙ прозаһында мөһим урын алған Таңсулпан Ғарипова хәҙерге тормоштоң социаль-психологик һәм әхлаҡи проблемаларын өйрәнә. Автор кешенең һәм уның тирә-яғының үҙ-ара мөнәсәбәттәренә, әхлаҡлылыҡты һаҡлауға бәйле мәсьәләләрҙе ҡуҙғата [2, 142].

“Ҡанатлы бәхеткәйем” [1] повесында бәхет төшөнсәһе нигеҙендә кешелек мөнәсәбәттәре сағылыш таба. Повеста ваҡиғалар өс пар образға бәйләп үҫтерелә. Улар – Зәйнулла – Хәҙисә, Шамил – Шәмғиә, Ғәзиз – Наза. Һәр береһенең үҙ тормошо, үҙ яҙмышы, үҙ ҡарашы. Ниндәйҙер глобаль мәсьәләләр хаҡында һүҙ ҡуйыртылмай повеста. Бары тик көндәлек тормош, көндәлек мәшәҡәттәр (ғаилә, күршелек мөнәсәбәттәре, йорт-хужалыҡ мәсьәләләре) менән бәйле ваҡиғалар ағышы. Әммә шуның аша кешелек донъяһының мәңгелек серле һорауы-бәхет темаһы төп мәсьәлә юғарылығына күтәрелә.

Повестың башында (йәғни экспозиция) Зәйнулла менән танышабыҙ. Заманында белем, һөнәр ҙә алған, һөҙөмтәлә, бригадир, профком рәйесе, партком секретары вазифаларын үтәгән, ғаилә ҡороп, балалар ҙа үҫтергән. Хужалығы бөтөн, тормошо етеш тә, тик тәүге ҡатыны бөтмөр Хәсбиямалы иҫенән сыҡмай. Әлеге ҡатыны Хәҙисәһе менән сағыштырып ҡарай ҙа, юҡ-юҡта күңелен төшөнкө уйҙар биләй башлай.

Тыштан ғаилә татыу ғына тойола, әммә ике яҡлы йылы мөнәсәбәттәр һиҙелмәй. Ҡатынына, балаларын ҡаҡмайынса, үҙ күреп тәрбиәләүенә генә рәхмәтле Зәйнулла. Ә күңеленең иң төбөндә бөтөнләй икенсе кеше – Наза. Ошо рәүешле, әлеге мәлдә Зәйнулла ҡатын бәхетенән мәхрүм һымаҡ. Ә Хәҙисә, киреһенсә, Зәйнуллаһынан ҡәнәғәт, өлөшөмә төшкән көмөшөм тип ҡыуана, шуның менән үҙен бәхетле һанай. Зәйнулланы ҡулынан ысҡындырғыһы килмәй. Назанан көнләшеүе лә шунан. Тик Хоҙай Тәғәлә Хәҙисәне бала бәхетенән мәхрүм иткән. Ана шуға күрә Зәйнулланың балаларын яҡын күреп, әсәләрсә хәстәрлек күрергә тырыша.

Шамилдың да яҙмышы бик шыма юлдарҙан ғына бармаған. Йәшлек ҡыҙыулығы арҡаһында төрмәгә эләгә. Унан утыҙ йәшкә етеп ҡайта. Иҫәбе – Назаға өйләнеү, тик ҡыҙҙың әсәһе риза түгел. Шул арҡала, бүтәнсә һайланып тормайынса, Шәмғиәгә өйләнә. Бер-береһенә ярап ҡына йәшәп китәләр, тик уларға ла бала бәхете татып ҡыуанырға насип булмай. Бына-бына булыр тип өмөтләнеп, ғүмерҙең емешле осоро ла үтеп китә. Бала бағыуға өмөт һүнһә лә, Шамилдың күңелендә башҡа өмөт һис кенә лә һүрелмәй: ул – Наза. Ә ул атайһыҙ үҫә, әсәһенең ҡушыуы буйынса яҡындан күреп белмәгән кешегә кейәүгә сыға. Уныһы ла игеҙәк ҡыҙҙарын етем ҡалдырып, фажиғәле рәүештә һәләк була. Юғалып ҡалмай Наза: ҡыҙҙарын үҫтереп, уҡытып, кеше итә. Бер килке Италияла ла йәшәп ала. Йылдар үтеү менән күңеле тыуған яҡтарға тарта. Урау-урау оҙон юлдар аша һуңлап булһа ла үҙ бәхетен таба.

Артабанғы ваҡиғалар барышында әҫәр геройҙарының тағы өр-яңы сифаттары асыла. Шәмғиә менән Хәҙисә тыштан әхирәттәр күренһә лә, бер-береһенә ҡарата ихласлыҡ һиҙелмәй.

Әҫәрҙә кульминацион мәл – Шамил менән Зәйнулланың ҡатындары менән Назаларға ҡайғы уртаҡлашып, хәл белешергә, кәрәгенсә ерләшеү саралары күрергә килеүе. Әҫәр һуңында Зәйнулла менән Хәҙисә лә, Шамил менән Шәмғиә лә үҙгәргән һымаҡ тойола. Һәр ике пар араһында татыулыҡ, бер-береһенә ихтирам артҡандай, иңдәренән ауыр йөк төшкәндәй, күңелдәрендә ниндәйҙер ынтылыш хистәре тыуғандай. Алда тормош дауам итә, ҡалған ғүмерҙәрҙе матур итеп йәшәргә кәрәк, тигән уйҙа ҡала повесть геройҙары.

Был Наза менән Ғәзиздең тормош асылы, йәшәү өлгөһө тәьҫире. Повестың шундай күтәренке рухта тамамланыуы уҡыусы күңеленә лә кинәнес бирә. Образдарҙың характер үҙенсәлектәре лә, хәл-ваҡиғаларҙың тормошсанлығы ла шуға бәйле [3].

Шулай итеп, повесть бәхет төшөнсәһе аша йәшәү мәғәнәһе, йәшәү рәүеше, кешенең тормоштағы урыны кеүек фәлсәфәүи һорауҙарҙы ла алға ҡуя. Йомғаҡлап, тағы ла шуны әйтергә кәрәк: Т. Ғарипова бөтә әҫәрҙәрендә киң күңелле, батыр геройҙар аша уҡыусыларға фәһем алырлыҡ ваҡиғаларҙы әҙибә оҫта итеп һүрәтләй.

Яҙыусы ерҙә кешелекте, матурлыҡты, күңелдәр сафлығын, әҙәплелекте яҡлап көрәшкән, кешеләр йөрәгендә бер-береһенә ихтирам, дуҫлыҡ, туғанлыҡ тойғоларын уятырға, насар юлға баҫмаҫҡа, үҙ илеңә, халҡыңа хеҙмәт итергә ынтылып йәшәй.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ғарипова Т.Х. Ай менән Ҡояш бер генә. Повесть, хикәйәләр. **[Текст] /** Т.Х. Ғарипова. – Өфө: Башҡортостан китап нәшриәте, 1990. – 272 бит.

2. Гәрәева Г.Н. Бөгөнгө повесть: [бөгөнгө башҡорт прозаһы] Гөлфирә Гәрәева // Ағиҙел. 2012. – № 3. – 140 – 152-се биттәр.

3. Гәрәева Г.Н. Таңсулпан Ғарипова (1947) // Башҡорт прозаиктары: монография. – Өфө: БДУ, 2012. – 325-370 биттәр.

© Ярмөхәмәтова Г.Э., Гәрәева Г.Н., 2023

УДК 821.512.141

Яхина М.М.,
3 курс, БФШһЖ, Өфө университеты студенты
Гәрәева Г.Н.,
филол. фәнд. докт., проф.

АБДУЛХАҠ ИГЕБАЕВ ШИҒРИӘТЕНДӘ ЛИРИК ГЕРОЙ КОНЦЕПЦИЯҺЫ

Башҡортостандың халыҡ шағиры Абдулхаҡ Игебаев ижады бер кемде лә битараф ҡалдырмай. Ҡайнар хистәр менән байытылған, образдары яғынан сағыу биҙәкле, ҡанатлы шиғырҙары ватансыллыҡ мотивтары менән тәрән һуғарылған. Бөгөн дә беҙ, йәш быуын уҡыусылары Абдулхаҡ Игебаевтың нескә, хиссән лирик әҫәрҙәре менән һоҡланабыҙ.

Абдулхаҡ Игебаев лирикаһы тураһында әҙәбиәт ғилеменең күренекле вәкилдәре Х. Ғиләжев [1], Ғ.Б. Хөсәйенов [4], Ә.Н. Хәбиров [5] кеүек ғалимдар үҙ замананыда байтаҡ мәҡәләләр яҙҙы. Ләкин уның ижадының лирик асылы, төп образдары хаҡында әйтелмәгән фекерҙәр байтаҡ тип уйлайбыҙ.

Абдулхаҡ Игебаев шиғриәтендәге лирик герой концепцияһы тураһында ла өйрәнерлек һорауҙар бар әле. Шуға ла, мәҡәләлә күтәрелгән проблема тәрән һәм актуаль.

Лирик герой – ул шиғри әҫәрҙә шағирҙың хис-тойғоларын еткереүсе субъект. Тимәк, уның концепцияһы – шағирҙың индивидуаллеген, доньяны тойоуын күрһәтеүсе һыҙаттар, төп лирик образдың характеристикалары [2, 46-сы б.].

Тәү сиратта Абдулхаҡ Игебаев ижадындағы лирик геройҙың индивидуаллеген, уның тәрән хисле, ялҡынлы публицистик,

гражданлыҡ уты менән яныусы икәнлеген билдәләп үтергә кәрәк. Мәҫәлән, Абдулхаҡ Игебаевтың гражданлыҡ лирикаһында уның тыуған төйәге – Ирәндек һәм Баймаҡ образдары сағылыш таба, ә лирик геройҙың үҙенсәлектәрен күберәк гражданлыҡ пафосы билдәләй:

Эй, аҡһаҡал, сал тарихтың
Йомғаҡтарын һүт әле,
Ирәндеккә – Йәнтөйәккә
Ҡарағастай тамыр йәйгән
Иң аҫаба, йор башҡорттар –
Беҙ – Баймаҡтар бит әле! [3, 122-се б.].

Тыуған яғы – Күсейҙәргә арнап яҙған шиғырында ла публицистик аһәңлелек ярылып ята, лирик геройҙың йөрәк тибеше, күңел донъяһы үҙенең ҡатмарлылығы һәм фәлсәфәгә нигеҙләнеүе менән алдыра.

Бөгөнгөнө барлар һәм баһалар өсөн халыҡтың тарихына, булмышына күҙ һалыу ғына аҙ, уның йөкмәткеһенә төшөнөү зарур. Шуға ла А. Игебаев бындай тәғлимәттәрҙең ҡиммәттәрен белә, һәр нәмәгә аҡһаҡал күҙлегенән баға.

Күк Ирәндек йырсыһын – Абдулхаҡ Игебаевты тыуған яғы тәбиғәтенең бөгөнгө хәл-торошо борсоуға һала. «Мин – тәбиғәт балаһы» ҡобайырында бына нимә ти ул :

Болоҡһойҙар сәскәләр,
Башы һыйыр юлаҡтан
Әүәлгесә елдереп
Килеп сыҡмай йәтсәләр,
Һайрар ҡошон юҡһынып
Зар илайҙар сәхрәләр!
Екән һулый, күл ҡорой,
Эсер һыуҙар ыулана,
Гүйә, хәүеф һиҙенеп,
Быуаттар төпкөлөнән
Боронғо мәмерйәләр,
Арҡайымдар шомлана..., [3, 54-се б.] – ти ул.

А. Игебаевтың лирик геройы – мөхәббәткә сарсаған шәхес. Лирик геройҙың һөйгән йәре – Йәнгүзәл образы “Мөхәббәт йыры” поэмаһында йыш сағылыш таба.

Йәнгүзәленә әйтелгән һөйөү һүҙҙәре, уға ҡарата мөнәсәбәте поэманың тәүге юлдарынан уҡ төҫмөрләнә башлай. Әйтәйек, Йәнгүзәлен күргән һайын, лирик геройҙың күңел көмбәҙендә ҡапыл ғына ай балҡып китә; киреһенсә, яратҡан йәренең наҙлы ҡарашын

күрмәй торһа, йыры етем ҡала; зарығып көткән минуттарҙа оҙаҡ килмәй торһа, иң ҡәҙерле хыялдары менән хушлашыр һымаҡ; яҙмыш юлы йәне яратҡанын йыраҡ алып китһә, сарсап һағыныуҙан йөрәгенә ҡандар һауыр һымаҡ; ғөмүмән, Йәнгүзәле менән бергә булһа ғына, лирик геройҙың донъяһы бөтөн [5, 129-сы б.].

А. Игебаевтың лирик геройы бөтә шиғри юлында кисергәнде, намыҫы ҡушҡанды яҙыуын дауам итә. «Һайланма әҫәрҙәр»гә ингән шиғырҙарының өстән бере тип әйтерлек үҙҙәренең яҙылыу йылдары менән илде үҙгәртеп ҡора башлаған осорға тура килә.

Тик бына замандаштары күңелен нурларҙай һүҙҙәр табыуы ғына бер аҙ ауырлаша төшкән һымаҡ шағирға. Бошоноу, юҡһыныу, яманһыулау, болоҡһоу тойғолары менән һуғарылған әҫәрҙәрҙең күренгеләп китеүе шулай уйларға мәжбүр итә:

Бер нигә лә күңелем төшмәй минең,
Йәнде өйкәй шомло тынлыҡтар,
Ah... ауыр ҙа, ғазаплы ла икән
Шиғыр яҙылмаған минуттар [3, 49-сы б.].

Тимәк, Абдулхаҡ Игебаевтың лирик геройы концепцияһы башҡорт шиғриәтендә үҙ илен, тәбиғәтен һөйөүсе, мөхәббәткә сарсаусы, хисле, тәрән кисерештәргә эйә шәхес булараҡ күҙ алдына баҫа. Уның шиғырҙарындағы лирик герой субъекты үҙ халҡы зарынан, иле матурлығынан, донъяуи хистәрҙән айырылғыһыҙ булып тора.

Әҙәбиәт исемлеге:

1. Ғиләжев Х. Көр күңелле ихлас йырсы // Ғиләжев Х. Һайланма әҫәрҙәр. – Өфө: Китап, 1980. – 16-19-сы бб.

2. Есин А.Б. Принципы и приемы анализа литературного произведения: учеб. пособие. – М.: Флинта; Наука, 2015. – 246 с.

3. Игебаев А. Һайланма әҫәрҙәр. Ике томда. 1-се том: шиғырҙар, поэмалар, ҡобайырҙар. – Өфө: Китап, 2004. – 103 бит.

4. Хөсәйенов Ғ. Замана. Мәҡәләләр. Портреттар. Иҫтәлектәр. Парсалар. – Өфө, 1988. – 360 бит.

5. Хәбиров Ә. Йәнле шишмәләр. Әҙәби портреттар. – Өфө: Китап, 1994. – 215 бит.

© Яхина М.М., Гәрәева Г.Н., 2023

СОДЕРЖАНИЕ / ЙӨКМӘТКЕ

Абдуллина И.С., Янбаев И.К. *Мирас Изелбаевтың «Изел йорт» романының художество үҙенсәлектәре* **5**

Аккизова А.А. *Язык поэмы Д.-Х. Шаваева «предание о борлаке сыне хаху и его белом коне* **8**

Аҡбутина Г.Т., Салауатова Ф.Р. *XX быуат башы башҡорт поэзияһында тәбиғәт темаһы сағылышы* **13**

Аҡъюлова А.А., Гәрәева Г.Н. *Р. Мостай Кәримдең «Ташлама утты, Прометей» трагедияһында азатлыҡ рухы* **15**

Аҡъюлова А.А., Янбаев И.К. *Р. Шәкүр шиғриәтендә лексик сараларҙың төрҙәре булараҡ синонимдар менән антонимдарҙың ҡулланылышы* **18**

Ataýewa L.I., Abdyýewa M.M. *Daşary ýurt dilleriniň ugurdaş ylymlar bilen arabaglanyşygynyň usulyýeti* **22**

Ахмадиев Р.Б. *Некоторые штрихи к творческому портрету поэта* **28**

Байназарова А.Ә., Гәрәева Г.Н. *Талха Ғиниәтуллин әҫәрҙәрендә яугир образы* **29**

Белякина А.Н. *История переводов произведений Ф.Достоевского на казахский язык* **32**

Бикметова Н.И., Гареева Г.Н. *Гражданский пафос в творчестве Талхи Гиниятуллина* **36**

Билалов А.К., Гәрәева Г.Н. *Наил Ғәйетбай прозаһында заман проблемалары сағылышы* **38**

Букреева А.С., Гареева Г.Н. *Актуальные аспекты журналистики и медиа коммуникации* **41**

Буранбаева З.И., Янбаев И.К. *Хәҙерге балалар әҙәбиәтенең ҡайһы бер үҙенсәлектәре* **45**

Вәлиева А.А., Салауатова А.А. *“Кузыйкүрпәс менән Маянһылыу” эпосында ата-әсә һәм бала конфликты* **50**

Вәлиева С.Р., Гәрәева Г.Н. *Таңсулпан Ғарипованың “Илекәй” повесында заман проблемалары* **53**

Гамбарова А.Х., Салауатова Ф.Р. *Башҡорт хикәйәләренең теоретик нигеҙҙәре* **56**

Gylyjowa G.N. *Dil bilimini beýleki ylymlar bilen baglanyşdyryp öwrenmegiň ähmiýeti* **58**

Gylyjowa G.N., Gulgeldiýewa G. *Hünäre gönükdirilen tekstde diskurs-kategoriýalaryň guralmagynda sanly ulgamyň täsiri (“тема” diskurs-kategoriýasynyň esasynda)* **62**

Гусейнова Т.С. *Назначение трансформированных фе в публицистическом тексте* **66**

Гәрәева Г.Н*. Башҡорт әҙәбиәте ғилеменең актуаль мәсьәләләре* **71**

Ғарифуллина А.И., Гәрәева Г.Н. *Гөлсирә Ғиззәтуллина әҫәрҙәрендә характерҙар асылы* **74**

Ғөбәйҙуллина Р.В., Гәрәева Г.Н. *Фәрит Иҫәнғолов повестарының жанр-стиль үҙенсәлектәре* **76**

Ғәбделмәнова Н.Х., Янбаев И.К. *Миләүшә Ҡаһарманова хикәйәләрендә мораль-этик проблемалар* **78**

Ғәлиева Д.И., Гәрәева Г.Н. *Башҡорт шиғриәтендә Зөлфиә Ханнанова ижадында новаторлыҡ традицияларының* **83**

Ғәләүтдинов И.М., Гәрәева Г.Н. *Мостай Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесының поэтикаһы* **86**

Давлятгареева Х.И., Исянгулова Г.А. *Особенности изучения творчества писателя на уроках башкирской литературы* **89**

Дәүләтгәрәева Х.И., Гәрәева Г.Н. *Р. Бикбаев әҫәрҙәрендә һүрәтләү саралары* **92**

Jorayeva Z.K. *Rhetorical questions-responses in dialogues* **95**

Jumayeva B.A. *An empirical approach to teaching literature* **98**

Зарипова А.З., Гәрәева Г.Н. *Башҡорт тылсымлы әкиәттәренең образдар системаһы* **102**

Ибракова Э.Р., Мостафина Р.Д. *Һәҙиә Дәүләтшинаның «Айбикә» повесында образдар системаһы* **105**

Изрисова Н.С., Гәрәева Г.Н. *Мостай Кәримдең “Оҙон-оҙаҡ бала саҡ” повесында рухи донъя сағылышы* **107**

Искәнйәрова Г.И., Янбаев И.К. *Һибәтулла Сәлихов шиғриәтенең ҡайһы бер үҙенсәлектәре* **109**

Исмәғилова М.У., Гәрәева Г.Н. *Башҡорт прозаһында шәхес культы фажиғәләре сағылышы* **113**

Каримова З.И., Пермякова Л.А. *Особенности работы гида-переводчика* **115**

Карюкова Г.Һ. *Башҡорт халыҡ мәҡәл-әйтемдәренең тәрбиәүи әһәмиәте* **119**

Клысова Г.М. *Литературная карта Башкортостана: Уфа Сергея Довлатова* **122**
Клявлина А.И., Салауатова Ф.Р. *Риза Фәхретдиновтың "Әсмә" повесында ҡатын-ҡыҙ яҙмышы сағылышы* **126**
Криницина М.А. *Вопросы изучения языка художественной литературы: стиль, языковые средства, лингвопоэтика, интертекстуальность* **128**
Кульсарина И.Г., Мустафина В.М. *Структурно-семантические особенности молодежного сленга в русском и башкирском языках* **129**
Ҡаҙаҡбаева А.Д., Гәрәева Г.Н. *Әмир Әминевтың хикәйә һәм повестарында жанр-стиль алымдары* **133**
Ҡаҙарбаева Г.Н., Гәрәева Г.Н. *Ф. Бүләков әҫәрҙәрендә моральэтик проблемалар сағылышы* **137**
Ҡалмырҙина Ф.Н., Салауатова Ф.Р. *Сафуан Яҡшығолов ижадында романтизм* **139**
Ҡалмырҙина Х.Н., Салауатова Ф.Р. *Мөхәмәтсәли Өмөтбаевтың публицистик яҙмаларының идея-тематикаһы* **142**
Ҡарабаева У.Р., Янбаев И.К. *«Йософ ҡиссаһы»ның поэтик тәбиғәте* **144**
Маликова М., Мостафина Р.Д. *Сәғит Агиш хикәйәләренең тематик үҙенсәлектәре* **148**
Маметниязова Г.Х. *Темы патриотизма, гуманизма и здоровья в творчестве Махтумкули* **150**
Монасипова Г.Р., Салауатова Ф.Р. *Шәйхзада Бабич поэзияһының жанр тәбиғәте* **154**
Мостафина Р.Д. *XX быуаттың тәүге яртыһы башҡорт әҙәбиәтендә поэма жанры* **158**
Мөхәмәҙиева А.Ә., Салауатова Ф.Р. *Мәктәптә әҙәбиәт дәрестәрендә афористик жанрҙарҙы өйрәнеү* **161**
Мөхәмәтова З.А., Салауатова Ф.Р. *М. Аҡмулла ижадында аңбелемгә өндәү мотивтары* **164**
Муллағолова А.Р., Гәрәева Г.Н. *Н. Ғәйетбаевтың "Йән" романында образдар системаһы* **167**
Муллағолова А.Р., Абдуллина Г.Р. *Ринат Камалдың "Таня-Таңһылыу" романында эпистоляр стилгә хас үҙенсәлектәр* **170**

Мураками Э.Ф. *Современные методы обучения японскому языку русскоязычных студентов по образовательной программе японских вузов. роль традиционной литературы и фольклора в изучении японского языка* **173**
Нарынбаева А.А., Гәрәева Г.Н. *Ғәли Ибраһимовтың "Бер полк кешеләре" романында сюжет үҫтерелеше* **176**
Никитина К., Салауатова Ф.Р. *XX быуат башы башҡорт әҙәбиәтендә драматургияның формалашыу һәм үҫеү юлдары* **180**
Нәжметдинова Н.М, Гәрәева Г.Н.. *Мостай Кәрим драмаларының идея-тематикаһы, проблематикаһы* **183**
Пермякова Л.А., *Традиции культа Dame De Cœur в русской поэзии* **187**
Рамазанов И.Р., Янбаев И.К. *Бөйөк Ватан һуғышы осоро башҡорт шиғриәтенең агитацион формалары* **191**
Сакулова А.Б. *Формы организации художественной деятельности в специальном образовательном учреждении* **196**
Салауатова Ф.Р. *XX быуат башы башҡорт әҙәбиәте үҫешендә Ғарифулла Кейековтың тотҡан урыны* **200**
Сулейманова Н.Ф., Кульсарина И.Г. *Изобразительные средства в поэзии Г. Кутуевой и К. Андриановой* **202**
Сулейманов Г.Г. *Особенности менталитета азербайджанцев* **205**
Сыдыкова Т.К. *Башкыр эл акыны Рами Гарипов менен кыргыз элинин төкмө акыны барпы алыкуловдун чыгармачылык жолу* **208**
Sädiýewa A.A., Gylyjowa G.N. *Tebigy ugurly talyplara daşary ýurt dilini öwretmekde maglumat-aragatnaşyk serişdeleriniň hyzmaty* **213**
Таһирова Г.Ф., Гәрәева Г.Н. *Фәрзәнә Аҡбулатованың хикәйә һәм повестарының проблематикаһы* **217**
Таһирова Р.Н. *Хәҙерге башҡорт шиғриәтендә лексик сараларҙың ҡулланылышы* **222**
Таһирова Р.Н. *Рауил Бикбаев лирикаһының образ үҙенсәлектәре* **226**
Тимергәлиева А.Р., Гәрәева Г.Н. *Әнүәр Бикчәнтаевтың "Бөркөт һауала үлә" повесында батырлыҡ темаһы сағылышы* **230**
Уркумбаева А.Б. *Пути создания письменных текстов эпоса «Манас»* **233**
Усманова Ә.А *Мәүлит Ямалетдиндың «Ишмөхәмәт сәсән» роман-эссеһында тәҡдирҙең сағылышы* **237**
Үҙәнбаева Н.С., Салауатова Ф.Р. *Хәҙерге башҡорт прозаһында бәләкәй жанрҙар (хикәйәт, хикмәт)* **239**
Хайсарова З.Э., Салауатова Ф.Р. *Ғәли Сокорой ижадының идея-тематик йөкмәткеһе* **241**

Хасанова А.Р., Салауатова ф.Р. *М. Аҡмулла шиғриәтендә аң-белемгә өндәү мотивтары* **244**

Хисматуллина З.Р., Кульсарина И.Г. *Репрезентация концепта «башкирская культура» в прозе А.П. Филиппова* **247**

Хөснөтдинов И.К., Гәрәева Г.Н. *Әхиәр Хәким әҫәрҙәрендә һуғыш темаһы* **250**

Хәйҙәрова А.Р., Гәрәева Г.Н. *Философ-шағир әҫәрҙәрендә йәшәү асылы сағылышы* **255**

Хәмитова Л.Ю., Гәрәева Г.Н. *Булат Рафиҡов ижадында тарихи үткән һәм бөгөнгө заман бәйләнеше* **260**

Шакирова А.А., Салауатова Ф.Р. *Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев ижадының энциклопедик характеры* **264**

Шакирова А.Р., Гареева Г.Н. *Роль медиакоммуникации в журналистике* **267**

Шәйҙуллина А.М., Гәрәева Г.Н. *Зәйнәб Биишева әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе* **269**

Шәрәфетдинова Г.А., Гәрәева Г.Н. *“Ҡотаҙғу белек” әҫәрендә әҙәп-әхлаҡ, дини проблемалар сағылышы* **272**

Әбделмәнова Р.Р., Гәрәева Г.Н. *Әҙәбиәт дәрестәренә заманса ҡараш* **276**

Әбйәлилова Г.Р., Гәрәева Г.Н., *Әхиәр Хәкимов әҫәрҙәрендә һуғыш темаһы* **279**

Әлимбаева Г.Ғ. *Башҡорт телендә парлы һандарҙың структур-семантик төркөмсәләре* **283**

Юсупова Г.А., Кульсарина И.Г. *Языковые и стилистические особенности поэзии Марины Цветаевой* **286**

Яҙыҡбаева З.Р., Салауатова Ф.Р. *Урта кластарҙа башҡорт халыҡ ижадын өйрәнеү* **289**

Яҡупов Ф.Ф., Гәрәева Г.Н. *Бөйөк Ватан һуғышы осоро башҡорт шиғриәтендә жанр формалары* **292**

Янбаева И.И., Әлибаев З.А. *Башҡорт һүҙ сәнғәтендә әйтеш жанры: сығанаҡтары һәм поэтик үҙенсәлектәре* **295**

Янбаев И.К. *Т .Ғарипованың «Бөйрәкәй» романында диуаналыҡ феномены* **299**

Янгирова Т.Э., Янбаев И.К. *Роль диалогов и монологов в эссе М. Карима* **304**

Ярмөхәмәтовaa Г.Э., Гәрәева Г.Н. *Таңсулпан Ғарипованың “Канатлы бәхеткәйем” повесының художество үзенсәлектәре* **307**

Яхина М.М., Гәрәева Г.Н. *Абдулхаҡ Игебаев шиғриәтендә лирик герой концепцияһы* **310**

При подготовке электронного издания использовались следующие программные средства:
Adobe Acrobat – текстовый редактор;
Microsoft Word – текстовый редактор

Все права защищены. Книга или любая ее часть не может быть скопирована, воспроизведена в электронной или механической форме, в виде фотокопии, записи в память ЭВМ, репродукции или каким-либо иным способом, а также использована в любой информационной системе без получения разрешения от издателя. Копирование, воспроизведение и иное использование книги или ее части без согласия издателя является незаконным и влечет уголовную, административную и гражданскую ответственность.

Научное издание

АКТУАЛЬНЫЕ ПРОБЛЕМЫ НАЦИОНАЛЬНЫХ ЛИТЕРАТУР И ОТЕЧЕСТВЕННОГО ЛИТЕРАТУРОВЕДЕНИЯ

Сборник материалов Международной научно-практической конференции (г. Уфа, 2 ноября 2023 года)

Электронное издание сетевого доступа

За достоверность информации, изложенной в статьях, ответственность несут авторы.
Статьи публикуются в авторской редакции

Подписано к использованию 04.12.2023 г.
Гарнитура «Times New Roman». Объем 4,04 Мб.
Заказ 334.

ФГБОУ ВО «Уфимский университет науки и технологий»
450008, Башкортостан, г. Уфа, ул. Карла Маркса, 12.

Тел.: +7-908-35-05-007
e-mail: ric-bdu@yandex.ru